# Ағиҙел

Өфө,
апрель
2009

4 (1033)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.


АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Харис Сәғитов *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды әм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.04. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитура ы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 453 экз. атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0041.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2009 (4, 1033)

# БЫЛ АНДА:


ШИҒРИӘТ

**Факи а Туғыҙбаева.** Ҡан хәтере. Ш ә л к е м. .....................................5
**Бәхтейәр.** орағың киләлер. Ш и ғ ы р ҙ а р. ..................................18
**Мәрйәм Күсмәева.** Күперленең гәлсәр шарлауығы.
Ш и ғ ы р ҙ а р. ..........................................................................23

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ғәлим Хисамов.** А ура Мазда. Р о м а н. Башы. ..............................27
**Тәскирә Даянова.** Мөғжизәгә ышанам. Х и к ә й ә. .........................70
**Рәйсә Кәримова.** Ҡунаҡ. Х и к ә й ә. ..............................................85

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Борис Романов**. “Кемгә, ҡасан тейер был сәғәҙәт?..”
Ш и ғ ы р ҙ а р *(Гөлнур Яҡупова тәржемәләре)*. ................................88

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Рауил Өмөтбаев.** Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы
*(Рамаҙан Өмөтбаевтың тыуыуына 85 йыл)* ..................................92
**Рамаҙан Өмөтбаев.**Тәүге мөхәббәт. Х и к ә й ә. .....................99
**Әмир Әминев.** Дуҫ тура ында үҙ
*(Вил Ғүмәровтың тыуыуына 60 йыл)*. ............................................104

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибра имов.** Кинйә. Т а р и х и р о м а н. III китап.
Бүгәсәү батша анаты. Дауамы. ....................................................111

ПУБЛИЦИСТИКА

**Рәшит Кәлимуллин.** Ҡала фатиры – атай нигеҙе түгел. ................162
**Хәким Хисамов.** Улар беренселәр булды. ......................................166
**Сабир Йы аншин.** Алтын Йондоҙ ни өсөн бирелмәгән? ..............171
**Рафаэль Дәүләтшин.** Рәсәй мосолмандарының беренсе
съезы. .............................................................................................175

СӘНҒӘТ

**Таң ылыу Ғәйнулина.** Ижады яҡты, ғүмере бәхетле. ...................178

САТИРА ӘМ ЮМОР

**Марат Әминев.** Туҙан. Ултырыш. Еңгә өтө. Ураҙа. Юморес-калар.
Ир үҙе. С к е т ч. .............................................................186

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Ф.Тугузбаева** *(цикл),* **Бахтияр**, **М. Кусмаева** *(стихи)*.

ПРОЗА

**Г. Хисамов.** Ахура Мазда *(роман)*.
**Т. Даянова.** Верю в чудеса *(рассказ)*.
**Р.Каримова.** Гость *(рассказ)*.

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**Борис Романов.** "Кому, когда выпадет такое счастье?" *(стихи)*.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Р. Уметбаев.** Представительный сын народа *(85 лет со дня рождения Рамазана Уметбаева)*.
**Р. Уметбаев.** Первая любовь *(рассказ)*.
**А. Аминев.** Слово о друге *(60 лет со дня рождения Виля Гумерова)*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г. Ибрагимов.** Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга). Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Калимуллин.** Еще раз о жилищных вопросах.
**Х. Хисамов.** Они были первопроходцами.
**С. Зиганшин.** Почему не выдана "Золотая Звезда"?
**Р. Давлетшин**. Первый съезд российских мусульман.

ИСКУССТВО

**Т. Гайнуллина.** Счастливая творческая судьба.

САТИРА И ЮМОР

**М. Аминев.** Пыль. Заседание. Деревенское молоко. Пост (*юморески);* Крепкое слово мужчины *(скетч)*.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтер — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡульяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Факи а
ТУҒЫҘБАЕВА**

# ҠАН ХӘТЕРЕ

ШӘЛКЕМ

*Инеш  үҙ, йәғни минең уйланыуҙарым*

*Ер шары ул шундай бәләкәй бит –
Ҡуш усына  ыя Кешенең.
Ҡуш усына уның  ыйған өсөн –
Нәзбереклеген мин төшөндөм;
Ер шары ул шундай бәләкәй бит –
Йөрәгенә  ыя Кешенең.
Йөрәгенә уның  ыйған өсөн
Мәңгелеклеген дә төшөндөм.
Ул мәңгелек:
Әсә ҡарынында
Ер хәтере күсә балаға.
Ер хәтере күскән өсөн уға,
Быуындарға быуын ялғана.
Сабый илай, сабый йылмая ла –
Аҡыл булып тыуа донъяға.
Шулай ғына дауам итә күр ен:
Быуындарға быуын ялғана!
Шуға ла мин әйтәм ышаныслы:
 әр кешелә – көсө Раббының.
Изге теләк менән  үҙ башлайым:
Түлле бул ын, затым, ҡарының!*

---

*Факи а Туғыҙбаева – күренекле башҡорт шағирә е, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты, “Аҡбуҙат” журналының баш мөхәррире.*

*Ҡартатайымдың 1934 йылда ҡулға алынғаны.*
*Уның төрмәлә уйланғаны.*

## I. Прометей ул түгел…

*Прометей ул түгел…*
*Улмы инде*
*Олимп тауҙарынан Ут төшөргән?!*
*Ҡараңғылыҡ ҡаплай ерҙең йөҙөн,*
*Кире енсә,*
*Утты ул йәшергән.*

*Гел нахаҡҡа, мин-минлектән генә*
*Ҡан илата күпме-күпмеләрҙе?!*
*Кешеләр бит ҡатып тотоп тора*
*Көндө төнгә илткән күперҙәрҙе.*
*Уның дан-шө рәтен тотоп тора*
*Ҡолдар ынын алған ялағайҙар.*
*Оҙонайтмаҡ булып,*
*Бер кемгә лә*
*Кеше ғүмерҙәрен ялғамайҙар.*

*Хәлдән тайыр бер көн:*
*Кешеләрҙең*
*Күҙ йәштәре төшөр ғүмеренә.*
*Ә йән – ялҡын унда юҡтыр ҙа ул,*
*Йөҙө – өрөм, үҙе – күмер генә.*

*Прометей ул түгел…*
*Янасаҡ ул*
*Дөрләп-дөрләп бары тамуғында.*
*Хоҙайға ул ялбара ла алмаç,*
*Кеше өйәктәре – тамағында.*

*«Ул» тигәнең кем уң?» – орай Выждан,*
*Бармаҡ төртөп әйтәм:«ҡыҙыл» батша…*
*Уйлап-уйлап сыҡтым уй осона:*
*Иң ҡан ыҙы кем уң унан башҡа?!*

## II. Фемида

*О Фемида!*
*Тотҡан Үлсәүеңдең*
*Бер яғында – Ер бит, Күк – бер(е) ендә.*
*Айырым-айырым йәшәй алмай улар,*
*Ер ила а үк еп, Күк көр өнә.*

*Сайҡалдыра ғәҙел Үлсәүеңде,*
*Цунамиҙай ташып, Кеше көсө.*
*Бер ҡара аң, Кеше Ергә ыймай,*
*Бер ҡара аң, Кеше күктә төçлө.*

*О Хакимә!*
*Хөкөм али ә е!*
*Юҡкамы ни ҡатын затынан ин?*
*Исемдәрең оло булғанда ла,*
*Оло түгел Кеше хаҡынан ин.*

*Тик күҙҙәрең мәңге бәйле ниңә?*
*Асылмаçлыҡ итеп ҡаплағандар.*
*Тамсы күҙ йәшеңде күр әтмәçкә*
*Башҡа сара әллә тапмағандар?!*

*Ҡан ыҙлыҡты күреп үк егәндә,*
*Таралыр ҙа аҡыл-зи ендәрең,*
*Ҡатилдарға, иблистәргә, бәлки,*
*Ғәҙел булмаç ине хөкөмдәрең?!*

*Ҡарашыңды барыбер күрге килә,*
*үҙем әйткем килә тура ҡарап:*
*Намыçлылар бик йыш була харап,*
*Хөкөмсө ө унын сөнки ҡараҡ.*

*Мөлкәт кенә түгел, йән талаусы,*
*Талантлыға йәтмә алған аусы,*
*Илгә-көлгә таратыусы ялған*
*Ни арала яран булып алған?*

*О Фемида!*
*Ишет әңсе мине,*
*Ҡатил атасаҡ бит –*
*Хөкөм сыҡкан.*
*Күҙең асып ҡына ҡара аңсы:*
*Сабый бала кеүек, ил талсыҡкан!*

*О Фемида!*
*Шулдыр уңғы үҙем:*
*Балаларым – күҙем ҡаралары.*
*Мин үт әм дә,*
*Улар инең менән*
*Яҡынайтыр минең араларҙы.*

## *III. Атайымдың уйланғаны*

*Тыуған илгә рәнйеп буламы ни,*
*Мин белмәйем ундай башҡортто?!*
*Ҡурғанда ла уны ҡырғынсылар,*
*Башҡорт аҡлай аман баш йортто.*

*Баш эйеү ҙә түгел был батшаға,*
*Тоғролоҡ был Оло Ватанға.*
*Тоғролоҡ был, ватандашым, тиеп*
*Ҡымыҙ эсеп биргән анттарға.*

*Тыуған илде ҡарғап буламы ни,*
*Ниңә аттырҙың, тип, атамды,*
*Ҡәбере лә юҡ бит,*
*Гүйә, бер кем*
*Күрмәгән дә уны атҡанды?*

*Тыуған илгә кем уң үпкәлә ен,*
*Туған булды дошман туғанға?*
*Юҡ, ысынлап ҡаныҡҡанға түгел,*
*Юғарынан батша ҡушҡанға.*

*Атайымдың йәне йәннәттәлер;*
*Доғаларым уҡып эсемдән,*
*Йәне барыбер тыныс түгелдер, тип*
*Уны илап иҫкә төшөрәм.*

*Ғәзиз генә йәндәштәрем минең –*
*«Халыҡ дошманы»ның улдары*
*Фатих, Хәниф, Исламморат энем,*
*Ҡайҙа илтте яҙмыш юлдары?*

*Оябыҙҙы ҡоҙғон тараҡҡастын,*
*Эҙегеҙҙе еҙҙең юғалттым.*
*ыбай ғына эҙләп китер инем,*
*Хаҡым да юҡ минең, юҡ атым.*

*«Урап сығыр инем донъяларҙы,*
*Энә түгел – еҙ бит ир-егет,*
*Табыр инем, әгәр хаҡым бул а»,–*
*Уйҙарымдан китәм өрлөгөп.*

*Тыуған илгә рәнйеп буламы ни,*
*Имен бул ын, тиеп, илкәйем,*
*Ҡара таңдан эшкә тотонғанда*
*Ихласланып теләк теләйем.*

## IV. Атайымдың уғышҡа киткәне

*Яуға китте ыу өлөгө кеүек*
*Ир-егеттәр көн дә ылау-ылау.*
*Оҙаттылар сабыр ҡатын-ҡыҙҙар,*
*Ҡайҙа инде сәсте йолҡоп илау?!*

*Оҙаттылар, алып янсыҡ тупраҡ,*
*Өй түрендә икмәк тешләттеләр –*
*Көтөр ризыҡ иҫән ҡайтыуҙарын,*
*Рух көстәрен шулай көсәйттеләр.*

*Сират етте миңә. Изге сәғәт!*
*Илле йәш ни – нишләп ҡарт бул ын, ти?*
*Минең елле «полуторкам»а ла*
*Юлдар нишләп әле тар бул ын, ти?*

*Тейәлеште ҡарттар, йәш үҫмерҙәр*
*Шығырым тулып – көслө «полуторкам»!*
*Рулдә – ҡулым,*
*Юлым – Сталинградҡа,*
*Мин дә тешләп изге икмәк ҡабам.*

## V. Генерал-фельдмаршал Паулюстың әсирлеккә төшкәне

*Эй Раббым!*
*Яуа ла яуа ҡарың!*
*аҙый, йәғни минең атайым,*
*Ҡәбер ҡаҙый.*
*Буран ҡотора,*
*Ҡәбер соҡорон*
*Аҡ ҡар менән тултыра.*
*Кәфен бул ын тиме икән Хоҙай*
*Шә ит киткән яугирға ошо ҡар.*
*аҙыйҙың бетеү итеп йөрөткән*
*Сүрә е бар:*
*Ясинды уҡып, яуҙаш, ҡандаш,*
*Икмәктәш, араҡылаш, ыуҙаш, ауалаш дуҫын*
*Күмә е бар.*
*Эй Раббым!*
*Яуа ла яуа ҡарың;*
*(Атайымдың кисерешен, уйын*
*Тиҫтә йылдар аша тоя йәнем,*
*Ҡан хәтере асҡан күңел күҙкәйемде:*
*Әүлиә мин!)*
*Нисек баҫырға ап-аҡ ҡарҙарға,*
*Асыл а, ҡояшҡа нисек ҡарарға,*
*Таҙа ыуҙы нисек эсергә –*
*Тамуҡтан тормошҡа нисек күсергә?*
*Эй Раббым!*
*Фашисын, советын*
*уғыш тирмәне*
*Онтаны иткә, өйәккә, башҡа, аяҡҡа –*
*ибелгән улар тирә-яҡҡа.*
*Эй Раббым!*
*Ҡаплай алмай ҡарың-бурандарың*
*Сталинградтың хараба урамдарын.*
*Мәйет еҫе, ҡан еҫе –*
*Бомбанан көслө.*
*Донъялыҡҡа ҡайтам ти әң,*
*Тамуҡҡа ташлай кире*
*Ирмен тигән ирҙе.*
*Эй Раббым!*
*уғыш тирмәне, гүйә, инән оло ине –*
*Ерҙе әйләндерҙе көлгә,*
*Ҡояшты әйләндерҙе күмергә,*

*Йәнде әйләндерҙе тимергә…*
*Быңдай әҙәм кәрәкме иңә, Раббым!*
*Яуа ла яуа ҡарың…*
*Ҡарың ғына мине таҙарта алмаç,*
*Була алмаç рухым алмас –*
*Кәүсәр шишмәләрең ҡайҙа, Раббым!*
*Йыуайымсы эсем, тышымды мин,*
*Йыуайымсы өнөм, төшөмдө мин.*
*Бирсе көс яңынан йәшәй башларға,*
*Ҡарай алмайым мин аштарға,*
*Уларҙан ҡан еçе килә ымаҡ,*
*Күҙем тонған, тонған ҡолаҡ.*
*Эй Раббым!*
*Яуа ла яуа ҡарың,*
*«За Родину! За Сталина!» – оран ине,*
*Сталинград ҡыҙыл байраҡты*
*Харабалар өçтөнә элде.*
*«Совет алдаты еңде! – тине Левитан –*
*Ур-ра! Дан!»*
*Тубыҡланған ерҙән ҡалҡынды Ватан –*
*Фашист*
*Европаға боролдо кире,*
*Ҡан океанына батырып еремде.*
*Ана, әсир алдаттар атлай,*
*Ҡай ыны ы улдыр, ҡай ыны ы – атай.*
*Ҡайҙа ари ғорурлығы –*
*Ер шарына торорлоғо?*
*Әсир башына урыç ҡатынының бәйләгән шәлен,*
*Аяғын ураған шинель киçәгенә –*
*Ялан аяҡ карҙы кисә генә,*
*Ҡайтып етә алмаç әсә енә!*
*Ул да – Кеше! Йәл,*
*Йәнен йылыта алмаç шәл…*
*Әсир алдат, ти әм, был бит Паулюс,*
*Генерал-фельдмаршал ғәли йәнәптәре.*
*Ҡулдарын, әллә күктән, әллә урыçтан*
*Мәрхәмәт орап, юғары күтәргән.*
*Эй, таҙа ари ҡанлы Паулюс!*
*еҙҙең ғазраиллыктан*
*Ер шары түңкәрелгән.*
*Паулюс,*
*Уртаҡлашам, уңғы икмәк телемемде –*
*Илем еңде!*
*Спирт алып бирәм көрөшкәгә –*
*Минең үсемде ин, әйҙә, тәмлә!*
*Айныр ың ин шул саҡ*
*«Ари кешелектән өçтөн!» тигән уйҙан.*
*иңә Кеше – крематорий көлө,*
*иңә Кеше – бары туҙан,*
*Әсәнән ин тыуғанмы ни,*
*Идеянан тыуған ың ин,*

*Көнбайышҡа, көнсығышҡа,*
*Көньяҡҡа әм төньяҡҡа ла –*
*Ҡапкан итеп*
*Әүернәләр ҡуйғайның ин.*
*Әсир фашист,*
*Ғәли йәнәп, эй генерал-фельдмаршал!*
*Сылғауыңды сабата итеп кейеп,*
*Винтовкаңды мосафир таяғы итеп,*
*Башыңа шәл бәйләп,*
*Үҙең бронетанк менән килгән юлдан йәйәү атла!*
*Ҡәберлектәр, ҡәберлектәр, ҡәберлектәр,*
*Мәйет күреп ҡоторған бар йәнлектәр*
*Юлдарыңда маяҡ булыр,*
*Көтә ине аллаң – фюрер!*
*Эй, Раббым!*
*Яуа ла яуа ҡарың...*
*алайымсы дуҫҡайымды*
*Ҡәҙер итеп ҡәберенә;*
*Ҡалды инде яуҙашымдан*
*«Батыр» тигән хәбәр генә.*
*Сығайым ясин:*
*«Бисми-ллә и-ррәхмани-ррәхим!*
*1. Я-син.*
*2. Хикмәтле Ҡөрьән менән ант итәм!*
*3. ин, әлбиттә, рәсүлдәрҙең бере е.*
*4. Тура юлда...»*

## VI. Көмөш тәңкә

*Әсәйемдең төҫө итеп тотам:*
*Сәсүргестән ҡалған көмөш тәңкә*
*Ике бөртөк кенә – андығында,*
*Ҡашмауҙарын биргән хөкүмәткә.*

*Еләненән өҙөп тәңкәләрен*
*Оҙатҡан ул илем байы ын тип,*
*Ҡыҙыл байраҡтағы ураҡ-сүкеш*
*Алтын менән генә ҡайыл ын тип.*

*Ылау-ылау итеп оҙатҡандар*
*Ҡатын-ҡыҙҙың көмөш-алтындарын*
*Әллә колхоз, әллә ГУЛАГ өсөн –*
*Бик йыш асҡан әсәм андыҡтарын.*

*Идея ла тигән исем ҡушҡан*
*Яңы тормош ҡороу шатлығынан*
*Беҙҙең күрше апай сабыйына,*
*Ҡолаҡ ҡаҡҡан әммә алтынынан.*

*Афәт ябырылғас ил өҫтөнә,*
*Әсәй барлай тағы андыҡтарын,*

*Танк төҙөргә тип бүләк итә*
*Хазина ының бар ҡалдыҡтарын.*

*Сәсүргестә ҡала ике бөртөк*
*Көмөш тәңкә –*
*Сыңлай үргән саҡта.*
*Күкрәк көсө – Бөйөк Еңеү өсөн,*
*Ҡаҡлан аң да үҙең кибеп асҡа.*

*Яу яланы – баҫыу ҡырында ла,*
*Патрон кеүек ҡиммәт бөртөк бойҙай.*
*Тракторға егелгән дә әсәй*
*Бураҙналар яра – оҙон уйҙай.*

*Оҙон уйҙай оҙон саңлы юлдан*
*Еңеү ҡайта,*
*Бөйөк Еңеү ҡайта*
*Европала салют ибелгәндә,*
*Ауылымда сирень сәскә ата.*

*Атайымды, эй, атлығып көтә*
*Әсәкәйем,*
*Үреп көмөш тәңкә.*
*Ҡашмауҙарҙан ҡалған ике көмөш–*
*Өмөт, мая тыныс киләсәккә.*

*Сәсе көмөшләнгәс,*
*Үреп ҡуйҙы*
*Әсәкәйем уны минең сәскә.*
*«Бүләк итер хазинам юҡ, балам,*
*Ҡалғандары,–тине,– хөкүмәттә».*

*Әсәй, тимен, әсәй!*
*Үттең күптән…*
*Хөкүмәт тә*
*Күпме алышынды?!*
*Алтын өҫтәренә ҡоролған ил,*
*Елгә оса тора тик алтыны.*

*(Уйлағым да килмәй был хаҡта мин,*
*Күпме аттыҡ инде сафсаталар?)*
*Беҙгә – Еңеүсегә*
*«Сэкэнд хэнд»та*
*Европанан сепрәк тарараталар.*
*Йәғни байҙар иҫке-моҫҡоларын*
*Беҙгә оҙаталар, бахырҙар, тип.*
*Мин дә алып йыуып кейҙем бере ен,*
*Кеҫәләрҙә ялтыр баҡырҙар бит.*

*Ярай, әсәй,*
*Әруахыңа инең*
*Доға ҡылып,*
*Уҡып рәхмәттәрем,*
*Бүләк итәм ике көмөш тәңкәң*
*Бүләңә бит –*
*Күр ен рәхәттәрен!*
*инең төҫөң әм фатихаң булып*
*Бәлә-ҡазаларҙан аяп торор,*
*Боронғонан ҡалған саф та, ныҡлы ла ул,*
*Йәшәү – хазина бит,*
*Мая булыр.*

## Сафо

*1*

*Мин барыбер ергә килер инем*
*Ҡаялағы ҡурай ағышынан,*
*Ерҙе әсәй кеүек имеҙеүсе*
*Даръяларҙың талғын ағышынан;*

*Мин барыбер тыуыр инем бит ул*
*Битләүҙәрҙә еләк бешкәненән,*
*Шул еләкте мин дә йыяйым тип*
*Ҡояштың да ергә төшкәненән;*

*Тыумай ҡалмаҫ инем,*
*Тыуыр инем*
*Иген баҫыуының балҡышынан,*
*Көтөү йылҡыларҙың, мине эҙләп,*
*Далаларҙы иңләп сабышынан;*

*«Беҙ ҡайтҡансы тыуыр, бәлки,– тиеп*
*Хушлашҡандыр, өҙөлөп, ҡыр ҡаҙҙары,–*
*Тәпәй уға алып ҡайтырбыҙ,– тип,–*
*Ҡыҙ бала ул,–тиеп,– ер наҙҙары».*

*Алтын йүргәк сиккән саҡта көҙҙәр,*
*Мең биҙәктәр алып ерлегенә*
*Тыумаҫ ерҙән барыбер тыуыр инем,*
*айлап ошо башҡорт ерен генә.*

*Мейестән генә сыҡҡан табаларҙан*
*Йылы икмәк төшкәс өҫтәлдәргә,*
*Кендек инәй ҡабул итер ине –*
*Яңы бәхет әм ҡот өҫтәлгәнгә.*

*Ишектәргә үрелеп ҡарағанда*
*Бер кемдән дә ҡурҡмай өркәк болан,*
*«Тыу а ярар ине,– тиеп уйлағандыр*

Әсәкәйем, –
Болан кеүек балам!»

Өйөр-өйөр бүре, иркен улап,
Ҡарҙың аҡлығына өйөнгәндә,
Тыуыр инем аҡлыҡ күрер өсөн
Аҡҡош булып буран бейегәндә.

Өн өҙ генә симфония булып
Ҡарҙай офоҡтарҙа таң атҡанда,
«Рәхмәт төшкөр!»–тиер ине донъя
Тыуғанда яр алып уятҡанға.

ары умырзая, ҡарҙы тишеп,
Ҡояш төҫөн ергә ҡайтарғанда,
Тыумай ҡалмаҫ инем,
Сәрмәсәнем
Яр ып-ташып боҙон аҡтарғандай.

Нисек инде тыумай ҡала ың, ти,
Орлоҡ ибелгәндә бураҙнаға,
Бер көн генә тигән абантуйҙар
уҙылғанда тағы бер аҙнаға?!

Мин барыбер ергә килер инем
Былбыл сәсәгәндә айрауынан.
Мин тыуырға тейеш инем бит ул,
әр берәүҙәй, йәшәү байрамынан.

II

Нисәнселер инде был анализ?
Ҡанға анализ, тим?
Нисә икән?
Бары шуны ын ғына беләм хәҙер:
Ҡан хәтере йән хәтере булып
Балаларыма ла күсә икән.

Тамырымдан тама пробиркаға
Тама-тама тамсы ҡыҙыл ҡаным;
Ҡаным минең – биографиям ул,
Хиссиәтем, өйөү, нәфрәт, аңым.

Ҡан хәтере шундай тәрән икән
Минең хәтеремә ҡарағанда,
Милләтемде ул йәшәртеп тора,
«Тыуҙым!»–тиеп сабый яр алғанда…
Тамырҙағы ҡаным йөрәк аша
Үтеп өйләй ғүмер тарихымды,

*Эс серҙәре минең бәғеремә
Ваҡыт аҡҡан кеүек тамды, тамды:
– Яҙға төрөп Еңеү алып ҡайтты
Яугир атайың бит ин тыумаҡҡа.
Илде туйҙырыусы әсәйеңдең
Күҙ йәштәре тамды гел аулаҡта
ыҙланыуҙан, йөктәр тартып аттай,
Ә йөҙҙәре яҡты, көләс ине;
Еңеү байрамында өҫтәлдәрҙә
Бәрәңге лә ҡатыҡ, күмәс ине!
ин яралдың яугир ике яҙмыш
Мөхәббәттән генә ҡауышҡандан.
Әсәң ҡарынында ауыр инең –
Ер шары ла булды ауышҡандай.
Йәнең яралды бит тертләп-тетрәп –
Ҡартатаңды атҡан тауыштарҙан,
уңғы тапҡыр катилына баҡкас,
Күкрәгенә тулған ҡарғыштарҙан;
Йәнең яралды бит
Өйөгөҙҙөң
Хәсрәттәрҙәй ҡара ыуығынан,
Рәхәт кисерҙеңме
Тыумаҫ элек
Ҡан тамсы ы килеш сынығыуҙан?*

*Атайыңдың Сталинград та тигән
Тамуҡтары тағы иңә күсте.
Күсмәҫ ине лә ул, күсмәҫ ине,
ин булма аң әгәр шундай көслө.*

*Онoторлоҡмо ни әсәйеңдең
абандарға егелеп ер өргәнен?
ағышлыраҡ бул аң, кисер ендәр,
ин күргән ең–тотош ил күргәнде,–*

*Тамырҙағы ҡаным йөрәк аша
Үтеп өйләй ғүмер тарихымды,
Эс серҙәре минең бәғеремә
Ваҡыт аҡҡан кеүек тамды, тамды. –*

*Шағир иткән мин ул – ҡан хәтере,
Минең ҡайтауазым – әҫәрҙәрең,
Шуның өсөн үҙгә көсө етмәй
Хатта иң заманса ғәскәрҙәрҙең.*

*Күккә оса, ерҙә тибрәнә моң –
Тәбиғәтең өйләй дөрөҫлөктө!
(Шағир булып булмай,*

Ятла аң да
Бер  үҙлекте түгел, йөҙ  үҙлекте.)

Сафо ы  ин Ҡаңны илкәйенең,
Йөрәге ул шағир үҙ халҡының,
Намыҫы ул шағир үҙ халҡының –
Ул ғына бит таба  үҙ алтынын!

Шағир иттем  ине данла ын тип
әр бер таңды – йәшәү тантана ын.
инең йырҙан кеше ҙур бул ын да
инең  үҙҙән кеше ҡанатлан ын!

## Асия

Түр башына бишек элеп ҡуйҙыҡ,
Ҡояш менән тулды өй эсе:
Үҙ бәхете менән тыуа бала,
Ҡояш төҫлө, тулған ай төҫлө.

Үҙ бәхете менән тыуа бала –
Йәшәй-йәшәй быны  ынаным.
Исем эҙләйбеҙ беҙ ҡыҙыбыҙға,
Иркәлә ен йәнен, ҡолағын.

Үҙ исеме алдан йөрөр, тиеп,
Есеменә күрә – исеме,
Ҡан хәтере иң-иң затлыларын
Берәм-берәм иҫкә төшөрҙө.

Ейәнсәрем – йәндәй эйәрсенем,
Бүләсәре шә ит ҡарттамдың,
Исеме лә – нәҫел йөҙө, тиеп
Быуат ҡатламдарын аҡтарҙым.

Хәтер әйтте миңә:«Асия!» – тип,
Ҡабатланым ғына әйткәнен.
Бәпес йылмайҙы бит ишеткәс тә,
Әйттем мәллә уның көткәнен?

«Асия!» – тип  өйҙө атаҡайы,
«Асия!» – тип уны имеҙҙе,
Беләгенә  алып, әсәкәйе,
Йәнебеҙҙә – шатлыҡ диңгеҙе!

«Асияҡай!» тигән йырыбыҙҙы
Елдәр алып осто алыҫҡа.
Тау-урмандар ҡосаҡтарын асты
Бала илаған да тауышҡа.

*Яр алыукайҙары – үҙе шатлыҡ,*
*Йәшәргәме шулай ашыға?*
*Ҡысҡырыптар бәпес илауынан*
*Күк ҡабағы беҙгә асыла:*
*Барып етәлер ҙә тауыштары*
*Күктең етенсе лә ҡатына,*
*Ерҙән бүләктер ул әруахҡа ла –*
*Бөйөктәрҙән-бөйөк ҡатынға –*
*Асияға, тимен,*
*Кешелеккә*
*Прометейҙы биргән Әсәгә!*
*Эй Асиям, бәпес!*
*Насип бул ын*
*иңә аҙашыңдай йәшәргә!*

*Теләк тирәм, еләк тирган кеүек,*
*Оҙата йөрөр теләк-кәңәшем,*
*Ҡабатлайым, балам:*
*Асия ул –*
*Прометейҙың ғәзиз әсә е!*

*ин, ҡыҙ балам, наҙлым,*
*Яҙ ын иңә*
*Атаң-әсәң менән гел бергә*
*инең бәпесеңде бәүетергә,*
*Бишеккәйен элеп гел түргә.*

*Прометеймы, Урал батырмы ул –*
*Ерҙәш улар, туған барыбер!*
*Уланыңды инең күктәр таныр,*
*Уланыңды инең таныр ер!*
*Яңыра бит улар, бәпес тыу а –*
*Йәшәү мәңге, йәшәү үлем еҙ!*
*Ерҙең генә түгел,*
*Йы андың да*
*Күҙен терәп торған түле – беҙ.*

*Ҡабатлайым, балам:*
*Исемең ҙур –*
*Был Хоҙайҙың иңә ҡушҡаны.*
*Орбитанан Ерҙең*
*Боронғоно*
*Яңысараҡ я ап осканы.*



# БӘХТЕЙӘР

## орағың киләләр

Исемең кем әле, ағас?
Япраҡтарың тирбәлә.
Ямғырҙарҙа сылана ың,
Сайҡала ың елдәрҙә.

Ҡыуана ың йылы көнгә,
 ыуыҡ көндә туңа ың.
Йә илаған ымаҡ ың ин,
Йә көлгәндәй була ың…

Ямғырҙарҙа мин сыланам,
Мин сайҡалам елдәрҙә,
Аңлашыла торғандыр бит
Минең хәлем иңә лә.

Шул ваҡытта үҙ хәлеңде
Онотоп, бәлки, инең
 орағың киләләр минән,
Кем әле, тип, исемең?

## Йүкәлектә

Күләгәле төпкөлөңдә
Аҙашайым, йүкәлек!
Бүтән урмандарға инеп
Аҙашҡаным юҡ әле.

Бәхтейәр (Бәхтейәр Хәлитов) Күгәрсен районының Беренсе Дәүләтҡол (Етеболаҡ) ауылында тыуған. БДУ доценты. Яҙыусылар союзы ағза ы.

*Аңҡып торған бал еҫенә*
*Иҫерәйем, йүкәлек!*
*Бүтән иҫерткестәренә*
*Иҫем киткән юҡ әле.*

*Юғалдым, онотолдом, тип*
*Йәш ығайым, йүкәлек !*
*Күҙ йәштәрен бүтән ерҙә*
*Күр әткәнем юҡ әле…*

*Юғал ам да, табылырмын –*
*Мин донъяла бит әле.*
*Тик бер аҙға онотол ам,*
*Уят мине, йүкәлек!*

## Икеләнеү

*Ятыуҙа күк сағылғанда*
*Хистәр икеле:*
*Ярҙан күккә осҡо килә,*
*ыуға икереп.*

*Йәнемдең бар теләгәне,*
*Бәлки, шундалыр:*
*Бул ам икән йә аҫыл ҡош,*
*Йә аҫыл балыҡ!..*

*Ярҙа торам икеләнеп,*
*Белмәй нишләргә:*
*Балыҡтармы бәхетлерәк,*
*Ҡоштармы әллә?*

***

*Тертләп ҡуям:*
*Нимә булыр ине,*
*Дауамында дуэль-алыштың*
*Иң юғары Аҡыл ярҙам итеп,*
*Пушкин ҡыйған бул а Дантесты?..*

*Йөрәгемде Шағир фажиғә е*
*Бала саҡтан торҙо өҙгөләп.*
*Йәш тамыҙып, күпме шыбырланым:*
*"Их, ат асы уға төҙәрәк!.."*

*Хәҙер беләм:*
*Бөйөк Аҡыл уны*
*Яҙлыҡтырған якты дан өсөн:*
*Ул Пушкин уҡ булмаҫ ине беҙгә,*
*Ҡыйған бул а йәнен Дантестың.*

## ин дә

*Емелдәшкән есемдәрҙән*
*Төнгө күк тығыҙ.*
*Ерҙе юлдан яҙҙырмаҡсы*
*Ҡойроҡло йондоҙ.*

*Бер генәм, ти,*
*ин генә, ти,*
*Миңә яҡын ың.*
*Ҡосағыңа мине ал, ти,*
*Йомром, алтыным!..*

*Ышанма, Ер!*
*Мәңгелектә*
*Тик бер тапҡырҙыр –*
*Дыуамаллы ғаләмдәрҙә*
*Аңдың балҡыуы.*

*Туҙан инең –*
*Туҙан булып*
*Ҡалыр ың йәнә.*
*Мәңге форсат булмаясаҡ*
*Ҡабаттан йәнгә…*

*Яҡынлаша, ҡойроҡ болғап,*
*Хәйләкәр йондоҙ.*
*инең ҡосағың йылы шул,*
*Ә уныҡы – боҙ.*

*Юҡ!*
*Был инде – уңғы тапҡыр*
*Балҡыуы аңдың.*
*ин дә…*
*Еңел алданыусы*
*Ҡатын ымаҡ ың.*

## Етегәндән атылырмын

*Ете ҡатлы булып балкып*
*Яҡтырған йәйғор ымаҡ,*
*Хәтеремдә аҡлана ың,*
*Ауылым – Етеболаҡ*.*

*Ете шишмәң буйҙарында*
*Ете йыл да торманым.*
*Тик етмеш йыл иҫәбенә*
*Алмашмам улар анын.*

*Илт ә лә яҙмыш бик иртә*
*Мине бүтән яктарға,*
*индә күргән төштәрем дә*
*Өндәремдән яҡтыраҡ.*

*Белмәйем: үткән сағымда*
*Ситтә тормош юлдарын*
*Табыштарым күп булдымы,*
*Әллә юғалтыуҙарым?*

---

**Тыуған ауылым (рәсми исеме Беренсе Дәүләтҡол).*

*Беләм:*
*Бер саҡ күккә ҡәҙәр*
*Сөй ә лә мине далан,*
*Етегәндән атылырмын,*
*Ауылым,  иңә табан.*

## Ҡыҙғанам

*Киң далаға*
*ыя алмай*
*Эстә  ағыш тула а,*
*Бәрер инем йөрәгемде –*
*Йөрәкле бул ын дала!*

*Елгә,*
*Үткән ғүмеремдең*
*Өҙ ә вағы үҙәкте,*
*Бәрер инем йөрәгемде,*
*Бул ын, тип, ел йөрәкле!*

*Ҡояшҡа,*
*Ҡарай алмаҫтай*
*Күҙҙәргә төйөл ә йәш,*
*Бәрер инем йөрәгемде –*
*Йөрәкле бул ын Ҡояш!*

*Тик ҡыҙғанам… Йөрәгемде*
*Бәрмәйсә түҙәм  аман:*
*Ҡояшты ла, даланы ла,*
*Елде лә мин ҡыҙғанам.*

## Ысыҡ

*Таң алдынан тоноҡ нурлай*
*Ҡырҙарҙы Ай-ҡыйырсыҡ.*
*Үләндәрҙе кисеп киләм –*
*Күңелем тулы ысыҡ.*

*Кипмәҫ унның тамсылары,*
*Бул а ла  ауа еләҫ.*
*Яҙмыш күпме  елкет ә лә,*
*Ергә улар түгелмәҫ.*

*Ысыҡлы, хиссән үләндәй*
*Тирбәлермен  уңынан.*
*Бөгөлөрмөн, тик күңелем*
*Ҡороғандай  улымам…*

*Ҡырҙарҙа Ай-ҡыйырсыҡ та*
*Эйелеп тамсы сүпләй –*
*Айҙа ысыҡ төшмәйҙер шул,*
*Унда бит үлән үҫмәй.*

## Шул ғына

*ин – балаҫ шикелле, үлән,*
*Ҡояшҡа ин шундай шат!*
*Ә эргәңдә мин – тротуар,*
*Күңелем минең асфальт.*

*Сигелгән сағыу биҙәктәй*
*Ҡайыған ине сәскә.*
*Бер яҙыу иҫкәртеп тора:*
*“Газондан йөрөмәҫкә!”*

*Ә миндә – тик суҡырмаҡтар*
*Сүп тә саң менән бергә.*
*әм бөтөнләй бүтән яҙыу:*
*“Тротуарҙан йөрөргә!”*

*Йомшаралыр, тимә, ылыу,*
*Иғтибар итмә быға.*
*ис зарар юҡ:*
*Мин – тротуар,*
*Көн ҡыҙҙыра – шул ғына.*

## Ҡөҙрәт

*Ала ҡарға осоп үтте*
*Ҡышҡы аҡ таңда.*
*Йән ингәндәй булды шул саҡ*
*Тып-тын аҡланға.*

*Ҡош шыршының ылыҫына*
*Ҡунды талпынып.*
*Терелгәндәй, ҡар борҡоно,*
*Гүйә, аҡ болот…*

*Тәүге йәнде өргән бул а*
*Ҡөҙрәтле Алла,*
*Иң ҡөҙрәтле бында ҡарға –*
*Алланан ҡала.*

## Хәйер

Тәүҙә үҙ булған.
«**Тәүрат**»**тан**

*Кәсеп түгел был эш:*
*Бер теләнсе*
*Усын онған, орап тин генә.*
*“Мохтаждарға хәйер бир” тиелгән*
*Изге Китаптарҙың битендә.*

*Шиғыр яҙыу ҙа бит кәсеп түгел…*
*Хәйер бирсе Үҙең, йә Хоҙай:*
*Бер генә үҙ миңә,*
*Бер генә үҙ –*
*Ғәҙел донъя хасил булырҙай.*



**Мәрйәм**
**КҮСМӘЕВА**

# КҮПЕРЛЕНЕҢ ГӘЛСӘР ШАРЛАУЫҒЫ

*Күперле — Мәләүез районында Нөгөш йылға ы үрендәге ҡаялар ара ында урынлашҡан таш күпер әм шарлауыҡ. Был бик матур тәбиғәт мөғжизә ен күреү өсөн ҡатмарлы, ауыр юлдар үтергә кәрәк. Күптән хыял иткән урынды мин 2008 йылдың 14 авгусында күрҙем әм хистәремде шиғыр юлдарына алдым.*

I

*Армыт-армыт урман, тауҙар үтеп,*
*Килеп еттем иңә.*
*игеҙенсе мөғжизәме ерҙә –*
*Бармы икән тиңе?*

*Тәүтормошта йәшәгәндә кеше,*
*Ҙур мәмерйә булып –*
*Ышыҡланыр урын халайыҡҡа*
*Ел торғанда олоп.*

*Ша иты ин күпме дәүерҙәрҙең,*
*Таштар телен бел әм,*
*Эй, серләшер инек, усаҡ яғып,*
*Яндарыңа кил әм.*

*Тик хыялда булды нисә йылдар*
*ине күрер мәлем.*
*өйөүемә тоғро йәндәр шулай*
*Табалыр әмәлен.*

*Мең ғазаптар менән мин дә бер саҡ*
*Килеп еттем иңә.*
*Тәбиғәттең гүзәл мөғжизә е,*
*Бармы икән тиңе?!*

*Мәрйәм Күсмәева Мәләүез районының Әбет ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Өс китап авторы. Мәләүез ҡала ында йәшәй.*

II

Ниңә таштар менән тиңләйҙәр  уң
Бәгерҙәре ҡаты кешене?
Был ҡаялар шундай яғымлылар –
Ҡырыҫ күңелләләр ишеме?

 өйгәнемдең тан ыҡ тәнеме ни –
Ҡаяларҙың йылы ҡуйыны.
Бик  аҡ ҡына үтәм тар  уҡмаҡтан
Таш диуарға нығыраҡ  ыйынып.

Аҫта – упҡын, яҙа баҫып ҡара –
Йотор ҡараңғылыҡ донъя ы.
Шулай инде – был тар күпер кеүек
Йәшәү менән әжәл ара ы.

Тик был хозурлыкта,  ғәжәп кеүек,
Барлыҡ ауыр уйҙар онотола.
Йәшәү даулап, ҡая ситендәге
Ҡарағайҙар күккә ынтыла.

III

Туҡта, был гүзәл мәл! Онотайым
Барлыҡ мәшәҡәтте.
Яҙмыш, мине шулай яҡын күреп,
Бирҙе бит шәфҡәтен.

Күперлегә – хыял иткән ергә –
Килдем төңөлөп бөткәс.
Аҡ ҡанатлы фәрештәләр илтте,
Ошо мәлде көткәс.

Шарлауығы ҡосағына алды,
Сит күҙҙәрҙән  аҡлап.
Таш диуарҙар аша үтәм әле
Йығылмайса саҡ-саҡ.

Аҙым  айын,  әр бер аҙым  айын
 ине  ынау көтә.
Күперленең сират күперҙәрен
Тик ҡыйыуҙар үтә.

Мин дә үттем  әм ожмахты күрҙем
Был фани донъяла.
Туҡта, гүзәл мәлем,
Туктап торсо, бәхеткә сорна ла.

IV

Тауҙар ҡуйынында йәшенгән ең,
Ҡабатланмаҫ донъя – Күперле.
Хоҙай ҡөҙрәтелер – бер йәйге көн
Яҙмыш мине  иңә килтерҙе.

*Нисә быуат, мәш үр скульптор кеүек,*
*Тәбиғәт бит үҙе ил амдан*
*ырлап-биҙәп таш күперҙе алған,*
*Аҙаҡ үҙе күреп оҡланған.*

*Бөркөт кенә осар бейеклектә*
*Эленеп тә тора таш күпер.*
*Был гона лы ерҙе, серле күпер,*
*Ила и күк менән берләштер!*

## Диңгеҙ

*Түңкәрелгәнме күк ыу өҫтөнә –*
*Зәп-зәңгәрҙән диңгеҙ күҙҙәре.*
*Ҡарап-ҡарап уға ҡараш тала,*
*Бөтә алмаç ың аңлап серҙәрен.*

*Сихри уйсанлығы үҙенә тарта,*
*Тулҡындары наҙлай тәнеңде.*
*Йылы ҡосағында бәүелдереп,*
*ауыҡтыра үнгән йәнеңде.*

*Аҡсарлаҡтар, кәйелеп-кәйелеп осоп,*
*Үбеп ала тулҡын биттәрен.*
*Алтын ҡомо – ебәк туҡымалай,*
*Алып ҡайт аң ине күтәреп!*

*инең төçөң итеп, иҫтәлеккә*
*Ҡабырсаҡтар йыям ярыңда.*
*Минең йән дә ис бер тынғы тапмай,*
*Әйтер ең дә, беҙ – бер ҡарындан.*

*Яҡын күрҙем ине наҙың өсөн,*
*Яр ыулығың өсөн яраттым.*
*ағынып, ағындырып кил ен, тиеп*
*Ғүмерлеккә, ахыры, ҡараттың.*

## ин азамат ир инең

Шағир, ҡурайсы, көрәшсе
Ғәли Ильясов иҫтәлегенә

*Йыр ыҙ ниндәй байрам? Ҡото юҡ.*
*Майҙан тотор ирҙәр, еҙ ҡайҙа?*
*Батыр исемен алған егеттәр*
*Көс ынаша, уйнай ҡурайҙа.*

*ин бер үҙең майҙан тоторлоҡ*
*Ир аçылы инең арала.*
*Ҡурайыңды ыҙып ебәр әң,*
*Тән зем берләп, моңдар тарала.*

*Нөгөшөңдөң гүзәллегенә*
*оҡланып та туймай киттең ин.*
*Оло өйөүеңде был ергә*
*Ынйы үҙҙәр итеп иптең ин.*

*Күтәреп тә донъя йөктәрен,*
*Уйлай-уйлай илең хәстәрен,*
*Түҙә алмағандыр йөрәгең.*
*Йәшен генә булып йәшнәнең.*

## Шағирәләр

*“Шағирәләр – донъя көтөү өсөн*
*Яраҡлашмаған бер заттар”, – тимә.*
*Беҙҙең дә бит, башҡа ҡатындарҙай,*
*Ҡәҙимгесә усаҡ яҡҡы килә.*

*Беҙҙең дә бит үҙ яртыңды табып,*
*Алыҫ юлдан уны көтөп алып,*
*Тәмле аштар менән ыйлап ҡына,*
*Наҙлы үҙкәйҙәрен тыңлап ҡына,*
*Йәшәгебеҙ килә бала бағып,*
*Тормош туҙандарын бер аҙ ҡағып.*

*Мөхәббәтле сымылдыҡтар элеп,*
*Берсә илап алып, берсә көлөп,*
*Шашып ғашиҡ булып, берсә көлөп,*
*Берсә өмөтләнеп, бер көйөнөп…*
*“Шағирәләр ерҙә йәшәмәйҙәр,*
*Хыялыйҙар булып күккә оса…”*
*“Уң ҡулында ҡаурый ҡәләм бул а,**
*улы менән ул сабыйын ҡоса”.*

*Бары яуаплылыҡ артығыраҡ –*
*Моң өләшеү моң оҙ күңелдәргә.*
*Кеше тигән бөйөк затты ҡурсып*
*Беҙ килгәнбеҙ был гона лы ергә.*

***

*Әбей сыуаҡтары балҡып үтте,*
*Уның менән бергә шатлыҡ китте.*
*Күктә, хәл еҙ ҡуй өйөрө булып,*
*әлпән- өлпән йөҙә ҡара болот,*
*Ана, тамам, бына тамам, тиеп.*

***

*Аҡыл алдан йөрө ә, ер йөҙөндә*
*Йәннәт булыр ине бик күптән.*
*Уҫал эттәй, асыу алға сыға,*
*Эләктереп ала ум иттән.*

***

*Тәүге ҡар ул – тәүге өйөү кеүек:*
*Тиҙ арала ғына иреп бөтә.*
*Сафлыҡ, шатлыҡ, ағыш хисе менән*
*Йылдар аша йөрәгеңде өтә.*

*Рауил Бикбаевтың шиғырынан.



**Ғәлим**
**ХИСАМОВ**

# А УРА МАЗДА

## РОМАН

*Христос тыуғанға ҡәҙәр*
*1650 йыл бар ине әле.*

1

Үлән абағына үрмәләгән ҡарышлауыҡҡа ҡарап уйланып ултырған Зартуш ҡыуаҡ ара ынан тауыш-тын ыҙ сығып килгән юлбарысты күҙ ҡойроғо менән генә шәйләп ҡалды. Шунда уҡ күҙ ҡарашы яҡында ғына утлап йөрөгән быҙауға төштө. Харап була меҫкен, тигән уй мейе ен телде. Ҡайҙан көс, ҡайҙан ғәйрәт килгәндер үҙенә – ул ҡапыл юлбарыҫтың ҡаршы ына ырғыны. Был мәлдә йыртҡыс та, быҙауҙы уға була, ҡорбанына ташланғайны. Ике нөктәнән атылған ике тиң еҙ көс ике тура ыҙыҡ киҫешкән урында ауала осрашты. Бәрлегешеүҙән бере е лә тыйыла алмағанға, кеше кәүҙә е януарҙың алға онолған аяҡтары ара ына инде. Быны көтмәгән юлбарыҫ өйрәнелгән хәрәкәт менән алғы аяҡтарын үҙенә тартты әм кешене ҡосағына алды. Әммә үҙе лә ҡабырға ына ҡолап, мәтәлләп китте.

Ағас башында муйыл сүпләп ултырған Лиә әлеге алышты сая асыҡ күрҙе әм,

---

*Яҙыусы, журналист әм дәүләт эшмәкәре Ғәлим Афзал улы Хисамов – Башҡортостан Республика ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Халыҡ- ара Төрки академия ы академигы. Матбуғат әм социаль өлкәләге ҡаҙаныштары өсөн РФ наградалары менән бүләкләнгән.*

*Ул хеҙмәт юлын Көйөргәҙе районында уҡытыусы булып башлай, артабан Салауат химия комбинатында, Күмертау ҡала-район гәзитендә эшләй. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, "Совет Башҡортостаны" гәзите редакция ында оҙаҡ йылдар ҡәләм сарлап, үҙ хәбәрсенән баш мөхәррирга тиклем үрләй. "Китап" нәшриәтенең директоры, Башҡортостан Республика ының киң мәғлүмәт әм матбуғат министры булды.*

*Прозаик Ғәлим Хисамов – байтаҡ роман, повесть, хикәйәләр авторы, әҫәрҙәре утыҙлаған нәфис әм документалистик китаптарында тупланған.*

*Әҙәби тәнҡит уның ҡәләмен милли әҙәбиәтебеҙҙә сәйәси детектив жанрын үҫтереүҙә әүҙемлеге өсөн дә ыңғай ба алай. Тарихи фаразға тартым түбәндәге әҫәрендә лә әҙип үҙенең эҙләнеүсән, ил өйәр әм тел өйәр икәнлегенә инандыра. Ҡәләмдәшебеҙҙе 60 йәше менән ҡотлап, уға ныҡлы аулыҡ, яңы ижад артылыштары теләйбеҙ.*

йыртҡысҡа өжүм иткән Зартушҡа ярҙам итә була, әсе ҡысҡырып, юлбарыҫ өҫтөнә икерҙе. Шул ҡәҙәр ыңғай төштө ҡыҙ — януарға атланды ла ҡуйҙы. Зартуштың өжүменән шаңҡыған януар, өҫтөнә кемдеңдер ултырыуынан ҡото осоп, йән көсөнә ситкә тайпылды. Зартуш ергә тәгәрәне, ә Лиә януар бер нисә ырғығансы тегенең өҫтөндә ине әле. Тик юлбарыҫ ҡырҡа боролоп, бая үҙе сыҡҡан ҡыуаҡ ара ына кире икергәс кенә, ҡолап ҡалды.

Күҙ асып йомған арала булған был хәлде ис ни аңламаған быҙау ғына аптырап күҙәтте әм юлбарыҫ күҙҙән юғалғас ҡына, үҙенә хәтәр ҡурҡыныс янағанын шәйләп, баҡырып ебәрҙе. Уның тауышына яҡында йөрөгән инә е мөңрәп яуап бирҙе әм юртып янына килде. Шуны ғына көткән быҙау инә енең еленен мороно менән төртә-төртә имергә лә тотонды.

Юлбарыҫ менән алышҡан ике кеше тиҙ генә аяғына баҫа алманы. Лиә бер аҙ еңгәҙәп яткас ҡына тороп ултырҙы. Тирә-яҡ тып-тын, ыйыр болонда утлай, туғайҙа ҡоштар бер-бере енә тауыш бирә, себен-серәкәй безләп оса, ана, бер бал ҡорто ҡарыш буйы сәскә атҡан ҡыяҡҡа ҡунды. "Йыйып ҡалығыҙ балды,– тип уйланы Лиә,– йәйҙең уңғы сәскәләре был". Ҡыҙҙың ҡарашы үҙенән унлап аҙымда ситтә ятҡан Зартушҡа төштө. Егет ҡуҙғалмай. Ҡыҙ икереп торҙо ла уның янына етеп, өҫтөнә эйелде.

— Зартуш, тор. Юлбарыҫ ынлы юлбарыҫҡа ташланған батыр бит ин, тор.

Әммә ерҙә ятыусы яуап бирмәү генә түгел, тауыш та сығарманы.

— Бер-бер ереңде ауырттырҙымы әллә?— Ҡыҙ егеттең башын-ҡулын ыйпаны. Тик егет ис ҡыбырламаны. Аптырағас, Лиә алдында ятыусының сикә тамырына бармағын баҫты: елкенмәйсе... Ни эшләргә белмәне ҡыҙ, әкрен генә торҙо, тирәяғына ҡаранды. Күҙ ҡарашы көтөүҙең арғы осондағы ҡара нөктәгә төштө. Ҡыҙ тәүҙә яйлап ҡына, шунан йүгерә-атлай китте әм әлеге нөктә тигәнгә етер-етмәҫ туҡтаны.

— Ни булды, Лиә? Нинә төҫөң ҡасҡан? — Ҡаршы ында ир ине.

— Пурушасна ағай, — тип тултырып исемләне ирҙе ҡыҙ. Бүтән саҡта Пуруш ти ҙә ҡуя торғайны. Быға ир ҙә иғтибар итте.

— Ни булды, ҡыҙым?

— Зартушҡа әллә ни булды ла ҡуйҙы...

— Ҡайҙа ул?

— Тегендә.

Зартуш янына йүгерҙеләр. Егет баяғыса ята ине. Пуруш уның баш осона эйелде, ҡан тамырҙарына ҡулын баҫты, күкрәгенә ҡолағын ҡуйып йөрәген тыңланы. Шунан ҡыҙға ораулы ҡарашын төбәне.

— Ни булды?

Лиә юлбарыҫ менән алышты өҙөк-йыртыҡ өйләп бирҙе.

Пуруш егетте сисендереп ташлап, кәүҙә ен ентекләп тотҡолап ҡараны, ынған, яраланған урыны юҡ, сикә ендә генә күк тап бар.

— Башы менән уғылған, — тигән ығымта я аны.

## 2

Зартушты өс көн, өс төн буйы ни эшләтергә лә белмәнеләр. Йәне А ура Мазда янына осҡандыр инде, тәне лә артынан эйәр ен тип, утта яндырырға уҡталғайнылар, тыйылдылар. Дөрөҫөрәге, ата ы Пуруш ирек бирмәне.

— Зартуш кем ул тиклем яндырырға? Ябай көтөүсе. Ата ы — көтөүсе, ете быуын бабалары ла мал баҡҡан. Әсә е лә көтөүселәр ара ынан, — тип тыйҙы.

Йәне күккә – Хоҙайға осҡан кешенең мәйетен йә утҡа, йә ергә бирәләр бит. Утҡа алыу Ханға, Ҡағанға, Рабағаға, Рағанға, Албашҡортҡа тейә. Алҡортҡа

эләгә, тик ирәк- аяҡ. Быны ы әгәр хан, ҡаған әм рабаға түбәнерәк торған башлыҡтар ҡарарын ҡәнәғәтләндерә ҡал а ғына. Ә ырыуҙың бүтән мәрхүмдәрен ғәҙәттә ергә бирәләр. Улар өсөн әр илдең үҙ ҡурғаны бар. Арҡаилдеке лә бар.

— А ура Мазда янына ут аша оҙатмағас улыңды, Ахриман янынан үткәреп, йәрийәгә ебәрәйек, — тинеләр Пурушҡа.

Быны ына ла күнмәне.

— Бәлки, уны тура А ура Маздаға биреү кәрәктер? Беҙ бит белмәйбеҙ. Рағандың ҡайтҡанын көтәйек.

— Ҡайҙа киткән уң раған?

— Арҡаилгә.

— Ҡасан ҡайта?

— Өс көндән, тип киткән.

Зартуштың юлбарыҫ менән алышынан уң өс көн үтте. Йәйге эҫелә мәйет боҙола күрмә ен тип, ата ы үҙҙәре йәшәгән өй янына соҡор ҡаҙҙы ла Зартушты шунда төшөрөп алды. Өҫтән ҡояш ҡыҙҙырма ын өсөн соҡор ауыҙын ҡабыҡ, үлән менән ҡапланы. Үҙен бер генә мәлгә лә яңғыҙ ҡалдырманылар. Пуруш үҙе, ҡатыны Догдова, ир балалары, ҡай ы берҙә Лиә алмашлап Зартушты ҡарауыллланылар. Өс көн, өс төн Зартуштың йәнен иҫкә алдылар. Йәне ете ҡат аръяғындағы йәрийәгә осҡанына ҡыуан алар ҙа, бындағы тормошта күрә е көндәре бар ине бит әле, тип көйәләнделәр. Бигерәк тә Догдова теҙеп-теҙеп иланы. Зартуштың тыңлаусан, аҡыллы, зирәк бала булғанлығын, егет ҡорона еткәс әр эште үҙе белеп эшләүен, егерме е тулғас, өйләнергә рөхсәт көнө еткәс тә, өйләнмәйенсә, Лиәнең үҫеп еткәнен көтөүен бәйнә-бәйнә өйләне. үҙ дилбәгә е ошо ергә еткәс, Лиәгә берсә рәхәт, берсә ҡыйын булып китә. Зартуш унын ун алты ы тулғанын ун йыл көткән бит. Дөрөҫөрәге, Лиәне ҡарап үҫтергән. Лиә – унын еңле е, Пуруш менән Догдованың бала ы түгел, Пуруштың ауылында ҡалған етем ҡыҙ. Ата ы менән әсә е үлгәс, бында ыйынғайны.

— Беренсе көн беҙгә килгәс, — тип өйләне Догдова, — Зартуш Лиәне алдына алып, сәсенән иркәләп ултыра ине, раған килеп инде. Балаларҙың, ғаиләләрҙең хәлен белеп, йәшәйештәрен тикшереп тороу унын бурысы бит. Лиәгә ҡарап торҙо ла: " еҙгә был баланың туғанлығы юҡ, ете быуын күптән айырылған. Шуға, Зартуш, ин уны ҡарап үҫтер, үҙеңә ҡатын итер ең. Бында ҡан боҙолоу булмаҫ", — тине.

Лиәгә ун алты йәше юлбарыҫ менән алышҡан көндө тулды. Иртәгә енә улар ҡауышырға тейеш ине. Тик... өлгөрмәнеләр.

Был көндәрҙә Пуруш үҙен ҡайҙа ҡуйырға, ни эшләргә белмәне. Ҡатыны Догдова туҡтау ыҙ тиерлек уға текләшеп ҡарай — күҙҙәрендә орау яҙылған. Әммә Пуруш бер ни тип тә өндәшмәй, яуап ҡайтармай. Сөнки ни әйтергә икәнен үҙе белмәй. Утыҙ йылға яҡын элек тыуғайны был орау, яуабы әле лә юҡ.

... Яҙ ине. Ҡар яңы иреп бөтөп, ыуҙың ташҡан сағы. Ҡарайған да йәйрәп ята. Йәй көндәре бәләкәй генә булған йылға ҡарап йөҙҙөрөрҙәй булып айҡала. Ул көн Пуруш менән Догдоваға мәшәҡәт килтерҙе. Яңыраҡ тыуған малайҙары йән биреп ҡуйҙы.

— А ура Мазда үҙе бирҙе, үҙенә алды, ни хәл итә ең. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Ҡояш менән Ер балалары. А ура үҙе лә ут сәсә, уттан беҙ тыуабыҙ, ут булып ҡалабыҙ, — тип йыуатты үҙҙәрен атай менән әсәй.

Пуруш баланың мәйетен арыҡ тире енә төрөп алды ла тау битенә табан атланы. Ҡурған унда, шунда ҡәбер ҡаҙып, баланы ерләйәсәк. Унын бала ы бит, Спитама нәҫеленән, тимәк, ергә тапшырылырға тейеш.

Тау түбә енә етмәҫ борон Пурушҡа берәү ҡаршы тап булды. Ир кеше. Ул да бала күтәргән. Сәләмләштеләр.

— Ҡайҙа бара ың?

— Улым үлде, ерләйем.

— ы... — Ят кеше өндәшмәй торҙо, бер Пуруштың ҡулындағы төргәккә, бер үҙ ҡулындағы ына ҡараны. — Мин Албашҡорт булам. Бәлки, таный ыңдыр?

— Юҡ.

— Башҡорт – ул мин. Арҡаилдә төп ҡорт етәксе е, башлыҡ. Шуға мине Албашҡорт тиҙәр.

— Уны ын беләм.

— Ә ин кем?

— Мин – малбағар. Исемем Пурушасна, әйтеүе еңел тип Пуруш йөрөтәләр.

— Пуруш, үҙемә ҡолаҡ ал, үтенеп әйтәм: әйҙә, балаларҙы алмашайыҡ.

— Нисек? инеке лә үлгәнме ни?

Шул орауҙы ғына көткән ымаҡ, Албашҡорттың ҡулындағы бала илағандай тауыш бирҙе.

— Күрә еӊ бит, тере.

— Нисек инде ин тере баланы мәйеткә алмаштырырға итә еӊ?

— Тыңла, Пуруш. Баштан башлап дөрөҫөн өйләйем. Минең ҡулда ханыбыҙҙың улы, тыуғанына ни бары ярты ғына ай.

— Минекенә лә ярты ғына ай тулғайны.

— Белә еӊ бит, оҙаҡламай көн менән төн тиңләшә, яңы йыл башлана. Был көндө беҙ хоҙайыбыҙ Ра хаҡына иң ҙур ҡорбан — кешенән ҡорбан килтерергә тейешбеҙ. Кисә генә Рабаға рағандар менән кәңәш тотто. Ҡорбан килтереү сираты Ханға төштө. Йолабыҙ буйынса Ханыбыҙ ҡорбанға бер бала ын бирергә тейеш. Уның бала ы берҙән-бер генә. Ул да бул а – минең ҡулдағы яңы тыуған малай. Тимәк, ошо бала Яңы йыл көнөндә Раға ҡорбан ителәсәк. Хандың да, ҡатыныныӊ да балаларын ҡорбан соҡорона алғылары килмәй. Әммә йоланы ла боҙа алмай улар. Малайҙы Рабаға ҡулына бирергә мәжбүр буласаҡтар. Мин бөгөн, ата ы менән әсә енә әйтеп тә тормайынса, баланы алып сығып киттем. Уйым – берәр ергә алып барып уны йәшереү ине. Юғалған бала өсөн, әлбиттә, Рабаға ғауға ҡуптарасаҡ. Әммә бала тере ҡаласаҡ, тип уйланым.

Күрә еӊ, А ура Мазда ине минең юлыма үҙе сығарған. Мә, алып үҫтер был баланы. Ә мин инекен алып ҡайтып күр әтәйем дә, хан бала ына тейеш тәртиптә мәйетен утҡа тапшырырбыҙ.

— Ярар. — Күнде Пуруш.

— Мәле еткәс, баланы килеп алырмын, — тип боролоп өндәште Албашҡорт. — Исеме уның Зартуш.

Кире боролдо Пуруш, йылмая-көлә ҡайтты. Шым-шырыҡлап ҡына ҡатынына бала тарихын өйләне әм үҙ ғүмерендә бер кемгә лә был хаҡта ауыҙ асып әйтмәйәсәге тура ында ант иттерҙе.

Зартушты алып ҡайтҡас, бер нисә ай ваҡыт уҙҙы. Бала күҙгә күренеп тигәндәй үҫте, көлдө, йылмайҙы, илауҙың ни икәнен белмәне. Уға оҡланып бөтә алманы Пурушасна менән Догдова. Күкрәк өтөн биргән ҡатын баланы үҙ итте, ир кеше лә уға эҫенеп китте. Зартуш исемен Заратустраға үҙгәртеп, үҙҙәренсә аңлаттылар. Балаға күҙ тейә, йә яман күстәр, ен-пәрейҙәр эйәләй күрмә ен тип күрше-тирәгә, бүтән кешегә, Заратустра — ҡарт дөйәнең ҡолонон аңлата, тинеләр. Йәнә е, ҡарт дөйә ҡолоно ен-пәрейгә нимәгә кәрәк? Ә үҙҙәренсә баланы өйөп, Заратустраҡайым, йәғни таңғы йондоҙ, Сириустың улы, тип нарыҡланылар.

Ҡыуанышып ғүмер иткән бер көндө Пурушаснаға баланы алмаштырған кеше йәнә килде. Юлсы кейемендәге был мосафирға Догдова иғтибар ҙа итмәне. Аҙмы ни йөрөп ятыусы кеше. Пурушасна таныны быны: Албашҡорт бит. Юлаусы хужаны ситкә алып сығып, алан-йолан ҡаранып, үҙ башланы:

— Заратустра имен-аман икән. Күреп торам.
— Эйе, ай үҫә ен көн үҫә. Ғәжәп зирәк, оҡланмаған кеше юҡ.
— Сит-яттарға бик үк күр әтеп барма инде...
— Ярар-ярар.
— еҙҙең ҡарамаҡҡа бирелгән ир бала ҡәҙимге бәләкәс кеше генә түгел...
Албашҡорттың үҙен ишетеп, өй хужа ы тамаҡ ҡырҙы.
— Шулайҙыр тип уйлайым шул. Бер көндө мал баҡҡан ергә алып барғайным. Кәбән төбөнә, күләгәгә алды әсә е. Үҙе ашарға йүнәткән арала балаға яуыз ҡара йылан килгән. Аяғын-ҡулын болғап ята бит инде сабый. Шул хәрәкәт әүрәткәндер инде йыланды. Күрә ең, саға була, баланың өҫтөнә күтәрелгән. Заратустра йыланды баш тәңгәленән ҡыҫа тотоп алған. Догдо ҡысҡырғанға йүгереп бар ам, ауыҙын асҡан йыланды болғапмы-болғай малай, үҙе көлә. Ҡулынан саҡ ысҡындырып алдым теге хәшәрәтте, үлгән ине.
— Ай, А ура! Рәхмәт инә, Мазда! — Албашҡорт ҡулдарын күккә сөйөп Хоҙайға дан әйтте. — ин ҡотҡарған ың икән баланы!
— Мин дә А ураға рәхмәтемде әйттем. — Пурушасна ҡәнәғәт ине. — Йылан бит – Ҡара донъяның йәне. Уны тик Хоҙайыбыҙ А ура ғына еңә ала.
— Дөрөҫ.
— Был бала менән тағы бер хикмәт булды.
Әлеге ишеткән хәбәре тәьҫиренән ҡотолоп өлгөрмәгән Албашҡорт иҫкәнде:
— Ни булды?
— Әлеге лә баяғы яланда инек. Бер мәл тыныс ҡына утлап йөрөгән көтөү ҡапыл ҡупты ла Заратустраны ҡалдырған яңғыҙ ағасҡа табан аҡыра-баҡыра, абына-өрләгә сабырға тотондо. Нимәнән өрккәндер көтөү, әле лә белмәйем. Әллә юлбарыҫ килеп сығып ҡурҡытты, әллә бүтән йыртҡысмы — әр хәлдә күҙенә аҡ-ҡара күренмәй сабырға тотондо ыйыр ҙа, үгеҙ ҙә, бәләкәй быҙауҙар ҙа. Үҙең белә ең, бындай мәлдә мал аяу ыҙ була. Юлында ни осрай — бары ын да тапай, иҙә, ҡыйрата. Заратустра өсөн ҡотом осто. Тап көтөү юлында бит. Күҙе аларған ыйыр өҫтөнә баҫыр ҙа китер, тип ҡурҡтым. Үкерешкән мал сабып уҙып киткәс, бала янына йүгереп барҙым. Күргәнемә ышанмайынса аптырап ҡарап торҙом. Яңғыҙ ағас ынған, янында ҙур үгеҙ ята аунап. Күрә ең, бер ни күрмәй йән көсөнә сапҡан үгеҙ башы менән ағасты өҙгән. Ағас ынып ауған, мал үҙе иҫ еҙ тәгәрәгән. Ә Заратустраның өҫтөндә елле ыйыр баҫып тора. Өҫтөндә тиеүем шул: ыйырҙың аяҡ ара ында имен-аман ята малай. Әйтер ең, баланы көтөү тапап китмә ен өсөн ыйыр үҙ кәүҙә е менән уны аҡлап тора. Ғәмәлдә шулай килеп сыҡты ла инде. Мине күргәс, ыйыр артҡы тояҡтарын аҡ ҡына күтәреп баланы ашатланы ла китеп барҙы.
— А ура, А ура ғына ҡотҡарған Заратустраны! — Албашҡорт йәнә өрәнләмәй түҙмәне.
— Эйе, тап шулай. Ошо күргәндәрҙән уң, был бала ҡәҙимге малай ғына түгел, А ура уны махсус эш өсөн әҙерләй, тип уйланым.
— Дөрөҫ әйтә ең, баланың хикмәтле яҙмышы бар. Әсә е шулай тип анай. Ата ы менән әсә е Заратустраны ныҡ юҡ ына, әммә килеп күрә алмайҙар. Үҙегеҙ белә егеҙ, тиктомалдан ғына ниндәйҙер көтөүсенең өйөнә бара алмай улар. Мин дә бына ҡасып-боҫоп ҡына йөрөйөм. Мине ебәрҙеләр, баланың хәлен белеп кил, тип.
— Бала яҡшы. Ауырымай-сирләмәй, ашарына етәрлек. Догдовамдың өтө күп ул, күкрәкле бисә.
— Рәхмәт еҙгә. Зин ар өсөн, бик яҡшы ҡарағыҙ Заратустраны. Оҙаҡламай атай-әсә е янына алыу сара ын табырбыҙ. Әле генә түгел. Уның үлемен теләгән ҡара көстәр ағалап ҡына йөрөй.

— Баланың үлеме кемгә хәжәт? — Пурушасна ҡысҡырып ебәргәнен иҙмәй ҙә ҡалды.

— Шул турала өйләйем, иҫкәртәйем еҙҙе тип тә килеүем инде.

Баланың әсә е әйтә: “Заратустраға биш ай ауырлы сағымда ғәжәп төш күрҙем, — ти. — Имеш, бер көндө хан йорто ҡапыл томанмы-төтөнмө эсендә ҡалды, бер нәмә күренмәҫ булды. Шул саҡ томан ара ынан яман йыртҡыстар: юлбарыҫтар, бүреләр килеп сыҡты. Бер юлбарыҫ мине бәреп йыҡты ла үткер тештәре менән ҡарынымды йыртып ебәрҙе, баланы өйрәп алды. Ә бала үлмәү генә түгел, мине тынысландырырға тотондо. “Ҡурҡма, әсәй, был яуыздар хәҙер ҡасып бөтә ул, — ти. — ин белә еңме, мине яралтҡанда атайым аҡ ыйырҙың өтөн эскәйне. Ә аҡ ыйыр ирәүәнде – мөғжизәле үләнде ашаны бит. Шуға ҡурҡма, мин дә мөғжизәле яралдым”,— тине. Бала шулай тиеү булды, күк ярылып китте, тауҙар ватылды. Әммә бары ы ла шым, тауыш ыҙ-тын ыҙ ғына ишелде. Күк ярығында бер кеше пәйҙә булды. Үҙенең бер ҡулында – хан таяғы, икенсе ендә – китап. Китап менән елтәгәйне, юлбарыҫ менән бүреләр юҡҡа сыҡты. Теге кеше ипле генә итеп баланы кире минең ҡарыныма алды. Йыртылған эсем шунда уҡ бөтәште. Күк кеше е кире килгән яғына олғашты.

Был күргәнемде мин төш юраусыға өйләнем. Теге өс көн буйы бер үҙ ҙә әйтә алманы, тик дүртенсе ендә генә: “ ин тыуҙырасаҡ бала – Аура Мазданың ерҙәге илсе е буласаҡ бөйөк шәхес, — тине. — Был турала арыйҙарҙың тәүбаба ы Йыма, унан ҡала булған атаҡлы хандарыбыҙ Фәриҙун, Ман ар, Көй Хөсрәү ҙә өйләгән икән. Уларға Аура Маздабыҙ үҙе әшкәрткән. инең балаң киләсәктең бөйөк юлбашсы ы ул. Тик уның дошмандары ла күп. Арыйҙарҙың яҡшы йәшәүен теләмәгән ҡара көстәр үлтерергә яҫҡынырҙар улыңды, тигән”.

Ауырлы әсә ышанырға ла ышанмаҫҡа ла белмәгән төш юраусыға. “Эйе” лә тимәгән, “юҡ” тип тә әйтмәгән. Тик тыуғас та илай ы урынға бала ҡысҡырып көләп ебәргәс, ышанған әлеге үҙҙең хаҡлығына. Бәлки, унда ла шиктең остоғо ҡалғандыр әле, әммә бер нисә көндән иҫ китмәле хәлгә ша ит булғас, шик юғалған.

— Ни эшләй ала инде яңы тыуған бәпес?

— Ул түгел... Былай булған. Малайҙың әсә е сыҡҡан саҡта сәңгелдәк янына Арҡаилдең Рабаға ы Турасура хәнйәр тотоп килгән. Балаға сәнсә була ҡулын күтәргән әм, елтәнәм генә тигәндә, яурын башындағы оло быуыны сыҡҡан да ҡуйған. Сәнсә алмай, төшөргән теге ҡулын. Бүлмәгә инеп килгән бала әсә е күреп ҡалған быны.

— Хәнйәрҙе сәңгелдәккә алайым тип килгәйнем, — тип аҡлана ти теге ҡара йөрәк. — Баланы ен-пәрейҙән аҡлай бит ул...

Заратустраны Хоҙайға ҡорбан иттерергә тип тә шул Турасура йөрөнө йүгерекләп. Үле баланы күргәс, тынысланғандай итте, әммә ышанмай уға Заратустраның ата ы менән әсә е. Ана шул турала иҫкәртергә килгәйнем еҙҙе.

Албашҡорт сәңгелдәктә уйнап ятҡан малайға оҡланып ҡарап торҙо ла “йылп” сығып ыҙҙы. Пурушасна ҡалды ишеткәндәрен сер итеп аҡлап. Тик Догдоваға ғына асылды. Көн дә, төн дә көттөләр улар. Ишек шығырҙа а ла, ҡапҡа асыл а ла, Заратустраны алырға киләләр, тип көттөләр. Әммә Албашҡорттоң да эҙе ыуынды, бүтәндәр ҙә аяҡ баҫманы. унғараҡ яман хәбәр ишеттеләр: хан менән теге башҡорт ҡан ҡойошло уғышта әләк булған. Ә ханбикә, башына төшкән ир менән бала ҡайғы ын күтәрә алмай, арыға абышып үлгән.

Зартуш юлбарыҫҡа юлыҡҡандан бирле бына өсөнсө көн инде иренән ниҙер орарға итә Догдова, әммә өндәшә алмай. Анты бар бит.

Пуруш үҙе лә өсөнсө көн инде Зартушты ни эшләтергә белмәй. Үҙ бала ы кеүек ерләп кенә ҡуйыр ине, ярамай — хан улы бит Зартуш. Кәүҙә ен утҡа алыр ине —

йола буйынса ергә күмелергә тейеш көтөүсе нәҫеле. Зартуштың хан бала ы икәнлеген кешеләргә нисек әйтеп аңлата ың да нисек ышандыра ың? Шуға Пуруш яндыртманы ла, ерләтмәне лә, рағандың ҡайтҡанын көттөрҙө. Ниәте рағанға дөрөҫөн өйләү ине. Бәлки, раған уны аңлар ҙа Зартушҡа үлгәндән уң бул а ла хан нәҫеленә тейеш хөрмәтте күр әттерер. Тик был уйының барып сығырына Пуруш үҙе лә ышанманы. Утыҙ йыл элек ҡорбанға бирелер баланы урлап А ура Мазда, Ра әм Ер Хоҙайҙарыбыҙ алдында ниндәй золом ҡылған ың, тип уны ғәйепләрҙәрен дә самалай Пуруш. Тик ни хәл итә ең, ҡасан да бул а ҡылған ҡылыҡтарың өсөн яуап бирергә тура киләсәк бит. Был донъяла булма а, үҙе үлгәс, йәне ете ҡат күккә олғашҡас, игеҙәге йәрийәнең ҡапҡа төбөндә көтәсәк уны. Ҡылғаны золом бул а, игеҙәге ҡарт әбей ҡиәфәтендә торор, изгелек бул а эше — йәш йөҙлө ҡыҙ рәүешендә сират күперенән етәкләп үткәреп, йәрийәгә индерәсәк.

Раған Арҡаилдән ҡайтҡас та Пуруш өйөнә килде.

— Ҡайҙа, күр әтегеҙ мәйетте, — тип ораны.

Пуруш үҙе ҡаҙған соҡорҙо асты, эсенә төштө әм ҡатыны менән Лиә ярҙамында Зартушты өҫкә күтәреп алды.

Шул саҡта башҡа ыймаҫлыҡ ғәжәп хәл булды. Зәңгәр күк йөҙөндә ус ая ындай ғына болот йөрөй ине. Зартушты соҡорҙан сығарған ғына мәлдә шаулатып ямғыр яуып ебәрҙе лә сатыр-сотор йәшен йәшнәне. Бер күккә, бер Зартушҡа ҡараған нисәмә кешенең күҙе алдында йоҙороҡ дәүмәлле ут йомарламы ергә төшөп икергеләне лә Зартуштың кәүҙә е буйлап тәгәрләне әм соҡорға төшөп үнде. Ә Зартуштың тәне өҫтөндә күкле-йәшелле ялағай ялтланы, төтөн борланы. Ул да булманы, уҙылып ятҡан Зартуш тороп ултырҙы.

— А ура Мазда, А ура Мазда, беҙҙең иң бөйөк Хоҙайыбыҙ. ин күктән ут ебәрҙең, инең утың Зартушҡа йәнен ҡайтарҙы! — тип ике ҡулын күккә күтәреп амаҡланы раған.

Башҡалар, ни тиергә белмәй, Зартушҡа ҡарап шаҡ ҡатты. Йәшендән терелгән егет шыбырлап тиерлек:

— А ура Мазда, аңланым ине, — тине.

Әйләнә-тирә ендәгеләр ҙә ишетте быны, әммә үҙенең мәғәнә ен төшөнмәне. Раған:

— О! Бөйөк Мазда! ин ебәргән ут Зартуш исемле баланы яңынан аяҡҡа баҫтырҙы. Рәхмәт иңә. Беҙ, ерҙәге ырыу кешеләре, тик изгелек кенә ҡылырбыҙ, золомдо яҡын йөрөтмәбеҙ! — тип ҡулдарын күккә ондо.

Мөғжизәгә ша ит булған бүтәндәр ҙә А ура Маздаға ғибәҙәт үҙҙәрен ҡабатланы, ә үҙҙәренең ике күҙе яңынан терелгән Зартушта ине. Беренсе булып уға яҡын килергә Лиә баҙнат итте.

— Зартуш, инең йәненде Ахриман юлбарыҫ ҡиәфәтенә инеп тартып алырға иткәйне лә, А ура Мазда кире ҡайтарҙы. Әйҙә, өйгә инәйек.

— Ниңә ин беҙгә бер нәмә лә әйтмәйенсә киттең? — тип үпкәләне. – Ни тиергә лә белмәйенсә аптыраныҡ. инең алдыңда ни гона ыбыҙ бар, тип бөттөк. Мине булма а, әсәйеңде уйлар инең. Эй, өҙгөләнә бахырым. арыға абышып бөттө.

— Ғәфү ит, Лиә. Ысынлап та әйтергә кәрәк булғандыр. Рағандан, Рабағанан ҡурҡтым. еҙҙең өсөн ҡурҡтым. Бигерәк эҙәрлекләй башланылар бит. Ҡайҙалығымды бел әләр, йәнә тотоп алырҙар, тинем.

— Ни эшләп тот он, ти. Беҙгә әйт әң дә, беҙ ошаҡ еткерер тип белә еңме әллә?

— Әйт әм, еҙҙең теңкәгеҙҙе ҡороторҙар кеүек тойолдо.

— Былай ҙа күп йөрөнөләр инде. Асыҡтан-асыҡ оранылар ине, шунан дауаланырға килгән кеше булып белештеләр. Ә бер көндө йәнә мосафир ишек шаҡыны. Догдо әрләп ҡаршыланы быны...

— Йөрөмәгеҙ, юҡ Заратустра. Ҡайҙа икәнлеген үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ.

Теге кеше өндәшмәй тыңланы, өйҙө күҙҙән үткәрҙе. Шунан:

— Ҡурҡма, Догдо, — ти. — Рабаға инең ҡотонҡо алғанын да, иренде үлемгә дусар иткәнен дә беләм. Ҡурҡма, мин иңә зыян эшләмәм.

Догдо текләшеп ҡараны ла быға, өндәшмәне. Мин дә ләм-мим.

— Мин Албашҡорт, — ти был ир кеше.

Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәнек. Албашҡорт үҙе ябай көтөүсе өйөнә кил ен әле, булмаған хәл бит. Ә теге аман өйләй:

– Бик күп йылдар әүәл минең олатайым килгәйне еҙгә. Олатайымдан уң атайым Албашҡорт булды, хәҙер — мин.

Ошо урында Догдо ҡапыл ҡулын елтәне, хәбәр өҙөлдө. инең әсәйең миңә:

— Бар әле, ҡоро ғына тап йыйып индер, утты яңыртайыҡ, ҡунаҡтың тамағы астыр, — тине.

Әле генә мосафирҙы әрләп торған әсәйеңә аптыраным, ни эшләп был кешене ыйларға булып китте икән, тип. Сығып киттем. Мин юҡта нимә өйләшкәндәрҙер – белмәйем. Яҡшы, ҡоро тап-топ индереүгә әсәйең теге кеше алдына ашъяулыҡ йәйгән, ҡорот алғайны, үҙе икмәк телә.

— Миңә әйтмәне. Бәлки, Лиәгә, уның исеме Лиагова, әйткәндер ҡул ара ында. Әйт, Лиә, нимә белә ең, Албашҡортҡа әйт,– ти.

— Нимә әйтәйем?

Албашҡорт миңә өндәште:

— Заратустра нимәлер күрергә, кем менәндер өйләшергә, кем менәндер кәңәшләшергә теләүе, бәлки, хыял итеүе тура ында өйләмәй торғайнымы?

— Хыялын күп өйләне ул. А ура Мазданы теленән төшөрмәне. Ҡара көс тип Ахриманды әрләй торғайны...

— Беҙҙең тирә кешеләре, арый илдәре, ауылдары тура ында ни әйтте?

— Ырыуҙар иленең иң күренекле е — Арҡаил, ти торғайны, — тинем. — ин шулай өйләй инең дә ба а.

— Эйе-эйе. — Заратустра йөпләй алды.

— Арҡаилде бабаларыбыҙ күктең ерҙәге сағылышы итеп, 160 аҙымлы түңәрәк я ап, йондоҙҙарҙың 12 ынын, айҙың 28 көнөн үрәтләп эшләгәндәр. Урталағы бағана туп-тура А ура Маздаға күр әтә, ә ян-яҡтағы дүрт мөйөш дүрт тарафтан да А - ураға күҙ терәй торған урын, тип өйләне, тинем.

— Дөрөҫ әйткән ең. Минең үҙҙе әллә ятлап алған ың инде.

— Өндәшмәй йөрөгәс тә, бер ни ҙә белмәй, тип уйлай ыңмы әллә?

— Мәрҙәс ҡыҙ икән ең. Шунан ни тине Албашҡорт?

— Ул ни ашыҡтыра. “Йәнә ни өйләне?” — ти. Әйттем дә ҡуйҙым.

— Нимәне?

— Ирәмәлде. Ирәмәлдә ғалимдар бар икән. Улар йондоҙ анай,тиҙәр. Шуларҙы күреп бер өйләш әң ине, тип хыялланғайның бит Арҡаилдән ситтә төн ҡунған саҡта.

— Ҡасан булғайны инде...

— Ҡасан тип ни, былтыр ғына. Шул арала ғына онотамдыр шул мин?.. — Ҡыҙ ҡапыл шымып ҡалды. — Былар тура ында Албашҡортҡа өйләргә ярамай инеме?

— Ярай ине, ярай. өйләгән ең бит.

— Аҙаҡтан уйланым инде: Лиагова, ҡай ы берҙә теленә хужа була алмайың, тип. Әйтмәҫкә булған икән.

— Шунан?

— Шунан ни Албашҡорт әйтә: “Моғайын, Заратустра Ирәмәл тигән тауҙы эҙләп киткәндер. Унда ғалимдар күк есемдәрен күҙәтер өсөн ҡорам алды”, — ти. “ ин унда бара ыңмы?” — тип ораным мин. Догдо уҫал итеп ҡараны миңә. Әммә орауҙы биреп өлгөргәйнем инде. “Моғайын, барырмын. Миңә Заратустраны

күрер кәрәк", — ти был. "Мин дә барам". Башҡорт аптырап ултырҙы. " ин уға кем? — ти. — еңлеме?" "Юҡ, — мәйтәм, — йәрәшкән ҡыҙы". "Ә-ә, улай икән. Бөгөн таң  ары ында ауылығыҙҙың осондағы оло юлға сыҡ. Мин еңел арбалы атта үтәм. Юлда бул аң, ултыртып алырмын". Әйткән ваҡытта юлда булдым. Туҡтап ултыртты мине Албашҡорт. Ҡыҙыҡ икән дә арба тигәндәре. Өс ат егелгән үҙенә, елдертеп баралар. Хандың арба ы тағы ла шәберәк йөрөй, ти. Ике көн тигәндә ошонда килтерҙе лә ҡуйҙы. Төндә лә, көндөҙ ҙә туҡтап, аттарын утлатты әле.

— Ә мин бында ай буйы тиерлек килдем.

— Шулайҙыр. Мин  ине әллә ҡасандан бирле көтәм.

— Албашҡорт ғалимдарға минең турала ни тине?

— "Килеп етә ҡал а, йыуындырып, таҙартып, өҫ-башын ҡарап, тамағын туйҙырығыҙ ҙа миңә хәбәр итегеҙ. Тик миңә генә әйтегеҙ. Бүтәндәрҙең белмәүе хәйерле", — тине.

— Шулай ҙа бит, — Заратустра бында килгәне бирле үҙен әллә күпме кеше күреүе, кем икәнен белеүе тура ында уйлап ҡуйҙы. — Был сер түгел хәҙер. Тимәк, миңә яҡын көндәрҙә Албашҡорттоң килеүен көтөргә ҡала.

— Эйе, хәбәр алыу менән  ине күрәсәкмен, тине ул.

Был көндө Заратустра Факи Тайран менән оҙаҡлап  өйләшә алманы. Ул йыуынып өйгә ингәндә Факи китергә йөрөй ине.

— Оҙаҡламай ҡояш байый. Миңә ул мәлдә ҡорамда булыр кәрәк. Баяғы ҡыҙ  инең тамағынды туйҙырыр, йоҡларға урын күр әтер. Иртәгә осрашырбыҙ, — тип сығып та китте.

Заратустра,  күп көн  әм төнөн йә урманда, йә яланда  әр үлән ҡыштырҙауынан да  ағайып яңғыҙ үткәргәнгә күрә, бер уй ыҙ йоҡоно онотоп бөтә яҙғайны. Шуға күҙ бәйләнер-бәйләнмәҫ ваҡытта уҡ йоҡоға талды  әм, ғәҙәтенсә, ҡояштан алда уянды. Офоҡта тәүге алтын нурҙар күренеүгә ул йыуынып, кейенеп бөтөп, ике ҡулын да күккә күтәреп тора ине.

— Бөйөк А ура Мазда! — тип ҡысҡырып өндәште ул. —  инең изге утынды беҙгә килтереүсе Ра минең күҙҙәремде аса, йылы ын бөркә. Ахриман үҙе лә, унын ялсылары ла ҡояш нуры үтмәҫ тишек-тошоҡҡа инеп ҡасты.  инең ҡөҙрәтең еңде бөгөн, А ура Мазда! Мәңге ошолай бул ын.

Шуны ғына көткән кеүек, ҙур түңәрәк Ҡояш офоҡ артынан тулы ынса күтәрелде,  әм тирә-яҡ яҡтыға мансылды. А ура менән әңгәмә ҡорған Заратустра үҙенең янына кеше килгәнен  иҙмәй ҡалды.

— Ҡояштың беҙҙе ҡаршылағанын ярата ыңмы? — тигәнгә ялт боролоп ҡара а, йөҙөнә йонсоу күләгә е ятҡан, әммә күҙҙәре көлөп торған Факи икән.

— Ҡояшты ҡаршылайбыҙ, тип әйтә торғайны бабайҙар, — Заратустра төҙәтергә булды ғалимды.

— Юҡ, элек яңылыш уйлағандар. Беҙ Ҡояшты, Айҙы, Ерҙе күҙәтә торғас, шундай  ығымтаға килдек. Беҙ Ҡояшты ҡаршыламайбыҙ, ә Ҡояш беҙҙе ҡаршылай.

— Ни өсөн?

— Сөнки кешеләр, Ҡояш Ер тирәләй әйләнә, тип яңылыш уйлаған. Ғәмәлдә Ер Ҡояш тирәләй әйләнә. Беҙ төҙөгән ҡорам ярҙамында шуны асыҡлай алдыҡ. Баҡ-аң, Ҡояш тирәләй Ер генә түгел, тағы ла биш планета өйрәлеп йөрөй икән. Бына былайыраҡ була ул. — Факи бер таяҡ алып ергә ҡаҙаны. — Ошо Ҡояш икән, ти. Ә быны ы – планеталар, шул иҫәптән Ер. Улар Ҡояштан төрлө йыраҡлыҡта, йы андың төрлө тарафында урынлашҡан. Улар  әммә е лә Ҡояш тирә ендә өйөрөлә. Кире енсә бул а, йәғни Ҡояш Ерҙе, бүтән планеталарҙы ла әйләнеп йөрө ә, Күпме Ҡояш кәрәк булыр ине? Ә ул берәү.

— Ул сағында ниңә көн төн менән алмашына? Ер Ҡояш тирәләй әйләнгәс, Ер

әр саҡ Ҡояшҡа ҡарап тора була бит.

— Бабайҙар әйткәнсә әм Рабаға өйрәткәнсә, беҙ ҙә уға шикләнмәйбеҙ: Ер бит таба ымаҡ йәлпәк түгел, ә түңәрәк, йәғни шар ымаҡ. Өҫтәүенә, Ер шары үҙе өйөрөлөп йөрөй әм Ҡояш тирәләй ҙә әйләнә. Өйөрөлгән сағында Ҡояш нурҙары төшкәндә — көн була, Ҡояштан боролоп, нурҙар ҡапланғас, — төн килә.

Заратустра ишеткәнен мейе енә ендереп, Факи ҡаҙаған таяҡҡа, Ерҙе, бүтән планеталарҙы аңлатҡан таштарға ҡарап байтаҡ ултырҙы. Шунан:

— А ура Мазда миңә был турала әйткәйне, — тине. Хәҙер Факиҙың күҙҙәре шар булды.

— ин А ура Мазда менән күрештеңме? Ул ниндәйерәк? Нимә тине иңә?

Заратустра Факиҙың орауҙы күп биреүенә йылмайып ҡуйҙы.

— ин бит ғалим. Ғалимдан да күберәк белеүсе булмай. Ә ин орау артынан орау бирәең.

— Бөтә ен дә беләм, тип иҫәр генә әйтер. Ни тиклем күберәк бел әң, шул тиклем орау ҙа күбәйә.

Заратустра яуаптан бик ҡәнәғәт ҡалды.

— А ура Мазда менән мин беренсе тапҡыр юлбарыҫ менән алышып үлгәндән уң осраштым.

Был үҙ Факиҙы тулҡынландырманы, күрә ең, ул хаҡта ишеттергән булғандарҙыр ғалимға.

— А ура күҙгә күренмәй, ул бик ҙур, ул бар йыанды иңләгән. Әммә уның дә шәтле сәмреғош ҡиәфәтендә икәнлеген самалап була. Ҡанаттары йә башы ҡуҙғалып ҡуйғылай, күбе енсә ҡанаттарын кәйелдереп оса. А ура Мазданың бейеклегенән ҡара аң, ин әйткәнсә, Ҡояш тирәләй теҙелгән планеталар йоҙроҡ дәүмәле генә булып күренә. Ҡояш үҙе беҙгә күренгән Ай ымаҡ, әммә ҡыҙыу яна. Ай и ә борсаҡ кеүек кенә.

А ура Мазданың ҡарашы еткән ҡәҙәр урында яҡты донъя йәйрәп ята. "Минең күҙ ҡарашым етмәгән урындан Ахримандың ҡараңғылығы башлана", — тип әйтте А ура. Ахриман Мазданың яҡтылығын баҫып алып, ҡараңғылыҡҡа күмергә итә. Бер заман шулай ынтылғанында Бөйөк А ура:

*"Ят а А у Ваирьо*
*Ат а Ратуш Ашад Уид Хача*
*Вант эуш Дазда Манан о*
*Щьяотхананам Ан хэуш Маздан*
*шатрэмча А уран — а*
*Йим Дригубьо Дадат Вастарэм!"*

— тигән.

Ошоно ишеткән Ахриман үҙенең ҡараңғы төп өҙлөгөнә уш ыҙ ауған да өс йөҙ мең йыл уш ыҙ ятҡан. Дейеү-пәрейҙәр уны күпме генә иҫенә килтерергә тырышма ын, бер ни ҙә эшләй алмағандар. Өс мең йылдан уң Ахриман уянған әм яңынан этлеген эшләй башлаған. Уның маҡсаты — А ураның яҡты донъя ын баҫып алыу, уны ҡараңғылыҡҡа сумырып, әр төрлө золом ҡылыу...

— Бына ин А ура Мазданы бик ҙур сәмреғошҡа тиңләнең. Үҙең белә ең, ҡоштоң ҡулдары юҡ, аяҡтары тырнаҡтар булып бөтә. Тырнаҡтар тик ағасҡа-ташҡа ҡуныу өсөн генә яраҡлашҡан, осо ла кәкерәйеп тора. Был тырнаҡтар менән нимәлер я ау, әйтәйек, балсыҡтан нимәлер әүәләү, ағастан юныу мөмкин түгел. Шулай булғас, А ура бар донъяны, ерҙе, күкте, ер өҫтөндәге үҫемлектәрҙе, тереклекте нисек я аған уң? — Факи был орау менән әллә инде Заратустраны аптырашта ҡалдырырға, әллә инде үҙенең белемен арттырырға булды, белмәҫ ең. Тик те-

генең яуабы әҙер ине:

— Сәмреғоштоң тәпәйҙәре тырнаҡ булып түгел, кешенең ҡулы ымаҡ ослайып бөтә. Бына инең, минең ҡул ымаҡ.

—Ҡулын үҙең күрҙеңме?

— Күрмә әм, өйләйемме ни?

— Ә А ура Мазда Ер йөҙөн нисек я аған?

— А ура Мазданың беренсе хатын ишеткән Ахриман иҫ еҙ булып ҡолаған, тигәйнек. Шул арала А ура тик тормаҫҡа була. Сөнки өс мең йылдан уң золом батша ы Ахримандың иҫенә килерен әм изгелеккә өжүмен ҡабаттан башларын белә бит. Шуға күрә ул йомортҡа кеүек күк барлыҡҡа килтерә, уны ялтлап торған тимерҙән я ай, бер генә бөртөк тә тап булмай унын йөҙөндә, саҡ ҡына күгелйем төҫө аша үтә күренә. Йомортҡаның түбә е сик еҙ нурға терәлә, ә бар йы ан унын эсендә ҡала, йәғни, таш ҡәлғә кеүек әр яҡлап аҡлай йы анды. Күктең иңе — буйына, буйы — бейеклегенә, бейеклеге тәрәнлегенә тиң була. А ура Мазда күккә ун ике йондоҙлоҡ: Буға, Игеҙәк, Ҡыҫала, Арыҫлан, Ҡыҙ, Бизмән, Саян, Уҡсы, Кәзәмөгөҙ, ыуғояр, Балыҡ, Ҡуҙы йондоҙлоҡтарын урынлаштыра. Уларға алты яғынан дүрт йөҙ ик ән мең бәләкәй йондоҙҙар бирә. Күкте аҡлаусы әм яҡлаусы итеп ул Әштер Барыйҙы ҡуя. Ниндәй генә хәл тыу а ла, Әштер көләп-йылмайып торорға тейеш, тип бойора.

Артабан А ура есеменән ыу я ай ҙа ыуға ярҙамға ел, ямғыр менән томанды ебәрә. ыуҙы аҡларға ыу батырҙы тәғәйен я ай.

Өсөнсө итеп А ура Мазда Ерҙе әүәләй. Тәүҙә Ер шып-шыма була, тик бер өлөшө — ҡаты таштан, икенсе е — йомшаҡ балсыҡтан, өсөнсө ө ибелер ҡомдан тора. Ерҙең буйы — иңенә, иңе — тәрәнлегенә тиң. Ерҙең эсенә ул төрлө тоҙҙар, тимерҙәр: ҡорос, баҡыр, тауҙар ала. Тора-бара улар өҫкә ҡалҡа әм Ерҙең бите тауҙар, убалар, ҡаялар менән сыбарлана. Ерҙең аҡсы ы итеп Хоҙай Армыйҙы билдәләй.

Дүртенсе итеп А ура Ер өҫтөндәге үҫемлектәрҙе тыуҙыра. Тәүҙә улар үксә бейеклек кенә була. Үҫемлектәр яҡшы күтәрел ен, ботаҡлан ын, ҡайрыға ултырын өсөн А ура ут менән ыуҙы ярҙамға ебәрә. Тиҙ арала йәшел үҫемлек ағас, ҡыуаҡ, көпшә, үлән булып бар Ер йөҙөн баҫа. Уларҙы ҡарау бурысын А ура Әмиргә йөкмәтә.

А ура Мазданың бишенсе эше — тәүге йән эйә ен тыуҙырыу була. Ҡараңғы төн йөҙөндә лә нур ибеп торған Ай кеүек ап-аҡтан Үгеҙ хасил итә ул. Өс беләк сама ы ғына була бейеклеге унын. Үгеҙҙең эсенә йән өрә, әм теге ҡойроғон елтәп, башын борғолап йәшел үләнде утларға ла тотона. Үгеҙҙе ул Арый араны тигән урынға ҡуя. Аҙаҡтан кешеләр был ерҙе үгеҙҙең кендек ара ы — арандек — ирәндек тип йөрөтә башлайҙар. Үгеҙгә көтөүсе итеп Бағы Малды билдәләй.

Алтынсы сиратта А ура Мазда Ғәүрәтте я ай. Ул Ҡояш кеүек ялтлап торған беренсе кеше була. Ғәүрәттең оҙонлоғон дүрт тер әккә тиң я ай, киңлеген оҙонлоғо кеүек итә. Кешене яҡлаусы булып А ура Мазда үҙе баҫа.

Ошо рәүешле А ура Мазда тән әм йән донъя ын барлыҡҡа килтерә. Бая әйткәндәр бары ы ла тән, йәғни уларҙы тотоп ҡарап була, уларҙың еҫе, ауырлығы бар, әммә йәне юҡ. Уларҙың эсенә инеүе ихтимал йәндәр Рәүеш кеүек йәшәгәндәр әм мәңге үлем еҙ булғандар. А ура Мазда ошо рәүештәрҙең үҙе я аған тәндәр эсенә ин ә генә Ахриманды еңә алырын белгән. Шуға күрә А ура Рәүешкә өндәшкән:

— Әйтегеҙ, еҙгә нимә уңайлы: тән эсенә инеп Дейеүгә әм Ахриманға ҡаршы тороумы, шул рәүешле Ахриманды еңгәс, мәңге-мәңге кинәнеп йәшәүме, әллә ғүмер-ғүмергә еҙ бер-берегеҙгә аҫылынып, берегеҙҙән айырыла алмайынса, туңып ҡалған тамсы ымаҡ ҡарауыл аҫтында тороумы? — тип ораған.

— Былар, әлбиттә, риза булған, — тип үҙ кыҫтырҙы Факи.

— Нимәгә риза булған? — Заратустраның тауышы фекерен бүлгәнгә ҡәнәғәт еҙ сыҡты.

— Тәнгә йән булып инергә. — Факи тегенең риза ыҙлығын бик үк тойоп та бөтмәне.

— Юҡ шул. “Инәбеҙ, — тигән улар, — тәнгә. Тик ваҡыты еткәс, унан сығып, мәңгелеккә теге донъяға кире ҡайта әм Ахриман менән бүтәнсә дошманлашмаҫ бул алар ғына.”

— Ярар, — тигән А ура, күнгән. Тегеләр ҙә ризалашҡан әм Мазда я аған алты ҡөҙрәттең эсенә инеп йәнле итергә, әммә Ахриман өжүм иткәндә уға ҡаршы көрәшергә, кәрәк икән, уның ҡулынан әләк булырға, әммә ҡиәмәт көнө еткәс, яңынан күккә осоп, ҡанатланып, Ахриманды еңергә үҙ ҡуйышҡандар.

— Рәхмәт, Заратустра, — тине Факи. — инең үҙҙәрең беҙҙең тикшереүҙәрҙең дөрөҫ юлда икәнлеген раҫлай.

— Әйткәнеңә рәхмәт, Факи. Был турала иркенләберәк өйләшербеҙ әле.

Заратустра өйләгәндәр Факиға сик еҙ ҡыҙыҡ ине. Әммә әңгәмәсе енең әлмәк кенә бер тауыш менән өйләүе төндө керпек ҡаҡмай сыҡҡан кешенең күҙ ҡабаҡтарын ауырайта башланы. Иғтибар итте быға Заратустра әм Факиҙы еңелсә генә ҡултыҡлап алды. Теге тертләгәндәй итте, Заратустраға ҡарап йылмайҙы.

— Арыған ың. Ял ит.

Факи өйгә инеп киткәс, Заратустра йәнә көнсығышҡа ҡарап, башын сөйөп шыбырҙап тиерлек өндәште:

— Бөйөк А ура, әйт миңә: ғалим үҙе аслан үҙ бул а, кемде яҡлаусым итер ең? Ялғанды берәр е өйлә ә, кем инең изге утынды үндермәй аҡлар, шул күр әтерме миңә дошманды? Ғалимлыҡтан алған ғилем нығыт ын ине иңә ышанысты, изге Мазда!

Башҡорт тура ында орашырға уйлағайны ла а Заратустра Факиҙан. Йы ан хәстәре Ер өҫтөндәге сүп кеүек кенә йомошто онотторған шул. Кешенең ғүмере буйына уҙылырҙай ҙур эше була әм уның ғүмере мәлдәрҙән көндәргә, көндәрҙән йылдарға тула барған ваҡ мәшәкәттәрҙән тора. Күпселек кеше, бәләкәй эшкә әүрәп, оло она тотоноуҙы кисектерә бара, кисектерә тора, өҙөмтәлә яйлап ҙур йөкләмәне оноталар, ваҡ-төйәк менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалалар. Мәлдән-мәлгә, йылдан-йылға үҙен бөйөк маҡсатҡа буй ондороп йәшәүселәр бик ирәк. Ҡалғандар уларға оҡланып ҡарай, уларҙы Хоҙайҙың ҡашҡа ы тип уйлай. Ғәмәлдә әр кем дә ҡашҡа күренгәндәр менән бер үк мөмкинлеккә эйә. Тик уны файҙалана ғына алмаған булып сығалар.

Үҙен ҙур эшкә бағышлай алыусылар, кире енсә, бәләкәй мәшәкәттәргә яраҡлашмай. Ваҡ-төйәкте бик йыш оноталар. Хәтерендә тотҡан сүрәттә лә шул эшкә ҡулы килешмәй, тейешенсә башҡара белмәй бер була. Шуларҙың бере е Заратустра ниәт иткән йомошон орарға онотҡайны. Иҫенә төшөргәс, Факи артынан атларға ынтылғайны ла, әммә кире ҡайтты. Төнө буйы эшләгән кешене тағы ла мәшәкәтләге е килмәне. Факи төнө буйы йондоҙҙар, Ай күҙәтеп кенә ҡалманы бит. Күп йылдар буйы яҙа килгән ынауҙарын, күҙәтеүҙәрен йәнә бер барланы әм бая Заратустраға әйткән ығымтаны я аны. Ерҙең әм бүтән планеталарҙың Ра—Ҡояш тирәләй әйләнеүе хаҡындағы асышты бөгөн генә я ағайны. Заратустраға был хаҡта әйтеп торманы. Бары ығымта ын ғына өйләне. Факи, асышым ни эшләп Заратустраға рәтле тәьҫир я ай алманы, тип аптыраны. Дин юлынан йөрөүсе кеше минең үҙгә ҡырҡа ҡаршы булыр. Мине А ураға ҡаршы сығыуҙа, Ахриманға хеҙмәт итеүҙә ғәйепләр, тип көткәйне. Заратустра и ә ғалим менән еңел генә килеште лә ҡуйҙы. Сөнки Заратустра был турала электән белә ине. Ҡай-

ҙан? Уны ын ул үҙе лә аңлата алмаҫ. Бая үҙе Факиға өйләгәндәрҙе ул әллә инде А -ура Мазданан ишетте, әллә инде Изге Хоҙай янына Ете ҡат күккә ашҡанда барыын да үҙ күҙҙәре менән күрҙеме? Тоноҡ ҡына нур сәсеп торған Ер планета ы тирәләй әйләнеп йөрөгән борсаҡ дәүмәлендәй генә Айға оҙаҡ итеп ҡарап торғайны ымаҡ. Йы ан өс ҡат: аҫта — ҡараңғы Ахриман донъя ы, уртала — яҡтылыҡҡа күмелгән А ура биләмә е, өҫтә — Ете ҡат күк. Быны ына ла А ура хужа. Ахриман өс мең йыл иҫ еҙ ятҡанда аҫкы донъя шул көйө, үҙгәреш еҙ булды. Урта донъяла ла көн итеү айырыуса үҙгәреш еҙ генә барҙы. Күбе енсә изгелек ҡылынды, башынан аяғына ҡәҙәр тоноҡҡа батҡан бәндә булмай торғайны. Әммә өс мең йыл уҙыу менән Ахриман яңынан иҫенә килде әм А ура Маздаға ҡаршы этлеген ҡыла башланы. Ул элеккесә аҡ ыҙ ҡыланмай хәҙер. А ураға асыҡтан-асыҡ ташлан аң, йәнә еңгәҙәтә уғырын, иң көслө ғибәҙәтен әйтерен белә. Шуға хәҙер Ахриман хәйлә менән алдырырға булды. Ҡара эшкә кешеләрҙе ҡушырға ниәтләнде. Бере ен икенсе енә өскөртөп, көнсөллөк, күрә алмау кеүек тойғоларҙы ҡуйыртып, әҙәмдәрҙе үҙ-ара уғыштыр а, уларҙы А ураға буй ондороуҙан баш тарттырып, үҙ яғына ауҙар а, яйлап Мазданы еңеренә өмөт тота. Кешеләр ара ында дошманлашыу ни тиклем көсәй ә, Ахриманға шул тиклем яҡшы...

11

Заратустра менән Факиға ниәт иткән әңгәмәне тиҙ генә дауам итергә насип булманы. Ҡояш арҡалыҡ буйы сама ы күтәрелгәс, ғалимдар ауылы аша ҡойон кеүек осоп ыбайлы үтте. Кейеменә ҡарап, башҡорт икәнен танынылар. Эйәрҙәге кеше ауыл урта ында атын саҡ ҡына туҡтатты ла өрәнләне:

— Ҡорттар, башҡорттар! Хәҙер үк яуға! Тәғәйен урындарығыҙға йыйналырға! Малбағарҙар, ташсылар, мәғдәнселәр! Яуға әҙер булырға! еҙгә айырым фарман буласаҡ.

ыбайлы өрәнен өс ҡат ҡабатланы, янына кешеләр йыйыла башлағас:

— Тыңлағыҙ, кем ишетмәгән — шуға еткерегеҙ. Белмәнем, ишетмәнем, тиеүсе булма ын. Хан әмере! — тине лә баяғыны ҡабатланы әм атының бөйөрөнә тибеп тегене ен үрәпсетте лә артабан сапты. Ирек еҙҙән йыйылып киткән кешеләр ишеткәндәрен уйлап бер аҙ шым торҙо, шунан бере е икенсе енән белеште:

— Хан әмере, тинеме?

— Эйе.

— Тимәк, бөтәбеҙгә лә ҡағыла.

— Эйе, 16- ы тулған әр ир-атҡа ҡағыла. — Быны ын Факи әйтте. Уянып сығып өлгөргәйне. — Ғалимдарҙы яуға саҡырыр бул алар, айырым фарман килер. Шуға әлегә элеккесә эште дауам итәбеҙ.

— Ә миңә ни эшләргә? — Заратустра аптырап ораны.

— иңәме? Ауыр ынам әйтергә. ин ғалимдар ара ындағы исемлектә юҡ. Әммә белемең ғалимдарҙыҡынан кәм түгел.

— Шул уҡ ваҡытта малбағар ҙа түгел. — Заратустра Факиға оҡшатып дауам итте. — Мал бағыу эшенән ситләшкәнемә йылдан ашыу инде.

— Эштән ситләшеү малбағарҙар исемлегенән ыҙыуҙы аңлатмай.

— Тик минең бер генә төрлө лә ҡоралым юҡ бит әле. Тупланмаға әр кем үҙ ҡоралы, ризығы, кейеме менән йыйыла түгелме уң?

— Тап шулай. Әлбиттә, инең өсөн өңгө, ҡалҡан, хәнйәр табырбыҙ беҙ. Әммә яуҙа үлтерәләр бит. Үлтереп ҡуй алар үҙеңде?

— Иңгә төшкән бурысты ла үтәмәйенсә хәл юҡ.

— Мәйелең.

Факи үҙ өйөнә алып ҡайтты Заратустраны, уға яраҡлы ҡорал айлап алдылар,

кейем яраттылар. Шуларҙың бары ы ла тамам булғас, киске аш мәле етеп килгәндә, Факи Заратустра менән Лиәне үҙенең ике яғына ултыртты.

— Заратустра, — тип үҙ башланы ул. — Күреп торам, был ҡыҙ инеке булырға теләй, ин дә уға битараф түгел ең. Хәҙер ин уғышҡа китергә тора ың, ни эшләп берегеҙ – ир, икенсегеҙ унық ҡатыны булып айырылмаҫҡа? уғыш хәлен кем белә. Бәлки, вариҫың ҡалыр. Борон-борондан беҙҙең халыҡ яуға китер алдынан ҡауышыу төнө уҙғарған...

Шуны ишетеү менән Заратустра икереп торҙо, күҙҙәренең ағы әйләнеп алды.

— Юҡты өйләп ултырма! — тип асыуланды ул Факиға. — Миңә А ура Мазда ҡатындар менән яҡынлыҡты тыйҙы.

— Булмаҫ, яңылыш аңлаған ыңдыр Хоҙайҙы. — Факи ҙа бирешергә теләмәне. — А ураның былай әйтергә урыны юҡ. Сөнки А ураның ир менән ҡатындың ҡауышыуын хуплағанын күптән беләбеҙ. Хәтерлә әле. Тәүкешене А ура үҙе бит бар иткән. Ғәүрәт кеше ынлы булма а ла, ул үлгәс, башынан – ҡурғаш, ҡанынан — цинк, арҡа менән өйәк мейе енән — терегөмөш, аяғынан — тимер, өйәктәренән — баҡыр, майынан — гәлсәр, ҡулдарынан — ҡорос, күңеленән алтын я алған. Ә уның орлоғо Ра — Ҡояштың нурҙарында таҙарынып, ике өлөшө А ураның яҡынына бирелгән, ә бере е — тупраҡҡа төшкән. Шунан бит барлыҡ кешенең дә ата- ы менән әсә е Мәғиш менән Мәғишә (ҡай ы берәүҙәр уларҙы Йәнбирҙе менән Йәнбикә ти) ирәүән рәүешендә ерҙән үҫә. Берәр генә абаҡлы, ун бишәр үҫентеле, ҡулдары ҡолаҡтарына ҡуша ҡапланған була. Йәндәре тәнгә инмәйенсә баш өҫтәрендә осоп йөрөй. Шунан А ура Мазда уларға: “ еҙ — кеше, донъяның ата ы менән әсә е. Үҙ донъяғыҙҙы үҙегеҙ көтөгөҙ. Бар эшегеҙ ҙә үҙ-ара килешеп, бер тәртиптә, ризалыҡ менән әм аҡыллы итеп башҡарыл ын. Уйығыҙ ҙа, ҡылғанығыҙ ҙа тик изгелек бул ын. Дейеүҙәргә табына ы булмағыҙ”, — тигән. Хоҙайыбыҙҙың “Изге уй, изге үҙ, изге эш” тигән талабы әле лә иң мө име түгелме уң? Әллә мин яңылышаммы?

— Юҡ, яңылышмай ың, — тине Заратустра шыбырҙап тиерлек, әммә бүтәнсә өндәшмәне, Факиҙың әңгәмә енә ҡушылманы.

Төн етте, әр кем үҙ урынына китте. Факи ҡорамға табан атланы, Заратустра менән Лиә – үҙ түшәктәренә. Әммә бер аҙҙан Лиә Заратустра янына килде. Егетте ҡыҫып ҡосаҡланы ла, эҫе тыны менән ура- ура:

— Ғалимдың үҙе раҫ бит, — тине.

Заратустраны был айнытып ебәрҙе:

— Кит бынан, — тине талапсан, ҡаты итеп. — Факиҙың хаҡлығын тикшерергә тейешмен әле.

Төндә нәжәғәй уйнаны, Ер менән Күк нур аша тоташты. Шул мәлдә Заратустраның уйы А ура Маздаға барып етте. Ете ҡат күк аръяғынан Заратустраға яуап килде.

— Мин иңә ир менән ҡатын ара ындағы мөнәсәбәттәрҙе тыйманым. Ҡатындарҙы мин еҙгә ирҙәрҙең орлоғон үҙендә йөрөтә торған ауыт рәүешендә бирҙем. Шул ауытта орлоҡ бүртергә әм кеше ҡиәфәтенә инеп үҫергә тейеш. Шунан уң ғына мин уға йән ебәрәм. әр кемдең яҙмышы йәнгә яҙылған була. Тән йәнде йөрөтә генә. Мин иңә, уйҙарыңды ҡатының менән бүлешмә, тинем, орлоғоңдо түгел. ин – минең Ерҙәге илсем, орлоғоңдо сәс. Әммә белеп тор: илселек нәҫелгә күсмәй.

Заратустра Факиға Хоҙай менән өйләшеүе хаҡында әйтте.

— Бөгөн үк сәсегеҙҙе сәскә бәйләр кәрәк. Иртәгә уң булыр. Сөнки иртәгә ҡорттар менән башҡорттар Тораға табан китеп бөтәсәк. Уларҙың артынан бүтәндәр ҡуҙғалырға тейеш. Албашҡорт еҙҙең менән уғыш уйыны ла үткәрергә иҫәп тота,

ти. Шундай фарман килде.

— Изгелеккә генә юрайыҡ.

— Эйе, аҙағы изге бул ын.

Факи Тайран менән унының ҡатыны Заратустра менән Лиәнең атай-әсә е урынын алды. Яҡындағы бейек ҡарағай төбөнә хуш еҫле үлән йәйҙеләр, таҙа түшәк-юрғандан урын алдылар, унның ян-яғын сәскәләр менән биҙәнеләр. Ҡояш батырҙан элек Факи шишмәнән ыу килтерҙе лә, баҡыр ауытҡа ҡойоп, тәүҙә Заратустраға, шунан Лиәгә бирҙе.

— Изге ыуҙан тәнегеҙгә изгелек, йәнегеҙгә изге уй кил ен.

Факиҙың ҡатыны Лиәгә ап-аҡ таҫтамал тотторҙо.

— Ал ыу Рабыҙҙың алтын нурында сафланған Заратустраның орлоғо, ул инең таҫтамалдай аҡ ауытыңа ят ын. Икәүләп тән бирегеҙ А ура ебәрәсәк йәнгә. Изге хистән изге кеше ярал ын.

Заратустра менән Лиә икәү генә ҡалды. Нисәмә йылдар буйы бер-бере енә терәлешеп ултырған, ятҡан саҡтары булды, әммә шунан ары китмәнеләр. Бына улар ҡауышты, әм йөрәктәре ҡуш типкән, тәндәре айырылғы ыҙ береккән кеүек булды. Әйтер ең дә, тыумыштан улар бергә, әйтер ең, айырылыу уларға янамай.

Әммә Заратустра үҙен тыйырлыҡ көс таба алды.

— Әлегә етәр, Лиә, — тине ул. — Юҡ а, ләззәт урынына ялған, теләк урынына алдаҡ килә башлар. Үҙеңде үҙең тыйыу — А ураға игелек, Ахриманға ауырлыҡ ул. Тоғро ҡалайыҡ шуға.

Килешмәне Лиә, хәҙер булма а, икенсе мәлдә оҙаҡҡа айырылышырға торалар, ә ул тыйылыу талап итә. Әммә күнде иренең ҡушҡанына. Ирҙең үҙе үҙ, тип өйрәттеләр уларҙы борондан. Ҡауышыуҙың беренсе кисендә үк баш бирмәй маташыу – йоланы боҙоу әм үҙеңде мәңге ир еҙлеккә дусар итеү бит.

Заратустраны яуға әҙерләп бөттөләр. Бөттөләр тип, нимә ен генә әҙерләй ең инде. Үҙен сафландырҙылар. Был юлы ыйыр ейҙеге түгел, ә туҙан тотондо Лиә. Ошо маҡсатта ҡара тупраҡты киптереп ҡыйыҡ аҫтына йәйәләр, бында ваҡыт-ваҡыты менән ваҡлап йәнә киптерәләр әм кәҫ-ҡоҫо, суғыртмаҡ таш-тошо бөткәнсе өҙәләр. Бармаҡ ара ынан үткәр әң, ҡом кеүек ҡойола тупраҡ саңы. Ана шуны алып Лиә ирен баштан-аяҡ туҙанланы, шунан йылы ыу менән яҡшылап йыуҙы. Тәненән хуш еҫ килеп тор он өсөн туғайҙарҙа үҫер абын сәскә ен дә тотондо. Заратустраның тәне шып-шыма, ал ыу булып китте. Үҙенең аяҡ-ҡулын күҙҙән үткәреп, Заратустра:

— А ура Хоҙайыбыҙ яратҡан төҫкә индем, — тине, йылмайып.

— Ҡайҙан беләең?

— Ҡояштың, ут ялҡынының да төҫө шулай бит. Кеше тәне йыуынғас ҡына түгел, бүтән саҡта ла ал ыу, тик сафланғас, ул тағы ла сағыуыраҡ төҫкә инә.

— Ә минең инең тәнеңде туҡтау ыҙ ыйпағым, яратҡым, ирендәремде терәгем килә. А ура Мазданан ора әле, ир менән ҡатындың бер-бере енә тартылыуы Хоҙай ҡушҡанға ҡаршы киләме, әллә юҡмы икән?

— Мин иңә бөгөн генә әйттем бит. Күңелемде аҙҙырма аң, А ура хуп күрә, бик йыш яратыша башла аң, Ахриман бәрейҙәренең ҡотҡо она төшә ең, тип. Ир менән ҡатын яҡынлығы ергә бала килтереү өсөн генә кәрәк, шунан арт а, аҙғынлыҡ була.

Лиә ҡабат өндәшмәне. Иренең өҫ-башын йыуып киптерҙе, ямай торғанын яманы, юлға ҡаҡланған ит, ҡорот әҙерләне. Заратустра үҙе яу ҡоралдарын йүнәтте, өңгө менән ҡылысын үткерләне, ҡалҡан бауҙарын нығытты.

Ошо эштәр бөтөүгә ауылдан тағы бер нисә кеше яуға ҡуҙғалды. Уларға эйәрер өсөн Заратустра Факи, унның ҡатыны менән хушлашты ла, кәрәк-ярағын алып,

аҙыҡ тултырылған тоҡсайға үрелгәйне, Лиә алдан өлгөрҙө. Юлсылай кейенеп алған, ауыҙ-танауын яулыҡ осо менән ҡаплаған.

— Мин дә барам, — тине был.

— Ҡайҙа? — Заратустра аптыраны.

— Яуға. Ғәскәргә ярҙамлашыр өсөн... Ҡатын-ҡыҙҙың да яуға йөрөгәнен белмәй еңме әллә  ин?

Заратустра ҡатынын әрләп ташларға уйлағайны, өлгөрмәне. Факи:

— Мин үҙем дә шуны әйтмәксе инем. Тик тартынып торҙом. Бар ын Лиә. Ғәскәргә ашарға бешерер, табаҡ- ауытын йыуыр, кейем барлашыр. Тамағы туҡ бул а ғына ғәскәр көслө. Лиәнең әлегә  аҡлап тороr йорто, ҡарап үҫтерер бала ы юҡ. Ошондай саҡта ирең менән ҡуша йөрөүгә етәме ни? — тип ҡаршы өндәшә алмаҫлыҡ итеп ҡуйҙы.

Заратустра тағы бер ҡат ҡатынын күҙҙән үткәрҙе лә:

— Күпме юлдарҙы бергә үттек, артабан да ҡуша атлайыҡ  уң, — тине. Үҙенең дә күңеле күтәрелеп китте.

Берләм юлға төшөп, тупланмаға табан атланылар.

Урта менән өҫкө донъяға – А ура Мазда, аҫҡы ына  Ахриман хужа бул а, ер өҫтөндә кешеләрҙең яҙмышы хан ҡулына бирелгәйне. Тыныс саҡта илдәр, ҡалалар булып тупланып йәшәгән халыҡ, яу ҡуптыни ә, өс ҙур төркөмгә бүленә. Тәүгеендә — башҡорттар. Тыумыштан улар хәрби. Бала сағынан башлап ҡәбергә ингәнгә тиклем тик ғәскәри хеҙмәт кенә үтәй. Улар — әр саҡ хан янында, хандың беренсе ғәскәре.  өңгө, ҡылыс уйнатыу йә хәнйәр менән эш итеү, уҡ атыу йә йәҙрә ташлау, суҡмар менән  елтәү, ҡалҡан менән  аҡланыу — әммә ен дә уларға еткереп башҡарған кеше юҡ.  ыбай көйө ни нәмә генә эшләмәйҙәр! Сабып барған аттың бот ара ынан да, муйын аҫтынан да сыға, осоп барған ҡошто атып төшөрә, ерҙә ятҡан тәңкәне эйелеп ала. Аты ла үҙе кеүек булып бөтә, кешене ат та ымынан йә тауышынан төшөнә  әм  ис шик еҙ  әр ҡушҡанын үтәй. Башҡорт ғәскәре ун бергә, илле алтыға, йөҙ ҙә ун өскә  әм мең бер йөҙ утыҙ бергә бүленә. Ун башҡортҡа ун беренсе е хужа, илле бишенә – илле алтынсы ы, йөҙ ҙә ун икегә – йөҙ ҙә ун өсөнсө ө, мең дә бер йөҙ утыҙға мең дә бер йөҙ утыҙ беренсе е етәкселек итә.  андар ҡатмарлы булғанға күрә, әйтелеште еңел итер өсөн унға бер хужа, иллегә хужа, йөҙгә башлыҡ, мең алды тип йөрөтәләр. Шулай әйтеүенең сәбәбе ябай:  әр төркөмдөң етәксе е ғәскәренең алдында йөрөй, алдан бара. Шуға ал була инде. Бөтә ғәскәрҙе етәкләгән башҡортто Албашҡорт тиҙәр. Албашҡортҡа башҡорт ғәскәре генә түгел, яу мәлендә ҡорттар ҙа, бүтәндәр ҙә буй она. Албашҡорттан өҫтә хан ғына бар.

Тыныс тормошта башҡорттар үҙ ғаиләләре менән илдә, күберәге ҡалала йәшәй. Көн  айын хәрби хеҙмәтен үтәй улар, ә йоҡларға өйөнә ҡайталар. 20 йәштән алып 45-е тулғанса башҡорт шул рәүешле хәрби хеҙмәт бурысын атҡара. Көндәлек хеҙмәтенән тыш, йәй көндәре, ҡай ы бер йылда ҡышын да,  уғыш йыйындарына йөрөй. Йәғни  уғыш күнекмәләрен туҡтау ыҙ үткәреп кенә тора.

Ғаилә е яугирҙы ҡарай. Ҡатыны, 20 йәшкә тиклемге улдары, кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙары иген сәсә, ура, мал баға. Малдары аттан,  ыйырҙан,  арыҡ-кәзәнән тора. Йылҡы малы күберәген хәрби хеҙмәт менән йорт эше өсөн аҫырала. Башҡорттоң аты ла, ризығы ла, кейеме лә,  уғыш ҡоралы ла өйөнән килә. Өйөндә я ала алмағанын, мәҫәлән, ҡылыс, хәнйәр, уҡ,  өңгө башы кеүектәрҙе үҙ аҡса ына  атып йә аҙыҡ-түлеккә алмаштырып ала.

Башҡорт тик 20 йәше тулғас ҡына өйләнә. Хәрби хеҙмәткә йәше етеүе кәләш алырға ла хоҡуҡ бирә. Кәләште ул тик башҡорттар ара ынан ғына алырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта туғанлыҡ ебе ете быуындан кәм булма ын. Шуға башҡорттоң ға-

илә ендә ҡан боҙоҡлоғона юл ҡуйылмай, балалары ныҡ, матур булып тыуа әм үҫә. Башҡорттар кәүҙәгә оҙон, йөҙҙәре, сәстәре ырыуҙың бүтән кешеләренеке ымаҡ. әр ырыуҙың үҙ башҡорто, үҙ ҡорто әм бүтәне бар бит. Йолаларҙың үтәлешен, ҡандың таҙалығын тикшереп, күҙәтеп тороусы кешеләр бар. Диндең атҡарылыуы өсөн яуаплы рағандан тыш, әр илдәге баба яуап бирә йәмәғәт, Албашҡорт әм хан алдында. Бабалар бүтәндәр ара ында юҡ. Ҡорттар, малбағарҙар, тимерселәр, баҡырсылар өсөн ҡанбаба ҡуйылмай. Ә дин кешеләре күп булмағанлыҡтан, был бурысты Рабаға үҙе башҡара.

Ҡорттар и ә – шулай уҡ ғәскәри кешеләр. Тик, башҡорттарҙан айырмалы рәүештә, улар көн айын хәрби хеҙмәттә булмай. Ҡорттар – ҡасандыр ырыуҙарҙың бер өлөшөнән айырып алынған ҡатлам. Улар илдең сиген, илдәрҙең эсендә мал әм ҡорамдарҙы аҡлауға яуаплы. Был эшкә улар сиратлап бара. Ҡалған ваҡытын өйҙә торалар. Ҡорттоң ғаилә е ул сиккә йә илдең эсендә хәрби бурыс үтәргә киткәндә барлыҡ кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә. Башҡорттар атлы ғәскәр бул а, ҡорттар — йәйәүле. Ҡорттар башҡорттарҙан байтаҡҡа күп, әммә хәрби бүленеш бер үк. Шулай уҡ ун, илле, йөҙ әм мeңдәр. Ҡорттарҙың уғыш ҡоралы башҡортоҡонан айырыла: ыбайлыларҙа өңгө лә, ҡылыс менән хәнйәр ҙә, ҡалҡан да ҙурыраҡ әм ауырыраҡ. Улар менән эш итә белеү өсөн аяҡта ныҡ тороу менән ҡуша көслө беләк, ныҡ үҫешкән янбаш әм яурынбаш еңерҙәре кәрәк. Шуғалыр, моғайын, ҡорттар башҡорттан кәүҙәгә ҡайтыш, әммә йыуантыҡ, тегеләр йылғыр, ә былары әлмәгерәк.

Төҫ-баштары, башҡорт ымаҡ уҡ, ҡай ы ырыуға ҡарай — шуның төҫө-йөҙөндә. Ап-аҡ йөҙлө ө лә, ҡуңырты ла бар. Сәстәре ары йә көрән, ҡарағусҡыл ҡорттар ҙа осрай.

Ҡорттарға үҙ ғаилә ен булдырыу хоҡуғы тик 20 йәшкә еткәс кенә бирелә. Ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә булғылай. уғышҡа киткән ҡорт яуҙан ҡайта алма а, уның ҡатыны ҡәйнешенә була. Ә ҡәйнешкә 20 йәш тулып өлгөрмә ә, ир еҙ ҡалған ҡатын тегенең үҫеп еткәнен көтә. Ҡорто яуҙа ҡалып, ҡәйнеше 5-6-ла ғына бул а, ҡатынға ҡайғы инде. Бүтәнсә ир төҫөн күрә алмаҫҡа ла мөмкин.

“Ҡорт” тигән үҙ “ҡур”ҙан алынған. “Ҡур” и ә “ҡораллы кеше”не аңлата. “Ҡорт” тигәне күмәк “ҡур” йә и ә ғәскәр булыр. “Башҡорт” үҙенең нигеҙе шул уҡ: ҡур — ғәскәри кеше. Баш тигәне — яҡшы тиеүгә бәрәбәр. Башҡорт исеме – яҡшы ғәскәр инде. Албашҡорт — яҡшы ғәскәрҙең алдында барыусы, етәксе. Хәҙер ул – башҡортҡа ғына түгел, барлыҡ ҡортҡа ла ал кеше. Ә яу мәлендә уға бүтәндәр ҙә буй она.

Арыйҙар “бүтәндәр” тип хәрбиҙәрҙән, динселәрҙән тыш бары ын да әйтә. Малбағарҙар ҙа, игенселәр ҙә, тимерселәр менән баҡырсылар ҙа, мәғдәнселәр ҙә инә бында. Атамаларынан күренеп тороуынса, арыйҙар хеҙмәтте үҙ-ара бүлешеп бөткән. Ырыуҙа әммә е лә бар. Хәрбие лә, бүтәне лә. Ырыу үҙе әллә ҡасан өйләшеп килешелгән сик эсендә йәшәй. Илдең ере төрлөсә, сөнки ер бер төрлө генә түгел. Кемгәлер тауы күберәк, яланы аҙыраҡ, кемгәлер мул ыулы йылғалы ер тура килгән. Шул арҡылы ыҙғыштар булып алғылай. Әммә уның кеүек ығы-зығыны баҫтырырға хан, уға ғына буй онған Албашҡорт әм уның ҡулындағы даими ғәскәр бар.

Сит дошман ябырылырға ниәтлә ә йә арыйҙар ханы үҙе уғыш асырға бул а, башҡорттар, ҡорттар әм бүтәндәр — бары ы ла аҙаҡ тота, ҡылыс ала. Ғәйрәте бар ир-егет яу ыҙ-дан ыҙ ҡала алмай. Ғәскәр эшенә ярҙамға ҡай ы берҙә яңғыҙаҡ йә бала ыҙ ҡатындар ҙа саҡырыла. Яңғыҙаҡ тип ире үлеп ҡалған, ҡәйнеше бәлиғ булмаған йә бөтөнләй ҡәйнеш еҙ ҡатындарҙы әйтәләр. уғышҡа барып хәрби намыҫ башҡарып ҡайт а, дан, әлбиттә, яңғыҙ ҡатынға. Ә ҡайта алма а ... уғыш ул: керештән осҡан уҡ йә атылған йәҙрә ир менән ҡатынды айырып тормай.

Шуны уйлап, Лиә күңел елкенеүен баҫты. Еңел бул а, рәхәт бул а, уғыш тимәҫтәр ине уны... Ә әлегә бойороҡтар ҙа яңғырамай, уҡ-фәлән дә осмай. Тик урман уҡмағынан атлағанда сыбыҡ-сабыҡтан бит-күҙенде әм күгәүен-серәкәйҙән асыҡ тәненде аҡлар кәрәк. Шуларҙы ҡыуа-ҡыуа тәкәте ҡороғас, Лиә орай ы итте:

— Заратустра, әйт әле, ин бит бөтә ен дә беләең...

— Кеше бөтә ен дә белә алмай. А ура Мазда ғына белә. Ул бар донъянан хәбәрхәтерҙе үҙенә йыя әм кәрәгенсә ен кире ҡайтара тора, — Заратустра, ҡатындың үҙен бүлеп, үҙенекен өйләне. — Шулай ҙа әйт: нимә орар иткәйнең?

— А ура Мазда Ер өҫтөндәге бөтә үҫентеләрҙе әм тереклекте бар иткән. Барлыҡ йән эйәләре үҙҙәренә әм бүтәндәргә изгелек ҡыл ын, тигән. Ә ни эшләп ул бынау теңкә ҡороҡкос серәкәй, себен, күгәүендәрҙе лә яралтҡан уң? Улар бит бүтән йән эйәләренең ҡанын эсә, йәненә уктала. Был бит этлек кенә ҡылыу бүтәндәргә. Ахриманға хеҙмәт итәлер ул ҡороғорҙар.

— Ҡороғор тип дөрөҫ әйттең. Ул ҡанэскестәр ҡороп бөт ә, үлән, сәскә уты менән генә аҙыҡланған бөжәктәр ҡалыр ине. Элегерәк, А ура Мазда бар иткән саҡта, улар бары ы ла тик ут менән генә туйынған әм сәскәләрҙе еркәләндереп тә киткән. Бер мәл урман аҡланында ҙур ҡара йылан рәүешенә ингән Ахриман бәрейе серәкәйгә әйтә:

— Бар, кешенең тәнен осло томшоғоң менән генә тиш тә яңағыңа уның ҡанын тултырып алып кил. Мин инә шуның өсөн бик күп утлы сәскә бүләк итәм.

Серәкәй киткән кешене эҙләп. Йылан ята икән быны көтөп. Шул саҡта күктә осоп йөрөгән ҡарағош йыланды шәйләп ҡалған. Шыҡыйған әм тибеп тә алған. Яңағына ҡан тултырған серәкәй осоп кил ә, ут вәғәҙә иткән йылан юҡ, ти. Шунан бирле серәкәй йөрөй, ти, безелдәп осоп йыланды эҙләп. Таба алмағас, ҡанды йота ла, ут вәғәҙә ен иҫенә төшөрөп, кешене йә ҡыҙыл ҡанлы бүтән йән эйә ен табырға тип артабан оса. Сөнки ҡанды татлы утҡа алмаштырырға теләй.

Ҡан эсеүселәр бөтөнләй ҡоро а йә ҡан урынына берәү ут бир ә, бимазаламаҫ ине улар беҙҙе. Ә әлегә ҡара йыландың хужа ы Ахриманға себен-серәкәй, күгәүен кеүек бөжәктәр ирек еҙҙән хеҙмәт итә...

Лиә иренең шул тиклем күп белеүенә әм уны тасуири өйләй алыуына оҡланып ҡуйҙы.

## 12

Кискә табан тәғәйен урынға барып еттеләр. Кеше күп ине, бөтә е лә тиерлек Заратустра ымаҡ ҡоралды. Араларында Лиә кеүектәре лә күренә. Былары — уғышсыларға ярҙам итеүселәр. Заратустра бүтән юлдаштары менән бергә йәтеш кенә урын айлап алды ла ут яғыр өсөн ҡоро- ары ағас йыйҙы, ялҡынды үрелдереп ебәрер өсөн кипкән үлән әҙерләне. Уның мәшәкәттәрен ипле генә күҙәткән Лиә, иренең маҡсатына төшөнгәс, баҡырсаны алды ла ыу эҙләп китте.

— Бөйөк А ура Мазда! инең мәрхәмәтең менән ҡабынған ут эйә енән осҡон алырға рөхсәт ит. Бәләкәй генә осҡон яҡты әм эҫе ут булып дөрлә ен. Мин — Заратустра, ҡатыным Лиә, юлдаштарым, рәхмәт әйтә-әйтә, хәрәкәт нигеҙе — аҙыҡ бешербеҙ унда. Утты беҙ тик ризыҡ әҙерләр өсөн генә тотонабыҙ, беҙ файҙаланған уттан бер генә йән эйә енә лә зыян булмаҫ!

Заратустра күктәге Хоҙайға өндәште. Уның А ураға мөрәжәғәтен яҡынтирәләге бүтәндәр хәрәкәт еҙ ҡалып тыңланы әм артабан ни эшләрен, ҡай ылайтып ут сығарырын көттө. Арыйҙар утты тормоштарында күп файҙалана. Тик уны аҡлау ғына ҡыйыныраҡ. Ҡалала, ауылда әр саҡ мейестә ут тоторға тырышалар. Усаҡта ут үнеп ҡуй а, ут аҡлағыстан барып алалар. Ут аҡлағыс тип ауылға — бер, ҡалала күберәк урында әр саҡ үндермәй яғылып торған мейесте әйтәләр. Унда

махсус кешеләр эшләй әм улар утсы тип атала, ауылдың, ҡаланың иң хөрмәтле кешеләренән анала. Ғәҙәттә, улар бер йәки ике ғаиләнән тора. Бөйөк А ураның осҡонон үндермәй аҡлаусы бит утсылар.

Заратустра күптән инде баҡырсанан ут ауыты я атып алғайны. Эсе ҡыуыш оҙонса түңәрәк ауыт, аҫты көплө, өҫтө ҡапҡаслы. Аҫтында бер нисә урындан тишек уйылған. ауыттың урта тирә ендә эстән рәшәткә ҡуйылған. Заратустра сым рәшәткә өҫтөнә ағас күмере, иң өҫкә бер нисә ҡуҙ күҙе ҡуя. Ҡуҙ яй ғына төтәй, күмерҙең бере е янып бөттөни ә, икенсе енә күсә. Ошо рәүешле юлда йөрөтә утты Заратустра.

Бүтән төрлө лә табалар утты арыйҙар. Ҡоро ағасты икенсе енә ышҡып-ышҡып осҡон сәсрәтеп була. Әммә быны ы мәшәҡәтле әм оҙаҡ.

Яуға сыҡҡан байтаҡ кеше, Заратустраның А ураға ғибәҙәтен тыңлағас, ут дөрләтеүен көттө. Бына ул утлығын аҡ ҡына асты ла көйрәп ятҡан бер генә ҡуҙ алды. Ике бармағы менән тотоп ҡуҙҙы ҡоро үлән ара ына алды әм саҡ ҡына көтөп торҙо. Ут яңы урынға өйрәнергә тейеш... Ҡуҙ беленер-беленмәҫ кенә төтөн борлатҡас, Заратустра әкрен генә тын өрҙө. Ҡуҙҙан осҡан осҡон ҡоро үләнгә төштө әм уны көйрәтә башланы. Тағы ла бер-ике өрөүҙән кипкән абаҡка ялҡын үрмәләне, ул көсәйә бара ағас тап-тобона күсте. Күп тә үтмәҫтән, ут сыбыҡ-сабыҡты сытырлатып ялманы.

Шуны көткән кешеләр көлөп-йылмайып ебәрҙе.

— А ура беҙгә ут бирҙе! Рәхмәт иңә, Мазда! — тип ҡысҡырыштылар.

Шул мәлдән башлап Заратустра иғтибар үҙәгенә күсте. Уны ут аҡлаусы итеп, хатта унан да юғарыраҡ ҡуйып хөрмәтләй башланылар. Ауылда йә ҡалала мейестә ут тотоу — бер эш, ә уны юлда үндермәй аҫырау — бөтөнләй башҡа. Шуға тәғәм йыйғанда ла, йоҡларға ятҡанда ла урындың яҡшы ын, ризыҡтың татлы ын уға бирергә ынтылдылар. Заратустра хөрмәтте кире ҡаҡмай. онолған ҡулдан икмәк, ҡорот алды, сәй эсте. Әммә үҙе лә әр кешегә ололоҡлап өндәште. Заратустраға яҡшы ҡараш уның ярҙамсы ы Лиәгә лә күсте. Яугирҙар юлда уның ауыт- аба ын, төйөнсөктәрен күтәреште, аш бешергәндә лә ярҙамлашты.

— Сираттағы тупланмала оҙаҡ тормаясаҡбыҙ, — тине ун башлығы. — Әммә бер нисә көн үтер. Башҡа илдәрҙең килеп еткәнен көтәбеҙ. Уғаса уғыш алымдарына өйрәнә торорбоҙ.

уғыш уйыны нигеҙҙә ҡылыс әм хәнйәр менән алыш, ҡалҡанды ҡуя белеү ине. Был алымдарға малбағарҙарҙы, тимерселәр менән баҡырсыларҙы, әлбиттә, быға са рәтләп өйрәтеүсе булмағайны. Өйҙә улар йоҡонан тыш ваҡытта — эштә. Хәнйәр менән ҡылыс бер мөйөштә элеүле тора, уға ҡағылыусы ла юҡ. Бала саҡта ағастан ҡорал я ап шаҡ та шоҡ алышҡан була торғайнылар, шунан тыш уғыш уйынын күргәндәре булманы. Бер уйла аң, был яҡшы. Сөнки махсус өйрәтелмәгән кешеләрҙе уғышҡа йөрөтмәгәс, арыйҙар тыныслыҡта көн иткән тигән үҙ. Ҙур яуға бөтә ырыуҙар менән ҡуша улар тәүгә күтәрелә. уңғы ы бул ын ине лә бит.

Ҡылыс яуына өйрәтеүсе ун башы Заратустра менән сафта уның янында тороусыны саҡырҙы. Тәүҙә ҡоралды нисек тоторға, шунан ҡай ылайтып елтәргә әм ҡаҙарға өйрәтте.

— Әйҙәгеҙ, хәҙер үҙ-ара алышығыҙ.

Заратустра аптыраны:

— Үҙ-ара? Бер-беребеҙҙе йәрәхәтләп ҡуй аҡ, уйынсыҡ ҡылыс түгел бит...

— Уйынсыҡ менән кем уйнамай? Ә еҙ ысыны менән уйнап өйрәнегеҙ. Йәрәхәтләнмәйем ти әң, аҡлана ың инде, ҡалҡан ҡулыңда бит.

Шаҡ та шоҡ, сарт та сорт. Ҡылыс ҡалҡанға уғыл а, шаҡ итеп ҡала, ҡылысҡа ҡылыс сатрашлан а, сыртлай. Тәүҙә алышсылар килбәт еҙ генә ҡуҙғал алар ҙа, то-

ра-бара хәрәкәттәре йылдамлана төштө. Бер аҙҙан Заратустраның уҙаҡсы ы ҡыҙ-ҙы ла китте. Ысын уғыштағы кеүек, Заратустраны сәнсергә уктала, үҙе туҡтау - ыҙ:

— Дейеү-дейеү! Кил! Дейеү, миңә ярҙам ит! — тип амаҡлай.

Заратустра тегенең хәлен аңланы. Кисәге малбағар, күрә ең, йәшен арба ында йөрөгән уғыш дейеүен үҙенә саҡыра. Дейеүҙе иш итергә, шуның ҡулы менән Заратустраны бөтөрөргә йыйына был иҫәүән.

Заратустра йән көсөнә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Етте! Туҡта! Кешенең Хоҙайы дейеү түгел, ә А ура Мазда!

Әммә алышсы быны ишетмәне, ҡыҙғандан- ҡыҙҙы. Аптырағас, Заратустра бар хәлен йыйҙы ла, өйөрөлөп килеп, тегенең ҡабырға ына хәнйәрҙең үтмәҫ ҡыры менән укты. Теге түҙмәй аҡырып ебәрҙе. Заратустра шул ыңғайҙан уҙаҡсы ына ҡалҡан менән тондорҙо. Алышсы йығылды. Заратустра бар ҡоралын ырғытты ла ағас төбөнә барып ултырҙы. Быларҙы күҙәтеп торған ун башлығы йүгереп килде:

— Ниңә ин ҡорал ташланың? Үлем менәсәк өҫтөңә.

— Миңә түгел, кем дейеүҙе саҡыра, шуға килә үлем.

— уғыш дейеүе беҙгә еңеү бирәсәк.

— Белмәй ең, дейеү еңеү килтермәй. Дейеү — ул Ахриман ялсы ы. Еңеү тип алдап, бары ына ла үлем сәсә дейеү. Туҡтатығыҙ был Ахриман туйын.

— Ни өйләй ең ин? Ғүмер-ғүмере беҙҙе уғышта дейеү яҡланы. Ә ин уны дошман атап, яугирҙарҙы ҡурҡытырға йөрөй өң! Тор! Ал ҡылысыңды, баҫ алышҡа!

Ун башлығы, ҡылыс менән елтәнеп, Заратустраның өҫтөнә йомолдо. Ни эшлә ен теге, икереп тороп, ерҙән ҡылыс, ҡалҡанын эләктерә алды. Әммә бер-ике уғыуҙа уҡ ун башлығы уны уҙып алды.

— Быҙа ошо була ул дейеү килтерәсәк еңеү! Ҡабаттан теленде ҡыҫҡарт, ҡулыңды оҙонайт. Оҙағыраҡ йәшәр ең.

Өндәшмәне ун башлығына ҡабат Заратустра, ҡушҡанды үтәп йөрөнө. Әммә ул тегенең менән ризалашмағайны. Кис, уйындар тамамланып, тамаҡ ялғап алғас, түңәрәккә теҙелгән, үҙ-ара нимәлер өйләп көлөшкән яугирҙарга әйтте:

— Яңылыша ул.

— Кем яңылыша?

— Ун башлығын әйтәм. Дейеү беҙгә еңеү килтерә, ти. Яңылыша. Беҙҙе ул яҡламай.

— Ә кем яҡлай?

— Беҙҙе А ура Мазда яҡлай.

— Нисек итеп? уғыш хоҙайы дейеү бит!

— Хоҙай берәү — ул А ура ғына. Ҡалғандар, изгелек телә әләр, уның ярҙамсы ы була. Изгелек итмәгәндәре Ахриманға ярҙамлаша.

— өйләмә юҡты. А ура кешенең ваҡ-төйәгенә ҡыҫылып йөрөмәҫ. Ул – бөйөк Хоҙай. Бөйөктәрҙең эше лә бейек. Кешенең ығы-зығы ын белмәй ул.

— А ура Мазда бик ҙур, ул бик бөйөк. Ул бөтә ен дә күрә әм белә.

— Ә ин быны ҡайҙан белә ең.

— Миңә А ура үҙе әйтте.

Заратустра менән тел сарлаған яугир ырғып торҙо.

— Мин ине арыу ғына кеше тип йөрө әм, ин тегеләй еңме ни?..

Уның артынан бүтәндәр ҙә тороп ситкә атланы.

— А ураның үҙе менән өйләшкән, имеш, берәү. А ураның әңгәмәсе е хан йә рабаған була ул, ҡылысҡа көсө етмәгән буш боғаҙ түгел.

Заратустранан бөтә е лә ситләште. Ут йөрөтөүсе тип эргә енән китешмәгән кешеләр бүтән усаҡ тирә енә күсте, ул йәнә Лиә менән икәүҙән- икәү генә ҡалды.

Бик күп кеше йыйыласаҡ ошо тупланмаға ашҡынып килгәйне бит ул. Буласаҡ яугирҙәр менән өйләшермен, уғыштың зыянын аңлатырмын, бүтәндәргә яу сабырға тигән теләктәренән дүндерермен, тип өмөтләнгәйне. А ура Мазда миңә әр саҡ көс, ә бүтәндәр ышаныс бирер, тип уйлағайны. Факи Тайран янынан ашығып китеп барыуының сәбәбе лә шул ине. Кешеләр күберәк ергә барам. А ураның бер-ҙән-бер әм Бөйөк Хоҙай икәнлеген, тик ул ғына кешеләргә тыныслыҡ, дуҫлыҡ, хөрриәт килтерә алыуын аңлатырмын тигәйне. Бушҡа ниәтләнгән булып сығамы инде?

Заратустра төнө буйы йоҡлай алманы. Уға ыйынып ҡына ятҡан Лиә лә йыш-йыш тертләп уянды. “Ҡайҙа ғына бар ам да, кем менән генә өйләш әм дә, мине берәү ҙә аңламай, — тип үртәлде Заратустра. — Тик Факи Тайран ғына төшөнгән кеүек, әллә төшөнгән ҡиәфәт кенә я аны шикелле. А ура тура ында төпсөп орашманы бит. Ярай әле, Лиә бар... — Шулай уйланды Заратустра. — Лиә аңлағанды бүтәндәр ҙә башына еңдерә аласаҡ. Моғайын, миңә Албашҡорт менән күрешергә кәрәктер. Ул ярҙам итмәҫме икән кешеләргә Бөйөк Хоҙай асылына инанырға?”

13

Яу хеҙмәтенең тәртибе ҡаты. Хеҙмәткә килеп эләккән ең икән, үҙ белдеген менән бер ни ҙә эшләй алмай ың. Әгәр тәртип боҙ аң, тәүҙә ун таяҡ уғалар, икенсегә ҡабатлан а – илле, тағы бул а — үлтергәнсе.

Был турала тупланмаға аяҡ баҫҡаны бирле тылҡып ҡына торалар. Шуға күрә Заратустра Албашҡорт янына барырға ун башынан рөхсәт ораны. Теге көлдө генә:

— Албашҡорттоң ине тыңлауҙан башҡа эше юҡ, ти...

— Ул миңә үҙе барырға ҡушҡан.

— Тағы ла ни уйлап сығарҙың, хыялый?

Заратустраның өмөтө үнде. уғышҡа барып үлеп ҡалыуҙан башҡа сара юҡ, тип төшөнкөлөккә бирелде. Был ҡыйынлыҡтан сығырға ярҙам итерлек көс күренмәне.

Беренсе тупланманы ташлап, артабан китте ғәскәр. Яугирҙар әм уларҙың ярҙамсылары шул ҡәҙәр күп йыйылды – сафтар сылбырының бер осо бында бул а, икенсе е күҙ күремендә лә өҙөлмәй. Сағыу ҡояш аҫтында атлай уғышсылар. Заратустра менән Лиә йәнәшләп шулар артынан эйәрә.

— Юл бирегеҙ, юл! Ат аҫтында ҡалмағыҙ! — тип өрәнләгәнгә ситкәрәк тайпылғайнылар, яндан ғына өс ат мисәүләнгән ыңар күсәрле арба елдереп үтеп китте, туҙан ғына борҡоп ҡалды. Кемдәр булды был, тип уйларға ла өлгөрмәнеләр, әле генә арба янында атта сабып барған башҡорт кире боролоп килде. Заратустралар тапҡырында туҡтаны ла:

— Лиәме ин? — тип ҡамсы абы менән ҡатынға күр әтте.

— Эйе.

— ине Албашҡорт саҡыра. Тиҙ бул!

Лиәне елтерәтеп тигәндәй баяғы арба янына килтерҙеләр. Иҫәнлек- аулыҡ алышҡас, Албашҡорт:

— Эҙләгән кешенде таптыңмы? — тине.

— Эйе. Ана тора ул.

— Яугир булып киттеме ни?

— Яугир. Мин уның ярҙамсы ы. Беҙ өйләнештек.

— Ярар. — Шунан янында торған башҡортка әмер бирҙе. — Анау кешене минең тирмәгә килтерегеҙ.

Яр ыу аттар ҡуласаны елтерәтеп алып китте.

Заратустраны шунда уҡ сафтан сығарҙылар ҙа Албашҡорт артынан әйҙәнеләр, Лиә лә унан ҡалышманы.  ан ыҙ ғәскәр тартылған саф буйлап байтаҡ барҙылар. Ҡораллы кешеләрҙең күплегенә хайран ҡалырлыҡ. Уҡ- аҙаҡ,  өңгө, ҡалҡан менән ҡоралланған йәйәүлеләр, өҙөлмәҫ юл кеүек, бере е артынан икенсе е тартыла.  ирәк- аяҡ  ыбайлылар сабышып уҙа, дүрт тәгәрмәсле арбаға егелгән үгеҙҙәр йөгөнә ауыр-ауыр нәмәләр тейәлгән.

Аҡрын ғына ҡуҙғалған саф тиҙлеге менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, Заратустра менән Лиәне эйәрткән башҡорт аҙымдарын етеҙләтте.

— Тиҙерәк  еҙҙе еткерергә лә ары китергә кәрәк миңә, йылдамыраҡ атлайыҡ.

Әммә бара торған урын йыраҡ ҡына булып сыҡты. Ҡояш офоҡ артына тәгәрләргә күп тә ҡалмағанда ғына йылға буйындағы ҙур яландың бер ситендә ҡоролған тирмәләр теҙмә е янында туҡтанылар. Яҡшы уҡ арыған Заратустра менән Лиәгә баяғы яугир:

— Ошонда ял итә тороғоҙ. Тик бынан бер ҡайҙа ла китмәгеҙ, саҡырырҙар, — тип үҙ юлында булды.

Заратустра менән Лиә тоҡсайындағы ризыҡтарын сығарып тамаҡ ялғаны. Ҡушылғанды тыңлап, хатта  ыу эҙләп тә торманылар. Ҡуржында йөрөп йылынып бөткән  ыуҙы уртлау менән сикләнделәр. Тик саҡырыусы тиҙ генә күренмәне. Беҙҙе оноттолар, ахыры ы, тип уйлап та бөткәйнеләр, байыған ҡояштың ал ыу нурҙары баш осондағы болоттарға яҡкан мәлдә берәү килде.

—  инме Заратустра? — тине ул.

— Эйе.

— Әйҙә минең арттан.

— Ә ул? — Заратустра Лиә яғына ишараланы.

— Ул кем?

— Ҡатыным.

— Уның хаҡында миңә әйтелмәне.  ине ошонда көт өн.

Бер нисә тирөйҙө уҙғас, яугир:

— Ошонда көт, — тине Заратустраға, үҙе эскә үтте.

Заратустра тирөйгә күҙ  алды. Бының кеүек күсмә өйҙәрҙе күргәне юҡ ине. Уларҙың яғында тирмәләр бынан ҙурыраҡ  әм кейеҙ менән көпләнгән була. Уны  ирәк күсерәләр. Көтөүселәрҙеке яҙҙан көҙгә тиклем тиерлек бер урында ултыра. Ә был тирмә көтөүселәрҙекенән дәүмәле яғынан күпкә ҡайтыш  әм тире менән көпләнгән. Тире еңел шул, тиҙ генә  үтеп-ҡороу  әм тейәп йөрөтөү өсөн дә ҡулай. Ишек асылды,  әм Заратустраны саҡырҙылар. Шул ыңғайы эстән тауыш ишетелде:

— Ишекте япма, тыштан яҡты ин ен.

Ут нурҙарын  өйә икән был, тимәк, А ураға яҡын кеше, тип  ығымталаны Заратустра ундағы кеше тура ында, тирмәгә инешләй.

—  аумы, Заратустра, — эстәге кеше сәләмләне. —  инең исемең шулай бит.

— Эйе. Иртәнге йондоҙ мәғәнә ендә.

— Ҡарт дөйә мәғәнә ендә түгел инде.

— Юҡ.

— Хуп, шулай бул ын.  ин мине таный ың бит.

— Эйе.  ин – Албашҡорт.

— Дөрөҫ.

— Әйт әле, Заратустра,  ин ни эшләп  уғышҡа барырға уйланың? Өҫтәүенә ҡатыныңды ла эйәрткән ең?

— Ир-егеттең  әммә е лә яуға ҡупҡан саҡта бер үҙемә ултырып ҡалыу килешмәҫ тип  ананым. Бар ғәләм күргәнде мин дә кисерергә тейешмен.

— Улай икән... — Албашҡортҡа был яуап оҡшанымы-юҡмы, аңлап булманы, ул үҙҙе икенсегә борҙо. — Заратустра, оҙаҡламай ҡараңғы төшә, шуңарсы сисен әле, мин инең тәнеңде ҡарайым.

— Ни эшләп? — Аптыраны Заратустра көтөлмәгән тәҡдимдән.

— Мин бит – Албашҡорт, бөтә яугирҙарҙың да башлығы, шул уҡ ваҡытта әр яугирҙы ла хәстәрләргә бурыслымын. Ә хәстәрлек кешенең тән сәләмәтлеген белеүҙән башлана. Тартынма, сисен. Мин бит ҡатын-ҡыҙ затынан түгелмен.

Албашҡорттоң тәҡдиме Заратустраны ҡәнәғәтләндермәне, әммә бүтәнсә әмәле юҡ ине. Сисенде. Албашҡорт унның алдына ла, артына ла сығып, баштан-аяҡ ентекләп тикшерҙе.

— Осаңдың соңҡа ында ике бармаҡ бите яҫылығында күк бар. Берәр урында бәрелдең- уғылдыңмы әллә?

— Юҡ-юҡ. Бәрелмәнем. — Аҙыраҡ үҙ еҙ торғас ҡына өҫтәне: — Бала саҡта ыу ингәндә малайҙар “Ҡойроҡло” тип үсекләй торғайны. Әллә ысынмы?

Албашҡорт көлдө:

— Юҡ. Ҡойроҡ юҡ.

— Бүтәнсә белмәйем.

— Ә маңлайыңдағы ҡашҡа ниҙән бар булды?

— Мине йәшен атты. Өс көндән уң... үлгәндән терелдем. Йән ҡайтҡанда ҡашҡам бар ине.

— Уғаса булманымы?

— Юҡ.

— Ниңә ҡашҡаланған ың икән уң?

— Төрлөсә юраны кешеләр. Йәшен шул тапҡырҙан инеп, табандан сыҡҡан, тигәндәр ҙә булды. Ләкин табанда бер ниндәй ҙә ут эҙе юҡ.

— Бәлки, соңҡаңдағы күк шунан ҡалғандыр?

— Ю-юҡ. Уғаса ла бар ине.

— Улай икән... Әйҙә, кейен әле ин.

Албашҡорт иҙәндәге тирегә аяҡ бөкләп ултырҙы, тур ыҡтан ҡымыҙ ҡойоп, бер аяҡты үҙ алдына, икенсе ен Заратустраға ҡуйҙы.

— Әйҙә, ултыр, ҡымыҙ эс.

— Килешмәгәнде, ҡуй. Албашҡорт менән малбағарҙан сыҡҡан яугир ҡымыҙ эскән, ти.

— Әйҙә-әйҙә, тартынма, — бер-ике йотом эсемлек ҡапҡас, Албашҡорт орай ы итте: — Заратустра, ин кемгә ҡаршы уғышырға йөрөгәнеңде беләеңме?

— Эйе, аңлаттылар беҙгә. Күршеләрҙең ханына ҡаршы. Ул беҙҙең ерҙе баҫып алырға яҫҡына икән.

Албашҡорт хуплап ебәрҙе:

— Ерҙе бирергә ярамай. Ул беҙҙе туйҙыра ла, кейендерә лә. Ер булма а, шуларҙың бере е лә беҙгә эләкмәй. Был ғына ла түгел, ерҙән беҙ тимер, баҡыр мәғдәне, аҫылташтар сығарабыҙ, изге утыбыҙға яғырға утыныбыҙ ҙа ерҙә үҫә.

— Дөрөҫ, беҙ ризыҡланған арпа, арыштан башлап әммә е лә ерҙә үҫә. еҙ менеп йөрөгән ат та үлән ашап көн итә. Тик икенсе нәмә лә бар: әйтәйек, ерҙе өрөп, эшкәртеп сәс әң, арпа ҡырағай үҫемлеккә ҡарағанда уңышты әллә ни ҡәҙәр күп бирә. Матур итеп тәрбиәләп тот аң, кешегә етәрлек ризыҡ алыр өсөн ҙур ер ҙә кәрәкмәй. Шулай бит? — Заратустра Албашҡортҡа текләште. Тегене е, бының тел төбөн төшөнөп бөтмәйенсә:

— Шунан, — тип артабанғы үҙгә дәртләндерҙе.

— Әлеге беҙҙең ғәскәргә йыйылған меңәр кеше ерҙе эшкәртеү менән

шөғөлләнә, үҙенә генә түгел, әр кем ғаиләен туйҙырырлыҡ ризыҡ үҫтереп алыр ине.

— Шунан?

— Күрше хандың шул ҡәҙәр үк ғәскәре бар.

— Аҙыраҡ.

— Ярар, аҙыраҡ та бул ын, ти. Әммә унда ла ҡул-аяғы, баш-күҙе ап- ау ир-ат бынау гүзәл йәй көнөндә ҡыш тамаҡ туйҙырырлыҡ иген, бүтәнен етештерә е урынға уғышҡа әҙерләнеп ғүмер сарыф итә.

— Тимәк, уларға ҡайтып китергә кәрәк?

— Эйе, уларға ла, беҙгә лә.

— уғышты йәйҙән ҡышҡа күсерергәме ни?

— Юҡ. уғышырға бөтөнләй ярамай. Сөнки, тәрбиәләп тот аң, ер уларға ла, беҙгә лә етерлек. А ура Мазда уны кешенең әммә енә лә етерлек итеп бар я аған. Шуға күрә ер өсөн бер-береңә яу асыу дөрөҫ түгел, ул А ура Маздаға ҡаршы сығыу була. Ә А ура Маздаға ҡаршы төшөү — Ахриманға ярҙамлашыу, золом сәсеү тигән үҙ. уғыштың әммә е лә – иң ҙур золом. Ҡулға, биткә, кеше тәненең тире - енә буялған ҡан — ул Ахриман алған тамға. Ахриман тамға ы менән теге донъяла тик тамуҡҡа ғына ебәрәләр.

Заратустра өйләгән айын Албашҡорттың йөҙө ҡарая барҙы. Әле генә уға ҡарата бик киң күңелле, рәхимле ине, хәҙер инде йоҙроҡтарын төйөп, өҫтөнә ташланыуҙан саҡ тыйылып ултырҙы.

— ин быларҙы кешегә өйләнеңме? — тине, тешен шығырҙатып.

— Йүнле-башлы өйләй алмайым әле. Бер башлағайным да, яугирҙар тыңларға ҡурҡты, ә ун башлығы өҫтөмә ташланды. Туҡмау, хатта үлтерееү менән янай. Әҙәм бала ының өсөнсө күҙе юҡ шул. Ул күңел күҙе менән күрмәй, өсөнсө ҡолағы менән ишетә алмай. Шуға күрә ишеткәнен аңламай, аңла а, аҡылы менән ҡабул итмәй. Кешеләр өсөн иң ҡурҡынысы бына ошо.

Албашҡорт, күрә ең, бик тотанаҡлы кеше. Заратустраға асыуы ныҡ килгәнен тышҡа сығармау ғына түгел, тегегә белендермәҫлек итеп йәшерә алды. Әйтергә кәрәк, хәрби кешеләрҙең бик ирәгенә генә лә эләгә торған сифат был. Юҡ а, хәрбиҙәрҙең бары ы ла асыуынан гөлтләп ҡабына, ҡылысын ура алып, сарт та сорт елтәнә башлай. Башҡорт та, ҡорт та шулай. Ғүмер-ғүмере дауам иткән хәрбилектең бәлә е был. Бойороҡ яңғырау менән шуны үтәргә йән ата бит улар. Ә эстән ҡупҡан асыу — шул уҡ бойороҡ. Тик уны хәрби кеше үҙе генә бирә. Албашҡорт донъяны күп гиҙгән, утты- ыуҙы ныҡ кискән, өҫтәүенә яугирҙарҙың хәл-торошо ғына түгел, ғүмере өсөн дә яуап күтәреп сыныҡҡанға, күрә ең, үҙ яр ыуын баҫа белә ине. Тамам ыуынғанға тиклем ҡарашын ергә баҫып ултырҙы сардар. Уның ни кисергәнен былай ғына белерлек түгел ине барыбер. Тышта эңер яҡкайны, ә тирөйҙә кеше кәүҙә е сырамытып ҡына күренә.

— ин, Заратустра, ҡатыныңды ал да өйөңә ҡайт. Мин иңә рөхсәт итәм, — тине Албашҡорт.

— Нисек инде: ҡайт? — Заратустра аптыраны. — Мин уғышҡа сыҡтым, тәғәйен ергә барып та еткәнебеҙ юҡ әле.

— Эйе. Яу яланына еткәнсе ин ҡайт. Ауылыңа ҡайтҡың килмә ә, ғалимдар янына бар. Факи Тайранға мин хәбәр еткерермен.

— Ниңә мине ҡыуа ың әле? — Заратустра ла тауышын күтәрҙе.

— уғыш бит ул. Унда үлтерәләр, йәрәхәтләйҙәр. Ә ин ил-йортҡа тере көйө нығыраҡ файҙалы булыр ың. Был үҙгә кире ҡайтмайыҡ. Мин әйттем. Онотма: мин – Албашҡорт.

Заратустра сығып китте, Албашҡорт ултырған ерендә ҡыбырламайынса ҡалды.

Бая сисенгән сағында Заратустраның кем икәнлеген белде ул. Оса ында соңҡа ынан саҡ ҡына өҫтәрәк ике бармаҡ яҫылығындай миң әм башындағы ҡашҡа Заратустраның ҡәҙимге кеше түгеллеген, дөрөҫөрәге, хан нәҫеленән икәнлеген асыҡ күр әтә ине. Был хаҡта, күрә ең, был кеше үҙе белмәй, тип уйланы Албашҡорт. Бел ә, үҙен башҡасараҡ тотор ине. Хан нәҫеленән булғандарҙың әммә е лә үҙҙәрен әллә кем итеп тоя. Бүтәндәрҙе үҙе менән тиң енмәйҙәр. Ә Заратустрала ма айыуҙың эҙе лә юҡ. Булыр ине, кемлеген бел ә.

Был хаҡта, әлбиттә, Заратустра атай-әсәй тип йөрөгән кешеләр генә хәбәрҙарҙыр, тип ығымта я аны Албашҡорт. Ике кеше бел ә, сер сер булыуҙан туҡтай, тиҙәр. Быны өсөнсө кеше — мин беләм. Тимәк, ул сер түгел. Әммә бар ханлыҡҡа билдәле мәғлүмәт тә түгел. Шулай ҡалып тор он. Үҙенә серҙең сиселеүенә лә күп йылдар үткәйне. Албашҡорт әлеге сифатында түгел ине ул саҡта. Хандың ике туғаны ине. Ошо вазифаға айланып ҡуйылған сағында утыҙҙы күптән уҙғайны. Албашҡорт итеп йәштәрҙе ҡуймайҙар бит. Ул айырым илдәрҙә-ырыуҙарҙа хеҙмәт үтәгән ҡорттар, ханлыҡтың башҡорттарынан тыш, ҙур яу мәлендә бүтәндәрҙән төҙөлгән ғәскәргә лә етәкселек итә, хан исеменән уғыш алып бара бит. Тик уғыш иғлан итеү йә уны туҡтатып, солох төҙөү — хан иркендә. Ҡалғанына Албашҡорт яуаплы. Ошондай дәрәжәгә ярарлыҡ тәжрибә әм белем туплау өсөн, әлбиттә, күп йылдар кәрәк. Утыҙҙа албашҡорт булып айланыу бик иртә өлгөрөү анала. Юҡ а, ҡай ы берәүҙәр ҡырҡ тирә ендә генә өлгәшә был дәрәжәгә. Әммә улар оҙаҡ та йөрөй алмай Албашҡорт булып. Сөнки илле йәш инде оло анала. Алтмышҡа етеүсе ирәк була. Ҡырҡтан уң албашҡорт биш-алты йыл ошо вазифала тора ал а, бик хуш. “ Ә минең алдағы ағайым утыҙҙа уҡ өлгәшкәс, ун ете йыл албашҡорт булды. Ҙур яуҙа дошман уғынан үлмә ә, бәлки, алтмышҡа тиклем дә йәшәр ине. Албашҡорт булмайынса лә йәшәп була бит әле. Ҡатындарын, ҡолдарын йомошап ултырыр ине түрҙә. Әммә башҡортҡа ундай яҙмыш теймәй”, – тип уйланы сардар.

Үҙе ғәскәр етәксе е итеп айланғанда утыҙ игеҙе тулып ярты йыллап уҙғайны инде. Бая әйткән ике туған аға ы үлгәс булды был. Яуҙа тәгәрәгән аға ын ул үҙе атҡа алып алып сыҡты. Үҙ аңында, үҙ телендә ине әле. Күкрәгенә ҡаҙалған уҡты үҙе урып алған, яра ынан ҡан арҡый. Ҡусты ы йәрәхәт урынын тәүҙә ҡан туҡтағансы баҫып торҙо. Ҡаны ҡатыу менән тере ҡорт алырмын, тип уйланы. Башҡорттар менән ҡорттар борон-борондан яуға махсус ауытта тере ҡорт йөрөтә бит. Йәрәхәт еренә шуларҙы ала ың, ҡатҡан, ойошҡан ҡанды “ ә” тигәнсе ашап бөтә былар. Кескәй түгел, тәрән йәрәхәт тә йә әт бөтәшә, тиҙ генә ит тартып китә. Тере ҡорт арҡа ында яугирҙар тән боҙолоу, сереү тигән нәмәне белмәне. Ҡорт юҡ саҡта йә ваҡытында алмағанда ғына булғылай ул хәл.

Тик Албашҡортҡа ҡорт кәрәкмәне. Үҙ хәлен үҙе белгәндер инде. Уҡ йән еренә ҡаҙалғайны бит. Ҡусты ын ул яҡыныраҡ саҡырҙы:

— Яу аҙағына тиклем ине Албашҡорт итеп ҡуям. уғыш баҫылғас, айлау булыр. Шунан... — Албашҡорт шымып торҙо. Әллә икеләнде, әллә шикләнде, әммә әйтмәй сара ы юҡ ине. — Арҡаилдән йыраҡ түгел ауылда Пурушасна тигән кешелә Заратустра исемле берәү бар. Хан бала ы ул. Үлгән ханыбыҙҙың улы. Үлемдән ҡотҡара була, мин илтеп бирҙем уны. Шуны белеп ҡуй әм, насип ит ә, хан итеп күтәр.

Оло Албашҡорт үлде. Йәше яңы вазифала нығынғансы Заратустра хаҡында үҙ сығарманы. Еңеүле яуҙар яулап данлыҡлы Албашҡорт булғас та хан бала ын барып күрмәне. Теләмәгәндән түгел. Ике туған аға ы ҡалдырған сер күңелен тырнаған саҡтар байтаҡ ине. Әммә хисенә баш була белде. әр саҡ бер орауҙы бирҙе ул үҙенә: Заратустраны хан нәҫеле итеп Арҡаилгә килтерҙени әң, аҙағы ни булыр? Көслө хандар, ҡыйыу солтандар уны шунда уҡ дошман күреп, юҡ итергә тыры-

шасаҡ. Сөнки Заратустра уларға көндәшкә әүерелә, ата ынан ҡалған тәхетте алырға ынтыла, тип уйлаясаҡтар. Әйтер кәрәк, дөрөҫ уйлаясаҡтар. Хан бала ы булған иҫән-аман ир-егет, ис шик еҙ, таж кейергә ниәтләнергә тейеш. Бер генә кешенең дә үҙ ирке менән иң юғары дәрәжә әм бүтәндәр өҫтөнән бойороу мөмкинлегенән баш тартҡаны юҡ әле.

Албашҡорт ошоларҙы уйланы ла Заратустра тура ында берәүгә лә әйтмәй әм унын үҙен дә эҙләп тапмай йөрөргә булды. Көн артынан көн үтте, айҙар йылға ялғанды. Пурушасна өйөнә биләүҙәге сабый булып килгән Заратустра инде еткән ир. Әле генә таныште Албашҡорт унын менән. Тик был танышыу шатлыҡ та, бүтән төрлө ҡәнәғәтләнеү ҙә килтермәне. Заратустра тура ында өйләгән Рабаға хаҡлы булып сыға түгелме уң? “Халыҡты болғата Заратустра, ерҙә кешенең берҙән-бер Хоҙайы А ура Мазда ғына бар. Кеше тик А ураға ғына буй онорға, тик уға ғибәҙәт ҡылырға, күңеленән тик унын менән өйләшергә тейеш. Бүтән берәү менән дә түгел. Башҡа Хоҙай юҡ, тип өйләй ул. Былай бул а, көн, төн, ямғыр, ҡар, ундырыш әм ыу хоҙайҙарын таныуҙан, Хан менән Рабағаға, Албашҡорт менән Ҡағанға буй онмаҫка өйрәтер әле. Былай ҙа саҡ торған ырыуҙарҙы үҙ-ара ыҙғыштырып, берәүгә лә баш бирмәҫ дәрәжәгә еткерер”,– тип Заратустраға ҡырҡа ҡаршы төшкән Рабаға хаҡлы була түгелме уң? Яуға китеп барған ғәскәрҙе туҡтатып ҡуйып, уғышмаҫка өндәргә йыйына ла ба а был. Дошманға шул ғына кәрәк. Ғәскәрҙе тар-мар килтереп, ҡала-ауылдарыбыҙҙы баҫа ла аласаҡ. Шул турала башына ла килтермәй үҙе.

Албашҡорт Заратустра менән күрешеүҙән ошолай өҙгөләнде. Заратустраның артынан тиерлек тирөйҙән сыҡты ла шунда торған башҡортҡа өндәште:

— Анау кешене ҡатыны менән ҡуша ғалимдар ауылына Факи Тайранға илтеп ҡуйығыҙ. Факиға әйтергә кәрәк мин ҡушты тиеп. Заратустраны үҙенән бер ҡайҙа ла ебәрмә ен. Яуҙан уң ни эшләтергә икәнлеген әйтермен.

— Хәҙер үк алып китәйемме? — ти алды яугир.

— Юҡ. Бында ҡундырығыҙ, тамаҡтарын туйҙырығыҙ ҙа иртәгә ен алып китер - егеҙ.

— Яҡшы.

Заратустра өсөн хәрби хеҙмәт ошонон менән тамамланды. Икенсе көндө Заратустра менән Лиәне кире алып киттеләр. Албашҡорт ҡушҡан яугир түгел. Күрә ең, Заратустраны башҡорттоң оҙатып йөрөүе күп булырҙай тойолғандыр. Хатта ҡорт та бирмәнеләр. Үҙенең ун башлығын ҡуйҙылар. Күрә ең, ун башлығына бик ҡаты ҡушып ебәргәндәрҙер. Ал-ял бирмәй атлатты ла атлатты, бер кеше менән дә үҙ алышырға ла форсат бирмәне. Хәленән кил ә, Заратустраның күҙ нурын урып алыр ине.

*(Аҙағы килә е анда.)*



**Тәскирә**
**ДАЯНОВА**

# МӨҒЖИЗӘГӘ ЫШАНАМ

## ХИКӘЙӘ

Ҡыҙының йән әсе е менән: “Әсәй!”– тип ҡысҡырғанын ишетеп, Гөлдәриә абына- өрөнә тауыш килгән тарафҡа ташланды. Әллә эңер, әллә таң атып етмәгән, аңларлыҡ түгел. Күкте болот ҡаплаған, етмә ә, өйәккә үтерлек алҡын. Йәне алҡымына тығыла яҙып йүгерә торғас, алдында ашҡынып аҡҡан киң йылға күреп, туҡтап ҡалды. Ҡараңғы булғанғамы, ыу ҡот осмалы шомло ымаҡ. Ә-ә-ә, тауыш дарьяның теге яғынан килә икән. Бауыр ите Индираның нескә ыны арьяҡта бөләңгерт кенә күренә. Бәй, ул яҡҡа нисек барып сыҡҡан уң? Нисек тә алып сығырға кәрәк тә ә баланы. Йә кәмә-фәлән юҡ. Гөлдәриә аҡ-ҡараны күрмәй йылғаға ынтылды.

– Әсәй, әсәкәйем, был ыуға инмә, ярамай! – Ҡыҙының тауышы бар донъяны ярғандай булды. Шаңдау: “Инмә, инмә был ыуға!”– тип әллә ҡайҙарға ҡат-ҡат бәрелеп-сайҡалып кире ҡайтты. Гөлдәриә тертләп уянып китте. Дарҫлап типкән йөрәген баҫырға тырышып, дарыу төймә ен ауыҙына ҡапты ла сирылып ҡуйҙы.

– Индирам, ғәзизем! – Әсә, шыбыр тиргә батып, йәнә урынына ауҙы. – Төштә генә күрергә яҙғанмы инде ине?

Ә йәштәре аман ҡойола, ҡымтылған ирендәр аман шыбырлай.

Бүлмә эсе яҡтыра, торорға кәрәк. Илмираны мәктәпкә ебәрергә, үҙенә лә йыйынырға... Рим өйҙә юҡ, ул булмағас, ҡот оҙланып ҡалған фатирҙа ҡайғы тағы ла нығыраҡ баҫҡан төҫлө. Ир кеше ҡаты торғандай тойол а ла, шарт итеп ынды. Гөлдәриә иңенә төшкән ҡайғыны үҙ елкә енә алырға тырышҡанға шулай булдымы?.. Оло ҡайғынан инфаркт уғып йыҡты Римде. Дауахананан сыҡҡас та оҙаҡ иҫенә килә алмаған төҫлө ине.

Гөлдәриә үҙе йөрөп шифаханаға юллама алып бирҙе. Алыҫтараҡ булыуын хуп күрҙе. Юл мәшәҡәттәре, икенсе ауа ҡайғыларынан бер аҙ арындырыр, тип

---

*Тәскирә Даянова Мәсетле районы өләймән ауылында тыуып үҫкән. Өфөләге 1-се педагогия училище ын тамамлағас, Йонос урта мәктәбендә уҡыта. Балалар өсөн «Ҡанбаба», «Аҡ аҡ ҡарға бүләге» исемле китаптары донъя күрҙе, республика матбуғатында әҫәрҙәре даими баҫылып тора.*

*Яҙыусылар союзы ағза ы.*

уйланы. Хәйер, был мәшәҡәттәр аңдан тыш, ниндәйҙер диуана хәлендә йөрөп эшләнде.

Торорға кәрәк... Ҡайғы- ағышың ни тиклем көслө булма ын, күкрәгеңдән йәнең сығып китмәгәс, йәшәй ең инде. Тереклек иткән әҙәм бала ына уны ы-бы-ны ы кәрәк булып тора. Ҡатын тороп йәшле битен сайҙы, сәс-башын тәртипкә килтерҙе.

– Илмирау, тор.

Тигеҙ тын алып ҡына йоҡлап ятҡан бала бер әйтеү менән икереп торҙо ла әсә енә ҡараны. Шул уҡ бойоҡ сырай, йәшле күҙҙәр... Илмира әсә ен йөрәге өҙөлөп ҡыҙғана, нисек тә уның күңелен күрергә тырыша. Ҡулына эш тейҙермәй, яҡшы уҡый, ҡыҫҡа ы, саҡ ҡына ла әсә енең күңелен ҡырмай. Тик...

Әсә үҙенең эсенә йомолған, өлтөрәп йөрөгән Илмираны күҙенә лә элмәй. Бар ни ул, юҡ ни... Ҡай ы саҡ уйҙарынан арынып, үҙенә текләгән күҙҙәрҙе күрә лә ҡыйын ынып киткәндәй була ҡатын. “Был хәлдәргә Илмираның бер тамсы ғына ла ғәйебе юҡ бит инде. Ни эшләп мин оло ҡыҙымды онотоп китәм уң? Исма ам, шул бала хаҡына бул а ла үҙемде еңергә тейешмен бит." Өндәшмәй генә сәй эс-теләр. Балалар икәү булғанда Гөлдәриә тиҙ генә нимә бул а ла бешерергә өлгөрә ине. Илмира өндәшмәй генә кейенде лә башын баҫып ҡына мәктәбенә китте.

Гөлдәриә көҙгөгә күҙ ирпте. Ҡасандыр сәскә кеүек балҡып торған йөҙ түгел инде хәҙер. Кешеләр ара ында йәшәгәс, уларҙы өркөтөр ҡиәфәт менән йөрөмәҫ-кә ине лә... Гөлдәриә, ҡаш-күҙен бер аҙ өрмәләп, ирендәренә буяҡ алғандан уң, кейенеп тышҡа сыҡты.

Көн йонсоу. Ара-тирә рашҡы ла ибәләп алғылай. Туҡталыштағы кешеләр көн-дөң алама булыуына уҡранып ҡуя. Ҡатын, үҙе лә иҙмәҫтән, бер ҡартҡа иғтибар итте. Йән еҙ, күңел еҙ кешеләр ара ында бер үҙе нур сәсеп, балҡып торған төҫлө. Ап-аҡ аҡал-мыйыҡлы бабайҙың күҙҙәре йәп-йәш, мөләйем балҡый – көн яҡты-рып киткәндәй. Ҡатын, үҙе лә иҙмәҫтән, уға яҡынлашты. Ғәжәп, ҡырыҫ көн, гөжләп торған ҡала, бөтә халыҡ юҡҡа сыҡҡандай тойолдо. Бар донъяла балҡыу ҡарашлы ҡарт ҡына алдында баҫып тора.

– Алла ы Тәғәлә ғүмер биргән икән, унан ваз кисмәҫкә кәрәк, – ти ҡарт ғәжәп яғымлы, уйсан тауыш менән.

“Миңә төбәп әйтәме уң?” – Гөлдәриә тирә-яҡҡа ҡарап алды. үҙҙәр уға төбәлгәйне.

– ин шул тиклем өҙгөләнеүең менән баҡый донъялағы сабыйыңа тынғылыҡ бирмәй ең. Ожмах ҡошо булып талпыныр урынға, уның йәне ерҙән китә алмай бәргеләнә, өҙгөләнә. ине йәлләй, ләкин бер ни ҙә ҡыла алмай.

– Ни эшләйем, ни хәлдәр генә итәйем уң? Үҙемде еңә алмайым. Теге донъя өсөн яралғанмы ни балам?

– Шә иттәр үлеме менән киткән кешенең исемен ҡушмаҫҡа кәрәк ине. Ган-диҙар нәҫеле бер ҡасан да үҙ үлеме менән үлмәгән бит. Ҡылыр ғәмәлендә ҡыл, үтер сәфәрендә үт. Шун ыҙ тынысланa алмаҫ ың, балам.

– Ниндәй сәфәр көтә мине?

– Хаж сәфәре, хаж ғәмәле.

“Өнмө-төшмө?.. Әллә аҡылдан яҙаммы?”– Гөлдәриә алан-йолан ҡаранды. Шул уҡ туҡталыш, гөжләп килеп туҡтаған автобустар, ашығыусы, ҡайнаусы ха-лыҡ, ят йөҙлө кешеләр. Бабай ғына юҡ. Ана, туҡталышҡа Гөлдәриәнең маршру-ты етеп килә. Ул автобусҡа табан атланы.

***

Гөлдәриәнең эше шаҡтай ҡатмарлы, ауыр. Шәфҡәт туташы ул. Шифахананың дежур шәфҡәт туташы үҙенә билдәләнгән ауырыуҙар тарихын яттан белергә те-йеш. Бында йөрәк сирлеләр килә, бер минут уңға ҡалыу ҡай ы берҙә үлемесле бу-лырға мөмкин.

Элек эшенә бөтә күңелен алып эшләй торғайны. Ауырыуҙар ҙа уның менән дуҫлаша, ҡайтып китер саҡта күҙ йәштәре менән хушлаша ине.

Хәҙер ул эсенә йомолған, йән еҙ машина кеүек. Кешеләрҙең йөҙөн-күҙен түгел, ауырыу тарихтарын ғына күрә. Дөрөҫ, әле лә хеҙмәтенә тоғро, бары ын да теүәл башҡара.

Бөгөн бар уйы — аяғүрә баҫып күргән төшөндә. Төш тимәй, ни ти ең инде? Был хаҡта белекле генә кеше менән кәңәшләшмәй булмай. Уйлана торғас, кеше ен дә тапты — Ғәлимә инәй! Эштән уң тура уға йүгерергә кәрәк булыр. Өс бала ын юғалтҡан сабыр ҡатын әле бөтә ғүмерен намаҙлыҡ өҫтөндә уҙғара. Хоҙай ниндәй түҙемлектәр бирә икән уға? Гөлдәриә күңеленә “Хоҙай” төшөнсә е килеп ингәненә тетрәнеп ҡуйҙы.

Эш көнөн тамамлап, Ғәлимә инә енә юл тотҡанда, Гөлдәриә аяғына баҫып тора алмаҫ хәлгә еткәйне. Күгәреп-буҙарып килеп ингән ҡатындың хәлен әбекәй тиҙ аңланы, диванға йомшаҡ мендәр ташлап, ятып торорға ҡушты. Үҙе кухняға сәй ҡуйырға йүнәлде. Гөлдәриә билдә еҙлеккә сумды...

Көндөҙгө ваҡиғалар өҙөк-йыртыҡ күҙ алдында әйләнде, теге балҡыу ҡарашлы ҡарт та шәйләнеп ҡалды.

— Йә, балаҡай, бер аҙ хәл алған ыңдыр, әйҙә, сәй эсәйек.

Инәй шул арала ҡоймағын да ҡойоп өлгөргән, табынға бер нисә төрлө ҡайнатма менән шәкәргә буталған балан да ултыртҡан. Бисмилла ын әйтеп, хуш еҫле сәйен я ағас, өндәшмәй генә берәр сынаяҡты бушаттылар. Ғәлимә инәй, ғәҙәттәгесә, ашыҡмай.

— Балан ҡап. Янған йөрәкте баҫа, күңелде тынысландыра ул.

— Ғәлимә апай, кеше аяғүрә төш күрәме ул? — Гөлдәриә орағанын иҙмәй ҙә ҡалды.

— Асыҡлап өйлә, балам. Бер ни ҙә төшөнмәйем бит әле.

Гөлдәриә иртәнге ваҡиғаларҙы түкмәй-сәсмәй өйләп бирҙе.

— еҙ, замана балалары, мөғжизәгә ышанып бармай ығыҙ. Мин үҙем шундай хәлгә юлыҡ ам, Хызыр Ильясты осраттым, тип әйтер инем.

Гөлдәриәгә эске иҙемләүе ышанырға ҡуш а ла, аман аптырай, айыҡ аҡылы ҡаршы төшә.

— Ә хаж сәфәре тигәне? Мин унда нисек барайым? Бик күп аҡса кәрәктер инде уның өсөн. Замана ы ниндәй бит әле? Унан килеп, дини кеше лә түгелмен. Бәләкәй саҡта Фәхерниса өләсәйем өйрәткәндәре лә иҫтән сыҡҡан.

— Әй, ҡыҙым, ҡыҙым! Ниңә улай кирегә өйләп тик ултыра ың ул? Эсеңә шайтан ояламағандыр ҙа! Ҡайғы тамам алйытҡан ине. Үҙеңә әҙерәк баш булырға кәрәк. Хоҙай Тәғәлә ярҙамына ҡаршы төшә ең. Динле кеше булыу өсөн Алла ы Тәғәләнең барлығына, берлегенә ышаныу кәрәк. Ҡалғаны әкренләп үҙе килер. Доғалар өйрәнер ең, ғибәҙәткә баҫыр ың, Алла ы бойор а. Хаж ғәмәленә килгәндә инде, насип бул а, унда ла сәфәр төшөр. иҙмәй ҙә ҡалыр ың.

Гөлдәриә тормошоноң кинәт кенә башҡа юлдан китеренә әҙер ҙә түгел ине, юғалып ҡалды. Уның кисерештәрен аңлап ултырған Ғәлимә инәй:

— ин мәсеткә барып ура әле, ҡыҙым. Мөслимә абыстайҙы күр. Ул йәш бул а ла, бик белемле, аҡыллы ҡатын. Мин әйтеп бөтөрә алмағанды әйтер.

Күңелендә ниндәйҙер тынысланыу тойоп, ҡатын ҡайтырға сыҡты. Ҡыҙы ҡайтып, сәй ҡайнатып эскән. Диванға йомарланып ҡына ултырған да онотолоп дәреслеген уҡый. Әсә ен күргәс, бала талпынып ҡуйҙы ла кире китабына йомолдо. Ҡапыл йәнләнгән ымаҡ, ҡапыл үнде. уңғы ваҡытта әсә енең үҙенә ҡарата иғтибар ыҙ булыуына күнегеп бөткәйне инде.

Ә Гөлдәриә был ваҡыт донъя ына бөтөнләй сит кеше күҙе менән ҡарап сыҡты. Фатирҙан ҡот киткән: тәҙрә төптәрен, шкафтарҙы, китаптарҙы туҙан ҡаплаған,

тегендә-бында әйберҙәр туҙышып ята... Әсәнең кәйефе ҡыҙына ла күскән, унын да ҡанаты әленгән.

– Былай булмай инде, – тип ҡысҡырып әйтеп ҡуйҙы ул. Ҡыҙының бала еҫе лә китмәгән башын күкрәгенә ҡыҫып, арҡа ынан өйҙө.

– Әйҙә, балам, өй йыйыштырып алайыҡ...

Икәүләп нуры ҡасҡан фатирҙы йыуырға, туҙан өртөргә, балаҫтарҙы тышҡа сығарып ҡағырға керештеләр. Ике е лә йәнләнде, йөҙҙәренә нур ҡунды. Илмира ҡанатланып осоп ҡына йөрөй, әсә енең күҙ ҡарашын, әр ым-хәрәкәтен аңлап ҡына тора.

Бары ын да ипкә килтергәс, Гөлдәриә шартына килтереп былау бешереп алды. Бала дәрестәренә ултырҙы. Ҡыҙы менән бер түшәккә ятып йоҡланы Гөлдәриә. Беренсе тапҡыр аташманы, төш күрмәне.

***

Күңелдәге ниәт ара-тирә елкендереп ҡуя. Тик был маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн байтаҡ аҡса кәрәк буласаҡ. Эйе, кем менәндер кәңәшләшмәй булмай.

Гөлдәриә йома көндө эшен тиҙерәк теүәлләп, иртәрәк ҡайтырға булды. Уға алмашҡа килеүсе Нәзирә лә ис үҙ еҙ дежурлыҡты алдараҡ ҡабул итергә ризалашты. Былай булғас, бөтә е лә яйлы бара. Мөслимә абыстайҙы мотлаҡ күрергә кәрәк, йома намаҙына килгән халыҡ та быҒаса ҡайтышып бөткәндер.

Абыстай, ысынлап та, мәсеттә ине. Ул мәсет имамы булған тормош юлдашына әр яҡлап теләктәш, ярҙамсы, кәңәшсе. Әле лә Ғабдулла хәҙрәттең эш кабинетында дини тәртиптәргә ҡағылышлы ораухҙары булған ике ханым менән өйләшә, тинеләр. Мөслимә ханым менән Гөлдәриә, яҡташтар булыу сәбәпле, яҡшы уҡ таныштар. Абыстай ҡайғылы яҡташын ихлас ҡаршыланы, хәл-әхүәлен орашты. Ул бөгөн Гөлдәриәлә бер аҙ йәнлелек тойоп шатланып китте. Гөлдәриә лә йөҙөндә ила и нур балҡып торған абыстайға уңғы ваҡытта кисергән, баш ватҡан, аптыратҡан хәлдәрен өйләне. Мөслимә ханым ихлас тыңлап бөткәндән уң бер аҙ уйланып ултырҙы.

– Ниәтең изге, туғаным. Бар күңелең менән шул ҡарарҙы ҡабул итеүең – иң мө име.

– Эйе, уңғы көндәрҙә ошо ниәтем тамам ныҒынып етте. Тәүҙә икеләндем инде.

– Рим әфәнде нисек ҡарар? Ул ни әйтер?

– Ул ни, мин ни уйлайым, шуны ҡабул итә инде, бер ҡасан да ҡаршы килгәне юҡ.

– Бөтә күңеле менән яратҡан кешеләр генә шулай була. Тағы нимә тотҡарлай уң?

– Нимә тип ни... Шундай йыраҡ сәфәргә сығыу ҙур сығымдар орай бит,– Гөлдәриә ни әйтергә белмәй туҡтап ҡалды.

– Иншалла , был ҙур кәртә түгел. еҙҙең йортта булғаным бар. Бик етеш йәшәйегеҙ. Барлыҡ йы азды аҡсаға әйләндереп була бит. Баш өҫтөндәге ҡыйығындан яҙма аң, донъя малы табыла ул. Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны.

Гөлдәриәнең яңғыҙ ҡалып, был турала иркенләп уйлағы ы килде. Ул ҡапыл ҡайтырға йыйынды, хушлашыу яғын ҡараны. "Кәңәшем оҡшаманы, буғай. Хәйер, кешене шул тиклем тиҙ аңлап буламы ни? Аҙағы нисек булырын сабыр итеп көтөргә генә ҡала", – тип уйланы Мөслимә ханым.

Ҡыҙы сәй ҡайнатып әсә ен көтә ине. Әсә ендәге үҙгәреште күргән ҡыҙ ҡанатланып ҡына тора, ниндәй йомош ҡуш а ла үтәргә әҙер. Тәмләп сәй эсеп алдылар.

– Ҡыҙым, ин хәҙер ҙур бит инде, – тип әкренләп кенә үҙ башланы әсә. – Баштан үткән ҡайғы беребеҙҙе лә урап үтмәне. ин бөтә ен дә төшөнә ең, аңлап тора - ың. Ҡайғыны ғүмер буйы үҙең менән өйрәп йөрөтөүе, ай, ауыр. Унан арына белергә кәрәк. Шуның өсөн атайың менән миңә йыраҡҡа сәфәр сығырға тура килер.

Хоҙай үҙе генә белә, бәлки, гона тарыбыҙ ҙа булғандыр, уларҙан тәүбә итергә, ҡорбан килтерергә лә кәрәктер. Ҡыҫҡа ы шул, балам, беҙ хаж сәфәрендә йөрөп ҡайтырға тейешбеҙ.

Ҡыҙ бала өн өҙ ҡалды. Оҙаҡ ваҡыт үҙе генә ҡаласағын уйлап, күңел еҙләнеп китте, баҙап ҡалды. Ҡорбан, хаж тигән төшөнсәләрҙе аңламай түгел, аңлай. Ҡорбан икән, ҡорбан! Иркә бала кеүек холоҡ оҙланып, ҡарышып ултыра торған ваҡытмы ни?

– еҙгә шулай кәрәк булғас, – тип кенә әйтте.

– Ай, балам, аңлап тора ың, – ҡатын ҡыҙының арҡа ынан тупылдатып өйҙө. – Бының менән генә бөтмәгән бит әле. Күп аҡса ла кәрәк. Уны беҙгә бер кем дә килтереп тоттормаҫ. Тиҙ генә ваҡыт эсендә ҙур сумманы ҡайҙан табырға? Кешенән дә алып торғо килмәй. Шулай булғас, үҙебеҙҙең генә мөмкинлектән сығырға ҡала. Уйлап ҡара аң, фатир тулы мөлкәт, күбе енең кәрәге лә юҡ.

– атырға кәрәк булырмы?

– Эйе, ҡыҙым, баш ау бул а, мал табылыр. Ҡайтмаҫ ергә киткәндәрҙе генә ат башындай алтын биреп тә ҡайтарып булмай.

Тын ҡалдылар. Илмира әсә ҡарары менән ис үҙ еҙ килешә ине. Шунан фатирҙағы йыы аздарҙы күҙҙән үткәрҙеләр.

Бөтә е лә бер иштән бул ын тип, стенканы ла, йомшаҡ мебелде лә Мәскәүҙән ҡайтарткайнылар. Гәлсәр люстраны ҡабыҙып ебәреүгә, ҡыҙыл ағастан я алған йыы аздар өйгә нур ирпеп ебәрҙе. Шкаф эсендәге алтын ялатылған аш, сәй сервиздары ҡалай ялт итеп тора! Бохараға экскурсияға барғанда алып ҡайтҡан келәм саф йөндән генә.

Тормош иптәше Рим вазифалы урында эшләгәс, бөтә е лә мулдан, ҡиммәттән булды шул. Мал йыйыу, түрәләр менән аралашыуҙар бөтә е лә йыраҡ үткәндәрҙә тороп ҡалды ымаҡ. “Шулар бөтә е лә кәрәк инеме икән?“ – Гөлдәриә беренсе тапҡыр үҙенә ошо орауҙы бирҙе. Әлеге ваҡытта тауҙай донъя малы, ошо тиклем йыы аз кәрәкме? Ҡыҙы менән ике енә ике сынаяҡ, бер сәйнүк менән кәстрүл, ике ултырғыс, шунан түшәк кәрәк-ярағы етә. Ә кәрәкмәгәне ҡот осҡос күп. Эйе, тормошта төп маҡсат – мал йыйыу түгел, мәғәнәле йәшәү, тип уйланы Гөлдәриә. Ә мәғәнәле йәшәү үҙе ни була уң? Ике бала ы тормош маҡсаты ымаҡ ине – бере ен юғалтты инде.

Бала ла үҫеп етә, үҙ тормошон башлай. Ә унан уң да үҙеңде нимәгәлер арнап йәшәргә кәрәк бит. аман донъя ҡыуыр, мәхлүк ымаҡ ҡор аҡ тултырыр, уңынан ятып йоҡлар өсөн генә йәшәйме кеше? Рухи донъя тигән төшөнсә лә бар. Үҙеңде, башҡаларҙы бар иткән бөйөк көс тә бар икән. Булмышыңды Бөйөк ижадсыға арнау, ғибәҙәт ҡылыу ымаҡ оло маҡсаттар ҙа бар икән! «Донъяла Алла тигән бер бөртөк инсандың булыуы ахрызаманды кисектерер, кешелекте ҡотҡарыр», – ти торғайны Фәхерниса өләсә е. инең ғибәҙәтеңдең үҙеңә генә түгел, бөтөн кешелек өсөн изгелеге бар икән дә ба а. Уйҙарының шундай йүнәлеш алып китеүенә Гөлдәриә аптыраны.

***

Хаж ҡылырға ҡатын-ҡыҙ яңғыҙы бара алмай, уға юлдаш булып ҡәрҙәшырыуҙан ир-ат йөрөргә тейеш. Гөлдәриә, Римдән башҡа кем бар ын инде, тип уйлап та бөтмәне, телефон шылтыраны.

– Ҡайҙа юғалдың? – Римдең тауышы шаҡтай борсоулы, хафалы. – Йә үҙең шылтыратмай ың, йә мин шылтыратҡанда өйҙә булмай ың. Ҡурҡа башланым хатта.

Гөлдәриә өҙә-йолҡа уңғы ваҡытта кисергән ваҡиғаларҙы өйләргә кереште. Ире уны бүлдермәйенсә тыңланы, хәбәр бөткәс тә өндәшмәй торҙо.

– Алло, алло! Әллә бәйләнеш өҙөлдөмө? – Гөлдәриә хәүефләнеп иренен тешлә-

не. Рим риза булмайынса трубканы алып ҡуй а?

– өйөклөм, ин нисек хәл иткән ең, шулай бул ын әйҙә. Тик иңә яҡшы бул ын, ин генә тыныслан. Үлеп ағындым, ҡайтыр ваҡытты сәғәтләп анайым тиерлек.

Гөлдәриә иренең ризалашасағына ышан а ла, шулай тиҙ генә ыҡҡа килер, тип көтмәгәйне.

"Эйе, Рим генә, фәҡәт ул ысын дуҫ, иптәш була ала," – тип уйланы ҡатын. Күңеленә оло ҡәнәғәтлек, йыуаныс килде. Иртүк торор өсөн унға ҡалмай ятырға булды. Ҡыҙы бесәй бала ындай йомарланып йоҡлап киткәйне. Киң, йомшаҡ урынға ятҡас, күҙҙәре шар асылды, уйҙары йәшлегенә китте.

Гөлдәриәне уйҙары Татарстанына, тыуған Арса яҡтарына әйҙәне.

ис кенә лә айырылмаҫ ине тыуған яҡтарынан, әммә яҙмыш – сит тупраҡта ейер ризыҡтар йөрөтә икән әҙәм бала ын. Ана ул – оҙон толомло, бәләкәй нәфис кәүҙәле ун биш-ун алты йәштәге ҡыҙ. Уҡыу, әсәйгә ярҙам итеү кеүек мәшәҡәттәрҙән бушай алма а ла, йәшлек үҙенекен итә. Үҙенә тиң йәрҙе эҙләй күңел! Дөрөҫ, күҙ атыусылар юҡ түгел. Бер нисә йорт аша йәшәгән Наилде генә алып ҡара. Буй ти әң – буй, төҫ ти әң – төҫ, яҡшы уҡый, тыныс холоҡ – бына тигән егет. Хыялында аҡ плащ кейҙереп, аҡ атҡа атландырып ҡарай. Ҙур ҡуңыр күҙҙәре, ары тулҡын сәстәре уны бигерәк сибәр күр әтә. Синыфында ла бер-ике егет битараф түгел уға. Әммә ата ы өйөклө ҡыҙына берәй егеттең үҙ кушҡанын ғына күр ә лә, ҡыҙып, бәреп үлтерер сиккә етәсе. Өлкәндәре ир бала булып, әллә ни борсолоу алманы. Мәктәпте бөтә барҙылар, тыпылдашып уҡыу йорттарына инә торҙолар. Үҙенең ҡаты ҡуллы, талап итә белеүе менән ғорурлана атай кеше. Ә ҡыҙына тағы ла ҡатыраҡ. «Ҡыҙға – тыйыу, ҡымыҙға – бешкәк, – тип ҡабатлап ҡына тора. – Ҡыҙ – сәскә, сәскәне ҡырҡ төрлө ҡорт ағалай, ҡырау төшөрмәү ҙә фарыз. Институт бөтмәй тороп, егеттәргә күтәрелеп ҡарау юҡ иңә», – ти.

Әгәр иңә ун алты йәш бул а, Хоҙай дәртле йөрәк бир ә, өҫтәүенә сибәр булып, тирә-яҡтан утлы ҡараштар атылып тор а, ни эшләргә уң? Йәйге матур кистәрҙә дуҫ ҡыҙҙар менән киноға барғы ы, күңел тартҡан егеттән оҙаттырғы ы, унын менән серләшеп йөрөгө ө килмәйме ни? Ләкин ҡайҙа ул!

Ҡыҙ, аптырағас, ырлап биҙәлгән матур болдор күтәрмә енә сығып ултыра ла, аяҡтарын ҡосаҡлап, йондоҙ анай. Ирек еҙҙән Зө рә ҡыҙ тура ындағы әкиәт иҫенә килеп төшә. Шул ҡыҙ ымаҡ, айға ҡарап йөрәк ағыштарын, зарын өйләй. "И Аллам, ни эшләп улай көфөр уйҙар уйлай ың?"– тип шелтәләп ала уны өләсә е Фәхерниса ҡарсыҡ. "Юҡ, юҡ, ай, ала күрмә. Үҙемә тиң аҫыл йәр генә насип ит - ен," – ҡыҙ ирендәрен йыш-йыш ҡыбырҙатып, ашығып теләк теләй башлай. Мединститутҡа бер балл етмәне, үтеүҙәре бигерәк ауыр ине шул. әр факультетҡа бер урынға егерме-егерме биш кеше. Шул ваҡытта ул аптырап ҡалманы, күңеле ынманы: медучилищеның фельдшер-акушер бүлегенә барҙы ла инде Гөлдәриә. Баш күтәрмәй уҡыны. Ә унан уң уҡыу йортон яҡшы тамамлап, эш башланы, өнәрен яратты.

Ял көнө ине. Гөлдәриәнең ишеген таң ары ы менән емерә яҙып дөбөрләтә башланылар. Медицина хеҙмәткәре быңдай көтөлмәгән хәлдәргә әр ваҡыт әҙер. Алыҫтан ҡунаҡҡа килгән ҡатын бәпескә сирләп киткән икән.

Йәш кенә бул а ла үҙ эшен яҡшы белгән акушер ҡыҙ Башҡортостандан килгән ҡунаҡтарға бик оҡшаны. Шул тиклем яраттылар, яҡын күрҙеләр, киноларҙағы инд гүзәленә оҡшаттылар. Ҡайтып китер ваҡытта бүләктәр биреп хушлаштылар, иҫтәлеккә фото ын оранылар. Гөлдәриә студент сағында төшкән иң уңышлы фото ын бирҙе.

Бер нисә айҙан Польшанан алдат хаты килеп төшмә енме! Конвертҡа алынған фотонан мыҡты ғына сибәр егет ҡара күҙҙәренән нур сәсеп йылмайып ҡарап тора ине. Егетте нисек кенә оҡшатма ын, үҙен еңеп яуап хаты яҙа алманы. Күрмәгән-белмәгән кешегә яуап яҙып ятырға еңел-елпе ҡыҙ түгел бит ул. Атай тәрбиә е

андың төпкөлөнә еңеп ҡалған икән. Ә егет өҙмәй-ҡуймай хат яҙыуын дауам итте. Ҡайнап торған йәшлек дәрте, киләсәккә өмөт, ышаныс бөркөлә ине ул хаттарҙан. Егет кешенең шул тиклем хисле, бай күңелле булыуы ҡыҙҙы хайран итте. Уны ы үҙенең яуап алмауына ис аптырамай, уй-фекерҙәре, пландары, тормошҡа өйөүе менән уртаҡлашыуын дауам итте. Гөлдәриә ул хаттарға өйрәнде: килмәйерәк тор алар – моң оуланды, ал а – ҡанатланды. Яурындарына пар ҡанаттар үҫкән кеүек осоп йөрөүен иҙеп аптырап та китә, күрмәгән ят кешегә ғашиҡ булырға мөмкинме, тип ғәжәп-хайран була. Шулай хыялыйҙар булып көҙ, ҡыш, яҙ үтте, йәмле йәй килде.

Йәш саҡтан күҙ атҡан егет Наил инженер-механик булып китте. Ата ы йәш етәксене маҡтауҙан бушамай. Ҡартластың тел төбөндә нимә ятҡанын бары ы ла аңлап тора. Ҡыҙының йөрәгенә бойора алмаҫын белә, ул да хәҙер ун дүрт йәшлек бала түгел. Гөлдәриәгә бәхете ҡайҙалыр алыҫта талпына төҫлө, Наилде аҡ атлы ыбайлы итеп күҙ алдына килтермәй хәҙер.

– Ул мин көткән кеше булмай сыҡ а? – тип ағайып уйлана ҡыҙ.

...Ял көнө ине. Ҡыҙ иртүк торҙо, өй йыйыштырҙы, иҙән йыуып сығарҙы. Әхирәте Фаягөл ҡаланан ҡайтҡайны. Әсә е мейес тултырып бәлешен, гөбәҙиә ен бешерҙе. Күңелле итеп сәй эсергә ултырҙылар. Шул ваҡыт Гөлдәриәнең күҙе аңғармаҫтан ғына тәҙрәгә төштө, әм ауып китә яҙҙы. Ҡапҡа төбөндә ул, фотолағы егет, тора! Ба адир кәүҙә, бүректәй тулҡын сәстәр, ҡара ҡаштар... Тиҙҙән егет ихатаға килеп тә инде.

– Кемдер килгән, балам. Бар, ҡаршы сыҡ әле. – Әсә енең әкрен генә тауышынан Гөлдәриә тертләп китте.

Гөлдәриә нисек йүгереп барып ишек асҡанын, егеткә ҡапма-ҡаршы булып, уның ҡосағында ҡалғанын иҫләмәй ҙә ҡалды. Ҡара бәрхәт кеүек йомшаҡ ҡараштар уға төбәлгән, егет наҙлап ҡына уны үҙенә ҡыҫа түгелме уң? Тәүге тапҡыр егет ҡосағында булыу ҡыҙ аяҡтарын ҡамырға әйләндерҙе. Ниндәй оят, тәү күргән кешенең ҡуйынында ҡыймылдай ҙа алмай иҫереп тор инде.

– еҙ кемгә килдегеҙ? – тип ораны ул, тыңлау ыҙ ирендәрен көскә ҡыбырлатып.

Егетте Гөлдәриәнең ата-әсә е лә оҡшатты. Ихласлыҡ шулай арбай бит ул. Атай кеше ҡыҙына берәй егеттең битараф түгел икәнлеген иҙеп ҡалыу менән ҡабынып китә торғайны. Ә был юлы “кейәү балаҡай”ҙан алдыра.

Рим армияға тиклем төҙөлөш-монтаж училище ын тамамлаған икән, әле Өфө нефть институтының архитектура бүлегенә ғариза биреүен өйләне. Имтихандарға тиклем килеп әйләнергә булған икән.

Бер нисә көн күҙ асып йомғансы үтеп тә китте. Гөлдәриәне ғишыҡ утына алып, егет ҡайтырға йыйынды. Ҡыҙға сабыр итеп көтөргә генә ҡала инде.

Йәнә бер килеүенә Рим үҙе хыял иткән уҡыу йортоноң студенты ине. Ике йыл уҡығас, ситтән тороп уҡыуға күсәсәген әйтте.

Ике йыл буйы Өфө – Арса ара ын тапаны егет. Эй, ул саҡтағы йәштәрҙең инсафлығы. Ни тиклем өйөш әләр ҙә, ғиффәтлек ныҡ аҡланды. Танышыуға өсөнсө йыл киткәс, гөрләтеп туй я ап, ҡушылып ҡуйҙылар. Рим кәләшен Өфөгә алып ҡайтты. Йәштәр көн оҙоно эштә. Иртәнән кискә тиклем бер-бере ен үлеп ағыналар. Ҡайҙа инде бер-береңә риза ыҙлыҡ, үпкәләшеү. Көндәр артыҡ оҙон, төндәр күҙ асып йомғансы үтә лә китә ине.

Тәүҙә балалары булмайыраҡ торҙо. Шунан бер-бер артлы Илмира менән Индира тыуҙы. Татыу ғаиләгә нур, мәшәҡәт өҫтәлде. Эш күплектән ваҡыт үткәне иҙелмәй ҙә ине. Балалар мәктәпкә төштө, бик яҡшы уҡып киттеләр.

“Абынырымды алдан бел әм, алам түшәп ҡуйыр инем,” – тигән, ти, берәү.

Шулай килеп сығырын бел әләр, Рим менән Гөлдәриә лә ҡунаҡ саҡырмаҫтар, Индираны йырлатмаҫтар, андуғас тауышлы, өймәлекле генә ҡыҙ баланы сит кешеләр алдына сығарып та баҫтырмаҫтар ине. Ине... ине... Тормошта бына шундай "ине"ләр күп, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ҡунаҡтар таралыу менән ҡыҙ түшәккә ауҙы, күҙ ҡараштары, йөҙө әллә ниндәй булып китте. улып барған гөл төҫлө уҙылып ятты ла ҡуйҙы. Шәфҡәт туташы булып күпме йылдар эшләгән әсә баҙап ҡалды хатта. Табип саҡырттылар. Ул да бер ни аңлата алманы. Стационарға алып, ҡатмарлы тикшереүҙәр үткәрергә кәрәклеген генә әйтте лә, иртүк поликлиникаға барырға ҡушып, китеп барҙы. Тынысландырғыс дарыуҙың тәьҫиренән бала йоҡоға китте, буғай, тип шатланғайнылар тәүҙәрәк. Бер аҙҙан уның йөҙө арғылт-аҡ төҫкә кергәнен күреп, иҫкәнеп киттеләр. Индира улыш алмай ине. Ышанманылар, тағы доктор саҡырттылар. Бала оҙон керпектәрен асмаҫ өсөн йомғайны.

Күҙ тейеүме, башҡа сир-зәхмәтме – бер сәғәт эсендә нәфис гөл күмергә әйләнде. Таныш-белеш, дуҫ-иш ара ында кем шулай ҡара йөрәкле ине уң? Хәйер, күпме ҡатын-ҡыҙ халҡы сәйнәне Гөлдәриәне. Төҫкә сибәр ҡатын, етәкселәр ярата, үҙҙәре теймәй, ис кемдең теше батмай. Ире ҫур түрә, аҡсаны көрәп ала, ҡатынын ҡурсаҡ ымаҡ кейендереү өҫтөнә, тоғро эттәй күҙҙәренә генә ҡарап тора. Шуның өҫтөнә балалары ҡарап туймаҫлыҡ, үҙҙәре яҡшы уҡый, тыңлаусан, әләтле. Ниңә бәхет бер Гөлдәриәгә тауҙай итеп бирелгән, бүтәндәргә шуның остоғо ла тәтемәй? Эйе, тап ошондай үҙҙәр гел йөрөп тора ине. Ҡара көнсөллөк, бәлки, Гөлдәриәгә тәғәйенләнгән булғандыр ҙа, уның өсөн ҡыҙы Индира ғүмере менән яуап биргәндер.

Башта ышана алмай йөҙәнеләр. Индираҡайҙы ерләгәнгә көндәр, аҙналар үт ә лә, ул тере, бына-бына ишекте асыр ҙа килеп инер, тип көттөләр. Илмира эсенә бикләнеп, арыға абышты. Иламай ҙа, көлмәй ҙә, бер кемде ишетмәй ҙә ымаҡ. Туғанының үлеме шул тиклем тетрәндерҙе уны. Уға ла берәй нәмә булмағайы, тип хафаға төштөләр.

***

Оҙаҡ итеп ишек ҡыңғырауы шылтыраны. Таң алдынан ғына йоҡоға киткән Гөлдәриә көс-хәл менән тороп ултырып, йөрәгенең тынысланыуын көттө. Ә ҡыңғырау аман өҙмәй-ҡуймай шылтырай. Ҡатын халатын кейә-кейә ишек төбөнә ашыҡты. Кемдең шулай таң ары ы менән килеүе мөмкин? "Кем ул?" – тип орауға ҡатын-ҡыҙ тауышы: "Иғлан буйынса",– тип яуап бирҙе.

Яҡшы кейенгән, төҙәнгән-биҙәнгән ике ханым килеп инде. Былар затлы өҫ кейемдәрен алып, түргә уҙҙы, ваҡытты оҙаҡҡа уҙмай, йы аздарҙы ҡарап сығырға рөхсәт оранылар. Артыҡ сөсөләнмәй ҙә, шулай уҡ тыйнаҡ ыҙлыҡ та күр әтмәй әйберҙәрҙе иғтибарлап ҡарарға керешмә ендәрме! Илмираның йоҡлап ятыуын күр әләр ҙә, йоҡо бүлмә енә лә күҙ алдылар.

Ни айәт, залға сығып ултырып, өйләшергә әҙерләнделәр.

Үҙен Зоя Александровна тип таныштырған олорағы үҙ башланы:

– Йы аздар бик затлы, яҡшы аҡланған, еҙ ҡай ыларын тәҡдим итә егеҙ?

– Залдағы гарнитурҙы, әгәр телә әгеҙ, йоҡо гарнитурын да.

Рим Хатмулловичтың портретынан күҙен алмай ҡарап ултырған йәш ҡатын: "Әлбиттә, әлбиттә,"– тип ризалаша алды.

– Шкаф тулы сервиз... ни эшләтер егеҙ?

– Алыусы бул а, уларын да атыр инем.

– Мин шундай яуап көткәйнем, былай әр еҙләшеү әллә нисек. Ҡыҫҡа ы, еҙ бөтә өй йы азын атырға итә егеҙ?

– Эйе, шулай.

Үҙҙәрен нәзәкәтле, ба аларын белеп кенә тотҡан ханымдар Гөлдәригә оҡшаны.

– Әйберҙәрҙе кейәүгә сыҡҡан оло ҡыҙыма алам. Хәҙер магазиндарҙың буш ваҡыты, йүнле нәмә табырмын тимә. Әйҙәгеҙ, бөгөн үк хаҡын килешеп ҡуяйыҡ. Күпме орай ығыҙ? – Зоя Александровна диҡҡәт менән Гөлдәриәнең йөҙөнә төбәлде.

– Алты йөҙ мең.

– Ҡиммәтерәк, әлбиттә. Аҡсаның бик кәрәк ваҡытылыр, тип аңлайым, атыулашып тормабыҙ инде. Түләр мөмкинлек бар. Иртәгә үк йөк машина ында килербеҙ, шунда уҡ аҡса ын да түләрбеҙ. Әлегә иҫән- ау булығыҙ.

Ҡатындар сығып киткәс, Гөлдәриә бер аҙ иҫен йыя алмай ултырҙы. Сауҙа былай бик тиҙ осланыр тип уйламағайны. Бер яҡтан, бик яҡшы бул а ла, икенсе яҡтан, эсе бошоп тора. Нисә йылдар буйы йыйған мал-мөлкәтең бер нисә минут эсендә юҡҡа сыҡ ын әле. Баҡсаны ла әллә ни атыулашмай, бер ҡыйынлыҡ ыҙ атып ебәрҙе Гөлдәриә.

***

Гөлдәриә бар оҫталығын алып былау бешерә. Дөгө ярма ын йыуып, ыуын арҡытып ҡуйған. Бәләкәй генә ҡаҙанда тәмле еҫтәр аңҡытып, майҙа ғына йәш арыҡ ите ҡайнай. Духовканан да тәмле еҫтәр бөркөлә. Ҡатын тәҙрәгә лә күҙ алып алырға онотмай. Ҡайнаша торғас, Римдең ишек асып килеп ингәнен дә иҙмәй ҡалды. Ул, туфлиҙарын, йоҡа пальто ын алып, өйөрөлөп йөрөгән ҡатынына кухня ишегенән ҡарап тора. Гөлдәриә кинәт әйләнеп китте лә иренең аҡыллы, сабыр, шул уҡ ваҡытта ағынған ҡараштары менән осрашты. Үҙе нисек иренең ҡосағына барып ингәнен иҙмәй ҙә ҡалды. Рим ҡатынын күтәреп залға алып сыҡты... әм алыр урын тапмай ҡатып ҡалды.

– Рим, иңә күтәрергә ярамай, – тип иҫенә килә алды Гөлдәриә.

Ир кеше аптыраманы, ҡатынын иҙәнгә өйөп ҡуйылған түшәк-мендәр өҫтөнә алды.

– ағындым, Гөлкәйем-бәгеркәйем, – тип бышылданы. – Хәс тә йәшәй башлауҙың тәүге көндәрендәге кеүек. Ул саҡта ла бер нәмәбеҙ ҙә юҡ ине бит.

– Ай, былауым көйә лә ә, – ҡатын кухняға йүгерҙе.

Ашарға ултырҙылар. Рим шифахана ризығынан ялҡып ҡайтҡан, өйөклө өнөң ағынып көтөп алыуына ҡәнәғәт ине.

Гөлдәриә и ә иренең сафланып киткән йөҙөнә, иркәлек ипкән күҙҙәренә оҡланып ҡарап туя алмай.

Ашағандан уң залға сығып уйға ҡалдылар.

– Йә, нисек ҡарай ың мин эшләп ташлаған эштәргә?

– инең булдыҡлығыңды беләм, тик, былай уҡ тиҙ булыр, тип уйламағайным.

– Үҙем дә аптырайым, бөтә е лә ниндәйҙер бер мөғжизә менән эшләнде ымаҡ. Әкиәттәге серле таяҡты болғап ебәреүгә бары ы ла юҡҡа сыҡҡандай булды ла ҡуйҙы. Асыуланмай ыңмы?

– Мин, атеист, әле инең хаҡҡа хажға ла, хатта ер сигенә лә барырҙай булып ултырам. Тик ин генә тыныслан аң ине.

– өйөклөм, беҙгә шул тиклем ҡара наҙан булып юлға сығырға ярамаҫ. Хәленсә доғалар өйрәнеп, тәртиптәрен өйрәнеп барырға кәрәк. Китаптар ҙа алып ҡуйҙым.

Буш фатир эсендә уларҙың тауыштары яңғырап ишетелә. Илмира дәрестән ҡайтты. Ата менән бала сөкөрҙәшеп өйләшергә кереште. Бөгөн Гөлдәриәнең күңеле бөтөн, шат. Ул ҡыҙы өсөн өҫтәл әҙерләргә кереште.

***

Көткән көн иҙҙермәй генә килеп етте.

Иң кәрәкле әйберҙәр, ихрамдар алынған сумкаларын алып иртүк мәсеткә барырға тейештәр. Ата-әсә ҡыҙына нотоҡтарын йәнә бер ҡабатлап сыҡты. Фатирға сит кеше индермәҫкә, уңға ҡалып йөрөмәҫкә...

Мәсеттә халыҡ ҡайнап тора ине.

Имам буласаҡ хажиҙарҙы яуаплы, әр мосолман өсөн изгеләрҙән-изге сәфәргә юлланыр алдынан ҡотлап, уңышлы юл теләп, сәфәр намаҙы уҡырға саҡырҙы.

Өфөнән Дондағы-Ростов ҡала ына осалар икән. Бөтә ен дә бер маҡсат, бер ынтылыш ҡына биләне. Күңел тороштарын буласаҡ етди сәйәхәткә әҙерләп, ихрам кейҙеләр. Хаж кейеме менән Ростовтан Джудда ҡала ына осорға тейештәр ине.

Билдә еҙлек, бөтөнләй ят илгә сәйәхәт күңелдә шом, хәүеф тә уята. Шуның өсөн буласаҡ хажиҙар етди, күбе е эсенә бикләнгән. Гөлдәриә күптән түгел самолетта килеп, йәнә ауа карабына ултырғас, болоҡ оп китте, бөтә булмышын эске ҡаршылыҡ биләне. Ярай әле, эргә ендә йән өйгәне, керпек ҡағыуынан да аңлап, ярҙам итергә тора. Әле лә ире уға йылмайып, "бирешмә" тигән төҫлө ҡулын ҡыҫып ҡуйҙы. Унының ҡарауы, самолет тигеҙлек алғас, ике ен дә шатлыҡ солғаны. Бейектә булыу, уны тойоу шатлығы ине ул. Ап-аҡ болоттар тау-тау булып аҫта йөҙә, өҫтә зәп-зәңгәр күк... Джудда ҡала ын Сәғүд Ғәрәбстанының икенсе баш ҡала ы тип йөрөтәләр – унан Мәккәгә туҡ ан саҡрым ғына.

Был изге ҡала Рәсәй, ғөмүмән, төньяҡ кешеләре өсөн микат – йәғни йыйылыу урыны. Бында буласаҡ хажиҙар тышҡы хәлен, күңел торошон үҙгәртергә тейеш. Сафланыу, Хоҙай Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыуҙан башҡа бүтән маҡсатың булмауы зарур. Самолеттан килеп төшөү менән бөтә е лә үҙен эҫе мунсаға килеп ингәндәй хис итте. ауа ҡайнап, быуланып, монарланып торған төҫлө.

Гөлдәриәнең беренсе уйы "Йә, Хоҙай, был эҫелеккә нисек кенә сыҙамаҡ кәрәк?" булды.

Буласаҡ хажиҙарҙы Мәккәгә алып китәсәк автобустарҙы эстән дә, тыштан да ҡойондороп йыуып яталар. Изге ергә кешеләр генә түгел, хатта машиналар ҙа тәәрәтләнеп инергә тейеш, тип аңлатты белгән кешеләр. Сәфәрселәр ғөсөлләнеп, сафлыҡ-паклыҡ менән автобусҡа ултырҙы. Үҙҙәре хаж ҡылма алар ҙа, хажиҙарға хеҙмәт күр әтергә төрлө илдәрҙән йыйылалар. Имеш, ошо хеҙмәттең сауабы бигерәк тә оло була. Зәм-зәм ыуы ләззәт, туҡлыҡ тойғо о, күңел бөтөнлөгө биргәндәй булды. Автобуста барғанда тәлбиә уҡып барыу тейешлеген аңлаттылар.

"Ләббәйкәллаа үмә ләббәйик. Ләббәйкә ләә шәрикә ләкә, ләббәйик!" "Йә Алла , мин инең ҡаршыңда. Бына мин инең ҡаршыңда!"

Тәлбиә – хаж девизы. А әң менән әйтелгән үҙҙәр ҡаты күңелдәрҙе лә йомшартырлыҡ дәрәжәлә яңғырап, бөтә кешеләрҙе лә ялмап алды. Күҙҙәрҙән аҡкан йылға-йылға йәштәр бөтөн гона тарынды, күңел төпкөлөндә ятҡан ҡай ы бер насар уйҙарҙы йыуып төшөргәндәй булды.

Мәккә ҡала ына килеп ингәндәрен иҙмәй ҙә ҡалдылар. Ҡала ҡайнай. Кемдәр генә юҡ! Аҡ тәнле, зәңгәр күҙле европалылар, таш күмерҙәй ҡара африкалылар, ҡыя күҙле азиялылар – бөтөн ҡитғаларҙан йыйылғандар. Хайран инде. әр бере - енең телендә тә лил, тәкбир, тәлбиә. Ығы-зығы юҡ. Кешеләр бер-бере енә итәғәтле, ярҙамсыл. Әмирҙәр, солтандар, ябай кешеләр бер үк кейемдә, бер дәрәжәлә. Сөнки Ила ҡаршы ында бөтә е лә тигеҙ, фани донъяла тотҡан урының юҡҡа сыға.

Ҡунаҡхана ябайлығы менән ғәжәпкә ҡалдырҙы: иҙәнгә йәйелгән ҡамыш түшәк тә бер ҡат йәймә. Бында бер кем дә уңайлыҡ даулап йөрөмәй. Ирҙәр бөтөнләй башҡа ерҙә урынлаша.

Ул арала икенде намаҙына аҙан яңғыраны. Бөтә е лә Әл-Хәрәм мәсетенә йүнәлде. Мәсет бик ҙур – дүрт яҡлап та Ҡәғбәтулланы урап алған. Гөлдәриә үткән

ике ай эсендә намаҙ тәртиптәрен өйрәнеп бөткәйне инде.

Гөлдәриә юлда уҡ төрөк кешеләре Хәҙисә ханым әм Мостафа әфәнде менән танышҡайны. Улар кешегә үтә иғтибарлы, ихтирамлы, изгелектәре сырайҙарына сығып тора. Әлеге ваҡытта Өфөлә йәшәйҙәр, төҙөлөш бизнесы менән шөғөлләнәләр.Тел мәсьәлә ендә лә ҡаршылыҡ юҡ, беҙҙеңсә бик иркен аралашалар.

Яңы таныштар бергә урамға сыҡты. Мәсет манаралары йәшел нурҙар менән солғап алынған. Был күренештән күҙҙе айырып та алып булмай. Гөлдәриә иреклеҙҙән бала саҡта уҡыған “Мең дә бер кисә” әкиәттәрен, серле арайҙарҙы иҫенә төшөрҙө. Тирә-яҡта энә төртөр урын юҡ. Төндө төн тимәй, әр урында ғибәҙәт ҡылалар. Был борон-борондан изге ерҙәр. Бында мосолман динен тотҡан кешеләрҙең йөрәктәре осраша, улар ошо тарафҡа йүнәлеп, бер маҡсатҡа ынтылалар. Хаж ҡылыусы үҙенең Раббы ында ҡунаҡта анала. Шуға үҙен лайыҡлы тота ла.

Ошонда килгән кешеләр ваҡыттың бер минутын да әрәм итмәй, донъялыҡта ҡылған гона тарынан арынырға, тәүбә ҡылырға ашыға. Рим менән Гөлдәриә әле генә нимәлер аңлай башлағайны. Мостафа әфәнде ошонда уҡ ғибәҙәт ҡылырға тәҡдим итте. Бөтә ен дә ила и күтәренкелек биләне, көндөҙгө эҫелек үрелмәгән таштарға теҙләнеп намаҙ уҡырға керештеләр. Ваҡыт иҫәбе юғалды. Ғибәҙәт ҡылыусылар үҙҙәрен Хоҙай Тәғәлә алдында яңғыҙ ҡалғандай хис итте.“Алла ү әкбәр, Алла ү әкбәр!” тигән тауыштар ғәҙәти тормоштан юғарыға осортоп алып китте...

Аҡ яҡтылыҡ ҡуйырҙы, тән менән иҙә алырлыҡ дәрәжәгә етте. Таң яҡынлаша, буғай. Сәждәгә киткәндә, Гөлдәриәне йоҡо баҫҡандай итте. Ул үҙ халәтен үҙе аңламай ине, йоҡлайым ти ә – күҙе асыҡ. Үҙен ик еҙ-сик еҙ аҡ нур солғағанын, шул нур донъя ында тороп ҡалғанын иҙҙе. Ҡояш яҡты ы түгел был, тағы ла сағыуыраҡ, шулай бул а ла ҡырҡыу түгел, йомшаҡ, иркәләүсе яҡтылыҡ. Гөлдәриә хайран булып тора, бар булмышы рәхәтлек донъя ында гиҙгәндәй, яурындарына ҡанат үҫкәндәй, аяғы ерҙе тоймай. Рәхәт кенә тирбәлеп, йомшаҡ яҡтылыҡҡа ҡойоноп, бейеккә менеп урап килде, ғибәҙәт ҡылған йәмәғәт күҙенә ап-асыҡ салынды. әр әҙәми зат үҙенсә нурлана ымаҡ: берәүҙәр аҡ ыл ары, нурлы зәңгәр, йәшкелт, ә икенселәр орғолт, йәм еҙ ҡара төҫтәр сағылдыра. Шул ваҡыт күкрәп торған ауаз бар донъяны тетрәтте, ҡатын үҙенән йәшен үтеп киткән ымаҡ хис кисерҙе. Аҡ яҡтылыҡ ҡуйырҙы, тән менән иҙә алырлыҡ дәрәжәгә етте.

“Ни юғалтҡан ың, шуны табыр ың...” Бары бер генә өйләм. Бөтә ғаләм тынлыҡҡа сумды. Күк яҡтылыҡты тартып алды. Гөлдәриә күҙ ҡабаҡтарын асалаҡ-йомалаҡ итеп алды. Бөтә е лә элеккесә. Йөрәк күкрәк ситлеген вата яҙып тибә. Ул үҙенең ныҡ ҡурҡҡанлығын иҙә, ни эшләргә белмәй йонсой. Әллә өн, әллә төш, тип аман аптырай. Ҡатын үҙен ҡулға алып, башҡаларҙы хафаға алмаҫҡа булды. Әгәр ҙә был хәл ысындан да бул а, моғайын да, сер итеп аҡланырға тейештер.

***

Ҡәғбә куб рәүешендәге ғибәҙәтхана, имеш. Уның тарихы ғибрәтле әм серле. Әҙәм ғәләй иссәләм ожмахтан ҡыуылғас, үҙенең күктәге ғибәҙәт урынын ағынып илаған. Хоҙай Тәғәлә, уны ҡыҙғанып, үҙенең ила и көсө менән ғибәҙәтхананы күктән ергә төшөргән. Әҙәмдең вафатынан уң Ҡәғбәтулла яңынан күккә мендерелгән.

Ошо урында Ибра им пәйғәмбәрҙең ҡол ҡатыны Хәжәрҙән тыуған улы Исмәғил, бәпәй сағында илап тиберсенеп, Зәм-зәм шишмә е сығарған. Исмәғил үҫеп, ир-егет ҡорона ингәс, ата ы менән йәнә ошо урында ғибәҙәтхана ҡororға керешкән. Уларға был урынды Ябраил фәрештә күр әткән.

Ғибәҙәт ҡылыу төньяҡ-көнсығыштан башланып, сәғәт йөрөүенә ҡаршы башҡарыла. Урынын билдәләү өсөн диуарға күктән төшкән ҡара таш ҡушып алынған. Таш тәүге мәлдә ап-аҡ булып, гона лы әҙәмдәрҙең ҡағылыуынан ҡараға әйләнгән. Был тарих, телдән-телгә күсеп, беҙҙең көндәргә килеп еткән. Мәжүсилек ваҡытында Ҡәғбәгә таш ындар – боттар ултыртып, шуларға табынғандар.

Ислам дине таралғас, боттарҙы сығарып ырғытҡандар.

Изге ҡара таштың йәшен билдәләү мөмкин булмаған кеүек, уға ҡағылып Алла - ты данлаған, унан ярлыҡау ораған әҙәм балаларының анын белеү мөмкин түгел. Борон замандарҙа Ҡәғбәне өс тапҡыр йүгереп, уңынан дүрт тапҡыр атлап урағандар. Әлеге заманда ла шул шартты үтәргә тырышалар. Халыҡ күп, яурынға- яурын терәлеп баралар. Алда барыусының үксә енә арттағылар баҫып тигәндәй килә. Хәрәкәт етеҙ бара, әгәр инде йығыл аң, бөттөң тигән үҙ, бүтән баш ҡалҡытыу мөмкин түгел. Хаж сәфәрендә вафат булыусылар тура ожмахҡа инә, тигән риүәйәт бар.

Бер кем зарланмай, ауыр ынмай, мейе ҡайнатырлыҡ эҫелә үҙҙәренең мосолманлыҡ бурысын үтәй. Ҡай ы бер хажиҙарға изге диуарҙарға барып етеп, уға ороноу бәхете лә тәтемәй, йыраҡтан ғына күреүгә мөрхәт енеп ҡайталар. Атлап йөрөй алмаған зәғифтәр йә ныҡ ҡарттар ат, ишәк, дөйә менеп тә урайҙар. Ҡарт атаәсәләрен коляскаға ултыртып йөрөткән йәш кешеләр ҙә бар.

... Бына нисәнсе көн инде улар Ҡәғбәтулла янына үтеп инергә тырыша. Күпме хәрәкәттә булғанын Гөлдәриә иҫләмәҫ хәлгә етте. Ҡояш ҡайнарлығы, меңәрләгән кеше тәненән сыҡҡан эҫелек түҙеп торғо оҙ. Ҡай ы ваҡыт бына-бына йығылыр ҙа артта килеүселәр уны тапап уҙыр ымаҡ. Рим ҡатынының хәлен еңеләйтергә тырыша, яурындарынан аймап тотоп, этеп тигәндәй алып бара. Күптән түгел генә йөрәк ауырыуы кисер ә лә, үҙен хәлле генә тоя. Изге ер сирлеләрҙе ауыҡтыра, тигәне ошомо әллә? Бәлки, Гөлдәриә өсөн яуаплылыҡ уға көс биргәндер, кем белә?

Бәрәкалла ! Ысынмы-бушмы, өнмө-төшмө? Ҡара таш тура ына еткәс, халыҡ төркөмө кинәт икегә айырылып китеп, Ҡәғбәтулла ҡа уҡмаҡ ярылды. Рим менән Гөлдәриә шул юлға ташланды әм... күҙ асып-йомғансы маҡсаттары булған таш янына барып еттеләр. Ни айәт, бына ул Ҡәғбәтулла диуары, уға индерелгән ҡара таш. Тәүәф ҡылыусы йөҙө менән ташҡа боролоп: “Бисмилла и, Алла ү әкбәр!”— тип ташты үбә. “И, иң бөйөк берҙән-бер көс, аҡыл, мөғжизә эйә е! Зин ар, мине был донъяла мәхрүмлектән, бахырлыҡтан, күңел яраларынан ҡотҡар, теләгән теләктәремә ирештер, Ила ым!” Ошо уйҙар Гөлдәриәнең аңынан йәшен тиҙлегендәй үтте. Ул изге ҡара ташҡа ҡағылған ҡулдары менән Римдең йөҙөн ыпырҙы, ире аңлап баш иҙәне. Алла йортон ете тапҡыр урағандан уң ғибәҙәтхананан алыҫлаша башланылар, халыҡ ташҡыны уларҙы ситкә ирпте. “Раббинә әтинә фид-донъя хәсәнәтән вә фил-әхирәти хәсәнәтән вә ҡыйнә ғазабан-нар!” Шул доға менән Ҡәғбәтулла ты тауаф ҡылыуҙы тамамланылар.

Ике енең дә йөрәктәренә көс-ғәйрәт тулғандай булды. Улар, шулай итеп, төп маҡсаттарына иреште! Артабан Ибра им ғәләй иссәләм ғибәҙәт ҡылған ергә — Мәҡәм Ибра имда ике рәкәғәт намаҙ уҡынылар. “Мәҡәм Ибра им” тип Ибра им пәйғәмбәр Ҡәғбәтулла ты төҙөгәндә баҫып торған урынды әйтәләр. Ташта апасыҡ булып ике аяҡ эҙе ҡалған. Шул эштәрҙе тамамлағас, Зәм-зәм шишмә енә барып ыу эстеләр:”Йә, Алла , мине әм барлыҡ мосолман ҡәрҙәштәремде ғәфү итеүенде орайым, ошо ыу аша дауа эҙләп эсәм. Миңә шифаларыңды бир, ҡиәмәт көнөмдә ыу ындарымды баҫ”.

Ошо изге ыуҙы кеше ниндәй теләк менән эсә, шуға ирешә. Ауырыуҙан ауығам ти әң — ауығыр ың, ас бул аң — туйыныр ың, сарса аң — сарсауың ҡаныр. Зәм-зәм шишмә е — Алла тың Исмәғил пәйғәмбәренә ебәргән оло бүләге.

Хәжәр әсәбеҙ Сафа әм Мәрүә тауҙары ара ында йүгереп ыу эҙләп йөрөгәндә, Ябраил фәрештә уның улы Исмәғил янына килеп ергә тибә. Шул урындан шишмә бәреп сыға. Хәжәр ыуҙы, ҡыҙғанып, таштар менән ҡоршай. Әгәр ул ашығып килмә ә, ыу көслө ташҡын булып тирә-яҡты баҫыр ине.

Зекер, Алла ҡа ялбарыуҙар менән ете тапҡыр урау иҙелмәгән дә кеүек. Эҫелеген эҫе инде, әллә өйрәнделәр, әллә Хоҙай үҙе көс бирә, хәлдән тайып арыу иҙелмәй.

Шулай итеп, уларҙың ғөмрә е — кесе хаждары үтәлде. Рим сәсен ҡырҙырҙы, ә

Гөлдәриә бер илеләй сәсен киҫтерҙе.

Иркен тын алып, ғөсөл ҡойоноп, хуш еҫле майҙар өртөп ихрамды яңынан кейҙеләр. ыу аған айын изге ыу эсеп торғанғамы икән, көс тиҙ инде.

Рим ҡатынының кәйеф еҙ йөрөгәнен абайланы.

— Ниңә ҡобараң осто?

— Ғүмерҙә бер килеп, ғәмәлдәрҙе тулы ынса үтәй алмайбыҙ. Ҡорбанлыҡ алырға аҡсабыҙ ҙа юҡ.

— Ураҙа тот аң, үҙе ҡорбан була, тип әйтәләр. Бында көн беҙҙәгенән ҡыҫҡа.

— Йә, Аллаға тапшырайыҡ. Сарсауға түҙ әк.

Шундай ниәткә килгәс, күңелдәре хушланды.

Бөгөн Зөлхизә айының игеҙенсе көнө. Хажды дауам итеүселәр Минаға йүнәлә. Бында төн сығыу тейешле. Иртәнге ғибәҙәттән уң юлдарын дауам итәләр. Алда Ғәрәфә тауы. Был, яуаплы, сауаплы бурыстарҙың бере е. Тауына менеп, Хоҙайҙың әжерен үтәгән кешеләргә ул бигерәк тә мәрхәмәтле, уларҙы тамуҡ утынан ҡотҡара. Алла үҙенең фәрештәләренән орай: “Минең бәндәләрем ара ында мохтаждар бармы? И, фәрештәләрем, мин уларҙың бөтә гона тарын ғәфү иткәнемә ша ит булығыҙ!” Юлда барғанда аман да “Алла үмә! Ләбәйкә”,”Алла ү әкбәр!” тип туҡтау ыҙ Хоҙайға мөрәжәғәт итә-итә барҙылар. Бөтә халыҡ бер маҡсат менән хәрәкәт итеү сәбәпле, был бурыстар ул тиклем ауыр тойолмай. Гөлдәриә эҫегә лә, был ғибәҙәттәрҙең ауырлығына ла күнекте. Хатта ки бер эске ҡәнәғәтләнеү, ләззәт, еңеллек тоя. Юғары, ҡанатлы хис елкендереп тора. Үҙе шул бурысты атҡарыр өсөн донъяға тыуған төҫлө.

Ғәрәфәләге ғибәҙәт ҡояш иң юғары нөктәгә еткәс башлана, был ауыр ғәмәл анала. Имам артынан теҙелеп, бөтә е лә намаҙға баҫа. Аҙан тауышы күккә аша. Ила и бер тантана бөтә енең дә бар булмышын солғай: “Лә ила ү иллә Алла !” Ғибәҙәт ҡылыусыларҙың тауыштарынан Ер, Күк, Ҡара ҡаялар тетрәй. Тауҙың урта ерендә Жәбәл әр-Рәхмәт тирә ендә тороу бигерәк тә сауаплы анала. Рим менән Гөлдәриә тап ошо урынға тура килгәйне. Хоҙай рәхмәте шулай ғәжәпләндерә, уйландыра. Хоҙай илсе е лә ҡаялар эргә ендә намаҙ уҡыған, тигән риүәйәттәр бөгөнгө көнгәсә килеп еткән.

Өйлә, икенденән уң ҡояш аҫҡа тәгәрәй башланы. Ғәрәфәлә ҡояш байыҡкас, хажиҙар Мөздәлифәгә йүнәлә. Был юлда инде бер кем дә өндәшмәй. Бында ла төн уҙҙыралар. Мөздәлифәләге ғибәҙәт әҙәмдәрҙе гона тарынан арындырып, кеше яңынан тыуғандай була.

Мәшғар Хәрам тигән урында Иблис мәлғүнгә атыр өсөн таштар йыйҙылар. Таш атыу символик мәғәнәгә эйә. Йолалар Рәсәй хажиҙары өсөн шаҡтай ҡатмарлы, шулай бул а ла, ихтыяр көсө енә. Мәхшәр ваҡытында әҙәм бала ы япа-яңғыҙ булған кеүек, бында ла күп ваҡыт яңғыҙ. Әгәр берәй ерҙә аунап ҡал аң, бер кем дә ярҙам итмәҫ ымаҡ. Ләкин улай түгел. Кешеләр бер-бере енә ҡарата ғәйәт иғтибарлы. Телен аңлама алар, махсус рәүештә кейҙерелгән күн беләҙеккә ҡарап адресын беләләр. Аҙашып йөрөгәнде оҙатып ҡуйыу, кәрәкле автобусҡа ултыртып ебәреү — ғәҙәти күренеш. Сафа менән Мәрүә тауҙары ара ында хәлдән тайған оло кешене ике йәш кеше ярҙам итеп, ҡултыҡлап алғанын Гөлдәриә үҙе күрҙе.

Янында Рим булма а, Гөлдәриә был тиклем мәшәҡәттәрҙе йырып сыға алыр инеме? Икеле. Шуға ла ҡатын-ҡыҙ ир кеше оҙатыуында йөрөргә тейеш, тигән тәртип ҡуйылғандыр инде. Шөкөр-шөкөр, мең ҡат шөкөр! Бөтә бурыстар ҙа үтәлә килә, бына инде таш атыу ғәмәле генә ҡалды.

Таш атыу Ибра им ғәләй иссәләм пәйғәмбәрлек иткән замандан ҡалған. Пәйғәмбәр төш күрә: улы Исмәғилде Алла ризалығы өсөн ҡорбан итергә тейеш. Ибра им улын ҡорбан итер өсөн Минаға юл тота. Юлда Иблис мәлғүн осрай әм орай:

— Әй, Ибра им, ҡайҙа юл тоттоң?

– Раббым әмере менән улымды ҡорбан итергә. Улым Алла хозурына китә.

– Улай эшләмә, ин енәйәт ҡыла һың.

Пәйғәмбәр Иблискә таш ата, ул ергә һума. Был урында хәҙер беренсе бағана тора. Уртансы бағана, уңғы бағана туры һында Иблис Ибраһимды ниәтенән дүндерергә тырыша. Ибраһим уға етешәр таш ата.

Исмәғил башын ташҡа ҡуйғас, ата һына:

– Йөҙөмә ҡарама. Ҡыҙғаныр һың, ҡулың күтәрелмәҫ. Ҡулдарымды бәйлә, мине йөҙтүбән ал, – ти.

Ибраһим ҡулына бысаҡ ала һәм күктән килгән: “Төшөңә ышанма!”– тигән тауышты ишетә. Шунда уҡ бер бәрән дә төшә, ул йәннәттә йәшәгән тәкә була. Шул көндән башлап ҡорбанға айыры тояҡлы мал салына.

Бына ошо йоланы үтәүҙең тәүге көнө – Йәүмүн-нәхр килеп етте.

Гөлдәриә менән Рим был урынға иртүк килеп еттеләр һәм үкенмәнеләр: кеше күп түгел ине. Ете таш та тейешле урынға тейҙе, ҡабат йөрөүҙең хәжәте лә булмаясаҡ. Ҡорбан салыусылар ҡорбанлыҡ һатып алып, уны салыу мәшәҡәте менән ҡайнаша. Беҙҙең сәйәхәтселәр ураҙа тотоу менән сикләнгәс, ҡайтып киттеләр, йәнә сәс киҫтерҙеләр, Ҡәғбәгә йүнәлеп, ашыҡмай ғына тағы урап сыҡтылар. Йәнә лә зәм-зәм эсеп, тауҙар араһын ете уранылар. Инде беренсе, икенсе, өсөнсө тәшриҡ көндәре – йәнә лә таш атыу көндәре ҡалды.

Бөтә мәшәҡәт артта ҡалды. Өҫтәренән тау төшкәндәй еңел уланылар, тирә-яҡты күрер хәлгә керҙеләр. Гөлдәриә иғтибар итмәгән икән: бында ла тормош ҡайнай, донъя мәшәҡәттәре лә күп. Хажға тип килеүҙәренә ҡарамаҫтан, күптәр көнкүреш кәрәк-ярағы алырға тырышып ята. Ул кибеттәр әйбер-ҡаранан ығылып тора, етмәһә, арзан да. Иң аптыратҡаны быҫҡы вағы менән аралаштырып тултырып ҡуйылған аҫылташтар булды. Йәм-йәшел зөбәржәт, ҡып-ҡыҙыл яҡут, ой-ошҡан ҡан төҫөндәге гранат, зәп-зәңгәр фирүзә, йәйғор нурҙары һипкән гәүһәр, ысын диңгеҙ ынйыһы... Хатта бер нисә ен кеҫәнә тыҡ аң, иҙмәй ҡалырҙар һымаҡ. Алла йортона килеп, шундай ҡылыҡ ҡылырға кем баҙнат итер? Мөмкинлегең бул а, үҙеңә оҡшағанын һатып алырға мөмкин. Шул нәмәләрҙе күпләп алған кешеләр бар. Рәсәйҙә, ни ти һәң дә, кризис ваҡыты, теләгән нәмәңде табырмын тимә. Шуның өсөн рәсәйлеләр телевизор, магнитола кеүек нәмәләр алырға тырыша. Донъяуи эштәр менән ҡайнашҡанда аҙан тауышы яңғырай. Шул саҡ хәрәкәт туҡтап, бөтәһе лә намаҙ уҡырға тотона. Бар ер таҙа. Һәр бер урында намаҙлығыңды йәйеп, намаҙ уҡырға була.

Күп кенә хажиҙар дә риҙәр, кафырҙар иленән килгән Рәсәй кешеләрен хөрмәт итмәй, йәшерен ытырғаныу менән ҡарай. “Былар ҙа әҙәм рәүешлеләр икән дә,” – тип аптырағандары иҙелә.

Бындағы йорттар бөтөнләй башҡа төҫлө. Саман стеналар бик ҡалын, тәҙрәләр бәләкәй генә итеп уйылған. Былай төҙөү климаттың эҫелегенән килә. Ҡалын диуарҙар, ваҡ тәҙрәләр көйҙөргөс ҡояштан аҡлай. Был илдә тик ирҙәр генә йәшәй, тип уйларға мөмкин. Хажиәләрҙән башҡа ҡатын-ҡыҙ күрмәҫ һең. Бөтә ерҙә лә ирҙәр хеҙмәтләндерә, хатта күңел еҙ булып китә. Бындағы донъя гел ҡаранан һәм аҡтан ғына тора. Ҡатындар үҙҙәренең ҡәлғә һымаҡ фатирҙарынан сыҡмай тиерлек йәшәй. Бала тәрбиәләйҙәр, ирҙәренә хеҙмәт итәләр. Мең йылдар дауамында шулай була ла, бер ҡатындың риза иҙлыҡ белдергәне юҡ. Сөнки уларҙың барыһы ла ҡараулы, аяулы, аҡлаулы. Иртәгәһе көн өсөн ҡайғырып ултырмайҙар, ирем эсеп ҡайтыр, тип ҡан ҡалтырамайҙар, балаларыма ни ашатайым, ни кейҙерәйем, тип көймәйҙәр.

Хаж ҡылыу бурысы үтәлгәндән һуң, бөтәһе лә үҙ илдәрен иҫтәренә төшөрөп йөрәк ей. Ошо мәшәҡәт менән йөрөгәндә бөтә донъяуи уйҙары ситкә китеп торған икән. Әле килеп Гөлдәриә Өфө өн иҫенә төшөрөп, шул тиклем тыуған ерен ағынғанын тойҙо. Илмира ы етем ҡошсоҡ кеүек, мәхрүмлек тойғолары кисереп, күңел еҙ генә йөрөп яталыр. Ал ыҙ-ял ыҙ тулҡынланған, ҡайнашҡан кешеләр диң-

геҙенән, өтөп алып барған эҫелектән тиҙерәк ҡотолғо о килде. Шуның менән бергә, үтәлергә тейеш аманатын атҡарған кешеләргә хас булғанса, рәхәт бер күңел тыныслығы килде. Ал ыҙ-ял ыҙ йөрәген өткән ҡайғы төпкөлгә төштө.

***

Ах, Тыуған илдең ауа ы! Йәй башының иркә еле тәненде генә түгел, йәненде иркәләп ҡосағына ала. Ҡурып алып барған эҫелектән ис бер ҡасан да ҡотола алмаҫтар, шунда сарсап кибеп ятып ҡалырҙар ымаҡ хис кисерә ине Гөлдәриә. Әле килеп шундай ҡанатлы бер еңеллек солғап алған. Аэропортта сәскәләр тотҡан яҡындары, гәзит хәбәрселәре, ҡотлаусылар төркөмө ҡаршы алды.

Гөлдәриә менән Рим дә шатланып өйләшәләр, яуап бирәләр, туған телдең ҡабатланмаҫ моңона ләззәтләнәләр.

Улар яҡын булып киткән юлдаштарынан айырылып, иркенләп автобуста ғына ҡалаға ҡайтырға булды. Балаҡай өҙгөләнмә ен, ҡаршы алам тип мәшәҡәтләнмә- ен тип, ҡыҙҙарына ҡайтыр сәғәттәрен әйтеп тормағайнылар.

Шалтырап торған буш фатирҙары йәмле, рәхәт тойола. Илмира ҡыуанысынан бөтөнләй баҙап ҡалған. Ул бала шулай хис-тойғоларын ошо йәшенән үк йүгәнләй аламы, әллә тышҡа сығара белмәйме, шулай сабырмы әллә? Бөтөн булған шатлыҡ-ҡыуанысы күҙҙәренән генә бөркөлә. “ ай, балаҡайым, әллә бар булған хистәремде, өйөүемде Индираға ғына арнап, ине әсә наҙынан мәхрүм итәм түгелме?” Хатта йүгереп килеп ҡосаҡларға баҙнат итмәй тора бит инде.

— Балам, күҙ нурым, нисек кенә көн күрҙең? — Гөлдәриә йөрәк яр ыуы менән ҡыҙын ҡосаҡлап алды. Ҡыҙ бәләкәй генә булып әсә енең күкрәгенә еңде. Күпме көттө, күпме хыялланды ошо хаҡта. “Әллә әсәйем мине яратмаймы икән?” — тип уйлап та ҡуя торғайны. Әсә енән уң ата ы ҡосаҡлап, тупылдатып арҡа ынан өйҙө, башынан үпте.

Юл күстәнәстәре менән сәй эсергә ултырҙылар. өйләшеп үҙҙәре бөтмәне. Аратирә телефон шылтырауы ғына уларҙың сөкөрләшкәнен бүлдерҙе. Күмәк кеше ара ында ҡайнашыуҙан арып, өйҙәге иллек менән хозурландылар.

Шул тиклем арып-талып урын йәйҙеләр. Әллә ҡайҙарҙан, икенсе ҡитға, ят донъяларҙан урап ҡайтыу уйын эш түгел шул. Иртәгә е көнгә уларҙың бер эше лә юҡ, арыған йән-тән ял орай.

Ата-әсә е ҡайтыуға шатланған ҡыҙ ҡәнәғәт бер тыныслыҡ менән, ҡоластарын йәйеп, йән белмәй йоҡлап китте.

Иҙәнгә йәйелгән түшәктәрендә күпмелер ваҡыт донъяларын онотоп ял итеп алғас, Гөлдәриә күҙҙәрен асты. Ире күҙҙәрен тултырып уға ҡарап ята. Ул ҡараштарҙа бөткө өҙ өйөү, наҙ, ағыныу, яратыуға ыу ау.

Улар ҡасан яҡын булғандарын да оноторҡан инде. уңғы тапҡыр өйөшкәндә ғаилә тулы, бәхетле ине. Индираның вафаты бөтә кешелек бәхетен юҡҡа сығарҙы кеүек. Бына ир кеше ҡулын аҡ ҡына ҡатынының тетрәнгән тәненә ала, ирендәре бик аҡ ҡына унын ирендәренә ҡағыла. Шунан ике е лә әлегәсә күрелмәгән донъяға әллә осалар, әллә сумалар — билдә еҙ. Күпме ваҡытҡа уҙылды был халәт — аңламанылар. Ҡатын ҡарынында энә осонан да бәләкәйерәк тормош остоғо барлыҡҡа килде. Оло кисерештән ҡатын кешенең булмышында йәшәү яралғы ы бөрөләнәсәген, был осраҡтың миллиондан бер генә кешелә булыуын ике е лә белмәй ине.

Улар татлы йоҡоға талды. Яралғы ғына йоҡламаны. Бар донъя ил саҡта әсә ҡарынында нығынып ҡалырға ашыҡты. Үҙенең киләсәк йәшәү ҡеүәте тап ошо мәл менән бәйле икәнен йәшәү остоғо аңлай ине.



Рәйсә
**КӘРИМОВА**

# ҠУНАҠ

## ХИКӘЙӘ

Айвар тағы ла өҫтәлгә ит тулы оло табаҡ ҡуйҙы.

— Әйҙә, әле, Рәшиҙә, нимә йоҡлап ултыра ың! ыйла ҡунаҡтарҙы, беҙгә мәскәүҙәр көн айын килеп төшмәйҙәр! — тип ул мәғариф идаралығы етәксе енә йылмайып ҡарап алды.

— Рәхмәт төшкөрө, рәхмәт. Оҫтабикәләр әҙерләгәнде биш көн буйы ашап бөтөрлөк түгел! — Екатерина Борисовна, көлөп, рюмка ын ситкә алып ҡуйҙы.

— Ю-ю-юҡ, башҡорттар әйтмешләй, ҡунаҡ — хужаның ишәге! Ишеткәнегеҙ бармы шундай әйтемде?! еҙ бит филолог, шулаймы? Рус телендә бармы шуға оҡшаш әйтем? — Айвар орау бирҙе лә, рюмка ын урынына ҡуйып, ыйлауын дауам итте.

— Ғәжәп, ләкин иҫкә төшөрә алмайым ниңәлер. Башҡорттар өсөн ҡунаҡсыллыҡ — иң изге сифат, тип ишеткәнем бар! Минең Башҡортостанға был беренсе килеүем түгел, ауыл мәктәптәрен йыш ҡына ҡарап йөрөргә тура килә, — Екатерина Борисовнаның ошо үҙе хужаның йөрәгенә хуш еҫле май булып түгелде.

— Ҡунаҡсыллыҡ тигәс, мин еҙгә күптән булған бер хәлде өйләйем әле. Ул саҡта мин яңы ғына өйләнгән инем. Хәҙер балалар үҫеп бөттөләр инде.

Ғаилә нигеҙе бит, үҙегеҙ беләгеҙ, — ауылдамы, ҡаламы — өй, усаҡ. Шуға ла туғандарым менән миңә ҙур өй алырға булдыҡ. Бөрйәндә таныштар йәшәй ине, бура атып алырға шунда киттек, — Айвар йәш саҡтарҙы хәтерләп, бер аҙ йомшарып өйләй башланы. — Беҙҙең ауылдан Бөрйән яҡтарына юл алыҫ ҡына, тап ике көн дә бер төн, тигәндәй. Унға ун метрлыҡ бураны алып ҡайтырға өс "КАМАЗ" ыҙ эш килеп сыҡмаҫ тип, оҙон прицеплы машиналарға ултырып киттек бер саҡ. Водителдәре йәш кенә егеттәр, икәү е — урыҫ, берәү е — башҡорт малайы. Кабинамда бер йәшник араҡы ла бер тоҡ папирус. Үҙегеҙ уйлағыҙ, бураны тейәргә кәрәк, эшселәрҙе лә тиҙерәк эшлә ендәр өсөн майлайым, тим бит инде.

Көн буйы иҫәбе-хисабы булмаған ауылдарҙы, ялан-урмандарҙы үтеп, кис еткәс

---

*Рәйсә Кәримова (Хәйруллина) — филология фәндәре докторы, профессор, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ проректоры.*

*Өфөлә тыуып үҫкән. Әҙәби әҫәрҙәрен русса ла, башҡортса ла яҙа.*



бәләкәй генә йылғә ярында туҡтарға булдыҡ. Тәбиғәте бигерәк матур: алда урман, тауҙар башлана, йылғаы тар ғына бул а ла, бормалы, шарлауыҡлы. Рәхәт! Ҡараңғы төшөп китте бер заман. Тиҙ генә ҡоро- ары ағас йыйып, усаҡ яғып ебәрҙек. Тағанды элеп, йылғанан ыу алып килеп — элек әр бер йылғаның ыуын шикләнмәй эсә инек — сәй ҡайнатырға ҡуйҙыҡ.

Йылға шылтыр-шылтыр таштарын тәгәрәтә, унаң теге яғында, тау битендә, биш-алты өй — әллә ауыл, әллә берәй хутор, шайтан бел ен — саҡсаҡ күренеп тора.

Сәй ҡайнап та өлгөрмәне, ҡапыл ғына ниндәйҙер тауыш ишетелде. Йылға ы ай бит инде, ыу сәпелдәгән тауыш ишетелде. Кит, әйтәле ин, төн урта ында Алла үҙе оноҡкан, эт бармаҫ ерҙә кем йөрөй икән кеше ҡурҡытып!

Ҡот осто, тип әйтеп булмай инде, дүрт иратбыҙ, йәшбеҙ, шулай ҙа егеттәр монтировкаларын әрмәп алып ҡуйҙылар — так, на всякий пожарный. Тын алмай торабыҙ, шаҡ ҡатып, малай. Ә шул арала бер нисә кеше зарланып, асыулы тауыш менән үҙ-ара өйләшеп яҡынайып килә. Эх, мин әйтәм, эләктек былай булғас! Күрә ең, йылға ярында туҡтарға ярамаған, йә шул ауылдың берәй законын боҙғанбыҙ. Ҡыйын бул а ла, берәй яйын табып, был хәлде төҙәтергә кәрәк. Нисек итеп уң? Шулай тип уйлап та бөтмәнем, ут янына өс кеше килеп баҫты. Иң оло о, алғараҡ сығып, туҡтау ыҙ зарлана башланы:

— еҙ кемдәр була ығыҙ? Нинә төн урта ында күк аҫтында туҡтап усаҡ яға ығыҙ? Ҡара ин уларҙы! Сәй эсеп ултыралар, имеш! Ҡай ы яҡтарҙан, ҡайҙа юл тота ығыҙ?

Мин, каруан башлығы булараҡ, килеп сығам бит инде, үҙ ҡыҫтырырға маташып ҡарайым:

– Ярай инде, ағай, тыныслан, бигерәк уҫал ың, ғәйеплебеҙ икән — әйҙә, аңлашып, өйләшеп алайыҡ. Делов-то! – тигән булам, үҙем иплəп кенә тегене тик-

шерәм. Ҡарап тороуға уҫал күрен ә лә, сырайы асыҡ, яғымлы ымаҡ тағы.

– Делов-то, ти еңме? Үәт оят ыҙ зат! – тип ҡыҙып киткән булды ағай.

Их, мин әйтәм, эштәр хөрт инде былай булғас. Урыҫ егеттәре, бер нәмә лә аңламағас, бүкән кеүек ҡатып тик торалар монтировкаларын тотҡан килеш, ә башҡорт малайы бөтөнләй минең арҡаға ышыҡланып тора.

Теге ағай былай тимә енме бер ваҡыт:

– Юҡ инде, былай булмай, йәмәғәт! Ауылдаштар минән көлөр, ҡунаҡтарын яланда йоҡлатҡан, ашатып-эсереп тә сығармаған, ата-баба йола ын тотмай, тип. Минең йорт, ана, бер-ике саҡрымда ғына бит, тауға менеп еткәс ни, аның ҡалған яғы нимә генә инде!? Үәт ялҡау халыҡ, йә инде.

Ағай башын сайҡап, аптыраған йөҙ менән беҙгә ҡарап ҡырҡа ғына:

– Йә, усаҡты үндерегеҙ йылға ыуын йәлләмәйенсә, моторҙы ҡабыҙығыҙ ҙа – ать-два! Әбейҙең ите бешеп, самауыры ҡайнап тора!

Был үҙҙәрҙе ишеткәс, саҡ ҡосаҡлап алманым теге ҡартты. Йә инде, яман кеше түгел, ҡәҙерле ҡунаҡ икәнбеҙ ҙә!

Егеттәр китте аптырап, бер ни аңламайҙар:

– Чо делать-то будем, Айвар? Что он сказал? Ты чего так разулыбался, черт тебя пойми?!

Мин тегеләргә хәлде аңлатып, утты үндереп, йыйынырға ҡуштым. Ярты сәғәт тә үтмәне, ауыл ситендә торған өйгә килеп тә еттек. Ябай ғына йорт инде, эсе таҙа, йәмле. Түрҙә өҫтәлдә оло ҡоштабаҡта яңы ғына ҡутарылған ит боҫрап ята, самауыр йырлап ултыра ине.

– Эх, ағай, ҡурҡыттың бит Өфө егеттәрен! Ҡоттары боттарына төштө бит, ә, – тип көлә-көлә, өҫтәлгә күстәнәстәремде сығарып ала башланым. Хәтәр хәл уҙып киткәс, әр кем батырайып китә шул ул.

Егеттәр, өҫтәл янына ултырғас, ҡыйыуланып киттеләр хатта. Ундай ғына хәлдәрҙә булғаныбыҙ бар, имеш...

– Йә, ағай, төндә үҙегеҙҙе борсоп йөрөүебеҙ өсөн ғәйепләмә инде, рәхмәт иңә шулай матур итеп ыйлаған өсөн! Ҡунаҡ хужаның ишәге инде ул, – тип мин күҙ ҡыҫып ҡуйҙым да ымлап: – Әйҙә, командуй! – тип өҫтәнем.

Ағай йылмая биреп, бер аҙ уйланып торҙо ла былай тип үҙ башланы:

– Ҡунаҡ күрмәгән өйҙөң йәме юҡ, тигән ата-бабалар! Тап шулай! еҙгә йыраҡ араларҙы яҡын итеп, өйөмә ҡунаҡ рәхәтен килтергән өсөн рәхмәтлемен. Ә ишәк тип, ни инде, уны ы бит ҡунаҡ ыйҙан баш тартма ын өсөн генә әйтелә! Әле алда юл төш ә тағы, бер ҙә шикләнмәйенсә туп-тура өйөмә килегеҙ! Әйҙә, итенән ауыҙ итегеҙ, ыуына ла...

Таң ары ынан юлға сығырға булғас, табынды оҙаҡҡа уҙмай, йоҡларға яттыҡ. Хужабикә ҡунаҡтарға түргә урын йәйеп ҡуйған булған. Ишәк инде, ишәк! Үҙҙәре мейес янында иҙәнгә кейеҙ йәйеп яттылар...

– Шулай була ул "ҡунаҡ – хужаның ишәге!" – Айвар хикәйә ен йомғаҡлап ҡуйҙы. – Теге ҡунаҡсыл ағайҙы аман иҫкә алам. Алып ҡайтҡан бура матур әм ныҡ өйгә әйләнде, балаларым шунда үҫте. Өйөбөҙҙән ҡунаҡтар ҙа өҙөлмәй! Ҡарағыҙ әле, ысынлап та, ҡунаҡсыллыҡ тура ында маҡтанып өйләп ултыра, ти, берәү. Әйҙәгеҙ әле, ыйланып ултырығыҙ. Әллә мин хужа түгелме?..



Борис
**РОМАНОВ**

# “КЕМГӘ, ҠАСАН ТЕЙЕР БЫЛ СӘҒӘҘӘТ?..”

***

*Мәңгелектең иҫе китмәйҙер ҙә*
*Дәфтәр бите иҙрап туҙғанға,—*
*Онотолмаҫ тигән йәдкәр үҙҙәр*
*Ҡағыҙ менән ҡала туҙанға!*

*Ә нишләмәк?! Ҡағыҙҙан да тоғро,*
*Хәтерлерәк ниҙе таба ың?*
*Иҫке дәфтәреңә, ғәзиз үҙем,*
*ин үҙең дә, ахры, табына ың.*

* * *

*Алыҫта ың. ағына ыңдыр мине?*
*Дымлы тәҙрәләрҙә күҙҙәрең...*
*Ялҡау бесәй кеүек мыр-мыр килеп,*
*Йоҡом орай тышта көҙҙәрең.*

*Бармаҡтарың яҙа быялаға*
*Хыялыңдың серле үрәтен.*
*Гүйә, шул мәл, бер мөйөшкә боҫоп,*
*Мин күҙәттем... Ә ин күрмәнең.*

---

*Борис Романов 1947 йылда Өфө ҡала ында тыуған. А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. Тиҫтәләгән шиғыр китаптары авторы. Рус мәҙәниәтендә ул поэзия буйынса төрлө тематик антологиялар төҙөүсе, әҙәбиәтсе әм библиограф булараҡ та киң билдәле. Мәскәүҙә йәшәй.*

*Журнал уҡыусыларға күренекле яҡташыбыҙҙың бер шәлкем шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ.*

* * *

Тал бөгөлә.
Бөгөлөүендә уның —
Ел шыҡлығы,
Урман шаулауы,
Ярҙа ятҡан
Оло юлдың таныш,
Ым ындырғыс,
Тынмаҫ шаңдауы.

Тал япрағы
Елгә өҙөлә лә
Бәүелә ыуҙа.
Ағым ыңғайы
Сәфәр сыға —
Ҡомға батҡан кәмә
Юлын быу а,
Туҡтар, моғайын.

Була шулай...
Яңғыҙ япраҡ йөҙә
Үҙ яйына.
 иҙә: ул бер саҡ
 ыуға батыр,
Төптә, күҙҙе арбап,
Ялтлап ятыр —
Хас та ҡабырсаҡ.

... Тал ҡартая
Тоймай ел шыҡлығын,
Урман шауын,
Юлдар шаңдауын.
 ынған ботаҡ
Ҡай саҡ тотоп ҡала
Ағып барған
Сепрәк-сапраҡ йәки
Осмат гәзит —
Үткән көн шауҡымын...

***

Ап-аҡ ҡыш ялтырай яланда —
Сумырған маңлайын көмөшкә.
Ҡатыҡтай ойоған ауалар
Ишетәме, кемдәрҙер өйләшә?

Абалап сыҡманы эттәре,
Әйтер ең, өрмәҫкә ҡушылған?
Әйтер ең, бары ына беҙ дошман,
Төрмәләр түрендә йыйылған.

*Үҙәкте өҙөрҙәй алҡын ел,*
*Йоҙроғоң төймә ин, яр ыма,*
*Изгелек эшләмәҫ яман зат,*
*Был ҡышҡы иллекте тар ынма!*

*Эттәрҙең йыуашын өсләтмә,*
*Я иллыҡ ҡылырҙан, уйла ин,—*
*Йы ани яуызлыҡ эттәре*
*Бәйенән ысҡынып ҡуйма ын.*

***

*Эсәйексе ҡыҙыл шарап!*
*Күрәм быяла аша:*
*Күктәге ай ҙа ҡыҙыл —*
*Бына мәҙәк тамаша.*

*Әллә, тим, ай ҙа ҡыҙмаса?*
*Күк шәмәхә төҫөндә.*
*Ҡой, туған, ҡыҙыл шарапты*
*Әкиәти был төндә.*

*Ят тарафтың ялҡындары*
*Күскән ҡыҙыл шарапҡа:*
*Берсә аҡ аҡал аҡылы,*
*Берсә алйот — шаярта.*

*Батырырмын тимә унда*
*ағышыңды, ҡайғыңды.*
*Ҡыҙыл шарап ҡыҙыҡ өсөн*
*ынап ҡарар тойғоңдо...*

***

*Йәй буйына ҡойоп ямғыр яуҙы,*
*Тоҡандырҙы йәшен күктәрҙе.*
*Гәзиттәрҙең тамаҡ ярыуҙары*
*Иблис яуын өсләп күтәрҙе.*

*Йәшендәрҙең утлы сыбыртҡы ы*
*Ҡурҡытманы ялған-ялағайҙы.*
*Хакимдарҙың асылы әүәлгесә —*
*Аңлағандар ғына ағайҙы.*

*Әүәлгесә — ҡан әм ҡон көҫәү,*
*Туймаҫ тамаҡ, таҡыр аҡылы.*
*Ишелеп яуа ямғыр, йәшнәй йәшен,*
*Үҙгәрерме донъя — икеле.*

***

*Йылға ситендәге уйыр таштар*
*Эре йәҙрәләргә оҡшаған,*
*Түбәләрен йәшел мүк ҡаплаған —*
*Күптән атылғандыр пушканан.*

*Йәҙрә ярсыҡтарын йыуа  йылға,*
*Эй шымарта ташты, эй  ыйпай.*
*Йоп-йомро итеп ялтыратмаҡ,*
*Көн-төн  ылай шулай, ыҫпайлай.*

*Камиллыҡҡа мотлаҡ ирешәсәк,*
*Зауыҡ белгән әйтер: сәнғәти!*
*Кемгә, ҡасан тейер был сәғәҙәт?—*
*Йылғаға барыбер сәғәте.*

***

*Йомғағыңды уранең да*
*Үтә сәнстең энәңде.*
*Йөрәгем, шул йомғағыңдай,*
*Сәнсеүгә күнде инде.*

*Йомғағыңдағы  төйөндәр*
*инең өсөн  бер аҙап,*
*Йөрәгемдәге төйөндәр –*
*Минең өсөн мең ғазап.*

*Бәйләнмәйем бәйләмеңә.*
*Шыпырт ҡына  күҙ   алам:*
*Көнсөллөк энә е сәнсә —*
*Түҙәм әле. Түҙә алам...*

***

*Ярышып үҫә баҡсала*
*Аҡтамыр, алабута,*
*Ута ни, утама ни;*
*Эт эсәге, бәпембә е —*
*ыу  иптең,  ипмәнең ни.*

*Суп үләндәре серәшмә,*
*Селлә ни ҙә ҡырау ни.*
*Боҙ яуамы, ҡар яуамы,—*
*Гөрләп үҫә, ҡыуармай.*

*Утап торам,  үҫеп тора*
*Аҡтамыр, алабута,*
*Бил бөгәм әллә юҡҡа?*
*Эт эсәге, бәпембәләр*
*Көләләр: елкәң йоҡа!*

**Руссанан Гөлнур ЯҠУПОВА**
**тәржемәләре.**

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ АРҘАҠЛЫ УЛЫ

*(Рамаҙан Өмөтбаевтың тыуыуына 85 йыл)*



2009 йылдың 7 апрелендә башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхесе һәм күренекле улы Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаевҡа 85 йәш тулыр ине.

Уның тыуған төйәге – Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылы – Урал аръяғындағы иң боронғо ауылдарҙың бере е. Элек-электән байлығы менән түгел, үҙенең йырсылары, ҡу-райсылары, сәсәндәре менән дан тотҡан. Атайсалында була-саҡ яҙыусы тәүге изгелек әм ғәҙеллек дәрестәре алған, бында уның күңел булмышы формалашҡан. Тыуған яҡтың онотол-маҫ төҫтәрен – йор Оло Ҡыҙыл ыуының, мө абәт Ирәндек армыттарының, сик еҙ-ҡырый ыҙ далаларҙың гүзәллеген бала саҡтан үк күңеленә ендереп үҫә ул. Аҙаҡ аяу ыҙ тормош уны ҡайҙарға ғына илтмә ен, тыуған Әлмөхәмәте әр ваҡыт уның йөрәк түрендә аҡланды әм ҡибла - ына әйләнде. Шул алыҫ йылдарҙан алып башҡорт халҡы ижадының ҡоромаҫ сы-ғанағы, бөтмәҫ рухи байлығы буласаҡ яҙыусы тормошоноң айырылмаҫ юлдашы булды, иң ауыр саҡтарҙа ла йәшәү көсө, ил ам, дәрт биреп торҙо.

1924 йылдың изге рамаҙан айында кинйә малайҙың доньяға килеүе заманса арыу ғына белем алған, Троицк ҡала ында “Рәсүлиә” әм Орскиҙа “Мағаҙи” мәҙрәсәләрендә уҡыған Өмөтбаев Ғимран өсөн күптән көтөлгән байрам була. Әйткәндәй, Өмөтбаевтарҙың нәҫеле – Ғимрандың ата ы Ғәйзуллахажи (1853 – 1925), олата ы Мөхәммәтвәли (1821–1904), олата ының ата ы Өмөтбай (1768 йылда тыуған) . б. уҡымышлы, белемле кешеләр булғандар, фарсы, ғәрәп әм әҙә-би төрки телдәрен яҡшы белгәндәр. Остаздары бөйөк Зәйнулла ишан васыятын үтәп, Ғимран әм Ғәйзуллахажи йыш ҡына йәйгелеккә, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ балала-рын уҡытыу маҡсаты менән, далаға сығырҙар ине. Был турала Ғимран Өмөтбаев-тың әлеге көндә Үҙәк архивта аҡланған 1908–1912 йылдарға ҡараған көндәлеге өйләй.

Байлыҡ менән аҡыл-фиғел бер өҫтәлдә йәнәш бер ҡасан да ултырмай, тиҙәр. Ғимран да, башҡа Өмөтбаевтар ымаҡ, ғорур, үҙ үҙле кеше ине, ләкин бик ярлы була. Шуға күрә Рамаҙанға йәшләй, уйынсыҡтарҙы ситкә ҡуйып, ололар эшенә егелергә тура килә.

1931 йылдың беренсе сентябрь көнөндә ул хәҙрәт өйөндә асылған Әлмөхәмәт башланғыс мәктәбенең ишеген тәүләп аса. Уҡыуға бик әүәҫ Рамаҙан икенсе, өсөнсө синыфтарҙа яртышар йыл уҡып, 1934 йылда мәктәпте тамамлай.

Үҙенең яҙмаларында ошо йылдар тура ында ул былай тип яҙа: “...Артабан уҡы-уҙы дауам итеү теләге көслө булыуға ҡарамаҫтан, яҡын-тирәлә мәктәп булмау, би-



*Өмөтбаевтар ғаилә е.*
*1930 йыл.*

герәк тә ситкә китеп уҡыу өсөн өҫ-баштың юҡлығы арҡа ында, мәктәптән мәхрүм ҡалдым. Уҡыуҙан бөтөнләй төңөлөп бөткәс, шул йылдың сентябрь аҙаҡтарында, атай мине Ҡырҡты тауы буйында алтын сығып ятҡан "Ырғайҙы" тигән тау ҡуйынына алтын йыуырға алып китте... Октябрь аҙаҡтарында, башҡа балалар бер сирек уҡығас, мин өҫтә ыштан-күлмәк менән генә әм ялан аяҡ Ишҡол колхоз-йәштәр мәктәбенең 5-се класына уҡырға инеп киттем. Минә тейешле ҡулдан тегелгән итек, кесерәйтеп атай толобонан эшләнгән аҡ тиртун тик ноябрь урталарында ғына килеп етте... Ҡыш буйы үҙем бейеклеге ауыр тирмән тартып, күрше-күләнгә хат яҙып, ситтән ауылға килгән хаттарҙы уҡып тамаҡ туйҙырҙым, сөнки атайҙарҙан ирәк- аяҡ килгән ярҙам менән йүнләп уҡырлыҡ әм ус яларлыҡ булманы...

Алтынсы класты тамамлап, колхозда эшләй башланым... 1 сентябрь көнө килеп еткәс, атайымдың мине артабан уҡытырға хәле булмай сыҡты. Мәктәпте ташларға тура килде. 13 йәшкә ҡарағанда ауылда ойоша башлаған Әлмөхәмәт МТС-ына директорҙың эш ҡағыҙҙарын күсереүсе булып эшкә индем. Атайыма тәүге алған илле тәңкәне тотторғас, уның йәшел күҙҙәренә йәш эркелде, сөнки 1928 йылда көрән бейәбеҙҙе атып алған 80 тәңкәнән башҡа беҙҙең өйгә бер ҡасан да ундай аҡса ингәне булманы... "

Шул йылдарҙа Ишҡол ауылына спектакль менән Башҡорт драма театры килеп китә. Тамашанан уң бәләкәй Рамаҙанды ауылдаштары сәхнәгә сығартып, "Таштуғай" көйөн йырлаталар. Быны ишеткән күренекле артист әм ҡурайсы Ғиниәт Ушанов уға бер тәңкә ҡағыҙ аҡса бирә әм данлыҡлы йырсы буласағын фараз итә. Ләкин яҙмыш Рамаҙанды бөтөнләй башҡа уҡмаҡтарҙан алып китә.

1937 йылда Рамаҙан Өмөтбаев Баҡырүҙәк руднигында асылған урта мәктәптең етенсе синыфында белем алыуын дауам итә әм — биш саҡрым ергә йөрөп. Йәйҙәрен, мәктәптә уҡыу бөтөү менән, колхоз эшенә егелә: учетчик була, йылҡы көтә, бесән әм иген саба. Колхозда кәбән алыуҙан башҡа бөтә эштәрҙе лә башҡарырға тура килде, тип хәтерләй ине ул үҙе, бик күп йылдар үткәс.

Ул заманда барлыҡ совет кешеләре, шул иҫәптән балалар ҙа, илдең ҡайнар патриоттары ине. Фин уғышы башланып киткәс, 1940 йылдың башында, Рамаҙан бер төркөм класташтары менән, бер кемдән рөхсәт орамайынса, йәйәүләп Белоретта урынлашҡан осоусылар мәктәбенә китә. Тик уҡырға йәше әм таҙалығы еткән Петров исемле бер генә егетте ҡабул итәләр, ә башҡалары бер аҙна йөрөп, ҡаҡ өйәккә әйләнеп, саҡ кире ҡайтып төшәләр.

Ҡә әрле уғыш башланыуға ике генә аҙна ҡалғанда, Рамаҙан мәктәпте тамамлай әм, сығарылыш кисә ен көтмәйенсә (унда барырға йүнле кейем булмағанға күрә), Баймаҡ машзаводының торф участка ына торф ҡырҡыусы булып урынлаша. Бында ул ҡыҙыу, бер аҙ тиҫкәрерәк, эштә бер кемгә лә ыр бирмәгән бригадир Та ир Рамаҙановтың Мөхтәрәмә исемле ҡыҙы менән таныша, йәштәр ара ында ғишыҡ уты тоҡана әм улар бер-бере ен көтөргә үҙ бирә.

1941 йылдың аҙағында Р. Өмөтбаев тыуған ауылында Буденный исемендәге колхозда бухгалтер булып эшләп ала әм бер нисә айҙан үҙе теләп уғышҡа китә. Курск әм Орел тирә ендәге аяу ыҙ бәрелештәрҙә ҡатнаша, ауыр контузия ала, а-

уыҡҡас тағы ла сафҡа баҫа, 11-се гвардия армия ы сафында Балтик буйын дошмандарҙан азат итеүҙә ҡатнаша. Әйткәндәй, уның полкында Башҡортостандан да бер нисә егет хеҙмәт иткән. Шуларҙың ара ында буласаҡ яҙыусы Яныбай Хамматов та була. Рамаҙан менән Яныбай бында тәүге мәртәбә таныша, әм артабан тормош юлдары уларҙы күп мәртәбә осраштырып торасаҡ.

1946 йылдың ноябрь аҙаҡтарында Рамаҙан Өмөтбаев уғыштан тыуған яҡтарға әйләнеп ҡайта әм йәштәргә хас булған көс-ғәйрәт менән тыныс тормош ҡора башлай. Әлмөхәмәттә ҡалырға ла теләге бар, тик эш юҡлыҡтан, ул Сибайға килеп, “Сибайзолото” руднигына старателдәр артеле хисапсы ы булып урынлаша, бәләкәй генә туй ойоштороп, Мөхтәрәмә Та ир ҡыҙына өйләнә. Бер аҙҙан атаәсә ен дә бында күсертеп ала. Ғимран ҡарттың землянка ы (ул ваҡытта бары ы ла шулай йәшәгән) Баймаҡ яғына ҡараған Буденный урамында урынлашҡан була, яҡында ғына Башкавдивизия яугиры, мыҡты кәүҙәле Мәғәфүр Ниғмәтуллин – хәҙерге Башҡортостан мөфтие Нурмөхәмәт хәҙрәттең ата ы – йәшәне.

Тиҙҙән Рамаҙан Өмөтбаевты рудник комсомол ойошма ының секретары вазифа ынан КПСС-тың Баймаҡ район комитетына эшкә күсерәләр. Бында ул башта инструктор, уңынан пропаганда әм агитация бүлеге мөдире була. Бер үк ваҡытта ситтән тороп ике йыллыҡ өлкә партия мәктәбендә лә уҡый. 1952 йылда Стәрлетамаҡ өлкә е ойошторолғас, ҡыҫҡа ғына ваҡыт “Сталин байрағы” исемле башҡорт телендә сыҡҡан өлкә гәзите редакторы ла булып ала. Артабан эшен тағы ла Баймаҡ районында дауам итә, эштән айырылмайынса Магнитогорск педагогия институтын да тамамлай. 50-се йылдар урта ында, Баймаҡта икенсе секретарь сағында, сиҙәм күтәреүҙә әүҙем ҡатнаша әм, күп йылдар үткәс, был ваҡиғаларҙы “Сиҙәм яҙы” исемле иҫтәлектәрендә үрәтләй.

1956 йылда Рамаҙан Өмөтбаевты райкомдың беренсе секретары итеп айлайҙар. Был осорҙо ул тормошондағы иң емешле е тип ананы. Сәсеү, көҙгө уңыш йыйған осорҙа ҡасан машинаға, ҡасан атҡа ултырып, аҙналар буйы өйөнә лә ҡайтмай, хужалыҡтарҙа йөрөй торғайны. Районды ң әр бер колхозсы ын, механизаторын, ауынсы ын, олораҡ йәштәге кеше ен исем-шәрифе менән белә инем, тип хәтерләй торғайны Рамаҙан Ғимран улы. Халыҡ та уны әр ваҡыт яратты, ҡарты ла, йәше лә “Өмөтбаев ағай” тип өндәшә ине. Был заманда Баймаҡта бер төркөм йәш, дәртле, күбе е уғыш мәктәбен үткән етәкселәр эшләй ине, аҙаҡтан улар республикала билдәле кешеләр булып киттеләр, ҡай ылары әле лә иҫән: Хәбибнажар иҙиәт улы Халиҡов, Павел Николаевич Надькин, Юнир Самат улы Әҙ әмов, Николай Васильевич Горин, иҙиәт Садиҡ улы Күсәбаев, Виктор Васильевич Любушкин, Фән Шәмсун улы Шәрифуллин, Ғиззәт Зиннәт улы Ва апов, Рәфҡәт Яҡуп улы Күсәбаев, Нурис Әхмәт улы Яхин, Иван Григорьевич Нефедов, Ғилман Ғирфан улы Яҡупов, Геннадий Михайлович Павлов, Александр Степанович Манылов, Сәғит Ғәтиәт улы Ишбирҙин әм башҡалар.

1960 йылда Рамаҙан Өмөтбаевты КПСС Өлкә комитетының партия органдары бүлеге мөдире әм бюро ы ағзалығына кандидат итеп Өфөгә күсерәләр. Ул ваҡытта етәкселәр ара ында башҡорттар күп булмай, быны хәҙер күҙ алдына килтереүе лә ҡыйындыр. Рамаҙан Ғимран улы теге йылдарҙа Өлкә комитет бина ында башҡортса ҡурҡмайынса өйләшкән берҙән-бер кеше ине. Вазифа ынан файҙаланып, ҡаршылыҡтарға иғтибар итмәйенсә, ул кадрҙар сәйәсәтен башҡорт халҡы мәнфәғәтенән сығып үткәрә башлай. Бер нисә йыл эсендә, башҡа ҡалаларҙа әм райондарҙа йөрөп, урындағы халыҡтан иң егәрле, иң отҡор, үҫергә лайыҡ булған йәштәрҙе, кемде уҡырға ебәреп, кемде үрләтеп, кемде Өфөгә күсертеп, эш урыны табып урынлаштырып ҙур эш башҡарҙы.

Шул заман тура ында Рамаҙан Өмөтбаевтың иптәше, фекерҙәше әм арҡадашы, унын менән бергә эшләгән, илле йылдан ашыу белгән әм тығыҙ бәйләнеш тотҡан Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғилман Ғирфан улы Яҡупов ошолай хәтерләй: "*...Илем, халҡым тип янып йәшәүсе көслө рухлы шәхес ине Рамаҙан Өмөтбаев. Башҡорт халҡы, башҡорт милләте, унын яҙмышы, киләсәге тура ында ул күп уйланды, матбуғатта ла байтаҡ сығыш я аны. Шул сәбәпле, ҡай ы бер чиновниктар тарафынан уға нахаҡ рәүештә милләтсе тигән мө өр тағылған саҡтар ҙа күп булды. Артынан күҙәтеүҙәр ҙә ойоштора инеләр. Ләкин Рамаҙан Ғимран улы бирешмәне, ялағайланып та йөрөмәне...*

*...Мин Рамаҙан Өмөтбаев менән ғүмерем буйы ғорурланып йәшәнем әм йәшәйем. Башҡорт әҙәбиәтенә лә айырым бер ҡабатланмаҫ шәхес, үҙенсәлекле яҙыусы булып килеп инде ул. "Башлап яҙыусы", "йәш яҙыусы тигән этаптарҙы үтеп тормайынса, хаҡлы ялға сыҡҡас, ҙур яҙыусы булды ла китте. Баҡ аң, Рамаҙан Өмөтбаев ғүмере буйы донъяны күҙәткән, тәжрибә туплаған, әҙәбиәт өсөн түл йыйған икән. Шуны ы үкенесле: Рамаҙан Ғимран улының тамамланып, донъя күреп өлгөрмәгән әҫәрҙәре тороп ҡалды. Ижади пландары ҙур ине унын.*

*Мөхтәрәмә апай менән ғүмер буйына күгәрсендәй гөрләшеп, татыу йәшәнеләр, ике ул тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Сәнғәтте яраттылар. Рамаҙан ағай боронғо йырҙарҙы бик оҫта башҡара әм хас үҙенсә, Өмөтбаевса ғына, тыпырлатып баҫып, "Байыҡ", "Перовский" көйҙәренә бынамын итеп бейей торғайны... Хәҙер ике е лә беҙҙең арала юҡ, ис көтмәгәндә генә ошо яҡты, фани донъябыҙҙы мәңгегә ташлап китеп барҙылар. Әммә улар күңелебеҙҙә оҡланғыс, яғымлы, кешелекле, кеселекле, бай күңелле, ифрат йомарт кешеләр булып аҡланасаҡ.*

*Билдәле ғалим, дәүләт эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты, яҙыусы, журналист, замандаш, фекерҙәш, хатта серҙәш тә Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаев арабыҙҙан ваҡыт ыҙ кит ә лә, аман да беҙҙең менән төҫлө. Сөнки күңелдәрҙә ул үҙенең эше, холҡо менән шул тиклем тәрән әм онотолмаҫ эҙ ҡалдырҙы.*"

1965–1967 йылдарҙа Рамаҙан Өмөтбаев КПСС Үҙәк Комитеты эргә ендәге Ижтимағи фәндәр академия ында уҡый, иҡтисад буйынса кандидатлыҡ диссертация ы яҡлай, үҙ актуаллеген әле лә юғалтмаған ауыл хужалығы специализация-ы тура ында бер нисә китап сығара.

Артабан ул эшен БАССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары вазифа ында дауам итә, республикабыҙҙың социаль-иҡтисади үҫешенә тос өлөш индерә. Төрлө мәсьәләләрҙе хәл иткәндә Рамаҙан Ғимран улы өлкә етәкселәре күр әтмәләренән генә сығып түгел, үҙ выжданына ҡарап, халыҡ, милләт мәнфәғәттәренән сығып эш итте. Унын ымаҡ кешене алғы урынға ҡуйған, кешеләрҙең тормошон еңеләйтергә теләгән етәкселәр бар ине барлығын, ләкин ундайҙар әр ваҡытта ла аҙсылыҡта була. Үҙ үҙлелеге, ялағайлана белмәгәне әм теләмәгәне өсөн, башҡортлоғон бер ҡасан да йәшермәгән әм онотмаған өсөн Рамаҙан Ғимран улын Шакировтар, Ахунйәновтар күрә алма а ла, ябай халыҡ әр ваҡыт ятратты, ихтирам итте.

Мәҫәлән, үткән быуаттың 60-йылдарында Салауат Юлаев әйкәленә урын айлаған саҡта, Өлкә комитет уны ҡала Советы эргә енә, әлеге Ленин әйкәле торған урынға, ҡуйырға ниәтләнгәйне. Быға ҡаршы сығырға ике генә кеше баҙнат итте: бере е – скульптор Сосланбәк Тавасиев әм икенсе е – унын фекерен тулы ынса яҡлаған, әйкәл төҙөү эше буйынса комиссия рәйесе Рамаҙан Өмөтбаев. Инде Салауат батыр ыны Ағиҙелдең текә ярына ҡуйылғас, йылдар үткән айын, әйкәлдең был урынын яҡлағандарҙың аны ла арта бара...

...Был турала күптәр белмәйҙер ҙә: Салауат Юлаев әйкәленең айырым өлөштәрен Ленинградтың “Монументскульптура” заводында бронзанан ҡоя башлағас, СССР Хөкүмәте бронзанан әйкәлдәр эшләүҙе ҡәтғи тыя. Был етди мәсьәләне урау юлдар менән хәл итеү өсөн күпме йөрөргә тура килгәнен Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаев үҙе генә белгәндер. әйкәл бронзанан эшләнел ә лә, документтар буйынса ул суйындан ҡойолған булып ҡалды. әйкәл асыу тантана ына уның төҙөү эше буйынса комиссия рәйесен саҡырырға оноталар...

1965 йылда Өфөлә башҡорт мәктәбе асыу мәсьәлә ен юллай башлайҙар. Илебеҙҙең билдәле шәхестәре Иҙел Агишев, Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов әм Шакир Бикҡолов бындай айырым башҡорт мәктәбен асыуҙы орап Өлкә комитетына мөрәжәғәт итәләр. Башҡорт балаларының ата-әсәләрен өгөтләп, аңлатып ҡултамғалар йыйыуҙа Ирек Агишев, Мөхәммәт Исҡужин, Әмир Сиражетдинов, Хәниф Вәлиевтар әүҙемлек, тырышлыҡ әм хатта батырлыҡ та күр әтә. Улар барыы ла Дәүләт именлеге комитеты күҙәтеүе аҫтына эләгәләр, ләкин ҡурҡмайынса эште дауам итәләр. Башта башҡорт синыфтары 91-се мәктәп эргә ендә асылырға тейеш була, ләкин, аҫтыртын ҡаршы эш алып барылыуы арҡа ында, балалар аны ун бергә тиклем кәмей. Башҡорт мәктәбен асыуға ҡаршы булғандарға был уңайлы ылтау була.

– Ошонан уң 1967 йылда, иртәгә уҡыу йылы башлана тигән 31 августа, Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаевҡа ингәс кенә ҡала башҡорт балалары өсөн 91-се мәктәптә синыфтар асыуға өлгәштек, – тип иҫкә ала Иҙел Агишев. Аҙаҡтан асылған синыфтар нигеҙендә 20-се башҡорт мәктәбе барлыҡҡа килә.

Ә был ваҡиға тура ында күренекле журналист Серафим Вайсман яҙып сыҡҡайны. Сибай ҡала гәзите мөхәррире булған саҡта, ул гәзиттең эшсе корреспонденттар яҙған очерктарҙан торған, ҡаланың ун йыллығына бағышлап, үҙ көстәре менән бәләкәй генә китап сығарта. Был хәл шундуҡ Обллитҡа билдәле була, йәш мөхәрриргә эштән китеү әм партиянан сығарылыу янай. Ҡала комитетының беренсе секретары В.В. Любушкин, аптырағандан, Вайсманды ул ваҡытта Өлкә комитетта эшләгән Өмөтбаевҡа ебәрә. Серафим Яковлевич хәтерләүенсә, Рамаҙан Өмөтбаев уны бик йылы ҡаршы ала, яҡшы эш эшләгән өсөн маҡтап та ҡуя хатта. Бынан уң инде өмөтөн юғалтҡан Вайсман Сибайға ҡанатланып ҡайтып китә.

Рамаҙан Өмөтбаев асыҡ йөрәкле, ихлас күңелле, халҡыбыҙҙын тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшы белгән, кешелекле әм кеселекле, үҙендә әр ваҡыт торған шәхес ине, шуға күрә уның эргә ендә илебеҙҙең ысын патриоттары, тоғро дуҫ-иштәре, фекерҙәштәре күп булды: Зәйнулла Әмин улы Ихсанов, Рәхим Кирәй улы Ибра имов, Муса Ғайса улы Гәрәев, Сәғит Рәхмәт улы Әлибаев, Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина, Та ир Тайып улы Күсимов, Ғәли Ирғәли улы Ишбулатов, Ишмулла Ишғәле улы Дилмөхәмәтов, Арыҫлан Ҡотләхмәт улы Мөбәрәков, Барый Абдрахман улы Абдрахманов, Фәйзрахман Зағафуран улы Зағафуранов, Фәйзулла Вәли улы Солтанов, күп кенә ҡала әм район етәкселәре, яҙыусылар, журналистар, сәнғәт хеҙмәткәрҙәре .б.

Артабан Рамаҙан Ғимран улы эшен БАССР-ҙың Кинофикация буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифа ында уңышлы дауам итә, эш күр әткестәре буйынса комитетты Рәсәй әм СССР күләмендә алдынғылар рәтенә сығарыуға өлгәшә әм 1982 йылда ошо урындан хаҡлы ялға китә.

Ялға сыҡҡас ҡына Р.Ғ. Өмөтбаев үҙенең күптәнге хыялына – ижадҡа әүҙем тотона, йәмәғәт тормошонда ҡайнай, “Аҡ тирмә” клубы әм “Урал” башҡорт халыҡ үҙәгенә нигеҙ алыусыларҙың бере е була. Республика гәзит, журналдарында уның

әсәрҙәре йыш күренә башлай. Радио, телевидениела көнүҙәк мәсьәләләр буйынса сығыш я ай. Уның “Башҡорт аты”, “Башҡорт аны нилектән кәмей?”, “Уянырға мөҙҙәт етте” исемле әсәрҙәре халыҡ ара ында киң танылыу тапты.

Шулай ҙа яҙыусының ижад юлы таҡыр әм шыма булманы. Был турала шул замандарҙа “Совет Башҡортостаны” гәзитенең баш мөхәррире булған Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилев хәтерләй: *“...Рамаҙан Өмөтбаев Мәскәүҙән иҡтисад фәндәре кандидаты булып ҡайтып төштө. Ләкин уны Өлкә комитет тирә енә яҡын ебәрмәнеләр, Өлкә комитеттың беренсе секретары вазифа ына ынтылыр, тип ҡурҡтылар. Уны Министрҙар Советы Рәйесенең урынбаҫары итеп ҡуйҙылар. Ул унда бик әүҙем эшләне, ләкин даими партия контроле аҫтында булды: ҡайҙа барған, нимә өйләгән әм башҡалар. М.З.Шакиров әм Т.И.Ахунйәнов Өмөтбаевтан ҡурҡты, уны яратманылар, артынан күҙәтеү ойоштторҙолар...*

*Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаев башҡорт халҡы өсөн янған, уның өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер бик рухлы кеше булды. Ул бик эрудициялы, рус телен дә, башҡорт телен дә камил белә ине. Ҙур дәүләт эштәрендә эшләгән саҡта уҡ хикәйәләр, повестар яҙған, машинкаға баҫтырған да папкаға алған, бер кемгә лә күр әтмәгән. Пенсияға сығып, күпмелер ваҡыт үткәс, папка ын ҡултығына ҡыҫтырып, ул минең кабинетҡа килеп инде. Хәл-әхүәл орашып, бер аҙ өйләшеп ултырғас, папка ынан машинкала баҫылған ниндәйҙер яҙмалар килтереп сығарҙы.*

*— Абдулла ҡустым, иңә эш өҫтәргә булдым әле, — тине ул, йылмайып. — Буш ваҡытта үҙем өсөн генә, хәтерҙән юйылып ҡалма ын тип, бер нисә хикәйә ымаҡ нәмә яҙғайным. Шуларҙы ҡарап сыҡ әле, бәлки, донъяға күр әтерлектәрҙер.*

*Мин, мотлаҡ ҡарап сығырмын, бер нисә көндән шылтыратырмын, тип яҙмаларын алып ҡалдым. Кис, Шакировтан гәзитте баҫырға рөхсәт көтөп ултырған саҡта, бер нисә хикәйә ен ҡарап сыҡтым. “Алексей мулла” әм “ ылыубикә әбей теш ҡуйҙыра” тигән хикәйәләрен айырып алып ҡуйҙым. Хикәйәләр йөкмәтке е менән дә, яҙылышы әм теле менән дә бик оҡшаны. Уларҙан бығаса күрелмәгән ниндәйҙер рух, яҡтылыҡ аңҡып торған кеүек тойолдо.*

*Иртәгә енә әсәрҙәрҙе әҙәбиәт, мәҙәниәт әм сәнғәт бүлеге мөдире Сабир Шәриповтан уҡытып алдым да “Алексей мулла”ны йәкшәмбе анына планлаштырҙым. Рамаҙан Ғимран улына был хаҡта хәбәр иттем. Йәкшәмбе көн хикәйә баҫылып сыҡты. Кис ағай өйгә шылтыратты, бик ҡыуаныуы хаҡында белдереп, рәхмәт әйтте. Оҙаҡламай икенсе хикәйә е лә донъя күрҙе. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында уның унлап хикәйә ен баҫтырып сығарҙыҡ. Ләкин иң уңышлы ы, минеңсә, “ арығолаҡ” тигән ҙур хикәйә е булды. Рамаҙан ағай сик еҙ ҡыуанды. “ ин миңә, күңеле төшөп, ни эшләргә белмәй йөрөгән кешегә, ҡустым, дәрт өҫтәнең. Ихласлап эшкә тотондом, элекке яҙмаларымды яңынан ҡарайым, яңы әҫәрҙәр ҙә төҫмөрләнә башымда”, — тине ул бер ингәнендә.*

*“ арығолаҡ”ты баҫа башлағас, Өлкә комитеттан шылтыраттылар, “Советтарға ҡаршы, Совет власынан көлгән әйберҙе баҫып сығарҙың” тигән үҙҙәр ҙә ишеттем, ләкин ағайҙың хикәйәләрен баҫыуҙы дауам иттем. Шуны иҙҙем: Өлкә комитеттың элекке абруйы, элекке ҡеүәте юҡ ине инде, ул үлемен көтөп ятҡан арыҫланды хәтерләтә ине.*

*“ арығолаҡ” өсөн Рамаҙан Ғимран улы “Ағиҙел”дең йыллыҡ премия ын алды, беҙ ҙә уға йыл йомғағы буйынса премия бирҙек. Рамаҙан Ғимран улы Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағза ы итеп алынды, 80-се йылдар аҙағында Яҙыусылар союзы партия ойошма ының партбюро секретары булды. Башҡортостан радио ы әм телевидение ы дәүләт комитеты “ арығолаҡ” әҫәре буйынса ике сериялы художестволы фильм эшләне...”*

Тиҙҙән Рамаҙан Өмөтбаевтың Советтар Союзы Геройы Т.Т.Күсимовтың ҡатмарлы әм мауыҡтырғыс тормош юлын үрәтләгән “Генерал Күсимов” исемле әçәре ижад ителә. Бөйөк Еңеүҙең 50 йыллығына арналған әҙәби бәйгелә повесть иң яҡшыларҙан танылала. уңынан китап, тәржемә ителеп, рус уҡыусыларына ла еткерелә.

1993 йылда “Китап” нәшриәтендә Р.Өмөтбаевтың тәүге романы ла баçылып сыға. “Ысыҡтан эйелә ҡылған” тип аталған был күләмле әçәр Башҡортостандағы крәçтиәндәрҙең үткән быуаттың 20-се йылдарындағы фажиғә е тура ында өйләй.

Шул уҡ йылда Рамаҙан Ғимран улы Ким Әхмәтйәнов исемендәге әҙәби премияның тәүге лауреаты була. 1994 йылда Өфөлә, Баймаҡта, Сибайҙа әм Әбйәлил районында яҙыусының 70 йәшенә арналған киң саралар үткәрелә.

1995 йылда уның сираттағы, Баймаҡ машиналар эшләү заводы тарихына арналған, китабы донъя күрә. “Осрашыуҙар әм юғалтыуҙар” исемле йыйынтығында Рамаҙан Өмөтбаев үҙе белгән әм яҡындан аралашҡан билдәле шәхестәр тура - ында өйләй. Улар ара ында Жәлил Кейекбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Ҡадир Тимерғазин .б. бар. Шул уҡ китапҡа яҙыусының халыҡ әм милләт яҙмышы тура- ында уйланыуҙары ла кергән.

Уның хеҙмәте юғары ба аланды. Р.Ғ. Өмөтбаев Ленин, “Почет Билдә е”, Бөйөк Ватан уғышы ордендары, БАССР-ҙың Юғары Советы Президиумының Маҡтау грамота ы, күп миҙалдар менән бүләкләнде. 1994 йылда уға “Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре” исеме бирелә. РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы, БАССР Юғары Советының 4 – 9-сы саҡырылыш депутаты булды. КПСС-тың XXI съезына делегат итеп айланды.

Атайымдың яҡты донъянан китеүе көтөлмәгәнсә, ҡапыл булды. 1997 йылдың 24 август көнөндә, Баймаҡта үткән уҡытыусылар конференция ынан ҡайтҡанда, уның йөрәге туҡтай... Был хәлде белмәйенсә, шул уҡ көндө уның хәләл ефете, минең әсәйем Мөхтәрәмә Та ир ҡыҙы ла донъя менән хушлаша.

Үлгәндән уң Рамазан Өмөтбаевтың “ ынылыш” тип аталған икенсе романы, ә 2004 йылда “Атлы башҡорт” исемле повесть әм хикәйәләр йыйынтығы баçылып сыға.

Замандаштарының хәтерендә Рамаҙан Өмөтбаев ысын шәхес, башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, күренекле дәүләт эшмәкәре, таланты яҙыусы, ялҡынлы публицист, башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен оçта башҡарыусы булып аҡлана.

Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаев исемен мәңгеләштереү буйынса уңғы йылдарҙа күп кенә эштәр башҡарылды. Өфөлә, Баймаҡта, Сибайҙа ул йәшәгән әм эшләгән йорттарҙа таҡтаташтар ҡуйылған. Асҡарҙа, Баймаҡта, Сибайҙа әм Баймаҡ районының Мерәç ауылында Өмөтбаев исемен йөрөткән урамдар барлыҡҡа килде. Әбйәлил районының Әлмөхәмәт мәктәбенә әм Сибай ҡала ының башҡорт лицейына яҙыусының исеме бирелде. 2006 йылда лицейҙа Рамаҙан Өмөтбаев музейы асылды, иң яҡшы уҡыусылар 7 апрелдә, уның тыуған көнөндә, махсус премия менән бүләкләнә. Сибай ҡала ында тағы ла бер матур йола барлыҡҡа килде: йыл айын Республика көнөндә Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге әҙәби премия тапшырыла. Баймаҡ әм Әбйәлил райондарында яҙыусының ижадына арналған әҙәби кисәләр, айырым дәрестәр даими үткәрелә.

**Рауил ӨМӨТБАЕВ.**

**Рамаҙан**
**ӨМӨТБАЕВ**

# ТӘҮГЕ МӨХӘББӘТ

**ХИКӘЙӘ**

Был хәл нисәнсе йылдарҙа булғандыр, уны самалап ҡына әйтергә мөмкин. Ханнан хәҙрәттең мәктәп тип йөрөтөлгән ҡыҙылға буялған йортона аяҡ баҫыуымдың тәүге йылдары шикелле. Бер яҡтан ҡыҙыҡ, икенсе яҡтан ҡыҙғаныс ваҡиға ымаҡ хәтерҙә ҡалған.

Сираттағы дәрес тамамланып, ниндәйҙер байҙың дуға ынан алынған сәйнүк дәүмәлендәге оло ҡыңғырауҙың тәнәфес еткәнен белдереп ҡолаҡ ярырҙай итеп шылтырауы булды, уҡыусы балалар өй буйына терәп алынған таҡта коридорға борсаҡ кеүек ибелде. Мин дә уларға ҡушылдым.

Ул ваҡыттарҙа тамаҡ яғы ғына түгел, өҫ кейемдәре лә фәҡир ине шул. Ауыл балалары нигеҙҙә күлмәк-ыштандан ғына. Арала, көтөүҙәге ала ыйыр кеүек, салбар кейгәндәре лә осрап ҡуя. Улары инде граждандар уғышында “бик күп атлы казакты дөмөктөрөп”, күкрәгенә Ҡыҙыл Байраҡ ордены тағып ҡайтҡан, әлеге заманда ла күсер йөрөтөрлөк ҙур түрә дәрәжә енә еткән Фәттәх апа Ибра имовтың балалары Тәлғәт әм Шәүкәт, батша заманында волость писары булып, Советтар ваҡытында ла ҡулы ҡағыҙҙан айырылмаған, ауылда берҙән-бер ғариза яҙа белеүсе Туғанбайҙың балалары Әғләм менән Әкрәм, башҡорт булыуына ҡарамаҫтан, быйма баҫып ярай ы ғына хәлле ғүмер иткән Әшрәф ағайҙың улы Абдрахман .б.

Бына балалар эркелешеп, бер-бере е менән айҡашып, саң туҙҙырып шаярырға тотондо. Коридор ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә. Бары ының да сәсе берҙәй ҡырып алынған, таҡыр башлылар. Ә инде миңә, ошо юлдарҙың авторына килгәндә, ыштан-күлмәгемдең ау ере юҡ, ҡорама юрған кеүек ямаулыҡтарҙан ғына тора. Өҫ кейеменең хөрт булыуы ла мине стенаға ныҡ ырылырға, уны нығыраҡ терәп торорға мәжбүр итә. Малайҙар ара ына инергә ис тә баҙнат етмәй. Был уй юҡ түгел-түгелен, ләкин фәҡирлеҡ, выждан ҡамасаулай.

Ҡыҙҙар ара ында ҡуңыр йөҙлө, нескә генә иренле, муйыл күҙле, дегеттәй ҡара сәстәрен уртаға айырып тарап сәсмәү төшөргән, өҫтөнә итәкле күлмәк кейгән бер ҡыҙ ялт итеп күренеп ҡалыуы булды, күк ҡабағы асылып, үҙ теләктәрен Хоҙайға еткерә алмай ҡалған мосолмандай, ҡатып ҡалдым. Күҙ асып йомған арала ғашик булдым да ҡуйҙым. Быуындары ҡалтыранған аяҡтар мине өйгә көскә алып ҡайтты. Бер нисә дәфтәр, грифель таҡта алынған ағас ҡумтаны атып бәрҙем дә, урындыҡҡа салҡан ятып, диҡҡәт менән бик оҙаҡ түшәмде күҙәтәм. Бына минең өҫтә, тап минең өҫтә, ары түшәм таҡта ы. Унда бихисап, элек мин күрмәгән рәсемдәр, хыяли нәмәләр бар кеүек. Түшәм таҡта ының әр бер өлөшөн үҙ мөхәббәтемдең нимә енәлер оҡшатам.

Бына ике яҡлап ярыла башлаған, оҙонсалабыраҡ киткән өлөшө уның ыҫпай кәүҙә енә оҡшай кеүек, урталағы таҡтаның осондараҡ йомороланып бөткән урынын уның мөләйем йөҙөнә оҡшатам.

Әсәйемдең “Тор, ниңә йәшелгә туйған ыйыр ымаҡ әйгәҙәп ята ың, бер-ике сынаяҡ сәйеңде эс тә көтөүҙән малдарҙы алып ҡайт” тигән тауышы иҫкәндереп ебәрҙе. Торҙом. Үрге ос малайҙарынан туҡмалыуҙан ҡурҡып, ғүмеремдә Ҡорүҙәктән бер ҙә күтәрелгән булма ам да, был юлы мин ауыл осона сабам. Мөхәббәт ҡурҡаҡлыҡты ла ҡыуа икән. Беләм, көтөү ошо яҡтан килә. Бәлки, ул да көтөү ҡаршы алырға сығыр ҙа, мин уны күҙ ҡойроғо менән генә бул а ла күреү бәхетенә ирешермен төҫлө. Ләкин был өмөттәр бушҡа ғына булды. Беҙҙең ыйыр менән кәзә үҙҙәре ҡайтып килә, уларҙың тәҙрә төбөндә ерәйеп йөрөүҙең кәрәге юҡ. Әйләнсек арыҡ кеүек унда-бында ҡағылып- уғылып йөрөнөм дә, әсәйҙең “Әйҙә, өйрә эсеп ят” тигән ҡыҫтауына ҡарамаҫтан, атай тиртуны аҫтына юғалдым.

Ләкин күҙҙән йоҡо осто, күҙ алдымда үрге яҡта йәшәгән хыялым Мәстүрә хур ҡыҙы кеүек баҫып тора. Шулай итеп, тәүге мөхәббәт мине тамаҡтан, йоҡонан яҙҙырҙы. Көн дә мәктәпкә ҡанат ҡуйған ымаҡ осоп барам, төштән уң, ҡанаты ынған ҡош кеүек, өйрәлеп өйгә ҡайтып инәм. Бөгөн тәнәфестә уны күреү бәхетенә ирештем, ләкин Мәстүрә мин меҫкен яғына күҙ ирпеп тә ҡараманы. Үҙ класында уҡыған Сәйҙә, Нәфисә, тағы кемдәрҙер менән сыр-сыу килеп өйләшә, көлөшәләр.

Балта ы ыуға төшкән кешеләй хыялый булып йөрөүҙәр, улаған айын уфтаныуҙар, билдәле, атайымдың иҙгер иғтибарын йәлеп итмәй ҡалманы. “Әй, бынау малайҙың бер ҙә рәте-сираты күренмәй, бер көн Сабир ҡарттарҙың туйында ҡоҙалар бик ҡыҫтағас, шәп итеп “Таштуғай”ҙы йырлағайны, әллә берәй елпеү-фәлән ҡағылды микән,– тип миңә ат күҙендәй баҡыр биш тин тотторҙо ла: – Бар, ана, өлкән олатайыңа барып, ас ҡарындан өшкөртөп ҡайт”, – тип сығарып та ебәрҙе.

Сиремдең сәбәбен белә тороп, мин Мөхәмәҙи хәлфәгә барып торманым. Аҡсаның берәр файҙа ы тейер әле, тип ситән егенә ҡыҫтырҙым да, баҡса артында бер аҙ тора биреп, яңынан өйгә әйләнеп ҡайттым. “Олатайың өйҙәме, өшкөрттөңмө?”– тип ораны атай, намаҙын бүлеп. Баш елкеүемде күргәс: “Иншалла, төҙәлеп китер ең, былай булғас”,– тип намаҙын дауам итте.

Дәрес әҙерләү ылтауы менән урындыҡҡа уҙылып яттым да, дәфтәр битен йыртып, Мәстүрәгә хат яҙырға тотондом. Был минең кемгәлер арналған беренсе “әҫәр”, ул да бул а мөхәббәт хаты ине. Әлифбаны этеп-төртөп уҡы ам да, был тәүге хатҡа бөтә оҫталығымды алдым. “Мәстүрә бәғрем” тинем мин хат башында, “хат башы, яҙ ҡаршы” тип дауам иттем дә, хаттың иң яуаплы урынына еткәс, сабып барған ат таш ҡоймаға килеп бәрелгән кеүек, шып туҡтаным. Тей ә тейенгә, теймә ә ботаҡҡа, тип Хоҙайға тапшырҙым да, “мин ине өҙөлөп яратам” тигәндән уң “ ине кәләш итеп алам” тип өҫтәнем. Үҙ үҙемдән үҙем ҡурҡып, нишләргә белмәй оҙаҡ уйланып ултырҙым да, хатты өс мөйөшләп, ҡултыҡ аҫтындағы бетеү эсенә тығып уҡ ҡуйҙым.

Икенсе көн мәктәптә дәрес ҡайғы ы китте, уҡытыусының ҡысҡырып-ҡысҡырып нимәлер аңлатыуҙары, гүйә, стена аша ишетелгән кеүек тойолдо. Нимәлер аңларлыҡ хәлдә түгел инем мин. Тәнәфестә күҙмә-күҙ килеп осраған Мәстүрәнең йомшаҡ ҡына усына хатты алып, үҙ яҙмышымды көттөм.

Ә ул көткәндән бәхетлерәк булып сыҡты. Икенсе көн Мәстүрәнән “мин дә ине яратам” тигән ус ая ындай хат алғас, шатлығымдан:

*Тау башына тары сәстем,*
*Тартай ашап бөтөрҙө,*
*Бәләкәй генә кәләшемде*
*Тәкә төкөп үлтерҙе , –*

тип йырлап ебәргәнемде иҙмәй ҙә ҡалдым. Инде мине был иң ҡәҙерле ҡағыҙ

киҫәген нисек кенә юғалтмай, кеше күҙенә күр әтмәй аҡлау ғәме борсой башланы. Ҡайҙа ҡуйырға, нисек йәшерергә? Мин уны түбәтәй эсендә лә, ҡумта-сумка төбөндә лә йөрөтөп ҡараным, ләкин ҡайҙа ғына ҡуй ам да, көнөнә ике-өс мәртәбә уҡып алмайынса йөрәгем түҙмәне. Мин ул хаттың йөкмәтке ен генә түгел, хатта әр хәрефен ятлап алдым. Шулай бер көн бергә уҡыған Мә әҙи: “Ҡана, Рамаҙан, йәғерәфиә китабыңды дәрес ваҡытында ғына уҡырға биреп тор әле”,– тигәс, йәғерәфиәне уң яҡ партала ултырған Мә әҙигә оноуым булды, китап эсенән теге “бәхет ҡошсоғо” шылып төшөп тә китте. Мин йә әт кенә эйелеп уны ҡулыма алырға өлгөрҙөм. Ләкин уны ҡайҙа ҡуйырға белмәй, кишерҙәй ҡыҙарып, аптырап ултырғанда, минең өсөн алтындан да ҡәҙерле булған ҡағыҙ киҫәген артҡы партала ултырған, миңә ҡарағанда уҫалыраҡ әм көслөрәк тә Тәлғәт ҡарсыға кеүек эләктереп тә алды. Бына шунан китте инде мөғжизә. Минең илар хәлгә етеп ялбарыуыма ҡарамаҫтан, ул хатты минә бирмәне генә түгел, тәнәфес ваҡытында бөтә малайҙарҙы йыйып, хатты ҡысҡырып уҡып, уның эстәлеген бөтә мәктәпкә иғлан итте. Мәстүрә нисек түҙгәндер, белмәйем, ләкин мин үҙемә инер тишек тапманым. “Мәстүрә менән Рамаҙан хатлаша”, “Мәстүрә Рамаҙанға ғишыҡ хаты яҙған” ымаҡ шау-шыулы хәбәр өс-дүрт көн буйына ҡағылып- уғылып йөрөнө. Ә мин, “ғишыҡ” тигәндәре нимә була икән, тип баш ваттым. Уның бик матур, ысын мөхәббәткә йәм өҫтәгән үҙ икәнен уңынан ғына белдем.

Билдәле, был хәбәр атай-әсәйгә лә килеп еткәндер, ләкин уға беҙҙең өйҙә артыҡ иҫе киткән кеше булманы, сөнки донъяның ығы-зығылары былай ҙа Ғимран ҡарттың башынан ашҡайны. Мәстүрә менән минең өсөн бер генә нәмә бик ауырға әйләнде: тәнәфес башландымы, малайҙар ике төркөмгә бүленә лә, “ҡыҙ ҡушабыҙ” тип, бер төркөм мине, икенсе е ал ыу биттәре ҡыҙарып, манма тиргә төшкән Мәстүрәне эткеләп китереп бергә ҡуша ла, ихахайлап, коридор яңғыратып көләләр. Тора-бара уны ы ла онотолдо, сөнки мәктәп тормошона башҡа төрлө, бынан да ҡыҙығыраҡ ваҡиғалар өҫтәлеп торҙо. Был мыҫҡыллауҙар, көлөүҙәр, билдәле, беҙҙең араны ыуытыу ғына түгел, яҡынайта, эҫеләндерә төштө. Беҙ хатлашыуҙан туҡтаманыҡ, ул хаттар беҙ үҫә барған айын өлгөргәнерәк, йөкмәткелерәк төҫ алды. Арабыҙҙы яҡынайтыуға Мәстүрәнең Зариф исемле аға ы ла ныҡ ярҙам итте. Ҡыҙыл Армияла командир булып йөрөгән Зариф ағай йыл айын отпускыға ҡайтыр ине. Күрә ең, ауылда таралған был хәбәр уға ла килеп ишетелгән. Клубта барған киске уйындарға ул ваҡытта беҙҙең кеүек маңҡа ын еңенә өртөп, ләкин мөхәббәт утында янып йөрөгән бала-сағаны индермәйҙәр. Зариф ағай клуб туп а - ында тилмереп торғанымды күреп, “әйҙә, кейәү, клубҡа инәйек” тип етәкләп алып инер ине лә, үҙ янына ултыртып, төрлө хәлдәрҙе орашыр ине. Ул минуттарҙа Әлмөхәмәт ауылында минән дә бәхетлерәк кешене табыуы ҡыйын булғандыр. Ләкин был минуттарҙың ҡай ы ваҡыт ҡайғы-хәсрәткә әйләнгән хәлдәре лә булды.

Бына шуларҙың бере е. Хәҙер генә ул кино бер бүстәккә тороп ҡалды. Ә теге ваҡыттарҙа ауылға кино килеүе ҙур ваҡиғаға әйләнер ине. Беҙ бала саҡта Хәлил ауылы егете Бирҙин кино күр әтеүсе булып йөрөнө. Уның ауыл халҡы алдында абруйы хәҙерге заман космонавтынан бер ҙә кәм түгел ине. Кейгән кейемен генә күҙ алдына килтерегеҙ: ялтыр ботинка, тубыҡҡа тиклем балтырҙың ҡабырға ынан эләктерелә торған күн краги, шул крагиға ҡупшы итеп ҡыҫтырылған галифе салбар, өҫтә замоклы ары күн куртка, башта күн картуз, йәй булыуына ҡарамаҫтан тер әккә үк етеп торған хром бирсәткәләр. Бирҙинды яҡшы аттарҙа ауылдан ауылға йөрөтөрҙәр, ашы татлы, түшәге затлы, йомшаҡ ине киномеханиктың. Ул төшкән фатир хужалары менән балалары, Бирҙин ҡунып киткәндән уң, “Бирҙин ағай беҙҙә йоҡлап китте” тип уның икенсе килеүенә тиклем өйләрҙәр ине.

Кино күр әтеү тәртибе ул мәлдәрҙә түбәндәгесә ине. Белдереү-фәлән юҡ, кино килгәнен ишетеү менән бөтә халыҡ мәсеткә ағыла. Кешенең дә, урындың да

хисабы юҡ, халыҡ шығырым тула. Электр уты булмау сәбәпле, киноаппарат (ул заманда “Клемансо” булғандыр инде – **Р.Ө.**) ҡулдан әйләндерелеүсе динамик менән хәрәкәткә килтерелә. Кинофильм нисә пәрҙәнән тор а, шул тиклем ауыл малайын Бирҙин түгел, ә уның “ярҙамсылары” (сөнки ул үҙе ундай “ҡара” эш менән шөғөлләнмәй) йыйып мәсеткә индерә лә, бары ының да кәпәстәрен алып, кинолента йөрөтә торған йәшниккә бикләп үк ҡуялар. Кино ҡарайым, кәпәсенде ҡайтарам ти әң, бүкәнгә ултыра ың да эскәмйәгә ныҡ итеп беркетелгән динамикты бер пәрҙә буйы әйләндерә ең. Шунан инде кәпәсенде ҡайтарып бирәләр, әм ин иҙәндә ултырып, сөнки башҡаса энә төртөрлөк тә урын юҡ, кино ҡарарға хоҡуҡ ала ың. Ул динамик тигәндәрен әйләндереүҙең дә тәртибе бар. Яйыраҡ әйләндер әң, экранға төшкән яҡтылыҡ үрәнләнә, халыҡ ҡысҡыра башлай: “Шәберәк өйрөлт! Ҡулың серегәнме әллә?” – Быны инде – билет алып, ҡыҙҙар менән йәнәшә ултырыусы ҡырҡма мыйыҡ әүректәр ҡысҡыра. Нығыраҡ әйләндерә башла аң, бүкәндә баҫып, ҡулы менән лентаны төҙәтеп тороусы Бирҙин ҡысҡыра: “Яйыраҡ әйләндер, лампочканы яндыра ың!” Быны ы инде тәүге -енә ҡарағанда ла көслөрәк күр әтмә, сөнки кино бөтөнләй күр ételмәү ҡурҡынысы бар. Шулай итеп, бере енән ҡурҡып, икенсе енән өркөп, бер пәрҙә әйләндергәнсе манма тиргә төшә ең. Күп ваҡыт был ҡә әрле эштән арып, иҙәндә йоҡлап китеүселәр ҙә булғылай. (Ғүмеремдә тәүге фильмды мин әсәйем менән түбәнге мәсет тәҙрә енән тышта тороп ҡараным. Ул әле лә хәтерҙә.)

Был юлы мин Мәстүрә алдында динамик әйләндереп абруйымды төшөрмәҫкә хәл иттем. Ситән егенә ҡыҫтырылған биш тин аҡсаны усҡа йомдом да атайҙан тағы биш тин дауайларға тотондом. Ғәҙәттә бик ҡаты холҡло атай нишләптер йомшарҙы, кеҫә енән сығарып миңә аҡса ондо. Мин, ҡолонға атланғандай, клуб яғына тороп саптым. Ике билет алып, Мәстүрә менән фыртым ғына йәнәш ултырып кино ҡарау теләге ифрат ҙур ине. Мәсеткә йүгереп килеүемә унда йыйылған мәхшәр Ҡыҙыл ҡасаба ы йәрминкә енән бер ҙә кәм түгел ине. Мәсет ихата ы эргә ендә мине беҙҙең хаттарҙы йөрөтөүсе Нәфисә ҡаршы алды. “Әйҙә, мәсет артына сығайыҡ әле, йомош бар”,– тип мәсет артынан уҡ башланған йырынға төшөрөп алып китте. ис бер ҙә аптырап тормайынса – Нәфисәнең “Мәстүрә киноға аҡса орай” тиеүенә, мин тирле усымда йөрөтөп йылынған биш тинемде уға уҙҙым. Ул аҡсаны алып, миңә теклəп ҡарап торҙо ла: “Мәстүрә миңә лә аҡса бирергә ҡушты”,– тине. Хәл юҡ, мин үҙемә тигән аҡсаны ла бирергә мәжбүр булдым. Хәҙер киноға нисек инергә?

Күп уйлап тормай, мөнбәр яғынан тәҙрәнең бер өлгө өн алдым да, тәүҙә баш, унан бөтә кәүҙә менән инеп, бейек тәҙрәнән иҙәнгә килеп төштөм. Хәҙер теге яҡҡа нисек үтергә? Бер аҙ уйланып торғандан уң, йоҡа ғына таҡтанан эшләнгән сәхнә стена ына үрмәләнем. Ботаҡ егенән йыйылған халыҡ ус төбөндәгеләй күренә. Шулар ара ынан Мәстүрә менән Нәфисәне эҙләйем. Бына улар эскәмйәлә йәнәш ултырып нимәлер өйләшә. Эскә йылы инеп китте. Етеле шәм тотоп, рәт буйлап Тәлғәт Бирҙин килә, уның артынан киносы билет тикшерә. Бына сират Мәстүрәләргә килеп етте, улар ғорурлыҡ менән “Бына күрегеҙ, беҙ ҙә билет алып килгәнбеҙ!” тигән кеүек, ике зәңгәр ҡағыҙ киҫәген уҙҙы. Билет тикшереү бөттө. Әкренләп динамик әйләнә башланы. Экран йәнләнде.

Миңә лә төшөргә сират етте. Таҡта өҫтөндә эсем менән аҫылынып ятҡанда, саҡ торған йоҡа стена мин төшөп килешләй бөтөнләй ҡолап төштө. Шул ыңғай стенала элеүле торған экран да иҙәнгә төшөп, сәхнәнең арты булмау сәбәпле, кино кадрҙары мөнбәр артындағы стенала бейешә ине. Залда ығы-зығы ҡупты. Бирҙин ярҙамсылары менән сәхнәгә табан йүгерҙе. Мин тәҙрә өлгө ө аша сығып ҡаса алмайым, сөнки тәҙрәгә ис кенә лә үрелеп буй етерлек түгел. Сәхнә аҫтына

йәшенергә тура килде. Ундағы үрмәксе ауы, саң-туҙанды күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Бына шәм күтәреп, дөбөр-шатыр килеп эҙләй башланылар. Кемдер, шәм тотҡаны, буғай, сәхнә аҫтына башын тығып ҡараны ла: “Ағай, ана, мөйөштә бер кеше ята”,– тип яр алды. Уның ҡысҡырыуы башыма сүкеш менән уҡҡандай тойолдо. Бирҙин эйелде лә: “Йәнең барҙа сыҡ, хәҙер силсәүиткә алып барып, бикләп ҡуябыҙ”,– тип ҡысҡырып ебәрҙе. Мин ҡуҙғалмайым, сөнки ғүмер баҡый таҙартылмаған сәхнә аҫтына бер кемдең дә инә е килмәй. Бирҙиндең ялағайҙары ҡайҙандыр оҙон ҡыуал табып килтерҙеләр ҙә мин ятҡан мөйөштө төрткөләй башланылар. Ҡыуалдың нәҙек осо бер-ике мәртәбә мине сәнсеп тә алды. Түҙерлек әмәл ҡалмағас, уларға бирелергә мәжбүр булдым. Әллә ниндәй ҙур енәйәтсене тотҡан ымаҡ, ендән елтерәтеп, бөтә зал буйлап, тамашасылар күрерлек итеп өйрәп сығарҙылар ҙа, арт яҡҡа тибеп, бейек туп анан урамға ырғыттылар. Мине Себергә оҙатҡан кешеләй сығарып алып барғанда, күҙ ҡырыйы менән генә Мәстүрәне шәйләнем. Ул бөршәйеп кенә дебет яулыҡ ябынған да йәшле ике күҙен миңә текләгән. Бына ул баҫыр ҙа: “Ебәрегеҙ, йыртҡыстар, ул минең яратҡан кешем бит!”– тип ҡысҡырыр, ялбарыр төҫлө. Ләкин ундай тауыш ҡолағымдың төбөндә генә яңғыраны, ахыры ы. Мин ыҡтай- ыҡтай, аҡ ай-аҡ ай өйгә йүнәлдем.

Тормош бураҙналары Мәстүрә менән мине төрлө яҡҡа алып китте. Йәшлек осоронда төйнәлә башлаған ептәрҙе тәүҙә йомарланы, уңынан үҙенсә тағатып ҡуйҙы. Бер нисә йылдан мин Баҡырүҙәк мәктәбенә күстем, ә Мәстүрә Ишҡолда тороп ҡалды. Артабан дә шәтле, үлемесле уғыш, аслыҡ йылдары килде. Мәстүрәне башҡа күрергә насип булманы.

Күп йылдар үтте. Мин инде ғаилә менән Өфөлә йәшәй инем. Яҡташтарҙан кемдер Мәстүрәнең иҫән- аулығын, элеккесә Ишҡол ауылында йәшәгәнен, тормошта булғанын еткерҙе. Имеш, тракторҙа эшләй икән. Яңынан уны күреп өйләшеү теләге тыуҙы.

Тиҙҙән Әбйәлил яҡтарына юл төштө. Яҙғы сәсеүҙең ҡыҙыу көндәре. Мәстүрәнең ҡай ы тирәлә эшләгәнен белдем дә шул яҡҡа юл тоттом. Тракторы урынында, моторы ла ҡыҙған, үҙе күренмәй. Бер аҙ көтә бирҙем дә киттем. Аҙаҡ белдем: машинаны күреп, Мәстүрәм урман яғына ыпыртҡан икән. Башта аңлашылмағайны, аҙаҡ төшөндөм... Ҡатын кеше әр ваҡыт ҡатын булып ҡала инде, майлы кейем менән алдымда солярка еҫе аңҡытып күренә е килмәгәндер...

Ваҡыт үтә торҙо. Бер йомош менән нәшриәткә барырға тура килгәйне. Тейешле бүлмәгә ин әм, күҙ алдым ҡараңғыланып китте, өҫтәл артында... Мәстүрә ултыра. Күҙҙәре, төҫө-башы – бары ы ла уныҡы. Иғтибарлыраҡ ҡара ам – бите бер аҙ ағыраҡ, сәсе лә арыраҡ ымаҡ. Иҫәнләшкәс, түҙмәнем, шундуҡ орап та алдым:

– Ҡыҙым, ҡай ы яҡтан була ың? Әбйәлил районынан түгелме? – тинем, тулҡынланып.

– Юҡ, Баймаҡтан.

– Әсәйеңдең исеме Мәстүрә түгелме? – тип орашыуымды дауам итәм.

– Мәстүрә исемле өләсәйем бар ине. Ишҡол ауылында йәшәне. Былтыр үлеп ҡалды шул.

Артабан нәшриәткә барған айын ошо ҡыҙыҡайҙы күрергә тырыштым. Уның ҡап-ҡара, муйыл төҫлө күҙҙәренә ҡара ам, теге, йылдар аръяғында, йәшлектең алтын таңдарында ҡалған Мәстүрәне күргән ымаҡ тоя инем.

**Баҫырға Рауил ӨМӨТБАЕВ әҙерләне.**

# ДУҪ ХАҠЫНДА ҮҘ

*(Вил Ғүмәровтың тыуыуына 60 йыл тулыу уңайынан)*

1

Вил Ғүмәров хаҡындағы хәтирәләремдең күбе е, әлбиттә, биш йыл бергә үткән студент йылдарына ҡарай. Танышыуыбыҙ Вилдең беҙҙең документтарҙы: Әҙәбиәт институтына ижади конкурсҡа тәғәйенләнгән алты кешенең шиғырҙары, минең хикәйәләр алынған ҡалын папканы тотоп Мәскәүгә осор көндө булды. Яңылышма ам, 1975 йылдың май урталары ине шикелле. Баш ҡалабыҙҙың Совет майҙанындағы элекке Министрҙар Советы бина ының дүртенсе ҡатында ине ул саҡта Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы. Союздың бәләкәй генә бер бүлмә ендә Рәми Ғарипов, Әнүр Вахитов, Хәкимйән Зарипов ағайҙар, тағы бер нисә кеше – башҡалары иҫтә ҡалмаған – Мәскәүгә китәсәк ҡулъяҙмаларҙы барлап, тикшереп, машинканан үткәреп, уҡып ултыра. “Ултыра” тип әйтеү дөрөҫ тә түгелдер, ҡабалана, сөнки көн аҙағына яҡынлаша әм арабыҙҙа йөрөгән, әр кем менән иркен, тартынмай өйләшкән Вил Ғүмәров бөгөн үк Мәскәүгә осоп, институттың ҡабул итеү комиссия ына документтарҙы алып барып, иртәгә тапшырырға тейеш. Әрме хеҙмәтен тултырып, Башҡорт дәүләт педагогия институтының әҙерлек курсында уҡып йөрөгән минең өсөн был аҡ күлдәк, аҡ салбар кейгән, күҙлекле, алпыш мыйыҡлы егет, дөрөҫөрәге, ағай, ифрат ҡыйыу, олпат күренә – үҙенә ҙур миссия аласаҡ кешегә күңелдә оҡланыу ҙа уяна.

Ни айәт, бары ын да теүәлләп-барлап алалар ҡалын папкаға, папканы Вил яурынына аҫҡан модалы сумка ына тыға, әм барыбыҙ ҙа бүлмәнән сығып, күтәренке кәйеф менән өйләшә- өйләшә “Балалар донъя ы” туҡталышына йүнәләбеҙ. Союздан сыҡҡандан алып, хәйер, ултырған бүлмәлә үк, туҡталышҡа еткәнсе лә Рәми ағай үҙенең тигеҙ, дөмбөрҙәк тауышы менән Вилгә аңлатып-өйрәтеп бара: документтарҙы ҡабул итеүҙең иртәгә унғы көнө, берәй төрлө уйламаған ҡаршылыҡ килеп сығып, ҡабул итмәй ҡуй алар, Владимир Федоровичҡа ин (институттың ул саҡтағы ректоры – **Ә. Ә.)**, минән сәләм әйт, минең исемдән ора, аңлат, үтен, әммә тапшырмай ҡайтма. Папкала – инең генә түгел, тағы алты кешенең яҙмышы... 106-сы маршрут автобусы килгәс, түҙмәй, йә билет ала алмаҫ ың, “страховка”ға мин дә барайым, тип Вил менән аэропортҡа үҙе лә китә. Халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың башҡа ҡылыҡтарын белмә әм дә, ошо егетлеге өсөн генә лә бөгөнгәсә күңелемдә оло рәхмәт тойғолары йөрөтәм, башҡорт әҙәбиәтенең киләсәген ҡайғыртҡаны өсөн кеселекле баш эйәм. Ниндәй хәстәрлекле булған ул, уйлап ҡара аң!

Алғараҡ китеп, башлаған хәбәрҙе ослап ҡуяйым. Әлбиттә, билет алғандар, Вил осҡан, ижади конкурсҡа тәғәйенләнгән ҡулъяҙмаларҙы, юғары уҡыу йорто талап

иткән беҙҙең шәхси документтарҙы ҡабул итеү  комиссия ына тапшырған.

Шул етәү ара ынан Вил үҙе  әм мин ижади конкурстың ике турын үтеп, саҡырыу ҡағыҙы алғас, август башында ҡабул итеү  имтихандарына барып, уны -ын да уңышлы тапшырып, студент булып киттек... Ректорға ингәнме-юҡмы, Вил уны ын  өйләмәне, хәйер, өлгөргәс, уны ы кәрәк тә булмағандыр, кер ә, моғайын да, биш йыл эсендә бер булма а бер өндәшер ине. Ә бына беренсеме, икенсеме курста уҡығанда Владимир Федорович, нисектер, институт ихата ында мине туҡтатты ла: “Ҡайҙан?” – тип  орап ҡуйҙы. “Башҡортостандан”,– тип яуапланым  а-ғайып ҡына. Ректор  ынлы ректор  инең менән ҡыҙыҡ ын ын әле! “Рәми Ғариповты беләеңме?”– тине ректор. “Беләм, бында беҙҙе ебәреүселәрҙең бере е тап ул булды”, – тинем. “Великий был студент!– тине йөҙө яҡтырған ректор оло ҡәнәғәтлек менән.– Вы должны учиться как он, он был отличником. Вы же потомки Салавата!”

Ошо  үҙҙәр унда уҡыған  йылдарҙа гел ҡолағым төбөндә яңғырап торҙо, белем алыуға яуаплылыҡ, етди мөнәсәбәт өҫтәне – бөйөк студент Рәми Ғарипов исеме, милли батырыбыҙ Салауат рухы алдында нисек илке- алҡы уҡып йөрөй өң!?

Вил менән Рәми ағай автобусҡа ултырып аэропортҡа киткәс, туҡталышта байтаҡ  өйләшеп торҙоҡ – шундай мө им эш башҡарылғас, бер кемдең дә ҡапыл ғына ҡайтҡы ы килмәне. Ағайҙарҙың хәбәренән мин Вилдең  Магнитогорск тау-металлургия институтын тамамлауын, әлеге көндә Мурманск  өлкә ендә инженер булып эшләп йөрөүен  әм, махсус рәүештә отпуск алып, Әҙәбиәт институтына уҡырға керергә ниәтләнеп ҡайтҡанын белдем. Яңыса, “Мәскәүсә, хатта көнбайышсараҡ яҙа” тигәндәре лә хәтергә уйылып ҡалған. Ә миңә унын баштан-аяҡ аҡтан кейенеүе ҡыҙыҡ  әм көнләштергес – ул саҡта былай итеп фырттар, аҡсалылар ғына кейенә торғайны. Хәйер, инженер кешенең аҡса ы булғандыр инде.

Вил беренсе курстан алып бишенсе курсты бөткәнсе  әйбәт уҡыны. Ҡай ы бер семестрҙарҙа юғары стипендия ла алды. Ярай ы уҡ демократик юғары уҡыу йорто бул а ла, Әҙәбиәт институтында яҡшы билдәләргә генә өлгәшеү үҙе бер мәртәбә ине. Бының өсөн уҡыу программа ын ваҡытында  әм теүәл үтәп барыу ғына етмәй, дөйөм әҙерлегең дә, кругозор-даирәң дә,  ул саҡтағы СССР халыҡтары әҙәбиәттәрен белеү ҙә, ижадың да булырға тейеш. Күптәр бер институт йәки университет  тамамлап килгән, хәҙер икенсегә юғары белем ала, шуға ла  ғилем кимәлдәре юғары. Бер вуз тамамлап килгәнгәме, Вилгә,  әйткәнемсә, уҡыу программа ы ла, семинар, реферат, курс эштәре  ымаҡ  абаҡтар ҙа еңел бирелде, ижади семинарға ҡуйыласаҡ шиғырҙарын үҙе тәржемә итте, бынан тыш күп  уҡыны, үҙ аллы шөғөлләнде, имтихандарҙы ла ан ат  әм ваҡытында тапшыра килде. Белмәгәнен, дөрөҫөрәге, белергә теләгәнен, ҡыҙыҡ ынған нәмәләрен уҡытыусыларҙан  орауҙан да, теге йәки был әҫәргә, теге йәки был әҙиптең дөйөм ижадына үҙ мөнәсәбәтен белдереүҙән дә тартынманы. Ә бындай үҙаллылыҡ, үҙ фекерең булыу уҡытыусылар тарафынан хуплана ғына ине. Ни ти әң дә, ижади уҡыу йорто. Хәйер, улар үҙҙәре үк институтты Пушкиндың лицейы менән сағыштыра, параллель ҡуя торғайнылар, шуға ла  әр яңы фекер, үҙаллылыҡ хупланды ғына.

Китап йыйҙы. Ашарына йәллә ә лә, китап алыуға аҡса йәлләмәне. Дөйөм ятаҡ бүлмә ендәге карауаты аша стена яҡлап өс рәт оҙон таҡталарҙан я алған кәштәгә – уны ын Мурманскиҙан  алып килде шикелле – китаптарын теҙҙе. Китапхана ы, нигеҙҙә, төрлө ҡалын-ҡалын  үҙлектәрҙән, энциклопедияларҙан, рус  әм донъя әҙәбиәтенең  классик әҫәрҙәренән, тарихи, философик характерҙағы баҫмаларҙан тора ине. Кәштәгә ҡуйылмағандары сәй йәшнигендә, төрлө  картон  коробкаларҙа

ята. Улары – карауат аҫтында. Бер өйләшеп ултырғанда китаптар тура ында үҙ сыҡҡас, уның, минең китаптар дүрт ерҙә: бер өлөшө – бында, икенсе өлөшө – Миндәктә әсәйемдә, өсөнсө ө – Өфөләге Та ир ағайымдарҙа, дүртенсе өлөшө – институтҡа тиклем эшләгән ерҙә, тигәне хәтерҙә. Ә улар бит бер-икешәр генә дана түгел, әр ҡай ы ы үҙе бер ҙур китапхана хасил итерлек! Бер ергә йыям, тип хыялланып йөрөп тә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, киң илдең дүрт тарафында ятҡан китаптарын барыбер ҙә бер ергә йыя алманы. Өлгөр ә – әйбәт. Хәйер, әйбәт тигәнем дә әйбәт түгел. Бөгөн улар ҡайҙа икән? Ҡулланыламы, үле йөк булып берәй ерҙә ятамы, әллә таралып, сарыф ителеп бөттөмө? Мәскәүҙә мин күргәне генә лә ниндәй бай, сифатлы, ирәк осрай торған йыйынтыҡтар ине. Ҡыҙыҡ ынған, уҡыған даирә е киң булды Вилдең. Беҙҙең быуын әҙиптәре генә түгел, ғөмүмән, үҙем белгән-күргән, аралашҡан башҡорт яҙыусылары ара ында мин уны иң мәғлүмәтле, грамоталы, күп белгән, тормоштоң күп мәсьәләләре буйынса ла фекер йөрөтә алған кешеләрҙең бере е ине тип иҫәпләйем. Алғараҡ китеп бул а ла, әйткәндәремде иҫбатлау маҡсатында, йәнә бер ваҡиғаны иҫкә алғым килә. Уның аң-белем, ҡараштарын асыу өсөн был – шулай уҡ ҡыҙыҡлы ваҡиға.

...1983 йылдың ҡара көҙөндә беҙ икәүләп Башҡортостан атом электр станцияы төҙөлә башлаған Ағиҙел ҡала ына барҙыҡ. Ул дәүерҙә Вил "Ағиҙел" журналының публицистика бүлегендә эшләй ине. Мин дә шунда. Командировкаға китерҙән ике көн алда атом, ҡояш, ыу, бүтән энергия сығанаҡтары ярҙамында яҡтылыҡ алған станцияларҙың эше, технология ы, алдағы йылдарҙағы яғыулыҡ, энергия сығанаҡтары тура ында яҙылған бер нисә китап, брошюра килтерҙе лә, ҡараштыра тор, тегендә кәрәге тейер, тип өҫтәлемә алды. Гипотезалар, теориялар, фараздар тупланған ғилми сығыштар, доклад тар, мәҡәләләр ине былар. Үҙ ҙә юҡ, кәрәге тейҙе – бары ын да төптән аңлап етмә әм дә, ниндәйҙер дөйөм мәғлүмәт туплай алдым. Уны ы ярар, ә Ағиҙелгә барғас, мине аптыратҡаны әм оҡландырғаны шул булды: Вил етәкселәр, инженерҙар, прорабтар менән төҙөлөш, уның проекты, төҙөлөү технология ы, теге йәки был проблемалар тура ында, хатта, ниңә шулай эшләмәй егеҙ, ниңә былай хәл итмәй егеҙ, тип шунда эшләп йөрөгән ымаҡ гәпләшеп алды ла китте. Беҙҙе, был журналистар нимә белә инде, бер нәмә лә аңламайҙар, тип алҡын ғына ҡаршылаған етәкселәр тәүҙә баҙабыраҡ ҡалды, Вилдең төшөнгәнен күргәс, асылып өйләй, аңлата башланылар. Бына ҡайҙа кәрәк булды Вилдең инженерлығы. Тулы ике көн эсендә беҙ конторҙарында ла, эшселәр ятағында ла, ҡала торлаҡ төҙөлөшө идаралығында ла булдыҡ, ҡараныҡ, ораштыҡ, йөрөнөк, яҙып алдыҡ, фотоға төшөрҙөк. Өфөгә ҡайтҡас, мәҡәләнең төҙөлөшкә, буласаҡ атом электр станция ына ҡағылған техник өлөшөн – Вил, республиканың төрлө тарафтарынан йыйылып эшләгән халыҡ, уларҙың көнкүреше, йәшәү шарттары тура ындағы ын мин яҙҙым, әм ул "Ун игеҙҙең бере е" тигән исем менән "Ағиҙел" журналында (июнь, 1984) донъя күрҙе.

Вил аралашыусан, кеше менән тиҙ уртаҡ тел табыусан ине. Дөйөм ятаҡта йәшәгәс, егеттәр ара ында төрлө хәлдәр була: эсә ең дә, сәкәләшә ең дә тигәндәй, әммә Вилдең кем менәндер тәм еҙләшеп йөрөгәнен иҫләмәйем, үҙ енмәгән кеше е менән өйләшмәй-аралашмай, уның хаҡында бөтөнләй үҙ ҡуҙғатмай торғайны, әйтер ең, ул бөтөнләй юҡ. Милләтенә ҡарамай, беренсе курстан башлап бишенсе курста уҡығандар менән бик аралашып-килешеп йәшәне, бигерәк тә Кавказ егеттәре менән дуҫ булды. Ул ятаҡтағы егеттәрҙең бары ын да тиерлек исемләп таныны, ҡай ы ҡаланан, республиканан килгәнен белде, әм уның үҙенә лә шун-

дай йылы мөнәсәбәттә булдылар. Исеме менән, күптәр йыш ҡына “Вил Башкирович” тип өндәшәләр ине. Байтаҡ ҡына ваҡыт дөйөм ятаҡта электрик вазифа - ын да алып барҙы. (Магнитогорск тау-металлургия институтында алған белеме лә инженер-электрик ине.) Ятаҡта, айырым бүлмәләрҙә теге йәки был сәбәп менән ут үнгән саҡтарҙа тикшереп-ҡарап, — ә бындай хәлдәр дөйөм ятаҡта, әр кем белә,йыш була,— бүлмәләр буйлап йөрөү, электр приборҙарын ремонтлау, лампочкалар менән тәьмин итеү .б. эштәр ҙә студенттар менән танышыуға, аралашыуға мөмкинлек биргәндер. Унын ҡеүәтле проигрывателе, ул заман өсөн тан ыҡ байтаҡ пластинкалары менән ленталары ла бар ине. Бынан тыш, Пермь, Свердловск, Ленинград, башҡа ҡалаларҙан егеттәр килгәне хәтерҙә, бары ы ла етди егеттәр — аспиранттар, йәш ғалимдар, журналистар, шағирҙар.

Вил Ғүмәров үҙенең холоҡ-фиғеле, бар булмышы менән шағир ине. Дөйөм ятаҡтағы көнкүрешенә, ашау-туҡланыуына талым ыҙ, өҫтөндәге кейеменә лә иғтибар ыҙ булды. Беҙҙең традицион шиғыр ҡанундарына бик инеп-буй оноп та барманы, шулар рамка ында үҙен сикләмәй, ағайҙар әйтмешләй, Мәскәүсәрәк ебәрҙе. Был унын шиғыр форма-төҙөлөшөндә, композиция ҡоролошонда, шулай уҡ көтөлмәгән образдарҙа, сағыштырыуҙарҙа, ығымталарҙа сағылыш таба ине. Семинар етәксе е, профессор, билдәле шағир, СССР Дәүләт премия ы лауреаты Лев Ошаниндың иң яратҡан уҡыусыларының бере е булды. Семинар етәксе е уны ана шул эҙләнеүсәнлеге, эксперименттарҙан ҡурҡмауы, үҙ образын, фекерен табырға ынтылышы өсөн дә үҙ итте. Хәтерем яңылышма а, бер нисә йыл ул семинарҙың староста ы ла булды.

Ошоға тиклем Вилгә бәйле ике үкенесем йәшәй. Студент йылдарында ул мине



*Лев Ошанин семинары. Уңдан икенсе — Вил Ғүмәров.*

Миндәккә, әсә е йәшәгән йортҡа, алып ҡайтты. Белорет автовокзалында бәләкәй генә “ПАЗ” автобусына этешә-төртөшә саҡ кереп ултырып, әле бер тауҙы, әле икенсе тауҙы артылғанлыбыҙ әле лә күҙ алдында. Төнләтеп кенә барып индек өйҙәренә. Бал балы эсеп иҫерешеп тә киттек. Иртәгә енә хужалығында нимәлер эшләнек, туғандарынан кемдер килде, үҙе лә кемгәлер барҙы, кисен ауыл буйлап йөрөп әйләндек, әсә е менән өйләшеп-гәпләшеп ултырҙыҡ. Иртәгә енә кире юлландыҡ.

Учалы районына беренсе барыуым ине был. Алдағы йылдарҙа был районға күп тапҡырҙар барасаҡмын, байтаҡ ысын дуҫтар табасаҡмын, үҙем өсөн ғәжәп төбәкте асасаҡмын, ә бына тәүге е барыбер ҙә онотолмай. Тәүге үкенесем шул: институттан уң байтаҡ йылдар бергә, аралашып, көрешеп йөрөп, уны үҙемдең районға, атай-әсәй йортона, алып ҡайтып күр әтә алманым... Үкенесемдең икенсе е: өйләнмәне. Быны ында минең бер ниндәй ҙә ҡыҫылышым юҡ, сөнки ул — әр кемдең шәхси эше. Шулай ҙа күңелем тыныс түгел, ғәйебем дә бар ымаҡ, сөнки иртә үлемендә унын яңғыҙлығы ла сәбәп булды, тип уйлайым. Ғүмер буйы тигәндәй ятаҡта көн итеү (Стәрлетамаҡтағы фатирын вафатынан бер нисә йыл элек кенә алды), ҡатын-ҡыҙ тәрбиә е, наҙы күрмәү, аслы-туҡлы йөрөү, дөрөҫөрәге, ваҡытында туҡланмау, бөтмәҫ командировкалар әм йыш ҡына сама ыҙ эсеү организмын иртә бөтөрҙө. Шуларға күңел тынıслығы булмауын, психологик баҫымды, эшендәге, бигерәк тә Стәрлетамаҡтағы ығы-зығыны, тартҡылаш-интригаларҙы ла өҫтә әң... Ауылына ерләргә алып барғас, әсә е, исма ам, өйләнмәне, бала ы ҡалманы, үҙемә алып, Вилдең төҫө итеп ҡарар инем, тип илаңы... 1975 йылда уҡ яҙған бер шиғырында шундай юлдары ла бар: “... Мөғжизәләр төшкә таңда керә, туҡылдатмай аса күңел ишеген. Етеп ошо йәшкә, уйға ҡалам: Ниңә тирбәтмәйем улым бишеген?..” Быны ул егерме алты йәшендә яҙған, ә унан уң тағы егерме йылға яҡын яңғыҙ йәшәне, ошо егерме йыл буйы үҙенең ярты ын табырына өмөтләнеп йәшәне. Әммә таба алманы...

2

Вилдең институттан уңғы тормошо (беҙ уны 1980 йылда тамамланыҡ) күбебеҙҙең күҙ алдында уҙҙы. “Ленинсы-Ленинец”, “Башҡортостан” гәзиттәре, “Ағиҙел” журналы редакцияларында, “Китап” нәшриәтендә эшләне, унан Стәрлетамаҡҡа китте. Тәүҙә Яҙыусылар ойошма ында консультант, торараҡ ойошма етәксе е булды. Ҡайҙа ғына хеҙмәт ит ә лә, актив ижади тормош менән йәшәне: шиғырҙар, пьесалар, проза әҫәрҙәре яҙҙы, шулай ҙа төп жанры яйлап публицистика була барҙы. Сөнки был дәүерҙә илдең сәйәси тормошо үҙгәрә, уңынан беҙ торғонлоҡ йылдары тип атаясаҡ йылдарҙың йоҡоло ауа ын йыртып киҫкен сәйәси, социаль, ижтимағи, экологик, мораль, әхлаҡи проблемалар ныҡлап күтәрелә башлағайны. Фекер йөрөтөү даирә е киң, логик фекерләү ҡеүә е бай булған Вил йәмғиәттәге был үҙгәрештәрҙе күрә, дөрөҫ ба алай ине әм үҙе лә ошо әйләнешкә әҙер ине. Сөнки был унын стихия ы, бөтә холоҡ-фиғеле, характеры яңылыҡҡа, позитив үҙгәрештәргә, кешеләр ара ындағы, йәмғиәттәге демократик мөнәсәбәттәргә ынтылышлы ине. Әлбиттә, ул байраҡ тотоп урамға, ҡорал тотоп баррикадаға сыға торған кеше булманы, ә шуларға идея, фекер биреүсе, юл-йүнәлеш күр әтеүсе шәхес ине. Ул бер нәмәнән өркмәй-ҡурҡмай әлеге проблемаларҙы күтәреп сыҡҡан тәүгеләрҙең бере е булды. Әйтәйек, Ағиҙел йылға ы тамағында атом электр станция ы төҙөлә башлағас, 1981 йылдың йәйендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы инициатива ы менән унда әҙәби пост ойошторола әм Вил Ғүмәров унын етәксе е

итеп тәғәйенләнә. Ул ошо төҙөлөшкә бер нисә тапҡыр барҙы, осрашыуҙар, етәкселәр менән интервьюлар ойошторҙо. Ул бер “Ағиҙел” журналында ғына ла алты ҙур очерк баҫтырҙы. (Уларҙың береһе хаҡында алда һөйләгәйнем инде.) Икәүһе “Башҡортостан ҡыҙы” журналында донъя күрҙе. “Ағиҙел”дә баш ҡалаланы Ленин мемориалы төҙөлөшө хаҡында бер нисә очерк баҫтырҙы. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы заданиеһы буйынса ул Учалы районы Байрамғол аrыҡсылары хаҡында проблемалы очерк (ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, “әҫәр күләме ҙур” тигән һылтау менән китапҡа индерелмәй ятып ҡалды), Күмертау күмер ҡатламы, Стәрлетамаҡтағы теүәл станоктар төҙөү заводы, Белорет металлургия комбинатындағы киҫкен проблемалар хаҡында борсолоп, саң уғып яҙып сыҡты... Мәскәүҙә сыҡҡан “Студенческий меридиан” журналында уның Ленин тауҙарында эшләгән студенттарҙың төҙөлөш отряды тураһында “Комиссар Пульсара” тип исемләнгән күләмле очергы сыға (1982 йылдың апрель айы) һәм ул очерк студенттарҙың Бөтә Союз төҙөлөш отрядтарына арналған конкурста еңеүселәрҙең береһе тип табыла һәм, лауреат исеме бирелеп, премия менән бүләкләнә.

Мин Вилдең шул осор өсөн мөһим, әйтер инем, ҡырҡыу торған мәсьәләләр күтәргән мәҡәләләренең бер нисәһенә генә туҡталдым, ә уның көндәлек эш нормаһына әйләнгән, йәғни йөрәген гел генә ҡан һыратып торған һәм шуның өҙөмтәһендә даими рәүештә яҙыуҙы талап иткән темалар – башҡорт теленә дәүләт теле статусы биреү, Стәрлетамаҡта башҡорт телендә гәзит булдырыу, балалар баҡсалары асыу, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу тураһында яҙаған сығыштарын, докладтарын, төрлө инстанцияларға яҙған хаттарын, өндәмәләрен, республика матбуғатында сыҡҡан мәҡәләләрен дә иҫәпләһәң, уның сәйәси, ижтимағи, художестволы ижады һәм кешелек йөҙө тағы ла баҙыҡлана, олпатлана төшөр. Ул 1990 йылда хатта Әлшәй милли-территориаль



5-се һайлау округы буйынса РСФСР халыҡ депутаты булып һайланырға ла йөрөнө. Уның һайлау алды программаһында шул дәүер өсөн бик актуаль вәғәҙәләре бар ине. Ул бигерәк тә социаль һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау мәсьәләләренә баҫым яһаны, халыҡтың йәшәү рәүешен яҡшыртыу, йәштәрҙе, йәш ғаиләләрҙе, ҡатын-ҡыҙҙы, әсәләрҙе яҡлау һымаҡ мөһим проблемалар күтәрҙе. Һайлаусылар менән осрашып, ошоларҙы аңлатып йөрөнө, оппоненттары менән бәхәскә инде, матбуғатта сығыш яһаны, әммә депутат булып үтә алманы – команда-административ рычаг уны тапап китте. Хәйер, аҡыллы кеше булараҡ, ул үҙенең үтә алмаҫын бик яҡшы белә ине: ул осорҙа түрә-ҡаранан алға сығыу – мөмкин булмаған эш. Йәмғиәт һаман яҡшы батшаға ышана, унан һаман нимәлер көтә, өмөт итә ине әле, шуға ла илдәге ижтимағи, сәйәси хәлде аңлатыр, демократик үҙгәрештәргә илтер юлды күрһәтер интеллектуалға ҡарағанда, өйрәнгән-күнеккән үҙҙәренең әүәлге етәксе-һенә тауыш бирҙе халыҡ – нишләйһең, халыҡтың сәйәси аңы түбән шул. Ә йәл, депутат итеп һайлан а, Вил нимәлер эшләй алыр ине, тип уйлайым. Ғөмүмән, Вил Ғүмәров республикала, илдә барған сәйәси ваҡиғаларҙы, йәмғиәттәге

үҙгәрештәрҙе бик иҙгер тоя, тота әм дөрөҫ ба алай торғайны. Ул үҙе лә идеялар генераторы булды, аң-аҡылы фекергә, фантазияға бай ине, әммә үҙҙәренән бер нисә аҙымға алда барған талантлы шәхесте күптәр аңламаны, ҡабул итмәне. Ундайҙарҙы уңлап аңлайҙар, ул әйткәндәр, иҫкәрткәндәр, фаразлағандар дөрөҫкә сыҡҡас...

Вил Ғүмәров әҙәбиәтте нескә тойған, юғары зауыҡлы, иҙгер тәнҡитсе лә булды. Рәми Ғарипов, Самат Ғәбиҙуллин, Рәмзилә Хисаметдинова .б. ижады тураындағы мәҡәләләре генә ни тора! Уларҙа ниндәй юғары эске тойомлау, фекер, ижадтағы төп моменттарҙы тота алыу әм такт! Шиғриәттә генә түгел, әҙәбиәттең бөтә жанрҙарында ла берҙәй юғары профессиональ үҙ әйтә ала ине ул.

Ә шағир булараҡ үҙенең шиғырҙары, республика матбуғатынан тыш, “Литературная Россия” аҙналығында (1977 йыл, июнь), “Аврора” журналында (1982 йыл, декабрь), Болгарияла “Шуменска заря” гәзитендә (1979 йыл, декабрь) нәшер ителә. Әйткәндәй, республикабыҙҙың профессиональ әм үҙешмәкәр композиторҙары уның илленән ашыу шиғырына көй яҙған, әм уның байтағы бөгөн дә сәхнәнән, радионан яңғырай.

Ошо урында йәнә студент саҡты иҫкә төшөргөм килә. Мәҫәлән, башҡаларҙан әллә ни ҡалышмай уҡып йөрө әм дә, дөйөм әҙерлек йә әтенән минең үҙемә тәүге ике курс ярай ы уҡ ауырға тура килде, ә Вил Әҙәбиәт институтына тиклем университет йәки институт тамамлап килеүселәр, ул саҡтағы СССР-ҙың төрлө эре ҡалаларынан, союздаш республикаларҙан, Мәскәүҙең үҙенән булғандар, үҙенән юғары курстағылар менән ин дә мин шул дәүер шиғриәте, теге йәки был автор ижады, ғөмүмән, әҙәбиәт хаҡында белеп фекер алыша, бәхәскә инә ала торғайны. Дәрестәрҙән уң, дөйөм ятаҡтағы өйләшеү-аралашыуҙарҙа ла ул уртала булды. Ифрат күп уҡыны – бына ҡайҙа белемдең, мәғлүмәтлелектең нигеҙе.

Вил тәржемә менән дә ихлас шөғөлләнде, халыҡ шағиры Рәми Ғарипов ымаҡ, быға ла ижад тип ҡараны. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ драматургы Дулат Исабековтың “Көтөр кешем бар минең” тигән әҫәрен башҡортсаға ауҙарҙы. (Әҫәр Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында сәхнәләштерелде.) Сыуаш теленән Георгий Орловтың “И грибник я, и охотник” тигән повесын, шулай уҡ Васлей Митта, Вениамин Тимаков шиғырҙарын .б. тәржемә итте. Бынан тыш ул “Ағиҙел” журналы өсөн, республика гәзиттәре, очерк китаптары өсөн бер нисә тиҫтә очеркты руссанан башҡортсаға йәки башҡортсанан руссаға тәржемәләне.

Мин уның ҡулы тейгән бер нисә авторҙы ғына миҫалға килтерҙем, ә теге йәки был шағирҙың юбилейына арнап антологияларға, альманахтарға индереү өсөн әллә күпме шәлкемдәрҙе башҡортсаға әйләндергән кеше ул. Бөгөн уларҙың барыын да табыу мөмкин түгел – республика гәзит, журналдарына, айырым йыйынтыҡтар биттәренә ибелгән.

Бына шундай кеше, шағир ине курсташым Вил Ғүмәров. Интеллектуал, башҡорттоң лайыҡлы улы. Ғүмере иртә өҙөлмә ә, милләт, халыҡ өсөн байтаҡ эштәр ҙә башҡарыр, ижадын да яңы бейеклеккә күтәрер зат ине. Ине...

**Әмир ӘМИНЕВ.**

Ғәли
ИБРАҺИМОВ

# КИНЙӘ

## ТАРИХИ РОМАН

III китап

## БҮГӘСӘҮ БАТША ҺАНАТЫ

### Икенсе бүлек

### Яу юлдары

*Тотҡон коштай башҡортҡа*
*Әҙер ҡуйған ирек бармы ни?*
* * *
*Бүгәсәүгә ҡушылып,*
*Ир-батырға ҡуш булып,*
*Казактарға иш булып*
*Яуға сығып көн итте,*
*Ирек яулар көн итте!*

**(«Бүгәсәүгә ҡушылып...» ҡобайыры)**

I

Екатерина Карҙы оҙатты. Уның артынан — полктар. Барып ҡушылалар. Ул дворяндарға ғына түгел, крәҫтиәндәргә лә таныш. Рустарға ғына түгел, поляктарға ла. Малорустар һәм белорустарға. Үҙенә биргән ғәскәр менән быларын да ҡыйратып йөрөнө ул. Шунда ҡатнашҡан башҡорттарға, татарҙарға ла таныш. Уның ҡан ыҙлығын күрҙеләр, үҙ елкәләрендә лә татынылар. «Кар килә» тигән хәбәр уларҙы һағайтты, асыуҙарын уятты. Хатта Ырымбур яҡтарына һөрөлгән поляк конфедераттарын. Байҙары — уртаҡ тел табыр, ә ярлы-ялпы шляхта уның ниндәйлеген онотмай, әле яралар уңалмаған, әрнеү баҫылмаған.

Кар килә. Каретала бәүелеп килә (шлафваген, йыуан кәүҙә).

Өҫтөндә юлда кейә торған сюртук. Ләкин кейемдәр күп. Әллә ни саҡлы сумаҙанға таҫлап алып, ҡайыш менән уратып ҡаптырылған көйө үҙ янында бара.

Артта камердинер (ундайҙар губернаторға ғына тейеш. Әйткәс, ул кейендерер).

Уға шулай кәрәк.

---

*Дауамы. Башы 3-сө һанда.*

Унының адъютанты ла, ординарецы ла, вестовойы ла бар. аҡсылар күп. Ғәскәр йәйәүле, атлылар вәғәҙә итәләр.

Ул дәү кеше булып килә. Уға бында бөтә е лә буй она. Ул Екатерина фарманын үтәргә килә.

Генерал-майор Василий Алексеевич Кар күптән, ун йәшенән бирле батша хеҙмәтендә. Үҫеп, офицер булғас, Ете йыллыҡ уғышта ҡатнашты. Шунда бик ныҡлы уғыш тәжрибә е алды. Ҡырҡ йәш тулыр-тулмаҫтан ул генерал чины бирелеү хаҡында ҡулына батша ҡул ҡуйған рескрипт алды (яңы чин хаҡындағы яҙыу). Бынан уң Польшала конфедераттарҙы ла, баш күтәреүселәрҙе лә баҫтырып йөрөнө. Башҡорттар күрҙе, беләләр. Был йылдарҙа унының аулығы насар ине.

Изге императрица ы Екатерина Алексеевна уға дауаланыу мөмкинлеге бирҙе. Ә бына ошо йылдың октябрь айы башында Петербургҡа ҡайтҡас, Емельян Пугачев яу күтәргәс, батшабикәнең уйына тәү килгән кеше ул булды.

Ни бары ул, генерал Кар! Поляктарҙы, белорустарҙы, малорустарҙы ҡыйратып ҡайтҡанды инде – Яйыҡтан ҡабынған янғынды ғына үндерә белер.

Екатерина:

– иңә ҡушам. Шул яуызды тотоп килтер миңә.

Кар – авантюрист, артыҡ уйлап торорға яратмай.

– еҙҙең алда йә үҙе, йә башы булыр.

Уға бәхет, эштәге уңыш гел еңел бирелде. Яңы дан, яңы чин булыр. Тик бына ул Польшалағы княжна Хованскаяға өйләнергә йыйына ине.

Ул үҙенә Петербургтан ғәскәр алды. Улар ара ында гвардеецтар ҙа бар ине, Мәскәүҙә өҫтәмә полктар ҡушылды. Шул көндәрҙә Польшала ҡалдырылған башҡорт сиреүенең ете йөҙләп кеше е Смоленскиҙы үтеп, Карҙың юлына яҡынлап килә ине. Уларҙы ла ҙур корпусҡа бирҙеләр.

Был бик сәйер, бик шикле тойолдо башҡорттарға.

– Унының кем икәнен беләбеҙ инде, – тинеләр. – Хәҙер кемдәрҙе ҡыйратырға алып бара икән?

Юл юҫығы шул яҡҡа, үҙҙәренең йорт-ерҙәренә табан.

Көн тимәй, төн тимәй ҡыуҙы ул үҙенең ҙур колонна ын (йәйәү).

Ҡазанға еттеләр. Кар ҡупшы, кейенеп-я анып йөрөргә ярата. Ләкин кем алдында, кәйефтәре юҡ. Пугачев хаҡында туҡтау ыҙ килә ярлы халыҡтың үҙ хәбәрселәре, үҙ өгөтсөләре. Губернатор үҙе юҡ. Алға киткән. Көс йыйып тора ине. Шул хаҡта Хәрби коллегияға 21 октябрҙә үк Кисеү-Саттан рапорт ебәрҙе. Яков Ларионович фон Брант[1] уны Кисеү-Сатта (Кичуй-Фельдшанец) ҡаршыланы.

Ыҡҡа яҡынлай.

Кичуй йылға ына. Ҡәлғәгә.

Уны 1654 йылда алғандан бирле Кичуй-Фельдшанец тиҙәр. Чистай ҙа, Бүләр ҙә, Шөшмә ситтә ҡалды.

Ана шунда өйләштеләр. Губернатор Яков Ларионович Брант уға яңы көстәр өҫтәне. 500 алдат. Шул саҡлы ҡалмыҡ. Атлыларҙы орай. 800 татарҙы майор Астафьев алып бара. Башҡорттар.

– Тотоп илтәм. Мин барып еткәнсе, далаға ҡасма а...

Унда оҙаҡ булыр.

Брант:

– Ҡыйын да булыр, – ти.

Хәйләләй.

– Эйе, бөтә е ихтимал. Көс күп кәрәк.

Шунда хәрби совет үткәреп, байтаҡ ҡына саралар билдәләнде. Хәбәр ебәрелде. Ырымбурҙың ҡамауҙа ҡалыуы, хәлдең бик ауыр булыуы бында билгеле. Рейсндорпҡа көс кәрәк.

[1]*Фон Брант Яков Ларионович – Ҡазан губернаторы, генерал-аншеф.*



*Икенсе Кинйәбыҙҙағы музейҙа «Е. Пугачев менән Кинйә Арыҫлановтың осрашыуы» диорама ынан күренеш. Автор-рәссам И. Федоров  үрәтендә  ваҡиға 1773 йылдың октябрендә Яйыҡ казактары йәшәгән  аҡмар ҡала ында бара.*

Генерал үҙе барып еткәнсе, Ырымбурҙа ҡамауҙа ҡалған кешеләргә ярҙам  орай. Йәшерен штафета.  әр эстафета[1]  айын ярҙам  орай — сикурс, сикурс.

15/X ҡуҙғала.

Сембер ҡала ының коменданты, полковник Петр Матвеевич Чернышев бер полк ғәскәр менән ебәрелде. Ғәскәре —  амар, Ставрополь казактары. Ул Кинәле, Ырғыҙ йылғалары буйынан туп-тура барыр.

Үҙе барғансы... Шулай уҡ ул барып еткәнсе көс туплай тор ондар. Атлы ғәскәр кәрәк. Башҡорттар белә уларҙы. Өфө воевода ы надворный советник, полковник Алексей Никифорович Борисовҡа указ ебәрҙеләр, башҡорт старшиналары әмер биреп йыйҙырт ын, Стәрлетамаҡ ҡала ына туплай тор ондар.

Ундайҙары бар.

Мәндей Төпәйев — почтовый комиссар. Миңә офицер чины бирегеҙ, тигән. Браво! Ҡыйыулыҡ кәрәк.

Башҡорт старшина ы Ҡолой Балтас — үҙенең ятраҡаны, Польшала, хәтерләй Бибиковтың ҡылысын. Ундай ҡылысты, исеме нисек, Юлимы? Эйе. Аҙналин да алды. Уны ы тиҫкәре. Ундайы менән осрашырға яҙма ын...

Янышев балалары — Бәхтиәр, Солтанморат,[2] Мерясов балалары. Исмәғил Тасимов.[3]

Ышанып була бит.

Тик бына аңламай ул. Полковник Ступишиндың хатына ҡарағанда, ышанып була алырлыҡ Ҡара-Табын олоҫо старшина ы Ҡыҙрас тархан Муллаҡаев — иң

[1]*Эстафета (фр.) — ашығыс хәбәрҙе сапҡындар аша йөрөтөү.*
[2]*Солтанморат Янышев — Нуғай  әм Себер даруғалары мишәрҙәренең баш старшина ы.*
[3]*Исмәғил Тасимов — Көнгөр өйәҙе Ҡуян ауылы башҡорто, мәғдәнсе (рудопромышленник).*

ышанныслы башҡорт. Фетнәселәр яғында, имеш. Үҙе генә түгел, туғандары Бикташ, Ильяс. Был ни ғиллә?

Ә Брант:

– Бынан уҡ йыя бар ындар. Бер диндә, тегеләр менән. Ундай кеше е бар. – Ул секунд-майор Осип Тәвкилевты саҡыртты.

Кар унын ата ын – генерал-майорҙы белә. Билдәле армай. Шул яҡта йөрөгән, яуҙар баҫтырып. Ерҙәр күп. Уңышлы!

– Фетнә ҡупҡанын белә ең бит.

– Беләм.

– Үҙеңдә лә булыр.

Унын ата ынан ҡалған Терсә[1] олоҫондағы имение ы – татар крепостнойҙары, элек-электән түҙмәй бола күтәрәләр, яндыралар. Ата ы Ҡотломөхәммәт – Алексей Тәвкилев күпме көс алды. Ләкин енде. Еңеү генә түгел, яу баҫтырғас, башҡорт яғында яңы биләмәләр – Ҡыр-Йылан олоҫонан, Ҡар-Масан ыуы, Ҡарамалы, Сөн буйынан, Ҡаршын олоҫонан, Ҡаңғы (Күсем ауылы).

Үҙе лә йыйҙы. Ҡаръяуҙы, Иҫке Ҡатай, Баҙы, Шаран йылғалары буйында.

Был ерҙәрен аҡлар өсөн тире енән сығырға әҙер Осип.

Оҫталыҡ бар. Үҙенеке генә түгел. Ҡатыны Дарья Алексеевнаның да – уны ы ла ҡатын башы менән Батырша яуында уҡ әле ире өйҙә юҡта күр этте. Батыршаның Яңы Ҡыҙыл Яр ауылында ҡасып яткан бер шәкертен – Мөсәлимде юлында тотоп, уға килтергәс, Өфө приказына рапорт яҙып ебәргәйне. Армай була белгән.

Бының өсөн дә, уңынан ҡаты булыуы өсөн дә маҡтанып бөтә алмай Осип.

Ә үҙе?..

Брант белә уны, ышана.

– инең мосолманса исемең нисек?

– Йософ.

– Бына шул. Атайың да кәрәк сағында Ҡотломөхәммәт икәнен онотманы. ин дә хәҙер башҡорттар, мишәрҙәр, татарҙар ара ында йөрөп, бер диндә бит тип, үҙ кеше булып йый. Стәрлетамаҡҡа илт...

...Уны ы китте.

31/Х. Ошонда Брант та, Кар ҙа Петербургҡа рапорт яҙып ебәрәләр.

Кар ҙа юлын дауам итте. Бында ул бер аҙ башҡорт, мишәр йыйҙы, арала элекке тархандар бар. Старшина Йософ Нәҙеров, сотник өйөш.

Бында ул Рейнсдорптан да, воевода Борисовтан да рапорттар алды. Шиккә төштө, ул өмөт иткән башҡорттарҙы Кинйә Арыҫланов тигән бер старшина бик боларта, күпләп-күпләп яуыз Пугачевҡа килтертә, имеш. Ул Польшала ла үҙ ҡулы аҫтындағы татарына, башҡортона ышанмай ине. Бына хәҙер үҙе күрә. Ошонда уҡ уға бирелгән 500 ҡалмыҡ ҡасты. Киттеләр ҙә барҙылар, иҙмәй ҙә ҡалды. Аҡташ ауылында секунд-майор Астафьев команда ындағы татарҙар китте...

Тиҫкәре халыҡ шул... Теге тиҫкәре «Юли» ҡат-ҡат иҫкә төшә. Ай, осрашырға яҙма ын: Хоҙай аҡлар, Юлай менән осрашмаҫ, ә улы Салауат менән саҡ-саҡ осрашмай ҡалыр. Әле ул шуны бел әме, аташыуҙан арына алмаҫ. Был хаҡта ул Хәрби коллегия президенты Захар Чернышевҡа[2] рапорт ебәрҙе.

31/Х. Мин тотор инем дә... башҡорттар, ти, хәҙер.

Ырымбурға табан.

Әлегә үҙенең янында барғандарҙы ҡарарға, аҡларға... Бер мең атлы...

---

[1] *Терсә – христиан тигән үҙ.*

[2] *Чернышев Захар Григорьевич – граф, генерал-фельдмаршал, Дәүләт Хәрби коллегия ы президенты.*

Былары ла китерме... Юҡ, быларын ул хəҙергə арттараҡ тота, аҡларға пехота ҡуя. Алға ебəрергə күҙəтеүселəр, шымсылар таба алмай. Ылау бирмəйҙəр.

Ҡайҙа ул шымсы? Үҙенекелəр ара ында, тегенəн килеп, батшаға ҡаршы бармағыҙ, тиҙəр икəн.

Ул белмəй, ə бит ул барасаҡ Йөҙəй ауылы старшина Шəриф Юнысов менəн губернатор үҙе ҡаланан ебəргəн. Ебəреп тора ине.

Ул үҙе Яңы Мəскəү юлынан бара. Рейнсдорп ебəргəн кəңəш. Алда Мостафа, Йөҙəй, Бикҡол ауылдары бар. Шунан үтеп, Ҡарғалы тигəн Сəит биҫтə енə инергə. Яуыз Пугачты улдан, ə Чернышев уңдан... амарға... Урал яҡтарына ҡасырмаҫҡа.

2

Йүрүҙəн буйҙарына ла көҙ килде.

Был яҡтағы урмандарҙы ышаныслы төйəк итеп йəйлəгəн ҡоштар йылы яҡҡа китə башланы. Туп-туп йыйналышып, үҙҙəренең ҡанына еңешкəн теүəл тəртип менəн алыҫ-алыҫтарға ҡарай осалар. Ер өҫтөнəн ҡарап ҡалған кешелəргə уларҙың туптары оҡланғыс.

Ҡоштар ҙа ер өҫтөн күҙəтеп оса. Ə ер өҫтөндəге хəрəкəт бик шаулы, үтə ығы-зығылы. Ҡоштар ғəжəплəнəлер əле: унда бер төрлө тəртип тə, ғəҙеллек тə юҡ ымаҡ тойолалыр. Йəшəүен кешелəр ҙə ҡоштар кеүек үк төркөм-төркөм булып йəшəй, бергəлəп йөрөй, хатта аттарға атланып ҡайҙарғалыр елə. Берəүҙəре ҡояшҡа табан ашыға, икенселəре ҡош юлынан ыңғайлай, йылы яҡҡа табан да китə, тиреҫкə ҡарай ҙа йүнəлə. Ниңə бер генə тəртип юҡ? Ниңə төрлөсə? Быны ына ҡоштар төшөнə алмай. Мыжғып торған ҡырмыҫҡа илəүе ни, кешелəр ни... Был əҙəми зат тигəндəрҙə ис тəртип юҡ, ахмаҡтар икəн улар, тип уйлайҙарҙыр əле, моғайын.

Йүрүҙəн туғайында ғына түгел, бөтə тирə-йүн йəйлəүҙəрҙə, бөтə уяларҙа, Урал тауының бөтə армыттарында кешелəрҙең тормошо шулай ҡайнашыу хəленə еткəйне шул. Кемдəрҙер ҡоштар ыңғайына – Стəрле ыуына, Ырымбур яҡтарына юллана, кемдəрҙер, ҡош юлына ҡаршы йөҙ тотоп, йылы яҡтарҙан шул уҡ Ырымбурға табан ашҡына.

ауалағы ҡоштар быларҙы ла күрə, ер йөҙөндəге хикмəтте аңламай.

Уларса, был көҙ əллə ниндəйерəк... Улар йыл иҫəптəрен белмəйҙəр. Юғи ə, был хəйер еҙ 1773 милади йыл йəки ижри 1190 сəнə, тиерҙəр ине. Ə ҡоштар быны ҡуй йылы тип кенə белə.

....Ə бында, Йүрүҙəн илендə, бейек тауҙар яғалап, ҡалын урмандар аралап, үҙенең шоңҡар ҡоштар шикелле айлам тиҫтерҙəре менəн, ҡая-таштар яңғырата-яңғырата йырлап, Юлай улы Салауат[1] елə. Йыр урғыла, йыр тарала:

*Уралым, Уралым...*

Улар юлына ҡаршы төшкəн шикелле, икенсе əҙəмдəр килə. Ə былары – алдаттар, түрəлəр... Өфө воевода ы Борисов ебəргəн.

Губернатор Рейнсдорп, генерал Кар ашыҡтыра торғандыр. Батшабикə хəҙрəттəре шулай бойора.

Түрəлəрҙең ни эш ҡырып йөрөүен белə Салауат.

Бына ошо йəйлəүҙəргə ир-егеттəрҙе сиреү итеп туплап, Бүгəсəү батшаға – Емельян Пугачевҡа ҡаршы ебəрергə йыялар. Губернатор əмере ҡаты. Бер килеп ике йөҙ яугир талап иттелəр, улары йыйылмаған – 25 сентябрҙə Себер юлы старшиналарына биш йөҙ кеше тупларға ҡушылды. Ə 4 октябрҙə бер менде! Биш көндəн уң биш мең сиреүле кеше йыйырға талап иткəн курьерҙар килде.

– Губернаторҙың нəфсе е үҫкəндəн-үҫə, – тинелəр, аптырап.

[1]*Салауат Юлаев – Себер даруға ы Шайтан-Көҙəй олоҫо Шағанай ауылынан, б. к. бригадиры.*

– Ай- ай, шулай уҡ көслөмө икән ни был Петр батша? – тип сама алдылар азаматтар.

Был саҡлы ын йыйырға, көсөнән кил ә,Ҡолой Балтас ҡына...

Эйе... Салауат үҙенең егеттәре менән йәйләүҙең бер яғынан ҡайтып керҙе. Икенсе яғынан – Ҡолой килеп баҫты.

Ҡара-Табын олоҫоноң йортауайы, үҙен Себер даруға ының баш старшина ы тип иҫәпләп йөрөгән Ҡолой Балтас губернаторҙың йомошон атҡарыр өсөн шарттарға етешеп, утҡа баҫҡан бесәй кеүек йөрөй. Уҫал ҡарашлы, теремек хәрәкәтле, күптәрҙе ағайта, хатта ҡурҡыуға ала торған Ҡолой ҙа Юлай старшинаны яҡшы белә. Яҡын дуҫы булма а ла, ҡорҙашы, ап-аруҡ таныш, күптәнге бармаңы. Бергәләп батша әрме е сафында Польша походына барҙылар, быйыл ғына шунан бергәләп ҡайттылар. Конфедераттар боларған ине – шуларҙы тынысландырып, шау-шыуын баҫып йөрөргә тура килде. Дөрөҫ, пандарҙан бигерәк, поляк ярлыларына, малорустарға, белорустарға ҡаршы ебәрергә тырыштылар уларҙы. Шундағы батырлыҡ өсөн тип Суворов генералдың рапорты нигеҙендә Россия ғәскәрҙәренең баш командалаусы ы генерал-аншеф Бибиков Ҡолой Балтасҡа ла, Юлай Аҙналыға[1] ла миҙал бирҙе. Миҙалы – миҙал әле... Бының өҫтөнә тәүҙә Ҡолойға, уңыраҡ Юлайға ла ҡылыс бүләк итте. Ике ененң дә ҡылысы йөҙөнә Ҡөрьән хәрефтәре менән үҙҙәренең исемдәре атап яҙылған. Ҡындары ҡиммәтле таштар менән биҙәүле, аптарында арыҫлан баштары. Затлы ҡылыс! Ҡолойҙоң уны янынан ҡалдырғаны юҡ. Ә Юлай... Миҙалын кәрәк ваҡытында таҡ а ла, ҡылысты биленә элгәне юҡ тиерлек. «Шунымы?..» – тип ғәрләнде ул. Поляктарҙы, малорустарҙы өшкөтөп йөрөгән өсөн бирелгән бит. Нишләй ең, генерал Кар ҡушҡас, Бибиков ебәргәс йөрөнөләр. Ләкин ундағы «батырлыҡ» та, алынған бүләк тә Юлай Аҙналының йөрәген әсендерә генә ине. Тик Ҡолой Балтас шул ҡылысты әле лә ҡалдырмаған. Күкрәк киреп, айырым бер олпатлыҡ менән килеп төштө. Уның янында бер сержант, алты алдат та бар ине.

Юлайға бер йөҙ яугир әҙерләргә ҡушылды.

Тәүҙә башҡорт йола ы менән бер-ике тәгәс ҡымыҙ эсеп алдылар. Шул арала:

– Тағы яуға китәбеҙме ни? – тип орай алды Юлай, эштең серенә төшөнмәгәндәй.

– Эйе. Яйыҡ казактарын аҡылға ултыртырға кәрәк.

– Бәй, үҙеңдеке үҙеңдекеләргә ҡаршымы?

– Унда бер яуыз ҡара батша булып килгән.

– Кем?

– Петр Салис[2] тип үҙенә үҙе ләҡәп алған.

Юлай үҙ ишеткәнен әйткәндәй булды...

– Бәй, шуны әйтәләрме ни, Ҡалғай ҡалаға еткән, тип.

– Эйе, Ырымбурға еткән, ти. Бәғзе бер ҡәлғәләрҙе итәғәт иттергән, имеш. Бына шуны туҙҙырып ҡайтырға кәрәк.

– Эштәр яманға китә түгелме уң?

– ә-әй... Яйыҡ казактары ара ында үҙ-ара низағ башланған да инде ул. Беҙ барыуға... әммә... фарман булғас, барырға кәрәк.

Юлай уға күҙ йүгертеп, баш ҡаҡты.

– Эйе, эйе... Гөбөрнатор хәҙрәттәре фарман биргәс, барырбыҙ инде, иншалла.

Ҡорҙашы уға ышанмай түгел, әлбиттә.

– ин тоғро йортауай. инә ышанам.

---

[1] *Юлай Аҙналин – Себер даруға ы Шайтан-Көҙәй олоҫо старшина ы, б. к. полковнигы.*

[2] *Петр Салис – Петр Өсөнсө.*

– Эйе, йорт-ил, именлек хаҡына.

– Шул ҡасҡы казак ҡалдығы... Ил маҙа ын ебәрҙе. Бағый башы менән ил ханы булырға ынтыла, имеш. Булдың, ти. Тот ҡапсығың!

Аш беште, табын әҙерләнеләр. имеҙ ҡалъялар оғоноп ултырғанда Ҡолой йортауай тағы ла нығыраҡ асыла төштө.

– Ул Йәмәлкәне әйтәм, яйыҡтар ара ында фетнә күтәреүе етмәгән, беҙҙең аҫабаларҙы ла болартырға итә.

Был хаҡта Юлай уны-быны ишеткәйне инде, тик белмәмешкә алышты.

– Аҫабалар үҙ юлын табыр әле, иншалла.

– Яман юлға төшөүселәр бар шул, Юлай ҡорҙаш...

– Кемдәр?

– Кинйә абыҙ. Яман ары старшина, Ҡасҡын, Юлдаш... Шул ләғингә барып баш орғандар.

– Булмаҫтыр.

– Ян ыҙҙар улар! Яуыз йәндең көнө ҡыҫҡа икәнен белмәйҙәрме? Бергә сәсрәрҙәр әле. Беҙҙең мөхтәрәмә батшабыҙ Катерина Сания дәжжәлдәргә[1] юл ҡуймаҫ! Ана бит Петербурҙан Кар янаралды ебәргән.

Был тиклемен хужа белмәй ине әле.

– Теге Карҙымы?

– Эйе. Шул, беҙҙең тәүге хужа. Әле ҙур ғәскәр менән килә.

– Китсе! – тип ғәжәп енде Юлай.

– Ул ғына түгел, беҙҙең янарал-аншеф та килә.

– Бәй, Бибикаумы?

– Эйе, ул – иң дәү хужа.

– Улар кил ә инде... булдырыр. – Юлай ағайҙы. Ул Аҙналы улы. Күкрәгендә эйәрле ат ята, тиҙәр. Шулай ҙа уның да йөрәге бар. Быға саҡлы ул төҫөндә ис ни белгертмәй өйләшә ал а ла, был ике генералдың башҡорт ерҙәренә юл тотоуы хаҡында ишеткәс, ҡалтыранып ҡуйҙы, ҡаштары иҙелер- иҙелмәҫ кенә бул а ла тартылды, йөҙө сытайҙы. Ишетмә әң – ишет. ис тә хәйерлегә түгел. Ил-көнгә ябырылалар. Тас Польшалағы кеүек ҡыланырҙар. Ә был ҡорҙашы шуны көтә. Бүләккә тағы бер ҡылыс алырға итәме...

Балтас быны тойҙо.

– ин, нимә, шөрләнеңме әллә?

– Ә ... Юҡ, ҡорҙаш. Уларға күнеккән баш. Беҙгә ҡаршы хәҙер поляктарҙы алып кил әләр ҙә ғәжәп түгел. Тик бына шундай ҙур әрме булғанда, беҙҙең ни хәжәтебеҙ бар икән, тим.

– Бәй, бәй... Йорт-илгә яу килгәндә, башҡорт азаматы тирмә саңырағына төкөрөп ятырмы?

– Уны ы шулай.

Юлайҙың иҙенеүенсә, юлдарҙың тағы осрашыуы бар. Ҡылысҡа-ҡылыс килергә тура килеүе ихтимал. Ана теге, Бибиковтың үҙе биргән ҡылысы менән. Мәгәр был ҡорҙашы – әлегә табындашы, үҙ тирмә ендә ҡунаҡ итеп ултырған Ҡолой шундай уҡ ҡылысты тотоп ҡаршы сығыр, әле үк дуҫ булған булып та, йылан рәүешенә инеп тә уны үҙ яғына әүрәтергә тырыша. Юлай унан күҙ яҙҙырманы, тирмәнән сығып йөрөгән арала иғтибар итте. Ана бит, Салауатты ла арбарға тырыша түгелме?.. Юлайҙың ҡолағына сәйер үҙҙәр салынып ҡалды.

– Минең балдыҙ ҙа килергә иткәйне әле, – тине Ҡолой, йәш егеттең йөрәген

---

[1] *Дәжжәл – антихрист (автор үҙлегенән).*

елкендереп. Үҙе хәйләкәр, үҙем үттеме тигәндәй, Салауаттың дәртле күҙҙәренә текләне, көс ынашҡан ымаҡ, уның яурынына ҡулын алды. Батыр исеме таралған уртаса буйлы, йыуантыҡ, баҙыҡ кәүҙәле азамат таш бағана ымаҡ ҡымшанманы ла. Ни бары Ҡолойға табан күҙҙәренән ут сәсте, өтөп ала яҙҙы.

– Кемде әйтә ең, Ҡолой йортауай? Зөләйхамы?

Шул, әлбиттә. Балдыҙ тигәс тә... Ҡолой старшинаның Мырҙалар олоҫондағы бер сотскийҙа ирҙә йәшәгән ҡәйнегәсенең ҡыҙы ул. Ләкин бик яҡын күргән, үҙ балаларынан артыҡ анаған ылыуы. Зөләйханың былтырҙан бирле Салауат менән осрашҡылап йөрөүен, ике енең дә бер-бере е өсөн йән өҙөүҙәрен белә ине оло еҙнә. Бел ә ни... Салауаттың ике ҡатыны барлығын да белмәй түгел бит. Ниңә оло башы менән шулай өйләнеп торған була.

– Эйе, – ти. – Күрер инең, тим.

– Ә, уны күргән бар ҙа ул, – тине Салауат ғәм еҙ генә. – Ә ин, еҙнә кеше, димләргә итә еңме?

Ҡолой унан бындай тарпайлыҡты көтмәгәйне.

– иңә бирәм, тимәнем. Кәрәк ә, үҙең яусы ебәрер ең.

– Эйе, кәрәк ти әм, үҙем дә алып ҡайтырмын. Уның өсөн яңы тирмә ҡорорға ғына урын табылыр.

– Ай-ай, ин...

Шул тиҫкәрегә балдыҙын өсөнсө бисәлеккә бирә буламы, тилертеп-милертеп, йөрәгенә үҙ алып ҡуйғас та еткән, йәнә е. Ә Салауаттың унан башҡа ла дәрте ташып тора. Былтырҙан бирле егет үҙе лә Зөләйха яғына юл төшөрә. Мырҙалар йәйләүендәге йылҡылар ҙа ниңәлер был яҡҡа ҡайырылып ҡына тора.

Йөрәктәр ашҡынғас, үҙҙәре яҫҡымай булырҙармы?..

***

Ҡолой Балтас ҙур әмерҙе Юлайға тапшырҙы ла, иңә ышанабыҙ, тип башҡа иләүҙәргә ашыҡты.

– Стәрлетамаҡҡа алып барыр ың. Унда воевода ярҙамсы ы Богданов булыр. Ҡара, ынатма!

– Фарманды атҡарырбыҙ, – тип ҡалды Шайтан-Көҙәй старшина ы. Сиреү туплап, батша хеҙмәтенә барыу беренсе тапҡыр ғына түгел, ил сигенә, ер ситенә еткәнде инде, быны ы ғына... Юлай кәрәген белер, үҙ юлын күрер. Улы Салауат ҡына бер килке шөб әләнеп ҡалды.

–Ҡолой юлынан китә еңме? – тип ораны ул шомланып.

– Әле китмәйем. Ә бер йөҙ кеше тупларға кәрәк.

– Тупла... Үҙем алып китермен. Дүрт яғым ҡибла.

Юлай теҙгенде ҡулдан ысҡындырырға күнекмәгән.

– Атаң алдында баш-баштаҡ булма!

...Яугирҙар йыйыла башланы. Ни өсөн саҡырғандарын, донъяның ниндәй ғилләә менән буталғанын аңлай улар. Ике үҙҙең бере ендә – ҡатын батша, ир батша. Катерина ы тамам маҙаға тейеп бөткән, унан нарази[1] булдылар. Теге е ире лә түгел, имеш. Казак, тиҙәр, Йәмәлкә икән. Бул ын! Ирек кенә бир ен, көн күр әт - ен. Янаралдарҙы, деуәрәндәрҙе[2] тый ын, Демидов, Теүирдишәү ишеләрҙең юлын яп ын. Яугирҙарға тап шуны ы кәрәк. Ундай батша артынан ташҡын ыуға, янған утҡа инергә әҙерҙәр. Йәндәре фиҙа! Тик был хаҡта асыҡтан-асыҡ әйтә генә алмайҙар. үҙҙәр быш-быш ҡына әйтелә, әммә бөтә ғәләмгә тарала.

Тәүге ишеткәндә шулайыраҡ ине. Ике-өс көн үтте, аҙна-ун көн... Ә Ҡолой Бал-

---

[1] *Нарази – риза түгел, риза ыҙ.*
[2] *Дворяндар (халыҡса).*

тас артынса уҡ асыҡтан-асыҡ өйләй башланылар. әр йәйләүҙә, әр ауылда. Баҡти әң, Көрөк заводында ла, Өç-Ҡатауҙа ла, Ҡатау Иванда ла шул уҡ хәбәр таралған икән. Крәçтиәндәр ҙә, татарҙар ҙа шулай өйләй:

— Емельян, Йәмәлкә... Пугачев, Бүгәсәү...

Мариҙар, сыуаштар ҙа ҡолаҡтарын ҡарпайтҡан.

— Патька килә, батша килә!

«Атайым аңламай булмаç», — тип уйланы Салауат.

3

Ҡолойҙың эҙе ыуынып та өлгөрмәне — иртәгә енә үк Аҙналыға илсе булып ике сапҡын килде. Алыçтан килгәндәр, йонсоғандар — аттарының ҡор аҡтарынан аҡ күбектәр ағып тора. Ғәжәп түгел, сапҡын юлы ауыр, йомошо яуаплы була. Был икәүҙең төç-баштарынан, тын алыштарынан да Юлай шундай оло бурыс атҡарырға килгәндәрен аңлап алды. Ҡараштары сая, хәрәкәттәре йылғыр — ни етте егет-елкенсәк түгелдәр. Күҙгә салынмаç, ҡулға ҡапмаç ҡасҡындарға оҡшап торалар.

Ҡалай итеп әле Юлайҙың сая шәйләктәре күҙенә салынмай үткәндәр. Ә, юҡ... күргәндәр уларҙы. Туҡтатмай ғына, арттан күҙәтеп килгәндәр.

— Аманат хат юлыҡтырырға килдек, — тип танытты өлкәнерәге. аҡал-мыйығы ла етеүле ине уның.

Юлай күҙҙәрен айырмай аман тын ҡалды. «Ҡолой ымаҡ, алдаттар эйәртеп килмәгән».

— Хуп, тапшыр аманатыңды.

— Аттан төшөргә рөхсәт булмаçмы?

«Сапҡын әҙәбен белә» — Юлай эйәк ҡаҡты.

— Кемдән?

— Кинйә полковниктан.

«Полковниктан, тинеме? Бушҡа ғүмер үткәрмәй икән».

— Үҙе ебәрҙеме?

— Улы...

« eләү ене лә янында икән». Был ҡасҡындар шуның таныштарылыр. Юғи ә Кинйә абыҙ ундайҙар менән араҙашлыҡ тотмай ине. Хәйер... Сапҡын, тейешле тәртибен аҡлап, «ышбу хат»ты баш өçтөнә ҡуйҙы ла тәғзим менән «ышбу кем әнә е»нә тапшырҙы. Эйе. Кинйә дуçынан. Төргән ҡағыҙы өçтөнә старшиналыҡ мө өрө баçылған. Мө им хат икәне күренеп тора, старшиналар аша ҡулданҡулға ебәрә торғаны түгелдер. Бындайҙарҙың үҙ юлдары ышаныслы.

— ин... ҡасҡынмы? — тип текләне Юлай.

Сапҡын йәбер енмәне.

— Эйе... Айыт ҡасҡын инем. Теүирдишәү баяры ерҙәребеҙҙән ҡыуалап сығарҙы. Хәҙер үҙем ҡыуаларға булдым.

Юлайҙың күҙҙәрендә яҡты нурҙар балҡыны.

— Ишеткәнем бар инең хаҡта. Ул заводчик беҙҙең дә бик күп ерҙәрҙе алды.

Юлай сапҡындарға ҡымыҙ бирергә, аш әҙерләргә ҡушты.

Был хат Кинйә Арыçлановтың, Бүгәсәү батшаға барып бағынғас, уның ҡушыуы буйынса аҡмар ҡәлғә ендә үк яҙған тәүге хатнамә е ине. Үҙ хәбәренә, император ғәли йәнәптәре исеменән, тип башҡорт халҡына мөрәжәғәт ителгән манифест та ҡушып алынған. Яу сәғәте уҡҡанын мәғлүм ҡылған изге өндәү, изге оран!

Хәҙер үк бер уйға килергә кәрәк. Үҙ йортонда, үҙенекеләр менән... Тик Салауаты арғы йәйләүҙәргә киткән. Ә өлкәнерәге, Ибра имы... ә-әй, булдыҡ ыҙ, аман да Ибраҡай ғына шул әле.

Салауатын көткән кеүек, Юлай урамға сыҡты. Тиреçтән ыжғыр ел күтәрелгән. алҡын ғына икән. Яратҡан ҡатыны — Аҙнабикә е күҙ яҙҙырмаған, күрә ең, елән

килтереп бирҙе.

– Кейә ал. Ел уғыр...

– Ә... Ярай...

Быны ы ғына түгел ихатала, аласыҡ эсендә ҡашмау тәңкәләре сың-сың килә. Ҡатын-ҡыҙҙар мәж килеп йөрөй. Салауатының Әминә е менән Гөлбәзире лә күҙгә салынып ҡалды, икәү-ара быш-быш килеүҙәре ҡолаҡҡа салынды.

– Тағы китергәме ни? – тип ораша алды Аҙнабикә.

« иҙенәләр бит, донъя хәленә айышалар».

– Ихтимал.

– Ҡай ы ы иңә ҡул?

«Ҡолой менән ҡасҡын сапҡынды сағыштырамы?»

– Уңы – уң, улы – ул. Ике тараф та бер юлы өҫтөндә.

– Сапҡындар Кинйә абыҙҙан килгәндәр түгелме, тим.

Юлай сәйер енеп алды.

– Кем шулай тине?

– Килендәр әйтәсе, нимә яҙған?

– Улмы?..

Юлай был хаҡта ис кемгә, хатта Аҙнабикә енә лә белдермәй торорға булды. Тик барыбер иҙенә уны ы, үҙ өлөшөнә төшкән йүн-хәстәрлеген күрә лә башлаған, юҡҡа ғына ап ын-әжен[1] ҡужғынмай. Ир-егеттәр ҡайҙалыр китергә йыйына, бисә-сәсә лә тәғәм-ризыҡ, юл яҫағы әҙерләргә тейеш. Бере е тур ыҡтар барлай, икенсе е ыҫларға ҡорот баҫа, кемдәрелер урҙаҡ ҡура, ҡай ылары ҡаймаҡ яҙып, май тасҡай. Ҡорот та, ит тә етерлек бул ын, май ҙа күп кәрәк, абаларҙағы ҡымыҙ ҙа бешеүле тор он. Былары инде – күнегелгән ғәҙәт, ә бына ошондай ваҡыттарҙа, хикмәт бит, сер андыҡтары ла асыла. Элек бер-бере енә йомоҡ ҡына йөрөгәндәр яҡын әшнәгә, хатта серҙәшкә әйләнә.

Яу ҡуба ын ғына түгел, елдең ҡай ы яҡҡа иҫә ен дә тойомлап алғайнылар инде.

Юлай алдан киҫәтеп ҡуй а-ҡуйма а ла, яңы сапҡындар ашап-эсеп ултырған арала уҡ үҙҙәренең Бүгәсәү батша әрме ендә күргәндәрен өйләп, аҡ ҡағыҙға яҙылғанға ҡарағанда ун тапҡыр күберәгән аңыштырып өлгөргәйнеләр инде. Уларҙан ишеткәне ауыҙҙан ауыҙға күсте, йәйләүҙән йәйләүгә таралды. Шуларҙы ишеткән төҫлө, Салауат ҡайтып инде.

– Яугирҙарың әҙерме? – тип ҡаршы алды уны ата ы.

Салауат тура яуап бирмәне.

– Юл юҫығы ҡайҙалыр. Шуны белмәй яугир әҙер булмай.

– Юҫыҡ... – Юлай улына ҡарап бер ауыҡ үҙ еҙ торҙо ла өҙә алып әйтте. – Мин әйткәне юҫыҡ булыр. Көткән юл. Азаматтарың кил ен!

– Килгәне килер.

– ин нимә?! Мин воеводаға кит әм, ин атайыңа ҡаршы ҡорал күтәрер еңме? Юҡ, улым, юлыбыҙ бер булыр беҙҙең. Ә ҡайҙа?.. Мин белермен. Башыма тай типмәгән әле.

Салауат аңланы. Ата ы уға яңы хатты ондо. Хат алыҫтан, ҡуйында йәшереп йөрөтөп таушалып бөткән. Уға күҙ алыу менән үк бөтә ен аңлап, Салауат ата ына ҡарап йылмайҙы. Бөтөнләй эш икенсе икән шул.

Бына бит ниҙәр яҙылған унда... «Мин бөтә Рәсәйҙең берҙән-бер батша ы, Петр Өсөнсө» тигән. Эйе, ил күңеленә төшкәнен яҙған... «Ирекҡә ыу аған, яҡты күңелле халайыҡтарыма иғлан итәм...» Күптән көттөләр, күптән... «Минең элекке ҡатыным Катерина, үҙенең өйәрҙәре менән бер үҙҙә булып, минең батшалығымды тартып алғас, яҡшы кешеләрҙең ярҙамы арҡа ында ҡасып ҡотолғайным. Инде аҡ

[1] *Ап ын-әжен – оло-кесе килендәштәр (автор үҙлегенән).*

күңелле, батыр йөрәкле вә ирек өйөүсе Яйыҡ казактарының булышлығы ярҙамында, йәбер-золомда иҙелгән Рәсәй халҡының миңә ышаныуы арҡа ында, мин үҙемдең батшалығымды ҡайтарып ала башланым».

«Ишеттек, ишеттек» тип ҡысҡырғы ы килде Салауаттың.

«Оҙаҡ та үтмәҫ, бөтә Рәсәйҙе үҙ ҡанаттарым аҫтына алып, бабайҙарҙан ҡалған тәхетемә ултырып, ғәзиз халҡыма үҙҙәре теләгәнсә донъя ҡорорға, тыныс әм рәхәт ғүмер итергә бойорормон».

– Мәрхәбә! – тип ысҡындырҙы Салауат, шатланып.

– Сеү... Шашма...

Салауат уҡыуҙан туҡталды. Уйланып тора. Ата ы унан күҙ айырмай күҙәтә. Улы яр ый, улы уйлана, улы дәрт туплай кеүек... әм тағы уҡый...

Бына бит, бына ни тип яҙылған: «Ышанығыҙ, күктә Алла, ерҙә мин үҙем, еҙҙең бадиша ығыҙ... Миңә йәнегеҙ-тәнегеҙ менән, ғүмерегеҙҙе йәлләмәй хеҙмәт итегеҙ». Беҙ әҙер, бөтә ил күтәрелер!..

Уны ы шулай...

«Бер Хоҙайҙан нимә теләй егеҙ...»

Эйе, эйе... Ер- ыуға хужа булыу. Ирек... Салауат бармаҡ менән төртөп-төртөп уҡыны.

– Бына бит, атай, беҙҙең теләгәндәр... Шуны ғүмер буйы көттө халыҡ. Хоҙайҙан ығынып ораны.

Ата ы етдилеген юғалтманы.

– Уҡы...

«Минең ғәскәрҙәремә ҡаршы ебәрелгән алдаттар миңә ҡушыл ын! Ҡалаларҙы, крепостарҙы аҡлаусы коменданттар миңә баш ал ын. Түрәләр халыҡҡа йәбер-золом итеүҙән туҡтал ын». Уны ын инде барабыҙ ҙа баш алдыртабыҙ, тыңлатабыҙ!

Салауат күҙҙәрен йомдо. Бер ҡыҫҡа ғына мәлгә тынып торҙо ул, шунда уҡ ырғып торҙо.

– Ҡонҡас сәсән көткән сәғәт уҡты.

Әсә е әйтмешләй, Ябраил фәрештәнең амин тигән мәле. Салауат элек тә яуызлыҡҡа, ғәҙел еҙлеккә ҡаршы алышҡа ашҡына ине. Уны ы... буш яр ыу ғына икән. Ата ы ла, Кинйә абыҙ ҙа, башҡа аҡ аҡалдар ҙа был хаҡта уйлашалар, серләшәләр ине. Көс-хәл юҡ, ти ине улар. Элекке яуҙарҙа халыҡ күп ҡырылған, ҡатын-ҡыҙҙарын, бала-сағаларын алып китеп, сит-ят ерҙәргә атып ебәргәндәр. Улай еңеп булмаған шул. Салауат был хаҡта үҙенсә уйлай торғайны: «Халыҡ аҙ – шуға көс аҙ. Ә ниңә уң урыҫ крәҫтиәндәре, заводтыҡылар яҡлашмай? Улар ҙа яфа сигеүҙең сигенә еткән бит, ниңә түҙеп бил бөгәләр? Бергә берегерлек түгел, тиҙәр. Йәнә е, дин башҡа, йола башҡа. Ә барыбер бит, – тип уйлай ине Салауат. – Беҙ доға ҡылабыҙ, Хоҙайға табынабыҙ, улар уң мөйөшкә ҡарап суҡынған саҡта шулай тип ялбармаймы икән ни?» Ул сағында яуап ҡына таба алмай ине ул. Үҙе лә аңламаны. Бына хәҙер... Бергәләп, дәррәү! Ваҡыт етте. Аттар дағалы, эйәр-өпсөндәр әҙер, ҡорал-яраҡтар ҡаралған, бөтә енән бигерәк егеттәр йөрәге яр ып тора.

– Манаписты егеттәргә уҡыйым, – ти Салауат. – Бөтә е лә ҡуҙғалыр.

Юлай улына текләп ҡараны.

– Ашыҡма... Быны ын йәшер, кәрәк сағы булыр. Воевода ҡушҡан ергә әҙерлән... Аңланыңмы?

Салауат аңланы. Воевода ҡушҡан яҡҡа барма аң, ғауға алырҙар, яңынан яугирҙар йыйыуҙы талап итерҙәр. Йорт-илдән сыҡҡанда унынса бул ын. Ҡушылған түрәгә барып күренергә. Унан юлдар сата ыҙ булмай...

Юлай улының сама ыҙ яр ыу икәнен белә ине, бына әле генә саҡ аҡылға килгәнен күрҙе.

– Воевода йомошона йә ин китә ең, йә мин китәм.

– Мин барам, атай!

– Эйе, башҡаға ышанып булмай. Беребеҙ унда, беребеҙ бында. Йорт-илде ныҡ аҡларға кәрәк.

Юлай ҡалта ындағы старшина мө өрөн алып, төргән сепрәген үтте. Бына, улы күр ен. Унда «Шайтан-Көҙәй әм Ҡыр-Көҙәй ырыуҙарының старшина ы» тип яҙылған. Губернатор Путятин биргән ошо мө өрҙө Юлай старшина үҙ йәненән ҡәҙерлерәк күреп аҡлай.

– Был – беҙҙең аҫабалыҡ. Уны аҡлау – беҙҙең изге бурыс.

Мө өрҙә йәйә-уҡ үрәте төшөрөлгәйне.

– Бына шул ҡорал менән аҡларбыҙ, – тине улы.

– Башҡа ҡулдарға ҡалдырып булмай уны.

Юлай башҡа ын әйтмәне. Ә бит ул, иңә таяу булыр өсөн ҡалам, улай-былай эш сыҡма а, йәш кеше, яңылышҡан, тип әйтермен, мин ҡарт бүре әле, ҡотҡарыу сара ын күрермен, тип әйтергә уйлағайны. үҙен үҙ күңелендә ҡалдырҙы. Юлдың уңмауы ла бар, уны ла онотorға ярамай шул. Дөрөҫ, улы унда үҙе белер, еңел-елпегә орона алмаҫ. Юҡҡа баш ҡыйыуҙа фәтеүә юғын белә, әлбиттә.

Ләкин бындай ағайыуҙары Салауат өсөн бөтөнләй кәрәкмәй ҙә ине.

– Кинйә абыҙҙың сапҡындары ҡайҙа? – тип ораны ул.

– Ял итергә ҡуштым. Аласыҡта әйтерҙәр.

Аласыҡтан уны сапҡындар янына алып барҙылар.

Бер ауыҡ күҙгә-күҙ ҡарашып торҙолар.

– еҙҙе кем оҙатты? – тип ораны Салауат.

– еләү ен мулла.

– Үҙе нимә тип әйтте?

– Беҙ юлыҡтырған хатнамәне ватмай-боҙмай икәү-өсәү ит ендәр ҙә ары осор ондар, тине еләү ен мулла. Бере ен – Юнай Баҙарғолона,[1] бере ен – Ҡушай Юламанына.[2]

– Тағы нимә тине?

– Боронғо юлдан Торатау ҡарай кил ендәр, күҙ яҙҙырмабыҙ, тип әйтергә ҡушты. Табын тирә ендә ҡаршыларбыҙ.

Сапҡындар ҡайтыр юлға китте. Ә ауылдағы иллек тамам бөттө, Ир-егеттәр үҙҙәренсә, бисә-сәсә үҙҙәренсә йә әт-йә әт әҙерләнә башланы, ис кем алағайымға йөрөмәй.

Салауат сапҡындарҙы оҙатып ҡайтҡанда Әминә е менән Гөлбәзирҙең ҡапҡа төбөндә уны ҡаршылаған кеүек әүетемсә генә өйләшеп тороуҙарын күрҙе. Көндәштәрҙең ҡылығы билдәле инде, бындай татыу саҡтары ирәк була. Тик ара алыҫ – үҙҙәре ишетелмәй. Ә бит улар, ысынлап та, әллә ниңә бер булғанса ғына серләшәләр ине.

– Эй, ап ынҡай, – тип Гөлбәзир үҙенең көндәшенә ыйынды. – Күңелем яманды иҙенә. Яу ҡуба торғандыр.

Әминәгә лә еңел түгел.

– И, әженкәй, яуҙар була торған инде.

– Салауатыбыҙ ҙа китер микән, ап ынҡай?..

– Ул хат башынан инде.

– Эй, ни хәл итербеҙ икән?

– Оҙатырбыҙ. Батырҙың бисәләре лә батыр булырға тейеш тә ба а.

---

*[1]Баҙарғол Юнаев – Исәт провинция ы Бәкәтин олоҫо старшина ы, Екатерина II Уложенная комиссия ында башҡорт депутаты, Пугачевтың фельдмаршалы.*

*[2]Юламан Ҡушаев – Исәт провинция ы Ҡара-Табын олоҫо старшина ы, б. к. генералы.*

– Эй, ап ынҡайым... Бөгөн-иртәгә генә юл сыҡма ындар ине, исма ам.

– Әйҙә... Етеп килә. Өйгә инә алайыҡ.

«Былар ҙа донъя хәлдәрен иҙәләр», – тип төшөндө улар үҙенә Салауат.

Дауыл ҡубыр алдынан андуғастар айрауҙан туҡтай. абантурғайҙар ышыҡ урынға ҡуна, яу ҡуҙғалырын иҙгәс, көндәштәр ҙә килешә, ап ын-әжендәр дуҫлаша икән. Әминә менән Гөлбәзирҙең серләшеп тороуы бөтә йәйләүҙәрҙең бергә тупланыуы, барлыҡ йорт-илдең уяныуы ымаҡ тойолдо.

Уларҙың татыулығына күңеле йомшарҙы Салауаттың, иркәләп, өйөп алырға ярай, тип ул ҡамсы ын сөйгә элеп ҡуйҙы. Бер яғынан килеп Гөлбәзир ҡолаҡсынын алды, икенсе яғынан Әминә еләнен систе. Ике ен ике яҡтан яурындарын тотоп, күкрәгенә ҡыҫты. Иреп китеп, уға ыйындылар. Эй, ми ырбанлы бит уларҙың Салауаты. Бөгөнгә юл сыҡмай икән әле, ғүмеркәйе оҙон бул ын. Йөҙгә ет ен. Ә ул, ми ырбанлы ир, күҙҙәрен көҙөрәйтеп әле бере енә, әле икенсе енә ҡарап йылмайҙы.

Түргә табан үтеү менән үк Әминә ике өҫтөнә ҡабартып мендәр алды.

– Ә ин, Гөлбәзир, ҡана әле, ҡурайымды алып бир.

Бәхетле мәл килгәнен аңлап торалар. ирәк кенә бул а ла шундай шәфҡәтле саҡтар булғылай. Бәхет! Салауат мендәр өҫтөнә аяҡ салыштырып ултырыуға, Гөлбәзир унын ҡулына ҡурайын килтереп бирҙе, үҙе ирҙең эргә енә сүгәләп, итәккә яткан бәпес ымаҡ, тер әге менән ботона таянды. Ә икенсе яҡтан – Әминә. Ап ын – уң яҡтан, әжен ул яҡтан ҡырын төшөп ятты. Атай кешенең еңелсә генә тамаҡ ҡырыуы булды – шунда уҡ ике бала, ике яҡтан туп кеүек тәгәрләп килеп, аяҡ осона ултырышты.

әр кем үҙ урынын белә. Күнегелгән хәл.

Салауат-ата сабыйҙарҙың баштарынан ыйпаны, шул ыңғай әсәләренең арҡаларынан да өйөп алды. Тағы тамаҡ ҡырҙы ул. Был юлы ҡурай тарта башлауға ине. Яҡын моң, таныш тауыш ишетелде. Тәүҙә сылтырап аҡкан ымаҡ булды, унан көсәйҙе, нығыраҡ көсәйҙе, башҡа ыуҙар ҡушылып аҡкан ымаҡ тойолдо. Көйө лә, йыры ла уларҙыҡы. Гөлбәзир әкрен генә йырлап ҡушылды:

*Заманалар булған элгәре,*
*Булған илдең батыр улдары,*
*Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр,*
*Бөтә ғәләм белгән уларҙы*[1]*.*

Гөлбәзир туҡтаны, иренә ирек бирергә кәрәк. Ә ҡурай моңо ағылды. Уға Әминә тауышы ҡушылды:

*Ғүмер буйы йөрөп яуҙарҙа,*
*Йыйған улар ан ыҙ дуҫтарҙы,*
*Еңгән улар бик күп батырҙарҙы,*
*Ҡырған улар ан ыҙ дошманды.*

Йыр ҙа өҙөлдө, ҡурай ҙа туҡтаны. Тағы ла уйна әле, тимәйҙәр – сама беләләр. Быны ы өсөн дә рәхмәт. Ниндәй бәхет бирҙе. Йөҙ йәшә ен, мең... Ә ул үҙе ҡурайын ҡуйып, йырын дауам итте. Сеү... Былар элек юҡ ине, яңынан сығарҙымы икән ни...

*Рухым күтәрелде минең дә,*
*Эйәрләнем мин дә атымды,*
*Дошман сафын тар-мар итергә*
*Изге яуға уктай атылдым.*

[1]*Салауат Юлаевтың үҙ йырынан.*

Туҡталды Салауат. Эх, тағы йырла ын, яуҙа ни булғанын әйт ен ине. Юҡ, йыр оҙаҡҡа уҙылмай шул. Бәхет ҙур булмай, ләззәт сама ыҙ түгел. Ожмах та бик бәләкәй икән, тиҙәр.

Салауат ҡуҙғалды. Ап ын Әминә – бер яҡтан, әжен Гөлбәзир икенсе яҡтан аяҡҡа баҫты. Тышта тамаҡ ҡырған тауыш ишеткәйнеләр шул. Атай менән әсәй киләләр.

***

Алдан әйтелгәнсә, иртә ен егет-азаматтар Юлай йортауай йорто ҡаршы ына йыйыла башланы. Шайтан-көҙәйҙәр дәррәү тупланды. Гәрсә күрше йәйләүҙәрҙән көттөрөүселәр ҙә юҡ түгел.

Төрлө ө бар. Ҡай ылары яр ып килә, Урал шоңҡарҙары тиер ең. Ә ҡай ы берҙәре бик үлпән, әллә ни атлығып тормай. Ниҙер етмәй, нимәгәлер күңелдәре ятмай. Улары, яуға ҡаршы яу итеп ебәрәләр икән, тип уйлайҙар, имеш. Юлай атаман үҙе Польша тигән илгә барып, яу баҫтырып, миҙал тағып, бүләк алып ҡайтҡайны, хәҙер бына беҙҙе Яйыҡ казактарына ҡаршы ебәрәләр, улының да янаралдар ҡаршы ында булғы ы киләлер, күрә ең, тигән үҙҙәр ҙә ишетелгеләй икән. Ышанмай ҙа булмай. Шулай ҙа Юлай йортауай үҙенән сыҡмаҫка күнеккәндәр, Салауат азаматҡа ла бик үк ышанмай түгелдәр.

Ундай икеле-микеле уйлағандарына йә Салауат үҙе барып йән өрҙө, йә ҡуҙғатып алып килергә тип ҡошсо о Ба ауҙы ебәрҙе.

Киләләр. Ә Мырҙалар йәйләүенән аман күренмәйҙәр.

– Балтастың бажа ы бармаҫҡа булдымы? – тип орай Салауат ата ынан.

– Ул сотниктан булыр ҙа...

Сотник, шул Ҡолой бажа ы тигәне – Зөләйханың ата ы...

Берәүҙәр походҡа китә, икенселәре оҙата. Бөтә йорт-ил бер ҙур күс булып ҡубынған тиер ең.

Ҡорға тупланғас, ир-егеттең буй- ыны турая, дәрт үҫә, күҙ ҡараштары уйнай башлай.

Салауат та, Юлай ҙа килеүселәрҙе баштан-аяҡ күҙәтә. Атланған аттары баҫҡан урында бейеп тора, ҡорал, кәрәк-яраҡтар ҡараулы. Етәккә алынғандарының эйәрҙәренә аҙыҡ-түлек тултырылған тоҡтар, оло алынған ҡуржындар артылған, ҡымыҙ тулы тур ыҡтар эйәр ҡаштарына бәйләнгән, алмаш суҡмар тағылған. Ҡай ы бер аттарға еңел-елпе тирмәләр төрөп йөкмәлгән. Биш-алты кешегә берәүҙән бул а ла бар. Ун ыҙ юлға сыҡмайҙар.

Бөтә кәрәк-ярағы алынған. Бөтә ен үҙҙәре белә, өлкәндәр ҙә әҙерләшкән. Кейем эсенән күкрәктәренә тәңкәләр тегергә лә өлгөргәндәр – осло уҡтан, үткер өңгөнән аҡлай, йәнә е. Юлы ҡыҫҡа бул ын тип, кеҫәләренә тегәр еп апламдары ла алғандар. Онота булалармы?..

әр кем үҙ улына, үҙ ейәненә изге кәңәшен итә, күңелендәге өгөтөн әйтә. Яугирҙарға хуш аяғы бирелә...

Салауаттың әсә е лә шунда. Ул, ике киленен ике яҡтан етәкләгән төҫлө, бергәләп килде. Ул да улына хуш аяғы әйтте, изге бата бирҙе, шунан... Ике килене Әминә менән Гөлбәзир алғараҡ баҫты.

Әминәнең күңеле тулды.

– ағынып арыға абышырбыҙ инде.

Гөлбәзир бигерәк ныҡ ыйынды.

– Имен-аман йөрө бер үк.

Салауат тынысландырҙы.

– Мин дә ағынырмын.

Шул арала Гөлбәзир уға нығыраҡ ыйынды.

– Ҡай ыбыҙҙы күберәк ағыныр ың? – тип бышылданы. Үҙе хаҡында йылы-

раҡ  үҙ ишетке е килә, әлбиттә.

— Икегеҙҙе лә, икегеҙҙе...

Икәү генәләрме?.. Әминә көндәшенең  үҙҙәренә иғтибар итмәне, Гөлбәзир башҡаса  үҙ ҡушырға өлгөрмәне. Салауат башын күтәреп, уң яҡҡа күҙ  ирпене. Унда тояҡ тауыштары ишетелде, а ылдап айғыр кешнәп ебәрҙе. Айғыр өҫтөндә Салауаттың бүтәне, иң ныҡ  ағындырта торғаны килә ине — Зөләйха! Эргә ендә алты азамат та бар.

Әминә менән Гөлбәзир бер-бере енә  ыйынып ҡалды. Салауат яңы яугирҙар ҡаршы ына сыҡты. Бына бит килгән. Күңеле тартҡас, йөрәге ҡушҡас, Ҡолой еҙнә енән башҡа ла килгән.

Бер кем дә ят ынманы, ғәйеп итмәне. Ир-ҡыҙ, ҡыҙ-батыр тигән данлы аты бар. Ата ы эшен атҡарып йөрөй. Килер ҙә китер.

Эйе, килеп етте лә,  ис кемдән тартынып тормайынса, Салауат ҡаршы ына килеп баҫты. Бисәләренә иҫәнме- аумы тигәне лә юҡ — күҙ  ирпеп бер ҡараш ҡына ташланы. Уларға шул да еткән, йәнә е. Хәйер, унан ни мәрхәмәт көтә ең. Бисәсәсәгә генә түгел, ир-егеттәргә лә көн күр әтмәй, йөҙ яҡтыртмай, тигән даны барсы. Ә бына, хәйер еҙ, Салауаттан күҙ ҙә алмай.

Эйәр өҫтөнән төшмәй генә:

— Бына  иңә беҙҙең иләүҙән яугирҙар алып килдем, Салауат батыр. Хуп күреп, ҡабул ит, — тине, ҡамсы  абы менән егеттәр яғына күр әтеп.

Салауат был, исма ам, үҙе ҡыҙ-батыр тигән кеүек  оҡланып ҡарап торҙо.

— Эйе, егет, ы ы, ы ы...

— Күп түгел, ти еңме? — Зөләйха уҫал итеп ҡарап ҡуйҙы. — Алты егет — алты бағана.  әр бере е ун батырға торош. Аҙ, ти әң, етенсегә үҙем барам. Ала ыңмы?

Кешеләр көлөшөп-геүләшеп алды, Әминә менән Гөлбәзир, быны килештермәй, быш-быш килде. Барам, тисе... Бергәләп йөрөр ине, буғай. Тартына ла белмәй, хәйер еҙ.

— Үҙем барам, ти еңме? — Салауат шаян ҡараш ташланы. «Етенсегә түгел, өсөнсөгә бул аң — бер хәл»,— тип уйлай ине ул.

— Ниңә, миңә ҡаршы сығыр батырың күпме?..

— Юҡ, юҡ... Зөләйха...  ин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы...

Салауат әйтә  алды, Зөләйха рәхәт итеп йылмайҙы. Ә шуны ишетеп торған Гөлбәзир, «Уф!» тип йөрәген тотоп, Әминәгә  ыйынды.

Зөләйхаға рәхәт шул. Шундай итеп йырлай бит уның хаҡында, күпме тапҡыр йырланы. Эх, әле лә дауам ит ен ине. «Күҙҙәрендә балҡый Зө рә йондоҙо», — тип. Юҡ! Ошо о ла етте. Ғашиҡ йөрәктәр бер  үҙҙән  әммә ен аңларға  әләтле.

Етеү генәме, баштан ашты, Гөлбәзирҙе саҡ аяҡтан йыҡманы.

— Йөрәгем ярыла яҙҙы, — тине ул көс-хәл менән.

Ләкин эргә ендәгеләр ап-асыҡ ишеттеләр уны.

...Хушлашыу ваҡыты еткәйне. Юлай йортауайҙың ым биреп, бер өндәшеүе менән, яугирҙар бер буй булып сафҡа теҙелделәр. Тимер күк атын атлатып, Салауат ата ы ҡаршы ына килеп баҫты.

— Йә, Салауат батыр, — тине Юлай яугирҙар алдында. —  ин — ҡор башы. Бына уның таныҡлыҡ тайра ы, — ул үҙенең муйынындағы бер миҙалды  алып, уға таҡты.  уғыштан алып ҡайтҡайны, ә икенсе е — старшина ғәмәләте үҙендә ҡалды.

Салауатҡа ҡа арманлыҡ тайра ы!..

Уны күреп, уҙамандар «а » итте, яугирҙарҙың күҙҙәре утлы ҡуҙ булып балҡыны. Улар әле ҡарап-күреп тә өлгөрмәне. Юлай билендәге затлы ҡылысын, әллә ниҙә бер тағып сыға торғанын, сисеп алып, ике ҡуллап  аҡлап-кәҙерләп кенә тотоп улына  уҙҙы.

— Бына ошоно ҡорманыңа[1] бәйлә. Бөлдөргә өн ҡулыңдан ысҡындырма. Кәрәк

саҡта ғәзиз ғүмереңде  аҡла ын!

Ата ына бирелгән батырлыҡ бүләге... Уны алыу нисектер уңай ыҙ төҫлө ине.

– Атай!.. Үҙеңә...

– Минең үҙемдә атайым биргәне ҡала...

Бөтә ҡарттары, бөтә йәштәре, берсә  оҡланып, берсә ғорурланып, күҙҙәрен уның ҡулындағы ҡылысҡа төбәне, «Эйе, эйе, Аҙналы уҙаман биргәйне шул», – тип иҫкә төшөрҙө бер аҡ аҡал.

– Олатайыңа тейешле бурысымды  иңә түләйем, – тип дауам итте Юлай. – Ал, Салауат батыр!

Улым, тип кенә әйтмәне. Бәҫе кәм булыр, тип уйланы. Батыр, тине.

Салауат ике ҡуллап тотоп алды. Ҡылысты ҡынынан  урып алып, яланғас йөҙөнән Ҡөрьән хәрефтәре менән алтынға йүгертеп «Юлай Аҙналинға» тигән урынынан ант иткән шикелле үбеп алыр ине, хатта, тик нисектер тартынды, сирҡанды... Ата ы аңлап тора: генерал бүләге булыуы оҡшамай. Уның йөҙөнә кемдәрҙеңдер яғылған ҡаны тотҡан төҫлө. Ата ы уның ауыр уйҙарын  үҙ еҙ үк аңланы, әлбиттә.

– Ҡоралда ғәйеп юҡ. Ул кем ҡулында, кемгә ҡаршы күтәрә ең. Сауабы ла, гонаы ла – шунда.

Эйе, эйе... Салауат быны ла аңлай. Улъя итеп алынған бөтә ҡорал-яраҡ дошман тарафтың үҙенә ҡаршы йүнәлтелә. Туптарҙың көбәктәрен дә кирегә бороп аталар,  үҙ йәҙрәләре дошмандың үҙенә табан оса.

Салауат, эйелеп, ҡылысты үпте.

– Рәхмәт, атай, бушҡа  елтәмәм уны.

Бөтә ҡараштар ҡылысҡа төбәлде. Затлы ҡылыс! Еҙ  абында –гәййәр арыҫлан башының  үрәте. Ҡыны зиннәтле таштар менән биҙәүле.  оҡланмаҫлыҡ түгел. Бер ваҡыт, бәләкәй сағында, Ырымбурҙан ҡайтышлай, Кинйә абыҙҙың улы  еләү ен кескәй Салауатҡа олата ы Арыҫлан батырҙан ҡиммәтле ҡомартҡы булып ҡалған ҡорал, кәрәк-яраҡтарын күр әткәйне. Ян- аҙағы, ҡамыш  аплы  өңгө ө, ҡылысы... Былар миңә була, тине  еләү ен. Салауаттың күҙе ҡыҙҙы, әлбиттә. Дуҫы быны  иҙеп, үҫкәс  инеке лә булыр, Ғәли батырҙың Зөлфәкәре кеүеген бирерҙәр, тигәйне. Бына бит, булды. Әкиәттәрҙә маҡтап телгә алынған Зөлфәкәрҙән кәмме? Уның ише генәме?!

... уңғы  үҙҙәр әйтелде.  уңғы хуш аяғы бирелде.

Бөтә халыҡ изге батала ҡалды.

– Батыр булығыҙ, уландар!

Юлай, Салауат атланған тимер күк айғырҙың теҙгенен тотоп, улын ҡосаҡланы.

– Унда юл юҫығын үҙең күрер ең, – тине шул саҡ. –  еҙҙән күҙ яҙҙырмабыҙ.

– Ишектән инеп, төнлөктән сыҡмам, атай.

Салауат ата ын, Йүрүҙән яғын, тау армыттарын байҡап алды. Әйләнеп, ғәзиз әсә енә баш эйҙе. Унда – уның Әминә е менән Гөлбәзире, шунда –  өйөклө балалар. Ә ситтәрәк, батырҙан күҙҙәрен алмай,  ылыу Зөләйха баҫып тора. Ҡул болғаны, ниҙер әйтте, тик уның  үҙҙәрен баҫып, Салауаттың көслө тауышы яңғыраны:

– Әйҙәгеҙ, азаматтар!

Егеттәре уның башлағанын да көтмәйенсә, электән күнегелгәнсә, йырлап та ебәрҙе:

*Минең тыуған ҡырҙарым,*
*Балдай татлы  ыуҙарым,*
*Яландарым, урманым,*
*Күккә ашҡан Уралым,*

---

*[1]Ҡорман – йәйә  ауыты (автор  үҙлегенән).*

*еҙҙе өйә йөрәгем.*

Тауҙар, үҙәндәр яңғыраны, шаулап, яңғырап оҙатып ҡалды. Ә яугирҙарҙың ата-әсәләре тын да алмай тыңлап торҙо. Атай-әсәй, бары ы ла йырлаған йырҙы тағы йырларға, тағы ишетергә насип була, тиҙәр боронғолар.

4

Пугачев станы.

Аҙыҡ-түлек әҙерләп, ылауҙар ҡайтты.

Бер отряд килгәнен хәбәр иттеләр. Кинйә ҡаршы барып алды. Ҡалмыҡтар икән.

Унан башҡорттар отряды. Кинйә, Зарубин орашып алды. Юлдаш Ҡотлин[1] ҡәрҙәш:

– Мәләүездең был яғы тыныс, – тине.

Юл өсөн яуаплы кешеләр бар. айылмыш ҡушылдығын Имәнғол[2] ҡарай. Бикҡолда ла. Юшатыр буйын – Моталлап. Бабай тауы – Юлдаш, Мәләүез...

Унда тәртип. Билет менән йөрөйҙәр. Урлашыу, маҙа ебәреү юҡ. Ғәскәргә аҙыҡ, аттарға фураж. Көньяҡ тәртипле. Ә артабан?

Быларҙы Кинйә ҡуйған. Зарубин белә. Заводтар Воскресенский, Вознесенский.

– Ай-да, башҡорт атаманы!

Ә артабан? Стәрлетамаҡта башҡорттарҙы йыялар.

Быны ул еләү ен Ҡуштауҙан ебәргән хәбәрҙән белә ине.

– Шунан, нимә тигән?

– әйет айран, Көҫәпҡол Азатбаев алай туплаған, ти. Бөтә ен дә Карға ҡушырға әҙерләйҙәр.

Был хаҡта хәбәр бар ине. Бүтән отрядтар ҙа.

Атамандар йыйылды. Кинйә килде, унда Зарубин, Шоғаев, Овчинников, Чумаков, Яков ҡарт Почиталин, Иҙеркәй ултыра, Ҡарғалынан Муса Алиев.

Кар килә. Чернышев отряды амарҙан үткән. Туп-тура килә. Ә көнсығыштан Деколонг килә, тиҙәр. Озерный дистанция ы яҡынараҡ. Кинйә үҙе булып ҡайтты. Унда бригадир Корф.

Эйе. Губернатор тик ятмай. Уның кешеләре Ырымбурҙа ла, Өфөлә лә эш ҡылалар. Улар ғынамы? Сенат бар, Екатерина бар. Полк-полк ғәскәр ебәреү генә түгел, бындағы халыҡты ла туплау сара ын күрергә тырышалар.

Мәндей Төпәйев, Ҡолой Балтас кеүектәр тәүҙә үк башланы. Хәҙер элекке яуҙа ҡатнашҡандарҙың ғәйебен кисергән булып, хеҙмәткә ылыҡтырырға тырышалар.

– Беҙ ҙә тик ятмайбыҙ, – тине Овчинников.

Бөгөн дә килделәр.

Бар-барын, әммә Пугачев ҡәнәғәт түгел.

– Аҙ. Ҡай ы яҡ тиҙерәк өлгөрә, шул еңә! Беҙ аҡрын. Ана, Стәрлетамаҡта! Кинзей, өйлә.

Кинйә элек килгән хәбәрҙе, бөгөн Юлдаштан ишеткәнде өйләне. Унда ҡоҙа ы Ораҡов та, кейәүе Михаил Ораҡов та шунда. Ҡазандан Осип Тәвкилев, Өфөнән Богданов килгән. Ә был юлды бикләр. Себер юлынан, Силәбе яғынан беҙгә килеүселәрҙең юлын быуа.

Шоғаев:

– Хлопушаға ярҙам ебәрергә кәрәк.

Кәрәк. Кинйә улын да ебәргәйне.

– Кинйин сотник ҡаршы алыр. Стәрлетамаҡ алдынан.

---

[1]*Юлдаш Ҡотлин – Тәлтем-Юрматы олоҫо старшина ы, яуҙа Пугачев яғында ҡатнаша.*

[2]*Имәнғол Ҡотлин – Ҡазан даруға ы Бүләр олоҫо старшина ы, б. к.*

Пугачев:

– Ул полковник. Указ ебәр. Ә көс тағы.

Эйе, аҙ. Сөнки сәме ташты. Ниңә беҙҙең халыҡты беҙгә дошман итәләр, артта көс туплайҙар. Юҡ, быға ис юл ҡуйырға ярамай. Ялмауыҙ йортауайҙарҙы ла яуызлыҡтан төңөлдөрөргә кәрәк, тип уйланы ул.

– Юл асыу ғына аҙ, – тине Кинйә. – Улар ҙа йөрөр ул юлдан. Губернатор беҙҙән ғәскәр йыя. Унын ҡулына уғырға кәрәк.

– Ой-ой, ин.

– Эйе... Бүтән йыймаҫлыҡ бул ын. Әҙер йыйғанды үҙебеҙгә ал аҡ, тәүбәгә килер.

– Нисек? – тине Зарубин.

– Ана шул, улар йыйған әҙерҙе үҙебеҙҙең яҡҡа алып сығырға кәрәк.

– Әҙерҙе? Бик шәп! – тине Пугачев.

– Эйе, унан бик тиҙ төңөлөрҙәр, йыймаҫтар.

Пугачевтың күҙҙәре уйнаны.

– Буламы?

– Була.

Шоғаев:

– Унда бөгөн килгән атаманды ебәрергә кәрәк... Ҡасҡын амаров... Юл менән дә, хәл менән дә таныш бит.

– Юҡ, уға бүтән эш бар.

Кинйәнең уйын Зарубин иҙҙе.

– инең улың ҡайҙа әле?

– Ҡуштау янында ҡалған. Уға ярҙамға Абдрахманов барыр. Улым менән бергә булырҙар. Башҡорт алайҙары менән өйләшерҙәр.

Унда старшина Көҫәпҡолда 500 кеше, әйетовта 500. Әле улар Ораҡов үҙен тыңлай, Богданов яҡлы. Шуларҙы хәҙергә тыйып тотоп, был яҡҡа алып сығырға.

– Башта Стәрле ен, унан быларын.

Күҙ алдына килтереп була ине.

– Дөрөҫ, – тине Зарубин.

– Ул урын беҙҙең бындағынан кәм түгел.

Эйе, ҙур бурыс, ҙур эш.

Ләкин эш унда ғына түгел. Зарубиндың, Пугачевтың уйлауынса, ҡулды арыраҡ уҙырға, Өфөгә етергә кәрәк.

– Воеводаның үҙен ҡамап алырға, юлдарын бикләргә кәрәк.

Зарубин Өфөнөң ҡайҙа булғанын, тау башында икәнен самалай. Тирә-яғы йылға.

– Шунда бикләргә уны. Надворный советник Борисовтың яға ынан алғанда, тыны сыҡмаҫ ине.

Атамандарҙың уйҙары алыҫҡа китте. Пугачевтың дәрте. Әммә нисек? Стәрлелә көс. Кем барыр?

Кинйә:

– Дим буйлап төшөргә кәрәк. Унда юл тыныс.

– Кем?

– Бына Ҡасҡын амаров.

Кинйәнең уйын хупланылар.

Икенсе көндө үк Зарубин менән Кинйә Ҡасҡын амаровты батша ҡаршы ына саҡырып алып килделәр.

***

Дим буйлап үткән юлдарҙы ла бикләп алырға кәрәк ине. Өфө менән Ырымбур ара ындағы бәйләнеш шунан.

Усмандың улы Әмир, ҡаланан сыҡҡас та, шул хаҡта әйткәйне. Кемдәрҙер китә, кемдәрҙер килә.

Ҡасҡын янына шул Әмирҙең үҙен бирҙеләр.

– Йә, мырҙам!.. Өфөгә уҡтырабыҙмы, юҡмы? – тип үҙенән  орай.

– Барабыҙ!

Был яҡтар менән таныш. Стәрлебашҡа етәрәк, Тәтер  ыуы буйында олата ы ҡорған Арыҫлан ауылы бар. Үҙенең утары ла шунда. Әмир ауылы, тиҙәр. Туғандары Биккинә, Сәит, Биксәнтәй эйәрҙе. Ә бер ваҡыт олата ы Өфө янында йәшәгән. Ул ерҙәр ҙә таныш.

Күндерәк буйынан Йәлембәт, Табылды ауылдарынан килделәр.

Сиреү нигеҙҙә шунда ҡалды. Был юл тыныс, хәрби төркөмдәр юҡ. Шулай ҙа аҡ булыу кәрәк. Бигерәк тә губернатор сапҡындары йөрөмәйме, шымсылары юҡмы? әр ауылда туҡтап, батша указын уҡыйҙар, староста  айлаталар. Әмир Усманов улар ҡулына батша исеменән указ бирә.

Дим буйына сыҡтылар. Унда тамъяндар ауылы. Түбәнерәк Ҡасҡын ауылы үҙенеке.

– Билет ыҙ[1] бер кемде лә йөрөтмәгеҙ, – ти.

Үҙҙәре лә билет бирергә тейеш.

Уларҙың төркөмө бәләкәй ине. Кешеләр ҡушылды. Ҙур алай хәҙер...

5

әләүек буйы. Тау, урман. Юл буйы.  еләү ен шунда. Хлопуша ҡайтыр. Уны ҡапыл баҫырҙар. Богданов унық юлын ябырға бойорған. Иҫкәртергә кәрәк. Ярҙам итергә. Үҙен дә  иҙеп ҡалдылар. Эҙләйҙәр уны. Таба алмайҙар.

Хлопуша Әүжәндән ҡайтып бара ине. Отряд ҙур. 500 кеше. Завод кешеләре, башҡорттар. Туптары бар.

Хлопуша ике туп ҡалдыра. Тупсы бирҙе. Урыҫ. Йәҙрәләр.

– Бергә булығыҙ. Миндә бына бер поп, бер мулла бар. Ана, күрҙеңме! – Ул башҡортҡа әйтә.

Шул арала Ҡотлогилде килеп етте, көс ҙур.

Ҡотлогилде  еләү енде бик тиҙ тапты.  еләү енгә, Ҡуштау тирә ендә торорға, тигәйне ата ы. Уны Ҡолой Балтас, Мәндей эҙләтә. Үҙенең кейәүе подпоручик Михаилды ебәргәндәр. Эҙләйҙәр. Таба алмайҙар... Етмә ә Көҫәпҡол отряды,  айран.

Был тирәлә айырылырға ярамай.

Ҡаршыға осраған эшселәр:

– Тәйрүк тамағында отряд бар, – тинеләр.

еләү ен белә. Көҫәпҡол Азатбаев кешеләре. Ә  әләүек буйында  айран  әйет алайы.

Былар Богоявленскийҙан Петр батшаға сыҡҡандар. Грязнов ебәргән туптары бар. Бере е тупсы. Дары, йәҙрә лә эләктергәндәр. Унлап мылтыҡ. Бик ҡурҡмайҙар. Ләкин Хлопуша менән  еләү ен үҙҙәренең эше мө им икәнен аңланылар.

– Бында ҡалығыҙ, – тине Хлопуша.

– Беҙ губернаторҙы ҡыйратырға барабыҙ.

– Ә полковник Кинйин ни әйтер бында. Бәлки, нығыраҡ алыш хәҙергә. Полковник әмерен үтәгеҙ.

[1]*Билет – юлда йөрөү өсөн яугирҙар канцелярия ынан бирелгән рөхсәт ҡағыҙы.*

Бергәләп үтеп, Шәке тау артына сыҡтылар. Улар артында ғәскәр йөрөгәне күренде. Ораҡов йөрөй, тиҙәр ине. еләү ен белмәне, ҡай ы ылыр: Михаил-Ташбулат кейәүеме, Иван-Ҡотлоғмөхәммәтме,[1] улар аҙ түгел.

Бында завод кешеләре менән еләү ен төркөмөн ҡалдырып, Хлопуша Ырымбурға китте. Мин йөрөргә өйрәнгән, тине.

— Туптар алып, ҙур шайка менән килеп етермен, — тине. — Ярҙам булыр.

— Ниндәй шайка?

— а-ай, шулай күнеккәнмен.

Туптарҙы тау ике енә күтәреп, урынлаштырҙылар. Үҙҙәре тау итәгендә. Алда әләүек. Яҡ-яҡҡа аҡ ҡуйылды.

Тыныс, әммә абай бул. Юлға йәшерен боҫторма ҡуйылды, шәйләктәр ебәрелде. Юлай йәйләүенән отряд килеүен көттөләр. Айыт ҡасҡындың кешеләре был ерҙәрҙе белә.

Әбеш, Төмтөк, Тайсура, Мырым. Унын кешеләре бара. Торатау янына. Туғарсалған күлгә, Ҡанаҡай ауылына.

Алда Торатау. Юрматылар уны таштирмә кеүек күрәләр. еләү ен өсөн дә ярай. Бер-ике күҙәтеүсе ебәрҙе. Көнсығыш яҡтан менә торған юлы бар. Хан юлы, тиҙәр. Йәнә е, ишәккә атланып менгән.

Тимер юлы. Воскресендан ыу юлы туҡталғанда суйын ташыу — Стәрле пристаненә. Торатау тәңгәленә.

әләүек әкәмәт уңай. Борон-борон замандарҙа юрматыларҙың сиреүҙәре ошонда тупланған, яуҙа йонсоғас, шунда ҡайтып әл[2] алғандар, яңынан тупланғандар. Шуның өсөн әлләнеү урынын әләүек йылға тип атағандар. еләү ен әйтә алмай, ата ы ни өсөн унын ҡусты ына әләүек исеме ҡушҡандыр. Уны ы инде... бына әле килеүҙәре Петр Салисҡа көс туплау бул ын, ә көс Ашҡаҙар буйында, губернатор кешеләре тырнағында. Шуны тартып алыу.

Бындағы хәл, ысынлап та, етди икән.

Ваҡ-ваҡ сиреүҙәр үтә. Уларҙы Стәрлетамаҡҡа оҙаталар. Ике төркөмдө еләү ен үҙенә ҡушты. Юлдан дозорҙар йөрөй.

Улар иләүҙәрҙән йыйылып киләсәк яугирҙар төркөмөн көтөп ҡаршылайҙар. Себер юлынан килеүселәрҙе лә күрмәй булмаҫтыр... Унан кем килер? Юлай старшинамы, бүтән берәй еме?

еләү енең кешеләре лә уларҙы көтә, тик башҡа төркөмдәрҙе үҙенә ҡушҡыла а ла, былары ҡалаға үт ен, өйләшеп, үҙ беркетеп ҡалыу ғына кәрәк.

еләү ен ебәргән кешеләр ҡалала сиреү күп икәнен хәбәр итә. Төрлө яҡтан киләләр. Үҙе ышанырлыҡ кеше генә тоймай еләү ен.

Старшина Ҡотлоғужа Сафарғолов[3] Әрметтә. еләү енгә ярҙам, аҙыҡ, көс йыя.

Ә бындағылар.

еләү ен хаттар яҙып айран әйеткә лә, Көҫәпҡол Азатбайға ла кеше ебәрҙе. Халыҡтан айырылмағыҙ, бөтә башҡорт халҡы кеүек, еҙ ҙә Петр батшаға бағынығыҙ, уны итәғәт итеп, табиғ булма ағыҙ, уңын уйлағыҙ, батшанан шәфҡәт булмаҫ, еҙгә мәрхәмәт ҡылмаҫ, ти.

Старшиналарҙың үҙҙәрен күргәндәре юҡ әле. Берәй ен осраталар ҙа:

— Яумы, илме? — тип орайҙар.

— Ил, — тиҙәр. Ҡорал аҫҡан бул алар ҙа, йоғонмайҙар, үҙҙәре үк иҙәләр.

---

*[1]Ҡотлоғмөхәммәт Ораҡов (Иван Ураков) — кенәз, капитан, Кинйәнең ҡоҙа ы.*

*[2] әл — авторҙың уйы буйынса, «хәл» тигән үҙҙең боронғо әйтелеше, бында «ял итеп алғандар» тигән мәғәнә ендә.*

*[3]Ҡотлоғужа Сафарғолов — Нуғай даруға ы Телтем-Юрматы олоҫо старшина ы, баш күтәреүсе.*

Ә Көҫәпҡол менән әйет аңлаймы, юҡмы – хәбәрләшеү кәрәкмәй ҙә әле, көн айын тиерлек шундай ағайтыу хаты ғына бул ын.

Бында килеп урынлашыуы хаҡында еләү ен хәбәр итергә өлгөрмәне, ата ы үҙе хәл белешер өсөн бер нисә кеше менән ҡошсо о сотник Алпарҙы ебәрҙе. Эш бик етди, аң бул, атҡарып сыҡ, тигән. Етди, әлбиттә, ҡайтып өйләрҙәр. Алпарға еләү ен янында булырға ҡушылған.

Көн айын тиерлек хат ебәреп торған полковник еләү енден Шәкетау итәгенә урынлашҡанын кемдәрҙер иҙә башланылар, яҡыныраҡ киләләр, шунда берәй ен осратып өйләшәләр, батша хаҡында орашалар. Үҙҙәренең дә уйҙары үҙгәрә башланы.

еләү ен уйға ҡалды.

«Ошолар аша, теләгәндәрен алып китергәме? Юҡ, былары аҙ». Стәрлетамаҡтағыларын алып китергә ебәрелгән бит ул.

Бер команда менән Ораҡов китте. Ә бер аҙҙан сапҡын хәбәр килтерҙе.

– Осраттыңмы команданы?

– Ситләп үттем.

– Көҙәйҙәр килде, – тип өҫтәне сапҡын.

– Көҙәйҙәр?

– Эйе, Ҡомған күл буйында.

– Кем?

– Салауат.

Бына хәҙер эш.

6

Асессор Павел Богданов элек тә күберәк ваҡытын Стәрлетамаҡта уҙғара ине. Воевода Алексей Никифорович Борисов үҙенең иптәше тип аталған ярҙамсы ы – коллежский асессор. Миңә – Өфө, иңә – Стәрлетамаҡ тигән кеүек.

Бында ла эш күп. Былай әллә ни ҙур түгел. Бәләкәй ҡалала пристань, шулай ҙа хәҙер күп эштәр бында башҡарыла. Элек ошо яҡтағылар бөтә эш менән Табынға, Өфөгә йөрөйҙәр ине. Хәҙер низағтар, ялыуҙар, хөкөм... Барып йөрөү кәрәкмәй. Үҙ армайы, үҙ ярғусы ы[1] бар. Бастругы[2] ла. Бына тағы бар ҙур эш.

Бәләкәс – әле алты ғына йыл элек ҡалаға күптәр пристань тиҙәр ине.

Ҡаршыла аҡ сиркәү. Тирә ендә кибеттар, бесән, ат баҙары, бер нисә урам. Целовальникта[3] ҙур-ҙур йорттар. Баҙар. Үрешлектә баструк.

Шулай ҙа яратып килә торғайны ул. Унын ситендәге заставаға еткәс, аҡлы-ҡаралы итеп буй-буй буялған будка ын күреү менән үҙ йортона ҡайтҡан кеүек.

Үҙенә күрә сиркәүе, ям станы,[4] баҙар майҙаны бар. Городничийы ла, земский суды ла.

Бында ул тауҙар, ул урман, ул ыуҙар, шишмәләр...

Ҡунаҡ итәләр, ҙур-ҙур күстәнәстән өҙмәйҙәр ине.

Әле килеп төштө. Ундай заман түгел, болалы ваҡыт.

Барып етеү менән, ҡыңғырау ишетеп, унын хөрмәтенә алдан уҡ калакул ҡаҡтылар. Быны ы шулай ҙа әле йөрәккә уҡкан кеүек.

Ҡайыш көймәле арба ынан төшөүгә, ундағы комендант, писарь килеп еттеләр. Ашап-эсеп сығыуға, сиркәү ҡойма ы буйына кешеләр йыйылған. Рус купецтары, старшина Әлибай. Бына тағы бере е – башҡорт байы. Белә уны Богданов, нисек

*[1]Ярғусы – хөкөм сығарыусы (автор үҙлегенән).*
*[2]Баструк – төрмә, острог.*
*[3]Целовальник – присяжный кеше, таможняла тоҙ атыу урынында аҡса йыйыусы.*
*[4]Ям станы – ямъ, ул заманда почта шулай тиелгән.*

Туҡтағолдо[1] белмәҫкә. Әле лә китмәй. Кешеләр таралышты, ә ул көтә... Шунан зарлана башланы.

– Ярай, килгән егеҙ. Бағый боҙа. Сауҙам юғалды, – ти. Бүләге бар.

Богданов маҡтай, теге иреп китә. Ә Туҡтағол сиселмәй. Алапта арышы... Белә ул ғәскәр туплана ын, Богдановтың баш икәнен.

Уны оҙатты. Ә Әлибай ҡай ы яҡтан күпме кеше килгәнен әйтте. Уның әйтә е үҙе бар. Ййын көттө. Хат хаҡында булды.

Әйтмәй булмай хәҙер, ҡушаға ы Кинйәнең ебәргән хатын подпоручик Ораҡовҡа биреп өлгөргәйне шул.

Хатты күптән алғайны. Бирмә ә лә булған, Пугачев килеүе хаҡында бергә серләшкәйнеләр. Әлибай ул сағында үҙе лә дәртләнде. Ҡушаға ы шул Петр Салис ләҡәбе алған Бүгәсәүгә барған, яҙыуына ҡарағанда, ысын батша, ти. Уға Дон казактарынан ҙур ярҙам килә, тигән, хәҙер унда ун бер старшина үҙ командалары менән барған.

Ышанып сер аҡлаусы, тип яҙған дуҫы. Сер дуҫы күп булыр, серҙе тотҡан бер булыр шул.

Ә Әлибай Мырҙағолов икеләнде. Барыр ҙа, эш сыҡма а... Уға ҡаршы батша әрме е, өҫтәүенә, бына күпме көс йыялар, ни саҡлы түрә килде. Улар ара ында Ораҡов кенәздәренең генә лә өсәү е бар. Яңылыш аң, тер әкте тешләргә тура килер, ә воевода, губернатор алдында ла эш күр әт әң, бына ошо Ораҡтар кеүек ҙур абруй ҡаҙанып булыр. Шул ваҡыт ул, башҡорттар ара ынан тип, команда башлығының ярҙамсы ы итеп тәғәйенләү ҡағыҙы алып килде.

Быны капитан Ораҡов килтергәйне. Ләкин Әлибай уның менән өйләшергә ҡурҡынды, ни ти әң дә – кенәз, Кинйәнең ҡоҙа ы.

Ә бына улы... Кинйәнең кейәүе Михаил кенәз ышаныслы кеүек.

– Бына, инең ҡайның нимә яҙа, – тине Әлибай, сер сисеп.

– Ҡана әле...

Уҡыны.

– Ах, иңә ышаныс юҡ. Вор менән бәйләнгән ең!

– Ниңә? – тип текләне Әлибай.

– Йән дуҫың?

– Ә ин?.. ин – уның кейәүе! Атаң – ҡоҙа ы! Белдеңме?

Әлибай уны еңергә, юл ҡуймаҫҡа тейеш!

– Минме? Мин бит... Ҡара арыҡ көтөүен көтөргә мин ҡара өйәк түгел. Мин, бына күр...

Ул үҙенең йәнҙәйе итеп аҡланған ҡағыҙҙарын йәйҙе.

Ораҡов ҡараны. Шәжәрә... Ну что же... Иван Грозный ярлығы... И, уны ы... беҙҙең кеүек кенәз итмәгән бит... Ә бына хан тайра ы тип тағы нимә уҙған була? әй, ни бары бер көмөш тәңкә... Юҡ, ундайҙың бото бер тин, ирәймә ен. Нуғай кенәзе барҙа, ҡайҙа үрелә? Отряд командиры булма ын әле. Үҙем булырмын, мин тейеш...

Ул бөтә ен бер ыңғай өҫтәлдән ыпырып төшөрҙө.

– Былар сүп!.. аҡлап йөрөткән өсөн зинданға ятма ам әле, тиң.

Быларын аяҡ аҫтына ташла а ла подпоручик, Кинйә Арыҫланов яҙған хатты, быны ы ҡәҙерлерәк тигәндәй, ипләп кенә кеҫә енә алып ҡуйҙы...

Әлибай емәйеп ҡалды. Белеп булмай, нимә тип ошаҡлар кенәз, тип ул иң элек үҙе әйтергә ашыҡты Богдановҡа.

– Хат түгел, ҡотҡо ул, күр әтеп дөрөҫ эшләгән ең. – тине. – Ҡайҙа ул?

---

*[1]Туҡтағол – Әлибай Мырҙаловтың элекке ялсы ы, ағас аяҡтан (Хлопушаныҡы) хазина табып, бай була, Аҡҡалпаҡтың дошманы.*

– Ораҡовта.
– Кем алып килде?
Еп осон ҡайҙан таба ың?
– Уны шунда үлтерҙеләр, – тип ҡотолдо Әлибай.
Быны ы Богдановты тамам ышандырҙы.
Ул воевода ярҙамсы ы бит. Ораҡтар менән өйләште, әлбиттә.
– Уҡып бир.
Ораҡовтар тәржемәләп уҡыны.
– Ҡоҙаң кем булып сыҡты, Ваше сиятельство?
– Осрашырбыҙ. Билдә ҡылыс бар.
– Эйе, ҡәрҙәштән уңмаған ың.

***

Бынан бер аҙна элек старшина Әлибай Мырҙағоловҡа Өфө воевода ы Алексей Борисов әмер ебәргәйне. Үҙендең Ҡырҡ өйлө олоҫондан команда тупла, Стәрлетамаҡҡа бар, тигән.

Шундай уҡ команданы Бөгөлсәндә йыйырға тигәндәр ине. Улары Пугачҡа китте. Хәҙер бына Стәрлегә. Көндән-көн күберәк талап итә Рейнсдорп. Биш мең, ти. Күпме булыр...

Өршәктәге почта ямына йыйылған сиреү кешеләрен коллежский асессор үҙе менән алып килгән. Ҡарамалы ауылынан Ораҡовтар 557 кеше алып килә. Бында секунд-майор Маршилов Иван Карпович[1] йыйып тора. Ә Ағиҙел аръяғында әйет улы айран, Көҫәпҡол Азатбаев.

Шундай ваҡыт. Ундай әмер әр олоҫҡа килә. Башҡалар инде йә Өфө ҡәлғә ендә, йә Ырымбурҙа, Бөрөлә, Минзәләлә, Үрге Яйыҡта ла бар. Ә ҡай ы берәүҙәр, дуҫтары Кинйә, Ҡасҡын, Яман ары кеүектәр Бүгәсәү батшаға барып, унын ярандары булып йөрөйҙәр. Улар ни, Петр батша, тиҙәр ҙә... Әллә шул...

Әлибайҙың да команда ы әҙер. Ул Дим буйҙарындағы кешеләрен дә, элек ата ы ҡорған ауылдағыларын да бергә туплап Стәрлетамаҡҡа килде.

Стәрле унын үҙ ерҙәре кеүек.

Бында, Стәрлегә, воевода иптәше, йәғни унын ярҙамсы ы Богданов килгән.

Воеводский избала шуға килеп күренде, рапорт бирҙе.

Богданов ҙурлап ҡаршы алды:

– О, выборный әфәнде!

Эйе, ул «выборный», ләкин депутат түгел. Екатерина Икенсенең яңы закондарына наказдар йыйыу өсөн, комиссияның депутаты Туҡтамыш Ишбулатовҡа[2] ярҙамға шулай айланған. Ул да ҙур. Ирәйеп китте. Тик ул Богдановтың шулай юхалау өсөн генә ирәйтеүен иҙмәй ине.

Түрәләр күп... Ҙур команда тупларға уйлайҙар. Губернатор, биш меңлек, тигән. Шуны Өфө кенәзе капитан Ораҡов Ырымбурға табан, генерал Кар ҡарамағына алып китергә тейеш икән.

– Беләбеҙ быны, – тип эсенән көлдө Әлибай. – Кинйәнең ҡоҙа ы. Үҙе Иван, үҙе Ҡотлоғмөхәммәт. Улы подпоручик та килгән. Ул да... үҙе Михаил, үҙе Ташбулат... Кинйәнең кейәүе. Бына хәҙер уғыш ындар үҙ-ара.

Стәрлетамаҡта уларҙан башҡа ла... Бәләкәс ҡала әм пристандең коменданты секунд-майор Маршилов шулар менән мәш килә.

Генерал Карҙың бойороғон үтәп, тиреләренән сығырға етешеп йөрөйҙәр. Быларҙың бере ен дә яратмай Әлибай, бөтә е лә юлға арҡыры тора, үҙҙәрен өҫтөн

[1]*Маршилов Иван Карпович – Стәрлетамаҡ пристаненең «тоҙ эше» командиры.*
[2]*Туҡтамыш Ишбулатов – Ғәйнә олоҫо старшина ы, Уложение комиссия ының депутаты, б. к. полковнигы.*

ҡуйырға тырыша.

Бына Мәндейе нишләп урала икән? Төпәйев Ҡазан даруға ының баш старшина ы бит, ҡылан ын ине шунда.

Әлибай ҙа баш старшина, Нуғай юлында. Тик уны анға уҡмай губернатор. Мәндейҙе почта комиссары итеп ҡуйҙы. Әлибайҙың олоҫтарында сиреү туплап йөрөй. Ә бынау Ҡолойы... Уны ы ла бында сит бауыр... Себер даруға ы баш старшина ы... Ул да сиреү туплай. Харап, биленә оҙон ҡылыс тағып алған да шуның менән ма айып, күкрәк киреп йөрөгән була. әр танышына, Польшала командующий бүләк итте, ти. Әллә Бибиковмы, бүтәнме... Уны ын Әлибай белмәй.

Йөрөйҙәр. Ҡушҡандар биш мең йыйырға. Улар ғына түгел, Кар үҙе Кисеү-Саттан уҡ, алдан бара тор, тип секунд-майор Йософ Тәвкилевты ебәргәйне. Тәүҙә Өфөгә килде, воевода уны ла Стәрлетамаҡҡа ебәрҙе.

Быны ын инде Әлибай ғына түгел, Ҡолой ҙа, Мәндей ҙә иш енмәй. Ата ы Ҡотломөхәммәт тә, быны ы ла ата армайҙар...

Бөтә тирә-яҡ сиреү командалары менән тулған, халыҡ ҡасҡан. Баҙар юҡ. Кибеттәр ябыҡ.

Мырҙағол үҙенең кибеттәрен күптән бөтөргәйне инде. Ана, Туҡтағол ат ын, тине. Бер Туҡтағол ғына түгел, ә уны ы, Әлибайҙың элекке ялсы ы, хазина табып байып алды ла байының кибеттәрен, тирмәнен, абын ҡайната торған, тире иләй торған йорттарын үҙ ҡулына төшөрҙө. Ләкин әле унын кибеттәрендә лә бер нәмә юҡ. Шулай ҙа ул тик ятмай, Маршилов менән Богданов ҡушыуынса уларға аттар ата, оло, бесән. Ғәскәргә кәрәк... Тик Ағиҙел аръяғы башҡорттары уға ис нәмә атмай. Ә Әлибайҙың танау аҫтынан алғандай, унын күршеләре меркеттәр[1] олоҫонан аттарын да, ашлығын – оло он да ала.

Тегеләргә ни, аҡса ғына бул ын, ҡом оҙ халыҡ...

Стәрлетамаҡҡа өс яугир килә. алдаттар тоторға итә. Ҡасҡанда бере ен үлтерәләр. Икәү е китә. Былар бер урында Пугачев манифесын биреп китәләр.

– Әлибай ҡайҙа? – тип әйтәләр.

Уҡыйҙар. Мәндей килеп сыға, ала.

Бирәләр. Уҡығайнылар.

– Кем килтерҙе?

– Ана, үлтерҙеләр инде. (Теге үлгән кешегә.)

– Башта миңә килтерергә кәрәк.

– иңә бар аҡ, йә ҡамсы...

Ә теге икәү Әлибайға бирә.

– Кем ебәрҙе?

– еләү ен.

Уҡый. 17 октябрҙә 1773 йылда яҙылған.

«Сер аҡлаусы дуҫ. Әлибай Мырҙағолов әфәнде, теләгәнебеҙҙе Алла Тәғәлә үҙе бирҙе. Ер йөҙөнән юғалған батша әм бөйөк государь Петр Федорович, ысынлап та, үҙе – мин быны ант итеп әйтәм. Унын улы Павел Петрович етмеш ике мең Дон казактары менән беҙгә ҡушылыу өсөн килә. Беҙ был турала хәбәр алдыҡ. Хәҙер башҡорттарҙың ун бер старшина ы үҙҙәренең полктары менән беҙгә ҡушылдылар инде».

Уҡыны. Йәшерҙе. Ләкин Мәндей килтергәнен Богданов, капитан Иван Ораҡов, Тәвкилев тота. Тағы барҙыр. Алырға. «Йәшер әләр, үлем яза ы!» – тиҙәр. Ҡурҡа, ләғнәт ҡамыты кеүек. Әлибай: « иҙерҙәр, харап булырмын. Миңә тура ебәргән ҡоҙаң тип бирә. Ә ҡоҙа... Унын ише...»

[1]Меркеттәр – Меркет ырыуының кешеләре.

Бының өсөн Богданов тағы йүкә сөйләп ҡуйҙы:

– Молодец, тоғро старшина, верный башҡорт ин!

Йә Хоҙай, ләғнәт ҡымыты китте өҫтән.

Кинйәнең ундай хатын әйет айран старшинаға ла, Көҫәпҡол Азатбайға ла, Бикеш Йомаҡаевҡа ла юлыҡтырғайны еләү ен.

Быны Әлибай иҙенде.

Улар килгәндә:

– Кинйә хат ебәрҙеме? Мин Ораҡовҡа тапшырҙым.

Тегеләр бер-бере енә ҡараштылар. иҙгән тип беләләр.

– Беҙ ҙә бирәйек.

Хаттары тегендә. Ҡайтҡас, Ораҡовтың улы подпоручик Михаил-Ташбулатҡа бирҙеләр. Ул – Маршиловҡа.

Ул хаттар – Өфөгә воеводаға, унда копия я ап, руссаға тәржемә итеп, Ҡазанға Яков фон Брантҡа, ә ул үҙ донесение ына ҡушып Сенатҡа оҙата.

7

Тойпаҡ буйында Салауаттың яугирҙары.

Салауат ҡайтыуға ултыралар ине. Бере е өңгө сүкей, бере е уйырташ ватып үткерләй. Туҙыҡа ы Истыбай йылҡы тарамышынан янына кереш ишеп ултыра.

Былай бөтә е әҙер... Ҡалъяндар тулы уҡ, әҙернә йәйәләр төҙөк. аман ҡарайҙар. Урманда уҡ юнып, аласыҡтағы ҡыҙашта ҡаҙаҡ уғып өйрәнгәндәр шул. Бында ла ҡулдары эштә, телдәре тик тормай.

Рәхмәт, ана, үҙенең шоңҡарын маҡтай:

– Бер сөйөп ебәрә ең, шул күтәрелеүҙә үк ете ҡаҙ тибеп төшөрә, – ти.

Маҡтана, ис юғы Көрөк заводындағы мәрйәгә барыуын ҡыҙығып өйлә ен ине. өйләгәндер ҙә әле. Ә, бәлки, ул хаҡта оялышынан ләм-мимдер. Сағыр[1] ҡарт килеп, Салауат старшина булып торғанда, барып ҡотҡарып алма а, әллә ниндәй бәләгә тарыр ине. Унан ҡотҡарҙы, аҡ аҡалдарҙың илле сыбығынан да. Бына хәҙер Салауаттан ҡалмай, ә маҡтанырға ти әң... Тик әле ҡош сөйөргә бармай.

– Үҙең нисек тибер ең? – тип ораны бере е.

Рәхмәт юғалмай:

– Кемде?

Кемде, ти ен, теге яуызды, ти енме? Уны ын әйтмәҫ! Кемгә ҡаршы барырҙы апасыҡ белмәйҙәр әле.

Ел, ямғыр, батҡаҡ.

Салауат кемдәр икәнен барып белде.

Тәвкилев, Ораҡовтар. Шулар командир булыр, тип ығымта я аны. Иң ҙур чинлы ы.

Үҙенекеләр янына килгәс:

– Тәфтиләү улы ҡулына ҡалабыҙ, егеттәр, – тине.

Уны беләләр. Унының ата ы – башҡорт йөрәгенә ауыр яра. Быны ы ла, алма ағасынан йыраҡ төшмәгән.

*Иҙел буйҡайҙары, ай, ҡаялыҡ –*
*Полковник Тәфтиләү яу урыны.*
*Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,*
*Алтынланды уның яурыны...*

Бере е ҡурай алды ла тарта башланы. «Тәфтиләү» көйө. Ҡасандыр булғандағыса инрәү, а -зар таралды. Ауылдар яна, кешеләр ғазаплана, язаға ҡуйылғандар

---

[1] *Сағыр Үтәшев – сотник, Үтәш ауылы, Бала-Ҡатай олоҫо, Исәт провинция ынан, Салауат Юлаевтың быуайы (дядя).*

әрнеүе яңғырай төҫлө. Бөтә е лә тыңлайҙар. Тыңла ындар. Онотма ындар, тине Салауат. Ләкин ул үҙҙәренә табан килгән ике кешене күреп ҡалды. Бере е – Ҡолой Балтас, икенсе е шул – секунд-майор Осип Тәвкилев! Үҙенең ата ы хаҡындағы көйҙө әле ишетмәй булмағандыр.

Салауат ҡурайсы янына килде.

– Бик моңайта ың! – Баштар түбән эйелер саҡ түгел. – Ҡана әле. әй, шулай уйнайҙармы? – Үҙе тарта дәртле марш.

Ат тояҡтары ишетелә – сабып барыу. Күңел күтәрелә.

Ул бер марш уйнай. Баштар күтәрелде. Дәрт. Ҡолой менән Тәвкилев килеп етте. Салауат уйнап бөтөп, ҡурайҙы ҡылт иттереп ауыҙынан алды ла хужа ына бирҙе.

– Матур уйнай ың, – тип маҡтаны Тәвкилев.

– Булдырабыҙ уны!

– Әле бүтәнде уйнайҙар ине.

– Уйнайҙар, йырлайҙар... Халыҡ күңелендә ни бар, шуны.

Ул русса өндәшеп торманы. Динегеҙ бер, тип әйтте Брант. Беләме-түгелме, ул апаруҡ өйләшә ине. өйләшеп, орашып торҙо.

Балтас:

– Былар ҙа иңә... Урал бөркөттәре.

– Эйе, эйе... – Үҙе ерәнеп ҡараған ымаҡ. Төлкө кеүек хәйләлә ә лә, алама ы күренмәй түгел.

Киттеләр.

Ҡурайсы егет Салауаттың түрәләр менән йылмайып өйләшеүенә асыуланып ҡалды.

– Быны ы ла, ата ылай, бер армай инде.

Салауат йылмайҙы.

– Ә ин әллә Хызыр Ильяс ти еңме?

– Уны күргәс, моңомдо өҙҙөң.

– Ә моңоңмо?.. Бына хәҙер уйна. Йырын да йырла.

– Ә үҙең?

– Әлегә ин йырла... Күршеләр ҙә йырлар. Ваҡыты еткәс, мин уға йырлай белермен.

Ваҡыты... ҡурайсы ла, башҡалар ҙа иҙенде.

Йырланылар.

Йыр:

*Бүгәсәү ҙә батша бар, тиҙәр,*
*Ҡамсат бүректәре бар, тиҙәр.*
*Яйыҡ менән аҡмар буйҙарында*
*Илен айҡап йөрөгән шул, тиҙәр...*

Салауат:

– Күргән кеше бармы?

– Барҙыр.

– Нимә тигән?

– Ә ин ишетмәгәс ни, – ти Салауатҡа.

– Ишеттем дә ул...

*Бығаулының ҡулынан*
*Бығауын йолҡам, тигән ул,*
*Тышаулының аяғынан*
*Тышауын йолҡам, тигән ул.*
*Ер еҙ ҡалған башҡортҡа*
*Ерен ҡайтарам, тигән ул.*

«Миңә ышаналар ҙа, ышанмайҙар ҙа...»

Икенсе көндө башҡа командаларҙа ишетелде «Тәфтиләү»ҙәр...

Йыр күңелдәрҙә уңалып бөтмәгән яраны яңыртты. Унын ата ы хаҡында кем нимә белә шуны өйләне, Осиптың үҙенең ҡол-крәҫтиәндәрен нисек яфалағаны хаҡында ишеткәндәр – ишеткәнен өйләнеләр.

Тарал ын, тип уйланы Салауат, үҙенең ышанысла кешеләре тарата.

Тәвкилев китте. Артынан бере е йырлап ҡалды:

*Тәфтиләүҙәр...*

– Асыулымы, нимә? – тип аптырай Салауат. Ҡымыҙ ҙа күңелдәрҙе асманы.

Салауат тирә-яҡҡа ҡарай. Был ерҙәр таныш. Ошо юлдан Ҡарғалыға укырға йөрөнө. Әле ҙурайған, юлдарына ағас түшәлгән.

Дуҫтары янына китте.

Салауаттың түрәләр алдына барыуын аңламай, ҡарға ҡарғаның күҙен суҡымай, барыр, ярарға тырышыр, тип уйлаусылар булды. Өндәшмәйҙәр, күңелдәре төшөнкө.

– Ниңә бында килдек? – тип ораны Ба ау. Башҡаларға ни ан, быны ы ҡошсо була тороп ышанмай. Ул М. Ораҡовҡа эйәрмәҫ ине. Үҙе бәрендереп сығып китер ине. Йөҙ кеше. Ә бында мең! еләү ен дөрөҫ белдергән. Тороп ҡал ындармы? Шунан ҡара-ҡаршы осрашырҙар, киҫеш китер, башҡорт ҡаны ҡойолор. Юҡ, быларҙы ла эйәртеп булыр бит. Тимәк, көрәш ошонда уҡ башлана.

Ләкин былай тип әйтмәй. Әлегә үҙе генә белә.

Салауат яуап бирмәне.

Йыр яңғыраны. Башҡалар ҡушылды, күңел күтәрелде, шик онотолдо. Йырла а ла, нимә эшлә ә лә, Салауат уларҙыҡы ла ба а.

– Ашҡаҙар ярында ултырыу яманмы? – тип ораны Салауат.

– Ай, йән рәхәте!

– Шулай тиң.

Шунда бер көтөүсе үтеп бара ине.

– Ҡайҙа Мөстән соҡоро?

– Ана, бейек тирәктәр янында. – Көтөүсе Ашҡаҙар аръяғына күр әтте.

Ул киткәс, Салауат үҙенең быуайы Сағырҙы алып, яр буйлап атланы. Был ышанысла. Улы ла.

– Ана, күрә еңме тирәктәрҙе. Ҡай ы йыуаны?

– Күрәм.

– Яҡты күҙҙә барып, уҡмаҡтарҙы күреп килергә кәрәк. Ҡараңғыла барырлыҡ бул ын.

Сапҡындар бер-бере ен күреп ҡалғайнылар бит Ҡомған күлдә.

Салауат күрмәне, барып ҡайтҡандарҙыр.

Кис. Ҡараңғы төштө. Стәрлетамаҡ ауылында мәзиндең аҙан әйткәне ишетелде, бер аҙҙан эргәләге сиркәүҙә лә киске ғибәҙәткә дин-дон итеп калакул ҡаҡтылар. Сағыр менән Истыбай[1] тағы китте.

Ә Салауат тирә-йүнде ҡарай. Төркөм-төркөм сиреү. Ҡай ы ырыуҙан. Таныша. Улар ҙа бында килә. Бөтә ендә лә шик. Барырға теләмәйҙәр.

– Нимә?

– Был көлсәне ындырмағыҙ, эсенән ҡан сығыр,– ти.

Ҡайтты Сағыр. Осрашҡандар. Салауат уға бында ниндәй түрәләр барын, күпме кеше булыуын, үҙҙәренең килеп урынлашыуын тапшырырға әйтеп ебәргәйне.

[1]*Истыбай – Сағыр Үтәшевтың улы, Салауаттың ике туғаны, туҙыҡа ы (автор үҙлегенән).*

Тағы хәбәр ителер.

«Тәфтиләү»ҙе йырлаған егет менән бергә ҡалаға баралар. Салауат үҙе – воеводаға, теге е – ихатала.

Богданов юҡ икәнлеген Салауат белеп сыға.. Ә теге егет бер хәл күрә.

Ике ҡулын ҡуша бәйләп, бер кешене юғары күтәреп аҫалар. Ике аяҡ ара ына бүрәнә башын ҡыҫтырып, бәкәлдән өҫтө ҡыҫып бәйләйҙәр. Бүрәнә башы аҫҡа тарта. Ҡултыҡ аҫты яна, тамырҙар өҙөлөрҙәй була.

Ауыр, түҙерлек түгел. Етмә ә, шул хәлдә сыбыртҡы менән уғалар. Күлдәк сиселгән.

Ҡысҡыра алмай, ыңғыраша ғына.

Теге йырсы башҡорт нишләргә белмәй, ҡойма ярығынан ҡарап тора. Уны күреп, елтерәтеп ебәрҙеләр. Салауат сыҡты.

– Теймәгеҙ, минең ҡошсом...

– Бул а, торма ын Пугачев шымсы ы өсөн йәш түгеп.

«Ә Указын уҡып йөрөйҙәр», – тип уйланы Салауат.

Алып китте, теге е:

– Ана, нишләтәләр.

Салауат:

– өйлә иптәштәреңә...

Үҙе уйлай, бына шулай иҙәләр. Был Указды ҡотҡара ы ине. Юҡ, булмай.

Эш боҙолор...

Баҙарға. Ҡала ҙур түгел. Барыбер ҡала. Ҡарап йөрөргә. Төрлө яҡтан кешеләр килгән. Бындағы сиреүселәр.

Кибет. Ҡалас алырға. Унда шау-шыу. Ҡыҙыҡ бит, бара.

Салауат туҡталды.

– Бына батша ғына кил ен әле.

Нимә был?

Салауат алға. Тағы берәү алданыраҡ.

– Ҡайҙа, нимә!

– Бына тараҡан...

– Кая! – атыусы тартып алды. Кетер-кетер сәйнәне. – Ах, йөҙөм емеше бит.

Көлөштөләр. Салауат:

– Эйе, етем-е ергә йөҙөм еләге лә аш.

Ул белмәне был кибеттең Туҡтағол бай кибете икәнен дә. Шау-шыуҙы баҫыр өсөн тараҡанды шул Туҡтағол ашауын да белмәне, әлбиттә.

Берәү тағы:

– Алда ын, әйҙә, Петр Федорович батша ғына кил ен, әйҙә... Көлөгөҙ күккә осор әле.

Ләкин ул мығырҙап ҡына әйткән үҙҙе ишет әләр ҙә, ишетмәмешкә алыштылар.

Салауат шаярып күрше төркөмдәргә барып йөрөй. Йырлай. Подпоручик Ораҡов менән Ҡолой осраны.

– Ҡайҙа бара ың?

– Күрәҙәгә. Анау ауылға. Алда яумы-илме белергәсе.

Үҙ егеттәренә килде.

Бере е ҡурай тартып ултыра. «Тәфтиләү»ҙе. Моңло. Тик әле бындай ваҡытта йөрәкте иҙрәтергә кәрәкмәҫ. Баштар түбән эйелгән. Ул ҡурайҙы алды.

Марш уйнай. Тыуған йәйләүҙәр, бейек тауҙар күҙ алдына килде.

– Бына шулай ул.

– Мин бит Тәфтиләү улына.

— Беҙ уға йырлай белербеҙ!
 иҙҙеләр.
— Мин әйткәндә туҡтағыҙ.

8

Өс-дүрт көн үтеүгә бында бер яҡтан сиреү кешеләре туплап — Ҡолой Балтас, икенсе яҡтан Мәндей Төпәйев килде. Шул көндө үк Ҡазан губернаторы ебәргән секунд-майор Тәвкилев та Стәрлетамаҡ еренә аяҡ баҫты.

Богданов ирәйеп ҡуйҙы, бына ни саҡлы түрә, әйтер ең, ҙур бер штаб.

Ә бит бөтә е ошонда. Ғәскәр йыйып Ырымбурҙы ҡотҡарырға барырға. Йә генерал Карға илтергә, йә Ырымбур ҡамауын өҙөргә, ялған батшаны тоторға, толпа - ын туҙҙырырға.

Бөтә е ҡуйылған. Йүгергеләп кенә торалар. Михаил Ораҡов тағы әйләнеп ҡайтты.

— Ашҡаҙар аръяғында бер команда, — тине Михаил.

— Ҡайҙа?

— Пристанде үтеп туҡтанылар. Башлығы бында килә.

Салауат воевода канцелярия ына инә. Уҡ- аҙаҡ. Шуның өҫтөнә пистоль. «О о...» Ә быны ы... Ниндәй ҡылыс. Ябай түгел. Ҡылыс таҡҡан. Миҙалы бар.

Бында Богданов, Тәвкилев, Ҡолой Балтас, Мәндей Төпәйев.

Быларын таный Салауат. Уға тап килде.

Ә быны ы? Танып етмәй... Ә, кенәз Ораҡов. Ошо о дәү командирҙыр.

—  ин...— тине. «Кем?» тиергә булғандыр.

Салауат үҙе рапорт бирә.

Ораҡов:

— Ҡылысың шәп, — ти башҡортса... Ҡарарға үрелде.

Салауат, ҡулың  уҙма, тигәндәй, еҙ  абына үҙ ҡулын  алды.

— О о, арыҫлан  үрәте...

Бөтә е иғтибар итте.Ҡыны ында таштар.

Богданов яҡын килә.

—Ҡылысың шәп... Яуыздың башын өҙөргә.

Күҙе күрә — яҡшы ҡылыс. Семәрле ҡыны. Тотҡа ында арыҫлан башы. Бөлдөргө ө лә...

— Кем бүләге?

— Генерал Бибиковтыҡы.

— Ә, генерал- аншефтыҡымы? Александр Ильич биргәс...

Богданов йүкә сөйләй. Маҡтай.

— Ә...

Балтастың күңеле ҡытыҡлана, юрамал үтеп китте.  индә генәме ни, тигәндәй. Шундай уҡ ҡылыс таҡҡан. Миҙалы ла бар.

Балтас гел походта, гел башҡорттарға баш, русса яҡшы белә.

— Был минең дуҫтың улы... Александр Ильич биргәйне беҙгә.

— Ә, Юлай Аҙналинмы? Беләм.

Түрәләр ҡарап тора. Богданов:

— Был ҡылыстар Польшала шляхта баштарын киҫкән, бында яуыздарҙыҡы, фетнәселәрҙеке... — Ата ы эшләгәнде, был тай аҙғыны эшләмәҫме? Көйләп йөрөтә е булыр.

Юлай ебәргән ҡағыҙҙы ҡарай. Ял итергә ҡуша.

Ул (Михаил Ораҡов) бер төркөм алып килә. Бына сафтар, Богданов ҡарай. Ораҡов күр әтә. Ҡолой Балтас ҡылыс таҡҡан. Салауатты күрҙе.

— Бына килгән ең, беҙҙең ҡулда.

Богдановҡа:

– Минең дуҫтың улы.

Богданов ҡарай. Батыр егет. Йәш. Тик ҡарашы етди кеүек түгел. Түшендә батыр хеҙмәт өсөн бирелә торған ғәмәләт.

– О о, награда! Ҡайҙан алдың?

Ҡолой ҡылысын тотоп алға сыҡты.

– Ата ыныҡы. Унын менән генерал Карҙа Польшала бергә булдыҡ. Шунда бирҙеләр. Ә миңә Бибиков бына ошо ҡылысты бирҙе.

Ҡарайҙар ҡылысты, миҙалды.

– Молодец егет!

Салауат уға биреп ебәргән ҡағыҙҙы тапшырҙы.

Яр буйына урынлаштырҙылар. Аттар утлауға. Усаҡ яғалар. арыҡ уялар. Ит быҡтыралар. Сәй.

9

еләү ен шул урында торҙо. Көндөҙ уларға ябырылалар, ләкин бер-ике атыу менән китәләр.

еләү ен үҙенең сапҡындары аша Көҫәпҡол менән дә, айран сиреүендәгеләр менән дә барышлыҡ-килешлек тапты.

Элек аралашып йәшәгәндәр бит. Ара алыҫ түгел. Таныштар, дуҫтар бар. Етмә ә, ҡай ының Көҫәпҡол иләүендә, ҡай ының айранда ҡәрҙәш тейешле е бар. Йә әсә е шунан төшкән, йә ҡыҙ биргәндәр, ҡыҙ алғандар. Ҡоҙалар, еҙнәләр, ҡәйнештәр бар.

Шулар аша күндерергә тырышты еләү ен. Петр батша исеменән старшиналарҙың ике енә лә указ яҙып ебәрҙе. Тик бере е лә сиреүе алдында уҡыманы, Михаил Ораҡовҡа бирҙеләр.

– Бында ла ҡулы еткән Арыҫлановтың, – тип теш ҡыҫты ул.

Подпоручик Ораҡов Стәрле – әләүек ара ында Әүжән юлында отряд менән йөрөй, бер прапорщигы арыраҡ барып-барып ҡайта.

Көҫәпҡол, үҙе уға баш эй ә лә, килештермәне.

– Ҡайның бит ул.

– Ҡайны. Бунтарь ул.

– Унын улы ла бында.

Указды шулай йом алар ҙа, унда нимә барлығын яҙып, сиреү кешеләренә лә еткергәйнеләр еләү ен кешеләре.

Ораҡовтың быға ла асыуы ташты. Уға ябырылыу ойошторҙо. Булманы.

Туптан бер ат алар, туҡтайҙар.

Үҙ-ара аралашыу күбәйҙе.

Салауаттан тағы хәбәр алып ҡайттылар.

– Күрәҙәгә барғас, айыу яптым, сығып китте, тип әйткән, ти, берәү, – тип тапшырҙы сапҡын.

еләү ен аңланы. Ҡуҙғалырға әмер булғандыр. Сапҡындың әйтеүенсә лә шуға оҡшай.

Әйтә тағы Салауат: «Ораҡовтар менән аҡ бул ын». Ҡоҙа, кейәү бит.

Тимәк, күсергә кәрәк. әр ваҡыт яҡын булырға. Буталыш китеп, ярҙам талап ителеүе ихтимал.

әләү енең көсө ҙурайҙы. Үткән көндө Хлопуша Әүжән яғынан әйләнеп килде. Завод кешеләрен йыйған. Башҡорттар ҙа бар. Воскресен заводы өсөн туп я аусы оҫталар тапҡан. Дары, йәҙрә күп кенә. Ете туп алғандар, шуларҙың бере ен, кешеләр ҡалдырҙы. еләү ен Хлопушаны Көҫәпҡол, айран сиреүенән аҡлап оҙатҡанда, элекке урындан күсергә тура килде. Торатау аръяғындағы Ҡанаҡайҙар

ерендә Туғарсалған күл буйына урынлаштылар.

Шунда Көҫәпҡол ябырылғас, кеше ебәрҙе.

– Үҙең дә бара торған ер. Унда ярлыҡамаҫтар, – тип әйтте. – Яҡшы саҡта кенәзде ҡыуалап ебәр.

Илсене кире ебәрҙеләр.

Ләкин Көҫәпҡол подпоручик Ораҡовҡа хәбәр иткән.

...Подпоручик Ораҡов Көҫәпҡол менән айрандың сиреүҙәрен туплап, бергә ябырылалар.

әләү ен тупсыға:

– Йә, картечь алмай ғына берҙе шартлат әле.

Туп әҙер. Дары алып ҡына атып ебәрҙе. Бер-бер артлы гөр өлдәп, ике тапҡыр шартлау ишетелгәс, башҡорттар китер яҡтарына боролдо. Ҡурҡыуҙан түгел, артҡа әйләнеп ҡарайҙар, ҡул болғайҙар. Юҡҡа уғышырға теләмәүҙәре күренеп тора, бәлки, улар үҙ старшиналарына буй онмайҙарҙыр. Ә кенәздең үҙенең ни бары биш кенә алдаты. Нимә генә эшлә ен.

әләү ен тағы үсекләп яҙыу ебәрҙе Көҫәпҡолға:

– Ниңә минең Михаил кейәүҙе тотоп килтермәнең?

еләү ен таң менән, Торатау итәген уралтып, Ҡарайған ҡарт йәйләүенә табан төшә башланы.

Был саҡ Михаил-Ташбулат тағы ат өҫтөндә күренде. айран менән Көҫәпҡолға әмер.

Был юлы улар бөтөнләй ҡуҙғалманы.

Кенәз биш алдатын алып китте.

еләү ен Айыт менән Алпарҙы алып улар янына китте.

Тыныс ҡына ҡаршыланылар. Көҫәпҡол, бер төркөм кеше эйәртеп, ҡаршыға сыҡты. Килеп еттеләр.

– Көҫәпҡол йортауай, тыңла! еләү ен мулла өйләй, – тине, тауышы мәсет манара ынан аҙан әйткән кеүек яңғыраны.

– Беләм, – тине Азатбайҙың улы.

– Петр Салис батшаға бағынығыҙ, тип күптән хәбәр күндерҙем. үҙемде аңла. уң булыр. Туптар атып аңлатырға выжданым ҡушмай.

Көҫәпҡол ауыр үҙ әйтмәне, ләкин уның ымы менән унлап кеше ҡыҫып килә. Алпар менән Айыт алышҡа әҙер ине. Тик еләү енең бер үҙенме, күҙ ирпеүенме көттөләр. Ә ул, әсир булыуынан ҡурҡмайынса, ҡиблаға боролдо ла ике ҡулын күтәреп доға уҡыны. Тегеләр туҡталды.

Уларҙың күңеле күптән өлгөргән. Тик саҡҡы ғына кәрәк.

– Я, Алла, – тип уҡына-уҡына битен ыпырҙы еләү ен. – Йә, мөьмин мосолмандар, мин кәрәкме еҙгә?

Көҫәпҡол аҡсылары артҡа сигенде, кире енсә, ынтылғанды туҡтатты. Кемдәрҙер ялбарып, кемдәрҙер асыуланып Көҫәпҡолға текләп ҡалды.

– Иманығыҙ камил икәненә инандым, йәмәғәт.

– Иншалла, – тиеште өлкәнерәктәр.

– Йортауай, беҙҙе тура юлға алып бар! – тип Көҫәпҡолдо ҡыҫа башланылар. – Юғи ә, үҙебеҙ китәбеҙ еләү ен мулла менән.

– еҙ... еҙ... – тине Көҫәпҡол.

Кешеләр уның ҡулынан ысҡынған. Бөтә сиреүе ҡауҙын кеүек, ҡуҙ алынған, дөрләп китә е генә бар.

еләү ен:

– Ул үҙе алып барыр, әммә саф күңел менән барыу кәрәк.

Әйт ә, ихтимал, йортауайҙарын түпәләп тә ташларҙар ине.

еләү ен алмаҡ ҡына атланы. Бынан уң Көҫәпҡол борсолманы. айран да быны ишетеп, башҡаса күренмәне. Ул ғына түгел, секунд-майор Н. И. Голов, унан

ҡурҡып, Стәрлегә китә.

Оҙаҡламай бөтә алайы менән ул Өҫтамаҡ ҡаршы ындағы ҡарурман эсенә барып урынлашты. Хәҙер кеше ебәреп, белеп, хәбәр алып ҡайтырға. Был хаҡта әйтеү менән Алпар:

– Мин барам! – тине. Төҫөндә, тауышында ниҙер яр ыған иҙелә.

– Әбеш менән Төмтөк барыр.

– Мин барайым, еләү ен полковник! Яҡын саҡта эшләп китә е эшем бар.

Уның ниңә яр ығаны аңлашыла ине. Күптән яҫҡытҡан көнө. Аҡҡалпаҡҡа ла, үҙенә лә күр әткән яфа өсөн Туҡтағол байҙан үс алмаҡсы.

– ай, дыуамал!.. Унда күпме көс...

– Улар, моғайын, йә Бигәштә, йә Ашҡаҙарҙа хәҙер.

– Ҡала эсендә лә етерлек. Левашев эргәлә.

– Мин барам!

Болалы ваҡытта бөтә йортон үртәп китмәксе. Юҡ, ундай эш булмай.

– ин... Беләм, бөтә ҡаланы яндырыр ың.

10

Ҙур отряд тупланды. Уны оҙатҡанда асессор Богданов:

– Хоҙай ҡөҙрәт бир ен! – тип ҡалды.

Бәләкәс түгел. Бер мең дә ике йөҙ кеше. Дөрөҫ, бик күп кешеләр йыйҙы, тупланы. Күп көс алынды. Бына хәҙер барырҙар. Кар корпусына ҡушырға. Уның кавалерия ы юҡ. Йәйәүле ғәскәр. Үҙе генә казактарға ҡаршы әллә ни эш ҡыра алмай.

Бына, бергәләп Ырымбурҙы ҡотҡарып алырҙар. Яуыз Пугачевтың толпа ын ҡыйратып, үҙен тотоп алырҙар. Бир ен Хоҙай!

Ә отряд ҡаланан сығып, дүрт-биш саҡрым үткәс тә, Ашҡаҙар ыуын сығып, арғы яҡта туҡтаны.

Өҫтамаҡҡа килгән Алпарға ҡаршы Сағыр китте...

– Аттым уҡ, утҡа төшөр, тип әйт, – тине.

– Кем? – тип ораны Алпар.

Салауат икәнен белә. Көрәш-ыҙғыш була ын иҫкәртте ул. Ни булмаҫҡа, әҙер тор ондар.

Кем туҡтағандыр, ис кемдең башына ыймай.

Тәвкилев аптыраны.

Михаил Ораҡов белмәй.

Ҡолой Балтас белмәй.

Салауат. Ашҡаҙарҙа. Боларыу. Уның ҡаршы ына Балтас. Туп-тура ҡарай. Салауаттың күҙҙәре ут бөркөнө. Таныштар. Бер тирмәлә табындаштар. Бер тарафташ түгел.

– ин боларттыңмы?

– е, минме?

Балтас:

Шашма! – ҡылысына ҡулын ала...

Салауат:

– Ҡылысҡа таяна ыңмы, Балтас түрә? – Үҙе лә ҡылысҡа тотона. – Ундайы минең дә бар.

Ҡолой ситкә ҡарай.

– Беләм. Атаңдыҡы. иңә ундайға хеҙмәт менән лайыҡ булырға кәрәк әле.

– Хоҙай ҡуш а... – тип йылмайҙы Салауат.

Ә Тәвкилев ҡурҡытып маташа.

Ә Ораҡов-командир тәүҙә юхалап-юхалап өгөтләргә маташты.

– Кем, ҡай ығыҙ менән өйләшәйем?

Бер кемде күр әтмәнеләр. Күҙҙәре менән кемдәрҙелер эҙләне. Күҙе Салауатҡа

ла төштө. Ләкин ул тыныс кеүек.
— Улар ҡурҡалар. Тегендә бағый, тиҙәр. Әрме е ҙур.
— Кем әйтә? Нимәнән ҡурҡа ығыҙ?
Был хаҡта ике-өс көн буйы өйләнелде.
Ауыҙҙан ауыҙға, алайҙан алайға күсте.
— Ҡурҡмайынса... Туптары бар... еҙ ҙә килтерегеҙ. Алдан бар ын, алдаттар ҙа килеп ет ен.
Ҡайҙа инде, улар секунд-майор янында.
Ул арала уның янына Мәндей килде.
— Нимә улар менән өйләшеп торорға. Алдайҙар.
Сәменә тейҙе.
Артта геүләштеләр.
Ҡыҙғандан-ҡыҙҙы, ут ныҒыраҡ дөрләй.
— Беҙ алдайбыҙмы? Бына кем ул. Ата ы армай кеүек, беҙҙе караттар итеп, ауылдар яндырырға итә.
— Юҡ, беҙ берәүҙе лә үлтермәйбеҙ. Үҙе бар ын ата ы ымаҡ.
Тәвкилевтың сәменә тейҙе. Үҙ төҫөнә инде.
— Молчать!
— О о... Ҡалай ҡысҡыра...
— Мин еҙҙе тыңлата белермен. — Ул артҡараҡ сигенде. — Господин Тупеев! Болтачев!
Төпәйев кешеләрен килтерҙе, Балтасов та яҡынлашты.
Әлибай шунда, ҡурҡа.
— Бына уны беҙгә бир. Ул беҙҙе йыйып килтерҙе.
— Кемде?!
— Ҡолойҙо, Төпәйҙе.
— Шуның арҡа ында был ғауға.
Бере е ҡул елтәп:
— Марш, марш! Теҙелегеҙ!
Арттағы башҡорттар алғараҡ килде.
— Слушай команду! — Тәвкилев ҡылысын сығарҙы.
— Ә, ин шулаймы? — Бере е суҡмар менән уның ҡылысын бәреп төшөрҙө, икенселәре икенсе яҡтан тәпәләйҙәр. Шунда уҡ Төпәйев үҙенең кешеләренә:
— Майорҙы яҡлағыҙ!
Ул үҙе — алға. Уны бәреп йыҡтылар, кешеләрен туҡмап ташланылар. уғыш, өҙөш.
Эштең ҙурға китеүен күреп, үҙенең алдаттары ситкә сыҡты, ҡатнашма ын. Үҙҙәре өҙөш өн.
Ҡолой килә башлағайны — артҡа сигенде. Кемдәрҙер атҡа атланды. Ҡолой ҡасты.
Әлибай үҙ алайында ине. Әйтеп ҡараны. Юҡ. Үҙ оранын ҡысҡырҙы. Юҡ.
— Туҡтағыҙ, йәмәғәт!
Ораҡовҡа бара башланылар. Салауат белә. еләү ен әйткәнсә, уларға тейергә ярамай.
Был арала Салауат этеп-төртөп алға сыҡты.
— Етәр, егеттәр! Тыңлағыҙ!
Баҫылдылар. Ләкин уралтып алған ерҙән китмәйҙәр. Ҡулдарын бәйләнеләр. Хәйер, Балтас та, Мәндей ҙә юҡ ине. Тәвкилев торорға маташты. Башы-бите — ҡан, өҫтө батҡаҡ. Ярҙам итеүсе юҡ. Уның ҡылысын, пистолен тартып алғайнылар.
— Атымды бирегеҙ, — тип ыҫылданы.
— иңә ат әле. Мортазаға булыр. Уның ата ына атайынан ҡалған бурыс

бәрәбәренә. Бар ана тегеләй.

Ҡалаға ла ебәрмәйҙәр. Янына өс ыбай төштө, ҡамсы елтәйҙәр, Бер-ике тамыҙып алдылар. Артҡа ҡарана-ҡарана йүгерә. Ярҙам килмәйме? Ҡаланы үрләп, Стәрле ыуын үткәреп Ҡолой ҙа, Мәндей ҙә ҡасты. Улар Богдановҡа барҙылар.

уңынан Әлибай тынысландырып йөрөй:

– Ниңә дошман күрә егеҙ?

– Дошман бында ул. – Ҡарашалар.

– Кем?

– Әллә... Үҙең булма аң ярай ҙа...

– Тегендә ул...

– Әле Тәфтиләү киткән яҡтамы...

Әлибай башҡа ын әйтә алманы.

Богданов был хәбәрҙе алыу менән, ҡалалағы ҡалған аҙ-маҙ алдаттарҙы алып, Ашҡаҙар буйына килеп етте. Үҙе менән подпоручик Михаил Ораҡовты алды. Унын ата ы Көҫәпҡол отрядын, улы айран сиреүен алып барырға тейеш ине. Бында үҙенә иптәшкә алды.

Күрә-күреү менән саҡ-саҡ уштан яҙманы. Шул саҡлы көс түгеп, ни саҡлы кешеләр йыйған отряд тауыш-тын ыҙ киттеме тигәндә, шулай туҙын ын әле.

Секунд-майор Тәвкилев саҡ-саҡ ҡалған ҡайҙалыр. Ҡасҡандыр, туҡмалғандыр. Әле генә артынан ярҙамға кеше лә ебәреп булмай.

Богданов юхалай. Был шартта ҡысҡырып, асыуланып та булмай. Үҙенде өҙгөләп ташларҙар. Яҡшылап, хәйләләп. Генерал Карға илтеп еткерергә, ул белер. Ә уңынан әр бере ен... энә күҙенән...

Бындағы хәл хаҡында төбәп бер кешеләренән орашып булмай. Богданов орай.

– Әллә, мин белмәйем, – тиҙәр ҙә боролоп халыҡ ара ына инеп китәләр.

Икенсе е лә, өсөнсө ө лә. Шундағы алдаттарҙан орашыр ине, ҡурҡып өйләмәҫтәр, башҡорттар ҙа ирек бирмәҫ.

Ни бары йөндө ыңғайына ыпырырға.

Бында иләүҙәрҙән килгән старшина ярҙамсылары бар. Улар ҙа бындай мәхшәрҙе үҙ кешеләренән уҙып өйләмәй.

Әлибай старшинаға, баш старшинаға бойороҡ бирелә:

– Йыйып ал бөтә ен!

Башҡорт ара ында баш булыу ауалағы торна ымаҡ, ә быны ы – воевода биргәне – турғаймы, сәүкәме, ҡарға бул а ла, ҡулда әле.

Бындай сиреүе булғаны бармы? Хәҙер бына бит... Шулай уны баш итерҙәр йә Мәндей кеүек почтовыймы комиссар булыр.

Ул подпоручик Ораҡовҡа ҡушырға тигәйне, юҡ, ярамай. Әлибай быға шатланды, Ораҡовты күргәс тә, шуны ҡуйыр, тине, юҡ, бына уға әйтә бит.

– Йыйыуын йыйырмын.

– Иртәгә алып кит.

– Ҡайҙа?

– Әйтербеҙ. Уны ын бына подпоручик ҡарар, әйтер.

Богданов шунда төн үткәрергә ҡалды.

Бер килке тынысландылар.

Ашҡаҙар буйына усаҡтар яғылды. Әскелтем төтөн алҡын томанға ҡушылды.

– Йырлағыҙ, бейегеҙ! – тине Богданов. – Ял итегеҙ. Иртәгә юлға бит.

– Ҡурҡабыҙ, – тиҙәр.

– Ничего...

Йыр. Ҡурай.

*...Иртәнсәккәй томан төшкән саҡта*
*Йылҡылары юшап төшәлер.*
*Тәфтиләүҙең үҙе күрмә ә лә,*

*Тоҡомона күҙ йәш төшәлер...*

– Салауат әйткәйне, уға йырлай белербеҙ, тип. Йырланыҡ бит.

– Эйе, әле ҡайҙа икән.

Тәфтиләүҙең ябай кейем кейеп, ҡаса-боҫа барыуын белмәйҙәр. Шулай уҡ улар Төпәйевтың, бер яҡтан, губернатор рәхимен юғалтыуҙан, икенселәй, яугирҙарҙан ҡурҡып Ҡазанға ҡасып киткәнен дә белмәйҙәр.

Богданов, Әлибайҙы үҙенә эйәртеп, бер төркөмдән икенсе енә бара. Унда йырлайҙар, ҡурай тарталар. Әммә ағайып, сәйер-сәйер ҡарап ҡуялар.

Салауаттың да үҙ эше.

Сағыр быуайы Өҫтамаҡҡа барып ҡайтты, көтәләр ине. Салғы сүкейем, сандалға уҡҡайным, ҡан сыҡты, тип әйтте.

Әлибай ҙа, Ораҡов та дилбегәне тотма ын.

Ә үҙе Ораҡов кенәзгә күр әтә. Шуға тапшырып ҡуйма ын. Унын бабалары Ораҡ хаҡында бер легенда. Йәнә е, Ораҡ шундай батыр булған, ҡысҡыр а – йәй көнө ямғыр, ҡыш ҡар яуған.

– Былары ла ҡысҡыра белә, – тип кемдер әйтте.

өйләнәләр:

– Бер йылды ҡар шул саҡлы яуған – ер өҫтө билдән ҡар менән ҡапланған, шунда уҡ йот башланған.

– Быларын тыңла аң, ҡырғын башланыр.

– Эйе... Шул йылды мал йығылған, аслыҡ булған.

– Әле беҙ йығылырбыҙ.

Ораҡтар хаҡында өлкәндәр ара ында ла, йәштәрҙә лә белеүселәр бар. Шуларға Салауат:

– Бөгөн ҡыҙыҡ бул ын. Үҙегеҙгә ҡайтып өйләгеҙ, ти.

өйләйҙәр, көлөшәләр.

Көлкө үҙҙәр Әлибай хаҡында ла аҙ түгел.

*Т*ик улар көлөшкәнгә Богданов иғтибар итмәне. Тынысланып, күңелдәре көр бул ын, ти.

Асессор Богданов шунда күҙ ҙә йомманы. Яҡты көн тыуа ын көттө. Бер ваҡытта шулай шомланып, борсолоп таң көткәне юҡтыр, моғайын.

Ә иртән торҙолар. Кәрәк-яраҡтарын алдылар. Ләкин атҡа атланмайҙар.

– Туптар кил ен, – тиҙәр.

Йәнә е, ҡурҡалар, берәй полк кил ә генә баралар. Асыуланып эш сығарып булмай. Ә былай Әлибай әйткәндә лә, Богданов әйткәндә лә тыңламайҙар.

«Кемде?» – тип аптыраштa ҡалды ул.

Мишәрҙәр хәйлә менән:

– Унын ата ы яу сапты. Ул да... кәрәкмәй,– ти.

Ә кем кәрәген беләләрҙер, ләкин әйтмәйҙәр.

Богданов, анау егетте тыңларҙар, Балтасовтың, унын ата ы абруйлы, верный башҡорт, тип әйткәнен хәтерләне. Шунын тирә ендә уралалар, көләләр.

– Миҙаллы егеткә ҡушайыҡ, – тине Әлибайға.

Ораҡов:

– Шуға ышанырғамы?

– Ничего, ин дә, бына Мырҙағолов та шунда бит.

Генералға саҡлы ғына...

Әлибай үҙе Салауат янына килде.

– ин әйт, Салауат.

– әй, мин командирмы ни?

– Алып кит әң, ин була ың инде.

– Кәрәк булғас, барабыҙ ул.

– Әйҙә, Богданов янына.

Салауат килде.

– ин батыр егет. Бөтә отрядты күтәр. Сафтарға теҙ. Алып бар.

– Ҡайҙа?

– Генералға йә губернаторға.

– еҙ әйткәс, булыр ул.

– Бар! – Богданов арҡа ынан ҡаҡты.

Салауат ыҙғырып ебәрҙе. Аты килде. Атланып, бер килке әйләнеп үтте.

– Азаматтар! – тине көр тауыш менән.

Бөтә алайҙар ҡалҡынды, нәмәләрен төйнәкләп, эйәр башына бәйләп атҡа атландылар. Теҙелергә ҡушты. Ашыҡмай ғына алай-алай сафҡа баҫтылар. Башында башлыҡтары.

Салауат ҡарап сыҡты ла Богданов ҡаршы ына килде. Унда Әлибай ине.

Әлибай ҡарап алды. Ошо йәш кенә кешегә буй оноп барыу ҡыйын ине. Ярай, барғас, генерал үҙе белер, тине ул.

Богданов та, Ораҡов та шулай тип уйлай ине.

– Бына, теҙҙем!

– Молодец, әйҙә!..

Ҙур сиреү ҡуҙғалды.

Богданов үҙенең ҡаланан алып килгән бер нисә кеше е менән тороп ҡалды.

Салауат сиреү башында бара.

Алдында – алсы шәйләк, арттан – артсы шәйләк, яҡ-яҡтан да күҙәтеүселәр бара.

Ә шул ылтау менән Ағиҙел аръяғына ла сапҡын ебәрҙе.

Мин ҡуҙғалдым, тиңләшеп барығыҙ, тип хәбәр ебәрҙе.

Ә Богданов... Отряд китте. Ул – Стәрлегә. Унан – Өфөгә. Уның менән бергә Ҡолой ҙа, Мәндей ҙә... ләкин Мәндей Өфөлә ҡалмайынса, Ҡазанға уҡ китер.

11

Тәвкилев ҡаса. Арттан ҡыуҙылар. Стәрлетамаҡҡа инергә итте, юлын бүлделәр. Индермәнеләр.

Ҡотолғас, кире боролорғамы? Ҡурҡты. Бер үҙе ҡалды. алдаттарын үлтерҙеләр, аҡсы башҡорттар шунда ҡалды.

Кар килә бит. Шунда.

алҡын ямғыр. Кис. Бүреләр олой. Бер ауылға инде. Рустар. Старостаға, ворҙар туҡманы, ти. Стәрлетамаҡты әйтмәне. Йыуынды. Ашаны. Ятты.

Тән ыҙлай, ә йөрәк әрней. Ғәрлек, ниндәй көнгә төштө.

Кем уйлаған. Офицер, секунд-майор Тәвкилевтар батшаға хеҙмәт итеп йәшәй белде. Уларға бирелгән Терсә олоҫо. Ҡазан өйәҙендә крепостной мосолмандарҙың ярты ынан күберәге улар ҡулында. Улар ҙа баш бирмәй. Боларалар, ләкин торалар.

Ата ы Алексей Иванович (Ҡотломөхәммәт тип әйтергә теленә яҡмай) ниндәй юғары күтәрелде. Петербургта – ул, ҡырғыҙ-ҡайсаҡ ерендә – ул. Ә бында? Ошо ерҙәрҙә күкрәк киреп йөрөнө. Бөтә Уралды дыр елкетте.

Ә дөрөҫө... Батша генералдары алдында теҙ сүгеп, халыҡ ҡаршы ында ҡанлы ҡылысын уйнатҡан, башҡорт ауылдарын үртәп, харабаға әүерелдергән, йәйләүҙәрен яза отрядтарынан тапатҡан, ир-азаматтарының меңләбен-меңләбен аҫтырған-киҫтергән, йөҙәрләп-йөҙәрләп алыҫ-алыҫ вәлиәттәрҙәге[1] алпауыттарға оҙатҡан, үк еҙҙәрҙе а -зар илатҡан ҡан ыҙ Тәвкилев...

Ошо хеҙмәте өсөн погондарына полковник мансабы[2] төшөргән үҙенә.

Әле уны ҡарғап йырлаған булалар. Йырла ындар.

Осип ата ы юлынан китте, ә уны ы алыҫ бабалары юлынан барҙы. Себер

ерҙәрен билəп тотҡан Күсем хан ейәне бит уның нәҫел тамыры Тәүке. Ә ана шул Тәүке үҙенең Аблай ағаы менән 1635 йылда Өфөгә ябырылғанын уйлағыы килмәй. Шунда рустар, башҡорттар тарафынан еңелгәндәр. Әле Аблай урманы. Шунан әсир... Барыбер хеҙмәттә. Быларын ниңә хәтерләргә? Ә батшалар уны маҡтаны.

Атаы хаҡында уйлау еңеллек бирә. Ул күпме ер алды бында, күпме крәҫтиәндәр. Бынан алыҫ түгел. Асылы күл тирәләрендә.

Осип та яңы ерҙәр алды. Завод алды. Күсем ауылы Ҡаңғы олоҫонда.

Ҡаръяуҙы, Баҙы.

Ә бына Күсем яҡынырак. Шунда барырғамы? Унда хужа. Аттар. Кейем, ә мө име – бейеп торорҙар...

Шулай уйлап, сама ҡороп, урттарын сәйнәй-сәйнәй йоҡлап китте. Иртән ат ялланы. Аҡсаға теймәгәндәр әле.

Арбала елкетә. ыуыҡ, ҡалтырата. Сәкмән алды.

Тағы ғәрлек. Ҡатыны Дарья Алексеевна нимә әйтер.

Тағы ат алмаштырҙы. Өс көн үтте.

Их, Карға, Василий Алексеевичҡа барып етә е. ис юғы Чернышевҡа. Уның өсөн фәрештә кеүек. Ҡотҡара торған алла.

Йә ул, йә Чернышев. Быны ы алыҫ амар яғы юлынан үтте. Ә Кар был тирәгә бер аҙнанан уңыраҡ килер. Ҡаршыға бара-бара, барып еткән булыр ине.

Ләкин уның офицер икәне билдәле. Башҡорттар уратып алдылар. Атаман алдына килтерҙеләр.

Был – бөтә Дим буйын тикшереп, ҡарап, отряд туплап Өфөгә барыусы Ҡасҡын амаров ине.

12

Ашҡаҙар буйынан сыҡҡас, Салауат отрядты ашыҡтырманы. (Отрядта 1270 кеше.) Яйлап ҡына килделәр.

Ораҡов:

– Шәберәк барайыҡ, – тип әйтеп ҡараны.

– Апар, әйҙә... Ҡурҡалар, өлгөрөрбөҙ, – тине Салауат.

Уға еләү ен менән хәбәрләшә-хәбәрләшә барырға кәрәк ине. Туҡтаған арала сапҡындар йөрөнө. Ҡай ваҡыт Ағиҙел аша ынан күрә-күрә килделәр. аҡ булырға кәрәк ине. Богдановмы, Ораҡовтың бере еме ғәскәр килтереп, шуға Көсәпҡол менән айрандың бишәр йөҙлөк алайҙарын ҡушып арттан ябырылыуҙары бар. Салауатты отрядта Әлибай барлығы ла ағайтты. Уның үҙенең сиреүе лә ҙур ғына.

Ораҡов башҡаса ашыҡтырманы. Уға ла, үҙ алдаттарын ебәреп, Карҙың ҡайҙалығын белергә кәрәк.

Улын – подпоручикты Карға табан Яңы Мәскәү юлына разведкаға ебәрҙе.

– Улың ҡайҙа?

Алданы.

Салауат быны ын ҡапылға тыймаҫҡа булды. Әле бөтә алайға ышанып булмай.

Бер көндө, Мәләүездә үткәс, еләү ен күҙҙән юғалып торҙо. Салауат уны көтөп, Бабай тауында көтөргә булды.

еләү ен үҙҙәрене ауылынан үткәндә Ағиҙел буйына, Бөгөлсән пристане янындағы кисеүгә төшмәйенсә, Ҡоралай арҡаын артылып, Аптыраҡ ауылына тейеп киткән. Был тирәләр – бошмандарҙың төп ҡоро. Күҙ-колаҡ булмай ярамай. Шунда үҙенең быуайы Көсәпәйгә, уның атаы Аптыраҡҡа үҙ янындағы ҡара көбәкле туптарҙы күр әтеп китте. Онотмаын. Бына йортауай быуайын, күр, те-

[1] *Вәлиәт – губерна, өлкә мәғәнә ендә (автор үҙлегенән).*
[2] *Мансаб – вазифалы урын, хеҙмәт урыны.*

геләй-былай ҡылан аң, тағы алып килермен, тигән кеүек ине был.

Хлопуша үткәндән уң байтаҡ ҡына эшләнгәйне. Әлбиттә, буш йөрөмәне ул. Воскресен заводынан байтаҡ ҡына дары алды, үҙ сиреүенә башҡорт ауылдарынан яңы азаматтар ҡушты.

еләү ен Көҫәпҡол, айран отрядтарын үҙе менән алып киткәйне, уларҙы алдан ебәрҙе. 31/Х улар Бөгөлсәнде үтеп киткәйне.

Бер меңдән артыҡ кеше.

Бөгөлсән – 30/Х. Бабай тауҙан улдараҡ үтеп, Салауатҡа кеше ебәреп китте.

Ошонда саҡта 57 башҡорт, 20 мишәр менән Йософ Нәҙеров Карға ҡасҡан.

Салауат:

– Ҡайҙа Йософ?

– Белмәйем. ин командир бит...

( уңынан Йософты үҙ кешеләре аҫыр.)

Өс күлемлек юлдан уң, Бикҡол ауылына етәрәк ҡунырға туҡтанылар. Еңел-елпе бәләкәс тирмәләр.

Әбеш менән Ба ау ҡыуаҡ янына Салауаттың тирмә ен ҡорҙо. Теге яғына – Әлибай тирмә е, арыраҡ – Ораҡовҡа палатка.

Байтаҡ тирмә булмағаны ҡыуыш эшләнеләр. Серге ябалар. Кейеҙ-маҙар бар.

Төндә туп атҡандары ишетелде. Салауат та, Ораҡов та ҡолаҡтарын ҡарпайтты. Ҡайҙа? Йөҙәй ауылы яҡын, тинеләр.

Ике е лә йәшертен генә ике яҡҡа сапҡын ебәрҙе.

***

Бында ғына түгел. Исәт өйәҙендә воевода Веревкин[1] Верхне-Яицкиҙан, Троицкиҙан биш меңләп кеше йыйып ебәргәйне Верхне-Озернаяға.. Арала башҡорттар, казактар, алдаттар. Ҡыҙыл ҡәлғә ендә ылау бирмәйҙәр, шунда таралалар.

Был көс үҙе лә бағыйҙы ҡыйратырға етә, тип таралдылар.

– Бер ҡанат ынды, – тине Рейнсдорп.

Ә Көнбайышта – Яңы Мәскәү юлына генерал-майор Фрейман корпусына 1235 башҡорт йыйып бирҙеләр. Улар ҙа таралды.

– Икенсе ҡанат та ынды, – тине губернатор.

Стәрле команда ы китте. Быны ы нисәнсе ҡанат?

Ә тағы... Көҫәпҡол, айран полктары Әүжән эшселәрен туҡтатманы, Салауатҡа бөтә Стәрлетамаҡ отрядын үҙ артынан эйәртеп алып китергә ҡамасауламаны, бер аҙҙан подпоручик Ораҡовтың үҙен ҡыуалап ебәрәләр.

еләү ен мулла әйткәнсә, Бәрҙегә табан – Пугачевҡа ҡарай юл тоттолар.

Ниңә? Кем? Белә губернатор... Өндәшмәй. Был хаҡта саҡ ҡына уңыраҡ генерал Кар ҡайғылы рапорт яҙып ебәрә.

13

Ноябрь башы. Ҡаты ыуыҡтар. Ҡар төштө.

Пугачев Пукрау байрамында килгәндән бирле Казачийҙар болононда торҙо ла октябрь урталарында уҡ Бердаға яҡынлатты.

Казактар шунда. Унда тегендәй-быңдай ҡоролма кәрәкмәй. Ул губернаторға ла кәрәкмәй ине. өжүм бул а – ҡаплай. Әле Пугачевҡа ла уңай ыҙ. Шулай ҙа землянкаларҙа торалар.

Бында казактар йәшәй. Элек-электән Яйыҡ аръяғында, Берда буйында. 1736 йылда Кирилов күсерә. Был яҡҡа – тауға күсергә, исеме ҡалды. 1743 йылда Неплюев – яңы урынға. Улар Кирилов заманында әле Ырымбур яныңдараҡ Берда йылға ы буйына кескәй генә бер ҡорған ҡороп алғайнылар. Ырымбур ҡала ы яңы урында – аҡмар тамағында булғас, губернатор Неплюев уларҙы әлеге урынға күсерҙе, хәҙер ике йөҙҙән ашыу йорт бар.

[1]*Веревкин Алексей Петрович – статский советник, бригадир, Исәт воевода ы.*

Бында уңайлы урын. Аттарға — аҙбар. Казак казакты яҡын күрә. Шатланып ҡаршы алды.

Эсәләр, уйын-көлкө. Шунан бирле ике аҙна үтте. Был арала күп кенә вылазка. Саман уғып алынған өйҙәр теҙелгән. Улар ҡараңғыла ла күренерлек итеп аҡ балсыҡ менән ағартылған. Ситән тотолған ал яҡтағы бәләкәй ҡапҡала ситән. Ике рәтле урам. Артта аҡмар, мал-тыуар өсөн унай, үҙҙәре өсөн ҡоҙоҡтар. Анда- анда ҡоҙоҡтарҙың бейек бағаналарҙа сиртмәләре. Майҙанда сиркәү.

Ырымбур яғында утлаулыҡ башланыр ерҙә, шунда пушкалар ҡуйырға, тине Пугачев. аҡмар ярына ла кәрәк икән.

Крепосҡа тынғы бирмәне Пугачев. Ике-өс көнгә бер ябырылыу. Туптарҙан атыу. Пожар я ау. Пугачевтың көсө күп.

2/XI ҙур приступ булды. Атыш көслө. Ҡаланан бик күп йәҙрәләр төштө.

Кешеләр үлде. Аттар. Пугачевтың асыуы килә. Билендә йәшел билбау. Ҡулында күҙәтеү торба ы.

Әле бер урынға, әле икенсе урынға барып сыға. Әмер бирә. Бей бойороҡ оҙ булмай.

— Бына, алйот, анпираторға атырға ҡуша.

— Әйтеп торам, туҡта, тип, юҡ...

Штурмға! Стеналарға яҡынайҙылар. Ур өҫтөнә менделәр. Егерҙар ата. Стенанан төшөрҙөләр. Ҡапҡанан сығып — штыковой.

Ниңә былар бирелмәйҙәр? Ҡурҡалармы? Минең шәфҡәтле үҙҙәрем барып етмәйме? Берәүҙәрен ҡурҡытырға, рядовойҙы өгөтләргә кәрәк.

Былай тынс түгел. Аттар үлә, кешеләргә ҡыйын. Ҙур ғәскәрҙе ҡышҡы фатирға күсереү кәрәк. әр армияла шулай.

Яугирҙар Ырымбур янынан артҡараҡ күсенде. ырт бар, уның Берда янындағы — уларҙың үрешлек туғайына күсте. аҡмарҙың йәйге кисеүе бар — шунда. Башҡорттар Аҡтүбәлә ҡалды, эргәләрендә ҡалмыҡтар.

— еҙҙекеләр эсмәй. әр ваҡыт айыҡ. аҡта абай тороҙҙар.

Уны ын ҡарарҙар ҙа ул. Күпме торорға?

ыуыта башланы. Үҙенән-үҙе тирмәләр йылытылды, ишек ымаҡ нәмәләр, ҡыуыштар. Усаҡ яғыу өсөн соҡор-йырын ситтәренә ышыҡ урын. Япма...

5 ноябрҙә ыуыҡтар башланды.

Казактар Берда ауылына күсте. Өйҙәр тулды. Урамға, ихатаға землянкалар ҡорҙолар. Ауыл лагерға әйләнде.

Башҡорттар, ҡалмыҡтар Аҡтүбәлә. Казактар пикеттар ҡалдыра — яңы урында. Пугачевтың үҙенең палата ы, күрше ендә — канцелярия.

Почиталинға указ яҙырға ҡуша. Губернаторға.

Уҫал яҙҙы. Уҫал бул ын. Ҡаланан сығып китергә ҡушты. Сығырға ла байраҡтарҙы, хоругвийҙарҙы олуғ батша алдына эйергә, ҡоралдарҙы тапшырырға. Шулай ҙа ул мәрхәмәт тә күр әтә. Бығаса баш алмай тороп, ҡаланан атыуҙары, кешеләрҙе әләкәткә дусар итеүҙәре өсөн ғәфү итеүен яҙҙырҙы.

Указ яҙылып бөткәс, казачкаларҙы саҡыртты. Дүртәү. Тундарына эстән йәшереп тегәләр.

Казачкалар ҡалаға ингәндә эләктеләр. Ләкин улар яҙғанды алып бирҙеләр. Уҡынылар.

Әмер ҡаты. Нигеҙле. Губернатор ҙа, башҡалар ҙа хәҙер ауыҙ йырмай. Бере е лә көлмәй.

Шулай ҙа өмөттәр ҙур. Ярҙам кил ә ине. Сикурс, сикурс!.. Генерал Кар... Полковник Чернышев, бригадир Корф... Бере е лә килеп етмәй.

Был көндәрҙә вылазкалар булды, форштадтҡа. Ҡәлғә стена ы эргә ендә форштадт... Шунда саҡлы барҙылар. Алдылар. Шунан туп ҡуйып аттылар.

— ул сикә енә уҡтыҡ губернаторҙың, — тине Пугачев.

Улар киткәс, губернатор яндырырға ҡушты. Янды. Шундағы Георгий Победо-

носецҡа сиркәүен генә ҡалдырҙы. Нисектер поп өйөнә теймәнеләр.

– Иртәгә үк сикә енә уғам! – тип дәртләнде. – Аҡтүбәнән башҡорттар бәрер.

Унда туптар бар. укты. Күп укты. Йығып булмай.

Урамға сыҡты. Артынан күләгә кеүек Давилин. Кешеләр осра а, Пугачев шаяра, өйләшә. Белмәҫ ең: әллә шаяра, әллә уйлап, күҙәтеп йөрөй.

– Батшаға улай килешмәй, – тине Овчинников.

– Минең бабам Бөйөк Петр нисек? Ул тимерсе, ул балтасы. Эшләгән. уғышта – алда. Килешкәнме?

– Эйе.

Ишеткәндәр, бисә батша түгел шул.

Палатаға ҡайтты.

Дежурный Давилин өңгө күтәреп аҡлап йөрөй ине. Ишек төбөнә баҫты. Пугачев өй эсенә үтте. Ике ҡатын өй йыйыштырып йөрөй. Уға палата я айҙар, батша палата ы.

Хәбәр килде. Эҙләп килде Иҙеркәй.

Әйтеүе менән атамандар йыйылды.

Ошо көндәрҙә Соколов-Хлопушаның Әүжәндән туптар алып, бер полк ойоштороп килеүе хаҡында хәбәр. Генерал Кар Яңы Мәскәү юлына боролған. Уның корпусын шунда ҡаршыларға кәрәк. Унда Овчинников бара, Чика бара, тине.

Кинйә лә хәбәр килтерҙе. Үҙенең улынан хәбәр алған.

Ә Чернышев – Иҫке Мәскәү юлынан. амар ыуы буйлатып килгән полковник Чернышев Ырымбурға яҡынлай.

14

Ораҡовтың башында бер үк уй: «Кар бында булырға тейеш. Кил ә, яҡшы булыр. Алыш кит ә, Кар еңер, быларҙы шул яҡҡа. Ә хәҙер алып киткәндә, әле төн, яҡты көн тыу ын». Теҙгенде Салауат ҡулынан тартып алыу сара ын ҡарай.

Салауат уйлай: «Бында батша ғәскәре бар, еләү ен. Иртәгә хәл ителә. Өҙөш-киҫеш еҙ алып барырға».

Ә егеттәр йырлай:

*Салауатҡай килә ғәскәр менән.*
*Ат уйнатып, Үҙән буйлатып...*

Салауат үҙенең көсөнә, дуҫтарының көсөнә таяна. Ораҡов белмәй уның көсөн, белергә үҙенең офицер булыуы, кенәз икәнлеге ҡамасаулай. Йәш, ти, аң ыҙ, бер бәндә кеүек. Ҡасыр, үҙенекен алып ҡасырға маташыр. Торғас, старшиналарҙы йыйырға ла әйтергә, ул малайҙың кешеләрен ҡамап алырға. Уның ҙурҙы ойоштора аласағын күҙ алдына килтермәй.

Салауат та йырлай. Ҡушылалар. Ораҡов Салауат тауышын айыра:

*Бейектә оса ҡоҙғон ҡош,*
*Унан бейек осор ыласын бар.*
*Ыласындан да бейек оса торған*
*Ҡош батша ы – ҡыйғыр бөркөт бар.*
*Шул бөркөттәй, егет, батыр бул,*
*Тайғаныңда таян дуҫтарға.*
*Яуҙа арыҫландай ажғырып,*
*Йән аямай ташлан дошманға.*

Тыңлай, бәйләнер урын юҡ. Ораҡов күҙенә йоҡо бармай. Йоҡлап киткәйне, тағы ер тертләгән ымаҡ булды, тоноҡ ҡына гепелдәү ишетелде.

аман аталар. Ҡай ы яҡ тубылыр. Яуыздар яғы бул а...

Ой, Тәңре... Ул шунда иртәгә үҙен ни көткәнен күҙ алдына килтерҙе. Быларең ә, иҫән ҡалдырмаҫтар. Офицерҙарҙы аҫа, тигәнде күп өйләйҙәр.

Ораҡов аман уйлана: «Ораҡ нәҫеленә йүнле бәхет яҙмаған. Нуғай булғанғамы?

Юҡ, ана Йосоповтар, Урусовтар... Улар ҙа, беҙ ҙә нуғай. Хатта бер үк төрлө кенәздәр. Улар ҙа, беҙ ҙә христиан күсеп, рус батша ы илтифатын күрәбеҙ. Ә шулай ҙа генерал-майор Василий Урусов ошо башҡорттарҙы ҡалай еңде, баш эйҙерҙе, дәү экзекуциялар ҡылып, ҙур абаҡ уҡытты. Шуға күрә уға Силла (бәхетле) тигән ҡушамат тағылды. Бәхетлеләр шул, ундай зарға эш уң булып торҙо. Ә минә?..»

Был уйҙар төш аралаш килгән кеүек булды унын башына.

Уйҙар тағы буталды.

Богданов уға команда яҙмышын тапшырғанда башына бер аҡыл төшөргәйне лә ба а. ин уларға үҙ булырға тырыш, эстәренә-бауырҙарына ин, нуғай бит ин, нуғайса өйләш, бер диндә булып күрен, тигәйне. Аҡыл бит. Әллә... үҙем теләп сыҡам... Ундай хәл булған, Урусовтарҙың бере е Лжедмитрий яғына сыҡҡан бит. Уны унарға алып сығып үлтергән. Кәрәк ә, мин дә. Ярлыҡарҙар, хәҙергә иҫән ҡалырмын... Кинйә Арыҫланов кейәүе, ти әм... Унын абруйы бар бит, уны тыңлайҙар. еләү ен ҡайнаға тегенән бара. Был егеткә аңлатмай булмаҫ...

Юҡ, ҡайны тейеш Кинйә лә яҡлашмаҫ, бере е лә.

Ул нуғайса өйләшкән булды. Хатта, мин дә башҡорт, ҡайным да башҡорт, тине.

— Юҡ, ин нуғай кенәзе, — тинеләр уға. — еҙҙең Ораҡовтар күп тырмыҫлаған башҡортто.

Юҡ, юҡ...

Был аташыу ымаҡ икәнен белде. Тьфу-тьфу... Юҡ, юҡ! Батшаға биргән антын боҙоп, был яуызға бер генә дворян да ҡушылмаҫ. Ә мин — князь!

Таң атты.

Ораҡовтың сапҡыны ҡайтманы. Үҙ ышанғандары менән өйләшеп ҡараны.

Салауатҡа:

— Уңға борол. Кар шунда булырға тейеш.

— Хәбәр юҡ. Ошонда торабыҙ. Мине башлыҡ иттеләр. Үҙем ҡушырмын.

— Борол. Мин бойорам иңә!

Ораҡ иҙенде. « ин кем яҡлы ың?» — тип орар ине. Улай уны икеләндерергә ярамай.

Йылға аръяғында ғәскәр күренде. Кем булыр, тип Ораҡов уйла ын, ә Салауатҡа унда еләү ен менән Ҡотлогилде икәне асыҡ. Ике тапҡыр туптан аттылар.

Ораҡов ҡарай. Борсола.

— Команданы теҙергә кәрәк.

Был арала ҡаршылағы ғәскәр бер аҙ яҡынлашып туҡтаны. Тағы ике шартлау. Йәҙрә е шартламай. Былай ғына. Был — еләү ен, тип аңланы Салауат.

— Егеттәр! Яраҡланығыҙ!

Нәмәләрҙе эйәргә бәйләп, ҡоралдарҙы аҫып, аттарға атландылар. Бөтә е әҙер. өңгәләр күтәрелгән. Тыуҙар тилбер-тилбер килә. Салауат янында быуайы Сағыр менән унын улы Истыбай. Арттарында егеттәр.

Уларға Ораҡовтың ике яғынараҡ сығып аҡларға ҡушты. Ни булмаҫҡа — Әлибай янына ла кешеләр ҡуйҙы. Үҙ янында ҡошсо о Ба ау, ышаныслы егеттәр бар.

Үҙе алда.

Ораҡов унын янына килде.

— уғыш асмайыҡ! Борол, үтеп китербеҙ. Мин бойорам!

Салауат күҙ ирпене. Аңлап, кенәз янына килделәр. Салауаттың ҡулында ҡамсы. Ҡапыл эйәргә баҫты. Бөтә сиреүҙе байҡап алды. Бына эргәлә генә унын шайтан-көҙәйҙәре, бүләкәйҙәр, урман-көҙәйҙәр, ҡыр... төркмән... Ана, юрматылар. табындар.Ә, уны көтәләр.

Ҡонҡас үҙҙәрен хәтерләне. Кемдер ҙур оран алырға тейеш.

Ул ҙур оран алды:

— Азаматтар! Тыңлаң! Ишетә егеҙ, унда орош бара. Бер яҡта — халыҡ. Батша.

Кинйә атаман унда. Үҙенә ирек яулай, икенсе яҡта — Кар янарал.

Ораҡов:

— Юлаев! Ни өйләй ең? — Яҡын килергә итте.

Ике яҡтан уның атының теҙгенен тоттолар. алдаттарын ситкә эттеләр. ағайып ҡалдылар. Салауаттың ҡай ы яҡҡа әйҙәүе асыҡ. Күптәр шуны көттө. Тик тартыш ҡубырмы?!

— Петр батша ҡаршы ына!

— Кинйә атаман янына!

Шул ваҡыт Әлибай килеп етте. Иләүҙәрҙән баш булып килгән ике старшина ярҙамсы ы килде. Өгөтләргә. Ораҡовҡа ярҙамлашалар.

— ин ҡайҙа әйҙәй ең? — тине Әлибай. — Тыңла командирҙы!

— Командир мин, йортауай Мырҙағолов! — тине Салауат.

— Ә, Ҡара аҡал булғың киләме? Батыршамы? — тип ысҡындырҙы теге е. — Уларҙың яҙмышын онотма, мырҙа!

Яугирҙар шаулаша башланы.

— Ишетә егеҙме? — тип берәм-берәм текләне уларға Салауат. — Ғауға күтәрмәң. Сафҡа баҫығыҙ!

Быны ишетеп тағы шау-шыу.

— Күрә еңме, Әлибай ағай? — тине Салауат, тауышын йомшартып. — Халыҡ нимә ти. Унан айырылыу яҙыҡ булыр. Ҡурҡ аң, ауыртмаған яғыңа ят. Бар.

Салауат тағы көр тауыш менән:

— Минең әйтерем асыҡ, йәмәғәт! Азаматтар, туғандар, дуҫтар! үҙем шул. Юл сата ында туҡталып ҡалып булмай. Үҙегеҙ әйттегеҙ ҡайҙа бара ын.

*Батшабыҙға ҡушылып,*
*Ир-батырға ҡуш булып,*
*Казактарға иш булып*
*Ирек яулар көн етте.*

Шулай тиеүе булды, сиреү өҫтө геү килде. Ораҡов аптыраны. алдаттарына команда бир ә — бик аҙҙар, тапалап китерҙәр уларҙы. Түҙмәне, пистолен сығарҙы. Ләкин шунда уҡ яман ҡысҡырып ебәрҙе:

— атлыҡ йән! — тип. — Бунтарь!

Ораҡовҡа ғына түгел. Уның артындағы сержантҡа, алдаттарына ла уҡтар төҙәлгәйне. Башҡорт уғының ни икәнен беләләр. Мушкеттарын күтәрмәнеләр.

Тауышты ишетеп, Салауат та пистолен алды:

— Кенәз, что делаешь? Ат! Йә, атып ҡара.

Сағыр тегенең пистолен тартып алып өлгөргәйне.

Үҙен аттан өйрәкләп төшөрөп түпәләрҙәр, бәлки, бөтөрөрҙәр ине.

Салауат:

— Теймәгеҙ! Үҙ юлын үҙе айла ын, — тип әйтте.

Шулай ҡушылмаған. Тештәрен ҡыҫты.

— атлыҡ! — тип әйтте лә, Ораҡов атына ҡамсы баҫты.

Салауат уға:

— Ана, еләү ен килә. Ҡайнағаң бит. Елдер шунда!

Ораҡов башҡаса екермәне.

— Минең антым бар.

Салауат:

— Был пистолең ҡайнағаңа бүләк булыр. Имен саҡта олаҡ!

Үҙе атын ҡымтып юрттырҙы, елдермәй генә. Орошҡа ташланмағандар. Осрашырға баралар.

Юҡ, Ораҡов унда бара буламы?! алдаттарын эйәртеп, йырылып сыҡты, уңға, үҙе әйткән яҡҡа — Карға табан йоҫоҡлағайны, унда ни барына ышанмай, артҡа табан ыпыртты. Уның артынан эйәреүсе башҡорттар, мишәрҙәр күп түгел. Стар-

шина ярҙамсылары, Әлибай ҙа, бәлки, китер ине. Юҡ, бөтә сиреүе бында. Айырып алырлыҡ түгел, берегеп өлгөргәндәр. Быны ул Салауат эйәр өҫтөнә баҫҡанда уҡ иҙгәйне. Ә, бәлки, уға ла шулай кәрәктер, халыҡтан айырылып булмай. Торна ауала түгел, Салауат ҡулында. Әлибай – үҙе лә ҙур ҡош, яҡшы өлөштән мәхрүм ҡалырға тейеш түгел. Тик бына подпоручикты яҡлашты. Салауат та, кешеләр ҙә онотманы. Шуны йыуырға теләп, ул:

– Салауат азамат раҫын әйтте, – тине кешеләренә. Шул үҙҙәрен ҡабатлай-ҡабатлай елдереп алға, Салауат алдына, барып етте.

– Салауат мин дә...

– Эйе, күрәм. Дөрөҫ аңлаған ың.

– Аңлайым ул. ине йәлләп кенә әйткәйнем бая.

– Аҡылың ҡасып торғандыр. Тирмә эсендә өйләй ене бөтә команда алдында әйттең.

– Ҡуйсы, мырҙам.

Ул шулай йәнәш барыуын дауам итте. Салауат уға иғтибар итмәй, баяғы йыр үҙҙәрен йырлап ебәрҙе:

*Бөркөттәй күктә осорға,*
*Балыҡтай ыуҙа йөҙөргә,*
*Боландай ҡырҙа елергә –*
*Теләгебеҙ шул бул ынсы.*

Башҡалар:

*Батшабыҙға ҡушылып...*
*Казактарға иш булып,*
*Шул теләктә булайыҡ,*
*Шул иректе яулайыҡ.*

Бөтә е уға ҡушылды. Салауат күҙ ирпеп Әлибайға ҡараны. Йырламай.

– Нинә йырламай ың?

Йыр тыныр-тынмаҫтан, ике команда яҡынлашты. Геү килделәр.

еләү ен, Ҡотлогилдегә Салауат ҡаршы баҫты:

– Бына илдән яңы көс килде.

Күрешеп, беләктәрен ҡыҫып... Буталыштылар. еләү ен орашып алды.

– Әйҙәгеҙ Бикҡолға!

15

Кар килергә тейеш. Ошонда. Разведка шул хаҡта белдерә. Овчинников, Зарубин отряд менән Бикҡол ауылына килеп керҙе.

Салауат килеп етмәгән көндәр ине.

Хәҙер шунан улға, Йөҙәйгә, боролорға кәрәк. Хлопуша килеп етә. Йөҙө яҡты. Булдырҙы. Завод кешеләренән бер полк килтерҙе. Күпме башҡорттар.

– Бына туп.

7/XI Зарубин бер команда менән алға китә. Йөҙәйгә табан...

Василий Алексеевич Кар ашыҡмай, юл буйы борсола.

Хәйер еҙ юлға сығылған. Уға бында бунтарҙар баҫтырырға кәрәк.

Ана, икенсе эш фронтта, төрөктәргә ҡаршы. Унда дан, яңы крест, яңы чин.

Ауырып ҡалғайны шул. Дауаланды. Отставкаға орағайны. Юҡ, бында ебәрҙеләр.

Төҫ итмәйҙәр. алдаттар менән яҡын булырға тырыша. Юҡ, ҡырыҫлыҡ. Уның тәпәш буйына, ябыҡ кәүҙә енә ҡарайҙар ҙа, ин кем ул тиклем, тип әйткән төҫлө.

Фронтта шулай ҡара ындар ине, тегендә, Пруссия ерендә. Ете йыллыҡ уғышта бүтән булған.

Уның йәйәүле ғәскәре. Насар атлайҙар. Ярҙамсы Фрейман шуға түҙә. Ул Йайыҡ бола ын баҫтырған... Унан Бөгөлмәгә килгән. Шунда үҙ вазифа ын үтәргә тип. Бик маҡтағайнылар. Кар өсөн әллә ни түгел кеүек.

Ул үҙе түҙмәй.
– Тиҙ, тиҙ! – Үҙенсә «шнель, шнель» тип әйтке е килә, ә асыуы кил ә «швайн» тигәнен ысҡындырғылап ҡуя.
Үҙе лә белә, шул мыжыҡлығы өсөн офицерҙар ҙа яратмай, ә алдаттар бөтөнләй үҙ итмәй.
Ситтән көлгәндәрен иҙә, уның ҙур күҙҙәренән, ҙур танауынан көләләр.
Яңы Мәскәү юлынан килә. Әмер биреп килә. Ырымбурға көнбайыштан – полковник Чернышев. Уның менән Боғоросланда осрашырға ине. Волга яҡлап, Кинәле ыуы буйлап үткән. Ярар, ул аҡмар тамағына барыр. Тик унда ҡаршылыҡ күп икән. Татищев крепосы янынан инер ҡалаға. Верхне-Озернаяла – бригадир Корф. Орскиҙан – генерал Деколонг, ә үҙе бына ошо яҡлап барып бәрер.
Дүрт яҡлап, ҡала эсендә ҡамауҙа ла бар. Ул яуыз Пугачев ҡайҙа бар ын. Саң кеүек туҙылыр.
Бөтә енә күр әтмә бирелгән. Хәбәрҙәр килеп тора. Бына Өфө воевода ы отряд ойоштороп ебәргән. Подпоручик Ораҡов хәбәр итте. Уның артынса ата ы менән секунд-майор Голов тағы бер төркөм менән килә. Бер меңлек кавалерия.
Ул Польшала күрҙе башҡорт яугирҙарын. Бынамын тигән кавалерия. Уларға диспозиция ғына бир.
Тик ышаныс юҡ. Бере енә лә.
Башҡорт старшиналары әйтеүенсә, бөтә ғәйеп Кинйәлә тип белде. 31/X баш ҡалаға яҙған рапортында «Үҙенә буй онған бөтә кешеләре менән яуыз Пугачевҡа барып ҡушылған башҡорт старшина ы Кинйә Арыҫланов. Бөтә Башҡортостанға ҡотҡоло хаттар таратыу арҡа ында башҡорттар тамам боларҙы», – тип яҙҙы.
Авангард отряды алда. Үҙе Дүсмәткә килеп етте.
Кар Екатерина II манифесын ебәрә. Алмайҙар. үгәләр.
– Беҙҙә ысын манапис бар. Йөҙ тапҡыр яҡшыраҡ. Беҙ шуға ышанабыҙ.
Кис. алҡын. Ҡараңғы. Ауыл шомло. Урын бирҙеләр, йылмаялар. Тик уның ысын күңелдән булмауын иҙә. аҡсылар ҡуйҙы.
Ышанмай, үҙе тикшерҙе. алдаттар бесәнгә боҫҡандар.
– Урынға!
– алҡын бит.
Улар өшөй, йәнә е, ә килеп баҫ алар?
– Молчать!
Ә бит Пугачев кеше ебәргәйне.
– Батша яғына сығығыҙ! – тип.
Йөҙәй старшина ы (Шәриф Юнысов) Мостафа ауылына үҙе лә кеше ебәргән. Саҡыра. Кешеләре китә Карҙың.
Карға әйтәләр:
– Был – Кинйә Арыҫланов эше. Бында ул – иң аҙғын фетнәсе.
Кар:
– Тотҡас, мин уны Пугачев йәнәшә ендә баҫтырып быҒаулармын.
Тағы ҡырыҫ булды, ти. Килеп баҫ алар. Шау-шыу... Тояҡ тауыштары... Офицерҙары... Бер башҡортты алып керәләр, старшина икән.
– Мин Йософ Нәҙеров, – ти.
Ышанмай Кар.
– Атайым шулай господин Кирилов янында йөрөгән.
Фрейман килеп керҙе. Ул таныш.
– Ә, Үрәзмәтов улымы?
– Эйе.
Уның янында 57 башҡорт бар, 20 мишәр. Арала бер нисә тархан. Сотнигы өйөш.
Уларға ышанды.
– Ошонда ҡарауылға торођоҙ, – тине. Үҙенекеләр менән парлап ҡуйҙы өйөш

сотниктыҡын. Үҙҙәренә генә ярамай.
Ә Кар аман тыныс түгел. Тынғы ыҙ йән. Ординарец менән сығып йөрөй.
Ике аҡсы өйләшеп тора. Ике е лә яңылармы? Ординарец белеште: бере е беҙҙеке, ти, хәйер, уның менән Петербургтан сыҡҡандар ара ында ла, Польшанан ҡайтышлай ҡушылғандар ҙа бар.
— еҙ кемдәр?
— Мин гвардеец! — Ул русса яҡшы белә.
Карҙы таный. Кар ҙа төҫмөрләй.
— Бындағымы ни?
— Эйе. Стәрлетамаҡтан.
— Исемең нисек?
— Буранғол!
— Юлды белә еңме?
— Беләм!
— Служи с богом, батыр бул! Кампания бөткәс, награда алыр ың.
— Рад стараться!
Кар үҙ-үҙенә ғәжәпләнеп ҡуйҙы. Йылы үҙ йән аҙығы икән, ниндәй тура ҡатты.
Был поста. Шулар ара ынан бере ен связға:
— Миңә башҡорттар килер, связға бар. Аҙашып йөрөмә ендәр.
Өсө ө китә, кейем алмаштырып. Ҡайтмайҙар.
Ул иртән алдағы отряд командирынан хәбәр алды.
— Йөҙәй ауылына килеп еттем, — тигән секунд-майор Иван Шишкин (Нижегородтан килгән команда). Туп уғышы. Дошман ҡасты.
Ә Зарубин сигенде Йөҙәйгә.
— Бынан алыҫмы? — тип ораны Кар вестовойҙан.
— Утыҙ саҡрым, ваше превосходительство!
Унда биш йөҙ кеше. Күбе е йәйәүле ғәскәр. Бөтә кавалерия ын тиерлек уға биреп ебәргәйне.
Шишкин тәүге бой биргән.
Ә артынан киткән 200 гренадерҙы ылаусылар Овчинниковҡа илткәндәр.
Был — Карҙың икенсе хәбәре. Пленға алған казак аша Пугачевтың бында Овчинников, Зарубин тигән атамандарын белделәр. Көстәре күп, биш йөҙ атлы казак.
Кар шунда уҡ үҙ янындағыларын алып, алға ашыҡты. Бой менән етәкселек итергә генерал Фрейман алда, үҙе арттараҡ.
Ҡышҡы юл, ләкин туңғаҡтар күмелеп бөтмәгән, каретаны тегеләй-былай борғолай, икертеп- икертеп ҡуя.
Юлда ул үҙенә таныш башҡорттарҙы күреп ҡалды.
— Әйҙә, яуыздарҙан үҙ еренде таҙарт.
— Йәнем йәл түгел.
— Минең дә үҙ яуызым бар унда. Екатерина Алексеевна бойороғо менән еҙҙең халыҡҡа ярҙамға киләбеҙ.
Буранғол беләме ни Екатеринаның Карға ундағы фетнәселәрҙе аяу ыҙ ҡырырға, ауылдарын яндырырға, тоҡомдарын ҡоротоrға ҡушып ебәргәнен. Шулай ҙа яҡшы ниәттән түгелен тоҫмаллай. Был ерән сәсле, ҙур танаулы барыбер армай булыр.
Шишкин Йөҙәй ауылында ине. Кар ҙа шунда килеп урынлашты. (Кар төндә бик ҡурҡа.)
Йөҙәй уй ыулыҡта оло юл өҫтөндә. Бында ям станы бар. Юлаусылар ҡуна торған өмәттәр күп. Ләкин буш. Халыҡ ҡасып бөткән. Шунда туҡтап, тирә-яҡ менән таныша. Бер яҡта тау-таш ырт уҙымы, араларында йырындылар, ә көньяғы бүлек-бүлек урмандар.
Мәсет янына туптарын урынлаштырҙы. Ләкин ҡайҙа ат ын... Көтмәгән яҡтан

килеп ябырылалар. Йәйәүле ғәскәрҙе ҡыуалап киләләр ҙә кире китәләр, аҡ ҡар өҫтөндә алдат кәүҙәләре ҡала. Көтмәгән яҡтан туптарын килтереп аталар. Карҙың тупсылары шул яҡҡа бороп ара сама ын билдәләргә өлгөрмәй, санаға ҡуйылған туптарын елдертеп икенсе урындағы ышыҡҡа алып китәләр.

– Атығыҙ, – тип бойороҡ бирә Кар.

– Ҡайҙа? – Тоҫҡап ҡаранылар.

Ул ҡарап тора, пугачевсылар алып киттеләр туптарын.

Төндә лә тынғы юҡ. Фрейман менән уйлашып торғанда төндә тауыш. Казактар ябырылған. Ҡыҫып килделәр-килделәр ҙә киттеләр.

Бер төн шулай, ике төн... Ҡамап алдылар. Круговой оборона.

Офицерҙарҙы йыйҙы.

– Был ни хәл?

–Улар уғыш регулын (уставын) анламайҙар. Былай уғышып буламы ни?

Икенсе е өҫтәй:

– Төндә киләләр, оят ыҙҙар.

– Көндөҙ ҙә... Беҙ, шеренгаға теҙелеп, штыкка штык килергә барабыҙ. Улар улай осрашырға теләмәй. Янтайып китәләр ҙә баралар. Шунан, бер яҡтан сығып, үҙҙәренсә ябырылалар.

– Етер! Мин дә белермен!

Кар ҙа бер регулды анламаҫка булды. Тик ҡайҙан башларға, ҡайҙан тотоп йәбешергә? Үҙе лә аптырай.

Ул арала гөп-гөп туптар. Ауыл эсендә ярыла. алдаттар йүгерешә, аттар кешнәй. Бына бит, уғыш ин улар менән. Ауылға тоҫҡап алғандар ҙа дөмбәҫләйҙәр.

Туҡталды. Ниңә шулай төнөн ябырылалар?

***

Бер офицер ҡулға төштө. Ҡырыҫ ине ул, асыулы.

– Мин ант иткәнмен.

Зарубин уны мыҫҡыллап көлдө.

– инең антың. Ни мәғәнә бар унда? уғыша ла белмәй егеҙ.

Офицер ғәрләнде, ләкин нимә ти ен.

– Беләбеҙ. еҙ бит регул буйынса уғышмай ығыҙ.

– Ә, регул... Әйҙә, яраҡкас, регул буйынса генералдар уғыш ын. Беҙ үҙебеҙсә. Ана, күр әтәбеҙ бит.

Башҡорттар улъя ала. Оҙон гаубица. Көбәгенә әкиәт йәнлеге төшөрөлгән. Шуға ҡарап, единорог, тиҙәр. Ҙур йәҙрәләр.

Был Овчинниковҡа бирелә. Бынан алыҫҡа атып була, бомба менән дә, картечь менән дә.

Бер бот йәҙрә, 10 казак та бар. Ә Овчинников менән Зарубиндың үҙ ҡануны ҡанун ине.

– Еңергә!

Улар өйләшә:

– Бүлеп-бүлеп алырға...

Эйе, бүре өйөрөн дә тәүҙә ике яҡҡа йыралар.

Шунан...

Тәүҙә туп уғышы.

Көндөҙ ҙә, төндә лә уғышып була. Нисек бар аң бар – әммә дошманды ҡыйрат, көсөн ҡаҡшат.

Хлопуша туптар килтергән.

Овчинников ҡуша:

– Санаға!

Ә Зарубин:

– Икәүҙе саңғыға.

Туптарын да улар бик тиҙ хәрәкәтләндерергә өйрәнеп алдылар. Юғи ә, тәгәрмәсле көйө ауыр.

Ә ҡышын ҡар бар. Юл тигеҙ. Бер нисә енең тәгәрмәсен ташлап, санаға нығыттылар. Ә аттар менә алмаҫлыҡ урынға илтергә тип үҙҙәре кейгәндән киңерәк саңғыға ҡуйҙылар. Тартып алалар ҙа китәләр. әйбәт бара.

Ә яуға күтәрелгәндәрҙең быларҙан да көслөрәк ҡоралдары бар ине.

Улар иҙҙермәй генә хат ебәрҙеләр. алдаттар уны бышын-бышын уҡыны. Кар ҙа, Фрейман да быны тиҙ генә иҙә алманы. Корпустың көсө тарҡалып бара ине инде.

***

Кар эштең мөшкөл икәнен аңланы.

Шул төндө подпоручик Ораҡовтан вестовой килде.

Башҡорт отряды яҡын ине. Анау ырттар артында ҡунырға туҡтағандар. Бынамын тигән кавалерия. Тик вестовойҙың әйтеүенә ҡарағанда, улар ҙа боларған ымаҡ. Эх, шунда, бына былары кеүек, төндә барып, ҡушып алғанда! Юҡ, ҡуҙғалыр ың, бындағылары уратып алыр. Үҙҙәре тиҙерәк кил ендәр туп-тура ошонда.

Шундай әмер биреп оҙатты ул вестовойҙы.

Көттө ул көн буйы.

Ә подпоручик Ораҡов 8 генә саҡрым тау артында ине. Ике яҡтан көслө туптар атты. Туп уғышы башланды... Ҡуйы төтөн күренә, бер яҡтың ғәскәре лә күренмәй. Михаил Ораҡов ҡасты... Көтә е юҡ.

Отряд та, хәбәр ҙә юҡ.

Вестовойҙы боласылар эләктереп алғайны.

Кар ишетә: Салауат команданы алып киткән.

– Кинйә Арыҫланов бутай, тигәйнем. Шулай булды ла. Унын яуызлығы, – ти.

Ҡараңғы төшкәс, Кар ғәскәрен йыйҙы. Бер йырындан шул яҡҡа үҙе йырып сығырға булды.

Иҙеркәй команда ы 1500 башҡорт. Бер туп ата. Сигнал. Ҡамайҙар.

Ҡуҙғалдылар. Йылға боҙо туңып етмәгәйне. Аша сығыу урыны я ап сыҡтылар. Шуны шәйләп ҡалғандар. Дәррәү килеп сыҡтылар. Сыуалыш китте. Кешеләр йылғала күренде. Сигенәләр ымаҡ. Рус крәҫтиәндәре ине. Хлопуша алып килгән завод кешеләре ярап ҡалды. алдаттар әсирлеккә бирелгән. Офицерҙары ла шунда. Был казактарҙы саҡ-саҡ кире ҡайтарып ебәрҙеләр.

Бер мең атлы башҡорт Карҙан китә Овчинниковҡа.

9/XI. Бикҡолға етәрәк Кар үҙе уратып алына.

Артиллерия атып ҡарай. Атып, өнөн тығалар. алдаттары ҡойолоп төшә. Бер рота әсир алына, 4 офицер, 200-ләп алдат.

Икенсе көндө ҡаты уғыш. Казактар ябырылды. Заводта эшләүселәре. Ҡамалғандар. Бындағы отрядтан бик аҙ ҡалған. Сигенәләр. Яйлы урында – атака. Кар, Фрейман, офицерҙар – ҡамауҙы өҙөргә итә. Атака.

Карҙың аты яралана, бергә ауа. Берәү уға кистән менән киҙәнә. Пистолен алып тоҫҡаны. Аталмай ҡалды. Тубыҡланды. Ҡылысын алып кистәнгә күтәргәйне... Башҡалар килеп ҡотҡарҙы.

Фрейман атта саба. Ҡаршыға – Зарубин, таный. Үҙҙәрен Яйыҡ буйында ҡанға батырған, хәҙер бында килгән.

Ул казактарға:

– Ана, Фрейман! Әйҙәгеҙ!

Теге ҡасты.

Бергә уҡмашып, йырып сыҡтылар. Артта ҡалдырған ғәскәр килә ине. Шулар менән ҡасалар. Ылауҙар шунда ҡалды. Ҡараңғы төшкәнсе арттан бер тотам ҡалмай 8 сәғәт буйы ҡыуҙылар.

Ҡалған ғәскәре менән Бөгөлмәгә әйләнеп китте Кар.

Бынан уң... был яҡтар карателдәрҙән таҙарынды, тыныс ҡалды. Яңынан-яңы отрядтар килеп, ҡушыла башланы. Бынан уң Пугачев даны тағы таралды. әр ерҙә йыр:

*Бүгәсәү батша бар, тиҙәр.*
*Буҫтау бишмәттәре тар, тиҙәр.*
*Яйыҡ та буйы яу ерҙәрен*
*Айҡап та йөрөгән шул, тиҙәр.*

Стәрлегә, Өфөгә, Бөгөлмәгә саҡлы.

Шунда Бөгөлмәлә генә тын ала алды генерал Кар.

...Шунда Бөгөлмәлә ул үҙенең еңелеүе хаҡында императрицаға, телә ә-теләмә ә лә, рапорт яҙып ебәрҙе. Мәжбүр ине.

Шунда ул тағы Кинйәне ҡә әрләне. Дәүләт Хәрби коллегия ы президенты З. Г. Чернышевҡа рапортта «Кинйә Арыҫланов тигән бер старшина» тип тағы иҫкә алды. Йәнә е, шул болартты. Шуның яуыз хаттары халыҡты боҙҙо. Хәҙер регуляр ғәскәргә унда үтеп кереү мөмкинлеге юҡ. Пугачевты ла, уға йәнәш баҫтырып Кинйә Арыҫлановты ла бығаулатырға вәғәҙә итеүен бөтөнләй оноткайны инде ул.

Бөгөлмәлә ул башын ауырыуға алды. Шунда үҙенең ярҙамсы ы генерал-майор Фрейманды ғәскәр башлығы итеп ҡалдырып, Петербургҡа китте. Шәфҡәтле императрица, ауырыу булыуын иҫәпкә алып, еңелеү ғәйебен ярлыҡауына ныҡ ышанды.

Был ваҡытта Екатерина батша Царское Селолағы дача ында ине. Генералды унда түгел, хатта ҡалаға ла... Эйе, яҡынайыуын ишеткәс, бөтөнләй Петербургҡа индермәү сара ын күрҙе.

өйләшеп тә торманы, вазифа ынан бушатты. уңыраҡ генералды үҙ крәҫтиәндәре юҡ итте...

16

Йөҙәй яғынан ғәскәр менән Афанасий Соколов-Хлопуша килә. Салауат унын төҫөнә ҡарап алды.

– Апанас был. әләүеккә бергә барҙыҡ.

Ул бында элегерәк килгән. Туптары, заводтан алып килгән кешеләре ҡатнашҡан.

Оҙаҡламай Овчинников, Зарубин Бикҡолға килеп етте. Еңеүле төҫ. еләү ен улар менән дә таныштыра. Ҡырмалы бейек бүрек кейгән. Өҫкө өлөшө ауып тора.

Таныштылар. Атлы казактар күп. Шат йөҙлө. Еңгәндәр. Көс күплеген күрә Салауат. Көслө умарта күсе гөжләүенән билдәле шул.

Әсирҙәр. алдаттар. Сәстәре ике толомлап үрелгән. Тик улар ҙа төрлөсә. Былар арҡаға төшөрмәй, урап ҡуя. Быларҙы элек тә күргән бар. Әле ҡыҙыҡ.

– Әбей батша алдаттарын бисәләр төҫөнә әүерәткән.

Шулай ҙа сәйер. Монголдар ғына шулай. Ә гренадерҙар өс мөйөшлө эшләпәле. Өшөгәндәр. Уларының сәкмәнгә терәлгән ҙур башлыҡтары бар, йылыраҡ. Офицерҙар ҙа бар.

Былар ара ындағы башҡорттар, ҡолаҡсын ҡолаҡтарын әлпәңләтеп, ис ҡаршылыҡ ыҙ ҡушылғандар.

Ҡорал, туптар, аҙыҡ-түлек тейәлгән ылауҙар уҙыла.

Бөтә ен туплап, Ырымбурға табан оҙаталар.

Баш атаман Овчинников еңеүле хәбәр менән Бердаға йүнәлде.

Унын артынан ылауҙар килә. Улар күп: үҙҙәренеке лә, Карҙан улъя итеп алынғандар ҙа күп. Бөтә туптары, ҡоралдары.

Ә ғәскәргә ошонда Бикҡол, Имәнғол ауылында ял итергә рөхсәт итеп, Овчин-

ников улар янына Зарубин менəн Афанасий Соколов-Хлопушаны ҡалдырҙы. Салауат команда ы ла ошонда. Овчинников шунда уҡ бөтə башҡорт əсирҙəрен уға ҡушты ла, алдаттарҙың үҙҙəре телəгəнен казакка яҙырға, тине.

Ҡурай уйнай, йырлайҙар, бейейҙəр.

Ике ауылда ла тантана.

Тирə-яҡ геүлəп тора. Өйҙəрҙə йылы ҡунаҡ итəлəр. Бикҡол менəн Имəнғол арасында йөрөп торалар.

Бөтөнлəй икенсе донъя тиер ең.

Тантана итəлəр. Берəүҙəр Йөҙəйҙəге уғышты хəтерлəй, башҡорттар иртəнге тартышты иҫкə төшөрə. Салауатты маҡтайҙар, нисек йөрəге етте, тиҙəр.

Салауаттың үҙ алдында ла барҙы ундай үҙ бер өйҙə. Унда байтаҡ ҡына кеше бар ине. Рəхмəт тə. Сағыр ҙа. Истыбай ҙа.

Ашап эстелəр. Бер арыҡ уйылды. Сəй эстелəр. Өйҙə көлсə беште.

Сағыр Ораҡовты иҫенə төшөрҙө. Ҡулдан ысҡындырыуға үкенə. Рəхмəт Əлибайҙы оҡшатманы.

– Ҡара аҡал булғың килəме, тисе.

Уны ы ла инде, кис тирмəлə ултырғанда əйтə ене ҡайҙа ғына ысҡындырҙы. Элекке яу башлыҡтарының фажиғəле яҙмыштары менəн янағаны Салауаттың үҙенең дə сəменə тейгəйне.

– Халыҡҡа ирек яуларға телəмəйем, тине əле ул.

Быуайы уға исем ҡушыу əхүəлен белə ине.

– Ул – Алдар батыр ҡонон алырға тыуған кеше. Юлай кейəү шулай ҡушты. Алдарбайҙың бер азаматы Салауаттан алды исемен.

Онотмағандар.

– Ҡон да алырбыҙ, ирек тə яуларбыҙ. Гел еңелеү булмай. Беҙ хəҙер күмəк. Көллө халыҡ ялпы ы бергə. Ҡара аҡал, Батырша заманы түгел хəҙер. Бөтəбеҙгə үҙебеҙҙең батшабыҙ бар. Беҙҙең батша ул.

Истыбай бышылдап орай:

– Ниңə бында, Бүгəсəү, тиҙəр?

Салауат:

– Мин ишетмəнем.

– инəн ҡурҡаларҙыр.

Көлдө:

– Мин өрəкме ни?

– Юҡ, ин атаман... Салауат батыр бит.

– Ул Пугачев тигəнеме?.. Петр Федоровичтың ҡасып йөрөгəндəге исеме. Шул арҡала батшабикəнең анаттарын шулай алдатып йөрөгəн.

– ... Нисек бул а ла беҙҙеке инде.

– Беҙҙеке! – Салауат уның арҡа ынан ҡаҡты.

Салауат үҙенең кешелəрен ҡарарға сыҡҡанда, əйҙə, батша ярандарын күр ендəр тигəндəй, Ба ау менəн Истыбайҙы ла эйəртте. Урынлашҡандар. Шат. Əлибай йөрөй ҡуҡырайып. елəү ен шунда бит.

Əлибай:

– Бына килдем, – тиергə уйлай.

өйлəшеп ултырғанда ат тояҡтары тауышы ишетелде. өйлəшкəн тауыштар. Ата ынан сапҡын килгəндер, тип уйлағайнылар. елəү ен түр башынан ырғып төштө.

– Собханалла. Ошо ваҡытта!..

Ул сығып өлгөрмəне, ишек үҙе асылды, атылып берəү... Салауат, ниҙер иҙенеп, көлөм өрəне. Инеүсе ирҙəрсə тун, ҡолаҡсын кей ə лə, ир кешегə оҡшамаған.

– елəү ен! Мин килдем, – тип ыйынды.

– ин... Буранбикә антый...
– Уф, арыным.
– Шулай йөрөйҙәрме? Үҙем барыр инем.
– Әй, ин.
– Эйе, ти... ин ул...
ағынып, эҙләп табып, барып күрәм, тип ул ҡайны ын да аптыратып бөткәйне.
– Мине еләү енем саҡыра, – тип.
Хәбәр булмаҫын белә Кинйә.
– Төшөндә күрҙеңме?
– Йөрәгем иҙә. Мин беләм уны.
– Бар, – тине. Кешеләр биреп оҙатты.
Ә еләү ен менән Ҡотлогилде шул команда менән тороп ҡалды. Улар, кире барып, Торатау менән әләүек буйында ҡалған ике команданы алып килергә булдылар.
Хәҙер инде ағайып торманылар.
Воскресен заводынан бер күлемлек юл үтеп, Юлдаш сотник ауылына туҡтанылар. Унда ҡунаҡ булалар. Ә күршеләге Аллаҡай улы Теләүембәтте Көҫәпҡолға ебәрҙеләр.
Көҫәпҡол ауылына төштөләр, еләү ен ғәскәрҙе урынлаштыра, ҡаршылыҡ юҡ. Берәүҙә туҡтайҙар. еләү ен менән Буранбикә ҡунаҡта ултырған кеүектәр. Көҫәпҡол килде.
Көҫәпҡолды саҡырып, Салауаттың ҡушылыуын, Михаил Ораҡовтың ҡасыуын әйттеләр. Быны ын үҙе лә белә. Бында ҡалған ата ы ла күҙ яҙҙырҙы.
Әйтер ең, әле яңыраҡ Көҫәпҡол Ораҡовҡа ярап йөрөмәгән дә еләү ен төркөмөнә уҡталып-уҡталып ҡарамаған.
– Салауат йәш кенә башы менән аңлағанды, хәҙер аңлаған ыңдыр, Көҫәпҡол йортауай, – тине еләү ен. – Йый алайыңды.
айран да үҙенекеләрен йыйып, Петр батшаға бағынырға алып китте.
Шулай итеп, Хлопуша Воскресен, Әүжән яҡтарындағы завод ауылдарында Петр Өсөнсө тәртибен урынлаштырҙы. Стәрлетамаҡта, уның тирә-йүнендә йыйылған губернатор ғәскәрен, ис уйламайса, Салауат менән еләү ен таратты. Ағиҙелдең ул яғынан – Салауат, уң яҡтан еләү ен менән Ҡотлогилде бөтә башҡорт сиреүҙәрен әйҙәп Бердаға алып киттеләр.
Туғай тынысланып ҡалды. Был хәл хаҡында рапорттар алғас, губернатор үҙенүҙе ҡайҙа ҡуйырға белмәй өҙгөләнде. Генерал Кар ҡыйралды, көткән башҡорттар дошман яғына сыҡты. Бынан уң башҡорттарҙан да, мишәрҙәрҙән дә, бындағы халыҡтың бары ынан да ғәскәр йыйыуҙы туҡтатты. Ә инде йыйылып та, бығаса оҙатылып өлгөрмәгән командаларҙы, үҙҙәренә яҡын крепостарға алып, шунда файҙаланырға ҡушты.

***

Салауат китә Бикҡолдан.
Юл буйы ылауҙар. Ишле генә улъя алынған. Туптар. Тоҡ-тоҡ он. Түшкә-түшкә ит. Ҡаптарға алынған оло.
Салауаттарҙы Кинйә, Пугачев ҡаршы ала. Улар шат. Еңеү. Күпме ғәскәр.
Хәҙер киләләр. Батшаға барабыҙ, тиҙәр. Үҙҙәре, Пугачев, тиҙәр.

*Бүгәсәүҙе лә, шул, күр әңсе,*
*Алдарынан йүгереп үт әңсе.*
*Уҡ- аҙағың алып, толпар менән*
*Бүгәс яуҙарына йөрө әңсе.*

Халыҡтың теләгәне. Ул уның теләгенә әүерелде. Рустар ҙа Пугачев ти.
– Ҡайҙа бара ығыҙ? – тип үҙе ораны ул.

– Емельянушкаға...

Пугачев асыуланманы. Көлмәне.

– Ә... Ана, бар ул... Емеля!

Емеля шунда. Гел уның янында була. Килеп етте.

– Атаҡай батша... Мин бында...

Тегеләр, аңлап, аяғына йығылдылар.

Салауат отряды үтеп китә. Кинйә аттан төшә. Пугач та аттан төшә. Салауат та аттан төштө.

– Бына, батша. Башҡорттар, мишәрҙәр алып килдем.

– Молодец!.. Миңә хеҙмәт ит.

– Йәнебеҙ-тәнебеҙ менән! Шулай бит.

– Шулай.

Бүректәр ауаға сөйөлдө. өңгөләр юғары күтәрелде.

Шатлыҡ ине...

Әлибайға ғына... Ул иҙҙермәне... Ә үҙе алып килә алмауы сәменә тейҙе... Шулай ҙа Салауатты батша палата ына алып кергәндә, уны ҡалдырманылар. Уны, Кинйә әйтеүе буйынса, Нуғай юлы атаманы итте.

Кинйә янында Алпарҙы күргәйне. Элекке ялсы ы, унан ҡасҡын булды. Әле шулар тубына үҙе килде. Ана бит, Кинйәнең атын тотоп тора...

Әлибай уға табан боролдо. Үҙенә бер үҙ әйткәнсе, атын байҡап алды. Әллә аттар илткәнгә, атҡанғамы ғәҙәте шундай. Кешенең йөҙөнә ҡарауҙан иң элек атына ҡарай.

– Атың мәҙәк. Ҡырағай. Тарпанмы? Йүнлерәгән тап.

– Хоҙай быны ынан айырма ын. Йөҙ атыңа бере ен бирмәйем.

Кинйә сыҡты. Бәй, икенсе е уныҡы икән.

– Аттарығыҙ оҡшаған.

– Бер бейәнән.

Әлибайҙы бүтәне борсой. Әлибай Кинйә менән ҡасҡындары ара ында.

*(Дауамы бар.)*

---

*Төҙәтмә*

*Журналыбыҙҙың быйылғы 3-сө анында ("Әҙәби мираҫ" рубрика ындағы Ғәли Ибра имовтың "Кинйә" романы) Кинйә Арыҫлановҡа Көйөргәҙе район үҙәге Ермолаевола ҡуйылған әйкәлдең фото ын биргәйнек. Үкенескә күрә, 71-се биттәге үрәт аҫты тексында хата ебәрелгән. Ғәмәлдә Ермолаево ауылының район хакимиәте бина ы эргә ендәге әйкәлдең скульпторы – Өлфәт Ҡобағошов, проект авторы әм меценаты – Марс Юлбарисов.*

*Редакция әйкәл авторҙарынан әм батырҙың яҡташтарынан ғәфү үтенә...*

## ҠАЛА ФАТИРЫ – АТАЙ НИГЕҘЕ ТҮГЕЛ

80-се йылдар урталарында Советтар Союзы етәкселәренең 2000 йылға тиклем әр ғаиләне фатир менән тәьмин итергә вәғәҙә биреүен күпселек, бәлки, хәтерләмәйҙер. Йәштәр и ә быны белмәй. Буш фатирҙарҙы мохтаж кешеләргә етерлек дәрәжәлә өләшергә хыялланған дәүләттең хәҙер үҙе лә юҡ. Хыял ҡалды, ләкин уны тормошҡа ашырыуҙа бөгөнгө дәүләт ярҙам итергә йыйынмай, тимәк, үҙ көсөңә ышанырға ҡала. Дәүләт и ә, хыялың ысынбарлыҡҡа әүерелә ҡал а, күсмәҫ мөлкәттән алым алып тороусы ролен үтәүҙән баш тартмай.

Күктән бер тоҡ аҡса төш ә ни ҡайғы — барҙың да йәнең теләгән фатирҙы атып алдың. Ә ғәмәлдә торлаҡ хаҡтары Рәсәйҙә ҡот осорлоҡ. Өфөлә бер квадрат метр 2008 йыл аҙағына 64 мең умға барып етте. “Торлаҡ хаҡы артыуҙан туҡтаны!”, “Күсмәҫ мөлкәт баҙарында хаҡтарҙың төшөүе көтөлә!” тигән шапырыныулы хәбәрҙәр әлеге хәлдә бер ни ҙә аңлатмай. Ғәмәлдә хаҡтарҙы риэлторҙар тараткан реклама, сәйәсмәндәрҙең юғары трибуналарҙан өйләгән телмәре түгел, ә иҡтисадтың ҡаты законы — ихтыяж әм тәкдим билдәләй. Шулай ҙа был үтә тәрән проблеманы дәүләт кимәлендә хәл итергә тырышыу дауам иткәнгә оҡшай. “Арзан әм уңайлы торлаҡ” тигән милли проект — шулар рәтендә. Уның бер нисә йыллыҡ эш өҙөмтә е шул булды: банктар, күпләп ипотека кредиты таратып, торлаҡҡа ихтыяжды ҡырҡа арттырҙы, әм квадрат метрҙың хаҡы тағы ла юғарыраҡ күтәрелде. Ипотеканы әүҙем өләшкән финанс ойошмалары ныҡ ҡына емәйҙе, көтөлмәгәндә ябырылған финанс кризисы шарттарында улар үҙҙәре өләшкән кредиттарҙы нисек йыйып алырға белмәй йөҙәй.

Шулай итеп, торлаҡ атып алыу хыялы йәнә бер баҫҡысҡа бейегәйҙе, алыҫлашты. Ләкин уны ы — бер хәл. Әгәр ҙә фатир хаҡы арзанайған хәлдә лә уны атып алырға аҡсаң юҡ, ә ипотека кредиты өсөн эш хаҡың аҙ булып, банкирҙарҙы ҡәнәғәтләндермәй икән, ни эшләргә? Ауыл йәштәре өсөн туған-тыумаса ы ярҙамында бүрәнә өйөп инергә мөмкинлек ҡала-ҡалыуын, ләкин был юлы ла күптәр өсөн өй алыуҙан да мө имерәк булған оло хәстәр хәл ителмәй: эш мәсьәлә е. Хеҙмәт баҙарында уртаса бул а ла ба алан- ған өнәрең, тотороҡло эш хаҡың юҡ икән, ауыл ерендә лә заманса уңайлыҡтары булған йортҡа хужа булыу икеле. Элекке колхоз-совхоздар хәҙер күп урында тарҡалды, булғандарында ла хеҙмәт хаҡы тауарлата ғына бирелә. Ауылдарҙа иҫән ҡалған коллектив хужалыҡтарҙа яҡын киләсәктә эшләргә кеше лә ҡалмаҫ, моғайын. Уның ҡарауы, Өфө кеүек ҙур ҡалаларҙа ауылдан килгән арзан эш ҡулдары арта. Бигерәк тә төҙөлөш объекттарында, сөнки уларҙа “алтын ҡулдар” талап ителмәй.

Ләкин тағы әлеге проблема тыуа: ҡайҙа йәшәргә, яңы урында торлаҡ мәсьәлә ен нисек хәл итергә? Ирҙәре ҡалала эшләгән, ҡатыны бала-

сағалары менән ауылда көн күргән ғаиләләр хәҙер бихисап, әм был, әлбиттә, ыңғай күренеш түгел. Ә ҡалалағы “хрущевка”ларҙа ғаиләләре ҙурайған, балалары “башлы-күҙле” булған, ятаҡтарҙа көн күргән, сит кешегә фатирға төшкән кешеләргә нисек көн итергә? Улар ауылға күсеп китә алмай, сөнки унда тамаҡ аҫырарлыҡ эш хаҡы ла ала алмаясаҡтар.

Тап шуның өсөн дә ҡала ерендә лә йортто үҙең алыу ысулы, йәғни шәхси торлаҡ төҙөлөшө йылдан-йыл әүҙемләшә. Ҡалала эшләүселәрҙең уртаса хеҙмәт хаҡы фатир атып алырға, шул иҫәптән ипотекаға ла, етмәй. Әммә күпселек өсөн шәхси йорт алырға мөмкинлек бар, әм был — үҙ йортоңдо ала башлау өсөн төп шарт. Төҙөлөш материалдары атып алыу, ташыу ҙур ҡалаларҙа арзаныраҡ, эш ҡулдары ла етерлек.

Иҫәптән алып ташлап булмаған тағы ла бер сәбәп бар: эш хаҡы ипотекаға фатир алырға етмәгән ғаиләләр фатирҙы ҡуртымға алырға мәжбүр. Өфөлә, мәҫәлән, бының өсөн торлаҡ хужа ына, фатирҙың ҙурлығына әм уңайлыҡтарына ҡарап, айына 8 меңдән алып 15 мең умға саҡлы түләргә кәрәк. Әлбиттә, йылдар буйы түлә эң дә, был фатирҙың бер ҡарышы ла инеке булмаясаҡ. Әгәр ҙә шул аҡсаны шәхси йорт төҙөүгә тотон аң, үҙ торлағың аҡрынлап бул а ла “үҫә” бармаҫ инеме ни? Бер ҡара аң, ҡуртым аҡса ына ай айын күпме төҙөлөш материалы алырға була...

Ҙур ҡалаға яҡын урында шәхси торлаҡ йорт алыу йәки алырға хыялланыу йәмәғәтселектең аңына торған айын нығыраҡ еңә. Сөнки ҡала фатиры менән сағыштырғанда уның өҫтөнлөктәре ҙур:

1) төҙөлөштөң үҙҡиммәте, йәғни квадрат метр хаҡы күп ҡатлы йортта фатир атып алыуға киткән сығымдарҙан бермә-бер арзан; 2) шәхси торлаҡ тәғәйен ғаиләнең ихтыяжын әм зауығын иҫәпкә алып төҙөлә; 3) ул ғаилә өсөн күпкә уңайлыраҡ йәшәү шарттары булдырырға әләтле; 4) ҙур ҡаланың баҙар ихтыяждары үҙ йортоң янында ғаилә бизнесы менән шөғөлләнеү мөмкинлеге лә бирә. Шәхси йорттоң башҡа өҫтөнлөктәре лә аҙ түгел: йәшелсә-емеш үҫтереү; балаларҙы хеҙмәткә өйрәтеү, ғаилә ҙурайғанда өҫтәмә бүлмәләр төҙөү .б.

Шуға күрә лә алдынғы илдәрҙә шәхси торлаҡ төҙөлөшө элек-электән алға киткән. Матбуғатта хәбәр ителеүенсә, АҠШ ҡалалары нигеҙҙә шәхси торлаҡтан тора. Үҙәк телевидениела былтыр В. Познер менән И. Ургант алып барған “Бер ҡатлы йортло Америка” тигән тапшырыуҙарҙы күптәр онотмағандыр әле. Донъяның иң ҙур ҡалаларының бере е булған Нью-Йорк биләмә енең 90 проценты шәхси торлаҡ йорттарҙан тора! Ҡала үҙәгендәге күп ҡатлы йорттарҙағы фатирҙы нигеҙҙә эш осорона ҡуртымға алалар. Эшләгән урынға яҡын булғаны өсөн генә. Ә үҙҙәренә лайыҡлы йәшәү шарттары, американдар фекеренсә, коттеджд арҙа ғына.

Ә беҙҙең илдә ҡала ерендә шәхси йорттар алырға мөмкинлек бирелмәйенсә, совет граждандары ҡаҙна фатирын тиҫтәләрсә йылдар көтөргә мәжбүр булды. Был торлаҡты алыуға ғаилә лә ҙурайып өлгөрә әм тағы сиратҡа баҫырға тура килә. Күрә ең, кеше хосуси милексегә әйләнеп киткәс, уны тыңлатып булмаҫ, тип ҡурҡҡандарҙыр, ә сиратта тороусы и ә башын баҫып ҡына эшләй. Матбуғатта эшләүселәр белә: элек редакцияларға килгән ялыуҙарҙың күбе е фатирға сираттың оҙаҡҡа уҙылыуы, уны бүлеүҙәге ғәҙел еҙлектәргә бәйле була торғайны. Ә бит шул уҡ кешеләр, шәхси йорт төҙөргә форсат бирел ә, торлаҡ мәсьәлә ен күптән хәл иткән булыр ине. Үҙенең бер нисә быуынына етерлек итеп.

Хәйер, тәүәккәл кешеләр, ирәкләп бул а ла, элек тә осрай ине. Өфөнөң, мәҫәлән, Нижегородка биҫтә ендә туған-тыумаса ының ағас йортона

6*

төкәтмә эшләп, шунда ғаиләе менән йәшәй башлаусылар ҙа аҙ булманы. уңынан улар үҙ йорттарын законлаштырыу, пропискаға рөхсәт алыу өсөн йылдар буйы власть туп аларын тапаны. Нижегородка урамдары буйлап үткәндә әле лә күренә: бер-бере енә ылашып тигәндәй урынлашҡан бәләкәй йорттар бихисап. Был — Совет власының "хеҙмәтсәндәрҙең йәшәү кимәлен тайпылыш ыҙ күтәреү" өҙөмтә е. Йорт ҡынамы ни, хатта дачаларҙа баҡса йортон ерҙән алып өй ҡыйығының осона саҡлы алты метрҙан да арттырмаҫҡа, теплица эшләмәҫкә тигән әм башҡа шундай мәғәнәеҙ "синфи көрәш алымдары" күп булды.

Хәҙер заман үҙгәрҙе. Әгәр ҙә 1980 йылда Башҡортостанда төҙөлгән бөтә торлаҡтың 19, 1990 йылда 21 проценты шәхси торлаҡҡа тура кил ә, 2008 йылдың урта ына ул 62 процентҡа етте. Социаль тикшеренеүҙәр күр әтеүенсә, халыҡтың 80 проценты ҡала эргә ендәге йорттарҙа йәшәргә теләр ине. Ауылда ла, ҡала эсендә лә түгел, ә ҡала янында! Сөнки бында йәшәү күпкә уңайлыраҡ. Шуға ла 1980 йылда бөтә шәхси торлаҡ төҙөлөшөнөң 10 проценты ғына ҡала кеше енә тура кил ә, 2008 йыл уның өлөшө 49 процентҡа барып етте. Файҙаланыуға тапшырыу тура ындағы акт алмаған йорттар әле ул иҫәпкә инмәй. Иғтибарлабыраҡ ҡара аң, әҙер булмаған әм шуға иҫәпкә инмәгән йорттар аны тағы ла күберәк. Өфө тирә ендә был айырыуса ныҡ күҙгә ташлана. Баш ҡала янындағы Чесноковка, Зубово, Таптыҡ, Мокроусово, Алексеевка кеүек ауылдар бынан 15–20 йылдар элек кенә ихаталарын кесерткән баҫып бөткән әм нигеҙҙә ҡарт-ҡоро ғына йәшәгән иҫке йорттарҙан ғибәрәт ине. Хәҙер шул ваҡыттарҙа был тирәнән күсенеп киткән кешеләр был урындарҙы танымаясаҡ, улар заманса ҡасабаларға әйләнгән әм бер-бере е менән тоташып бөткән тиерлек. Ә төҙөлөп бөтмәй ултырған йорттар шуны аңлата: тимәк, хужалары уларҙы хәләл көсө менән төҙөй. Урлашып алған аҡсаға төҙөт ә йәки аҡса тоҡсайы бул а, торлағын бер нисә тапҡырға ҙурыраҡ итеп әллә ҡасан алып ҡуйыр ине.

Коттедж тура ында үҙ сыҡ а, нишләптер күптәр уны урта быуаттарҙағы замок рәүешендәге күккә олғашҡан ҡәлғә кеүек күҙ алдына килтерә. Был, моғайын да,— Рәсәйҙең төҫлө журналдары тыуҙырған ҡалып, сөнки улар сереп байыған бизнесмендар алдырған арайҙар әм виллалар тура ында ауыҙ ыуын ҡоротоп яҙған мәҡәләләрҙе йыш баҫтыра бит. Ысынында и ә "коттедж" (инглиз теленән cottage, тәүге мәғәнә ендә — "крәҫтиән йорто") тирә-яғында ер участка ы булған бер квартиралы шәхси йортто аңлата. Хәҙергесә әйт әк, ауыл йорто менән ҡала фатирын бергә ҡушыуҙан килеп сыҡҡан торлаҡ була.

"Ауыл йорто" тигәндең мәғәнәе аңлашылалыр. Баҡсасылыҡ әм йәшелсәселек менән шөғөлләнеү, ваҡ мал йәки ҡош-ҡорт аҫырау өсөн уңдырышлы ере, ҡаралты ы булған шарттарҙы эсенә ала ул. Ә ҡала фатиры — йәшәү уңайлыҡтары ҡаласа булған, йәғни әр төрлө коммуникациялар менән тәьмин ителгән йорт. Хәҙер инженерлыҡ селтәре үткәреү ауыл ерендә лә киң таралған, сөнки егәрле кешеләр заманса йәшәргә, булған уңайлыҡтарҙан тулыраҡ файҙаланырға ынтыла. Баҙарҙа йорт коммуникациялары өсөн хәҙер нимәләр генә атылмай. Тик ауыл ерендә, әйткәнемсә, теләк менән мөмкинлек (йәғни аҡсалата килем) күпселек өсөн тура килеп бөтмәй.

Ләкин ҡала эргә ендә, айырыуса ҙур ҡала янында коттедж хужа ы булырға ынтылыу юлында ла ҡаршылыҡтар байтаҡ. Беренсенән, әлбиттә, төҙөлөш өсөн ер участка ы алыу мәсьәлә е. "Башҡортостан Республика ында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тура ында"ғы законда былай тип яҙылған: "Торлаҡҡа мохтажлыҡ буйынса сиратта тороусы граждандарға шәхси тор-

лаҡ төҙөлөшө өсөн ер участка ы бер тапҡыр бушлай бирелә". Ғәмәлдә и ә Өфө кеүек ҙур ҡала эргә ендә ер участка ын бушлай алып ҡарағыҙ! Ҡала йәки район хакимиәтенең яуабы бер: "Буш урын юҡ". Әллә күпме юрист аҫрап та, эре төҙөлөш фирмалары ла объект өсөн ер алыуҙа ҡыйынлыҡтар кисерә икән, айырым граждандарға ни ҡала? Шул уҡ ваҡытта шәхси милеккә булған буш ер участкалары менән атыу итеү киңәйгәндән-киңәйә. Бының буш үҙ түгеллегенә ышаныу өсөн "Из рук в руки" әм башҡа гәзиттәрҙәге иғландарға күҙ алыу ҙа етә. 2008 йылдың декабренә Өфө эргә ендәге 10-20 сутый ергә (бер ҡаҙыҡ та ҡағылмаған буш урынға!) 500 меңдән алып 2 миллион умға саҡлы орайҙар ине. Хужалары был ерҙе ҡайҙан әм ниндәй юлдар менән алғандыр — уны ы, тәбиғи, "коммерция сере".

Икенсенән, ер участка ын әм төҙөлөштө "рәсмиләштереү" өсөн әллә ни саҡлы документтар юлларға кәрәк. Бер белешмә өсөн район йәки ҡала ер ресурстары әм ер төҙөлөшө комитетында (халыҡса әйткәндә, райкомзем) иртүк сиратҡа баҫырға, уңынан ошо белешмәгә түләү өсөн банкка барырға (унда ла сират), квитанцияны тотоп йәнә райкомземдағы "тәҙрә"гә килергә... Бер белешмә өсөн өс тапҡыр сиратта торорға кәрәк! Ә белешмәләрҙең аны ике-өс тиҫтәләп. Ниндәй белешмәләр юллау мәсьәлә ендә буталмаҫ өсөн башта уҡ уларҙың исемлеген тотторалар. Уны ы "бегунок" тип атала (исеме дөрөҫ уйлап табылған, сөнки белешмәләр юллап кабинеттар буйлап йүгерергә кәрәк. Халыҡҡа шундай ҙа мыҫҡыллы ҡараш донъяның тағы берәй илендә бармы икән!? — **Р.К.**). Шулай ҙа Дәүләт теркәү палата ы менән сағыштырғанда былары әле сүп кенә. Бына унда исма ам мәшхәр... Бөтә был документтар өсөн эш ваҡытында сираттарҙа торорға, райкомземдың ер үлсәүсе ен үҙ транспортыңда алып барырға .б. мәжбүр ең. Шуға ҡай ы бер кешеләр риэлтор ялларға тырыша, тик уларға, тәбиғи, мул ғына түләргә кәрәк. Үтә лә мул итеп, сөнки риэлтор был аҡсаның бер өлөшөн райкомзем әм райархитектура чиновниктарына "төртөргә" тейеш буласаҡ.

Өсөнсөнән, уңғы йылдар күр этеүенсә, шәхси торлаҡ төҙөлөшө дәүләт өсөн таныш булмаған яңы эшмәкәрлек (?) булып сыҡты. Крәҫтиәндең ағастан бурап алған өйөн соланы менән бергә иҫәпкә алыу ан ат күрен ә лә, шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыу, уны дәртләндереү кеүек бурыс ауырыраҡ. Рәсәй ҡалаларының генераль пландарында, мәҫәлән, шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн майҙансыҡтар бүлеү, уларҙы инженер селтәрҙәре менән тәьмин итеү кеүек мәсьәләләр бөтөнләй ҡаралманы әм уның буйынса тәжрибә лә юҡ.

РФ Президенты Дмитрий Медведев Хөкүмәт Рәйесенең беренсе урынбаҫары булып эшләгәндә былай тигәйне: "Беҙ үҙ торлаҡ мәсьәлә ен берлектәге көс менән хәл итергә ынтылған кешеләрҙең башланғысына юл асырға, шулай уҡ ундайҙарға дәүләт әм урындағы властың әр яҡлап ярҙам итеүенә өлгәшергә теләйбеҙ".

Бында "теләйбеҙ" тигән үҙҙе ике төрлө аңларға була: теләү (йәғни хыял) әм ысынлап бойомға ашырыу. Ҡай ыны ы булыр — киләсәктә күрербеҙ.

**Рәшит КӘЛИМУЛЛИН.**

# УЛАР БЕРЕНСЕЛӘР БУЛДЫ

Был яҙмалар Бәрҙәш-Абдулла ауылында тыуып, унда бик оҙаҡ ғүмер иткән, үҙҙәренең оло быуын туғандарынан ишеткәндәрен өйләгән Йәғәфәр Фәтхелисламов менән уның ҡыҙы Хәмдиә Хисаметдинованан, архивтарҙан алынған материалдарға нигеҙләнеп барлыҡҡа килде. Быйыл Бәрҙәш ауылына нигеҙ алыныуға 290 йыл тула. Был ауыл 1773–1775 йылдарҙағы Е. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр уғышында күптәрҙең Салауат яуына ҡушылып китеүе әм башҡа сәбәптәр арҡа ында тарҡала. Ә ул ауыл урынына 1834–1836 йылдарҙа яңынан нигеҙ алыусы – Ҡариҙел йылға ының уң яҡ ярында Иҫке Хәлил волосы Ташмәсет-Туйыш ауылында йәшәгән Абдулла тигән кеше. Был тирәләге урман, унар ерҙәрен аҡлап ҡалыу өсөн Туйыш ҡарт, волость старшина ы менән өйләшеп, ике улы Туйымбаян менән Абдулланы, Байҡы буйы ауылдарынан 50-ләп йәш кешене ауыл ҡороп ултырырға саҡыра. Улар тәүҙә Торасыҡ ҡалҡыулығы итәгендә землянкалар ҡаҙып йәшәй, уңынан түбәнгә кескәй генә йорттар алып урынлаша. Йылға балыҡҡа, бигерәк тә бәрҙегә, бағрыға бай була. Абдулла шуға күрә ауылға Бәрҙәш (бәрҙе ашы) исемен бирә лә инде. Ул үлгәндән уң ауыл Абдулла тип йөрөтөлә башлай.

Батша властары башҡорт ерҙәренә Урта Рәсәйҙең ашлыҡ уңмаған Орёл, Калуга, Смоленск яҡтарынан урыҫ, муҡшы крәҫтиәндәрен күсереп ултырта башлай. Екатерина Икенсенең 1736 йылғы Указынан уң килмешәктәр ағымы бигерәк тә көсәйә. Ҡариҙел буйлап Шәфиев, Абыз, Быяла заводы, Берҙем, Ҡайыр, Таҙтүбә, Бәрҙәш-Абдулла, Курбатово, Ильинка, Тубитиевка, Ҡорайыш ауылдары барлыҡҡа килә. Йылғаның ул ярында Манаев, Ратский быяла заводы төҙөүселәр әм башҡа әллә кемдәр урман-ерҙәрҙе бушҡа тиерлек алып, аҙ-маҙ хаҡ биргән булып, хужа булып китә. Абдулла ауылында Иван Горбунов, Базунов, Дмитрий Никитин кеүек сауҙагәрҙәр магазин төҙөп сауҙа иткән. Горбунов Бәрҙәш йылға ын быуып, тирмән ҡора, таҡта ярҙырыу өсөн рамалар ҡуйҙыра. Үҙенә ҙур йорт, ҡура, келәттәр төҙөтә, халыҡтан ашлыҡ йыя әм уны ҡиммәт хаҡҡа хөкүмәткә ата. Башҡорт, татарҙарҙан Әбүбәкер Ғүмәров, Риян Бикиев, Сәйетғәле исемле кешеләр ҙә сауҙа менән шөғөлләнә. Сауҙагәр Дмитрий баркастар я ата, уларға тейәп оҙатыу өсөн йыуғыс, туғын, арба, саналар эшләтә, оҫтаханалар алдыра. Шәйех ҡарт ғаилә е менән кирбес уға. Халыҡ яйлап Йүрүҙән буйы төбәктәрен киңәйтә, арыш, бойҙай, оло, тары, ҡарабойҙай, етен .б. игә. Ҡышын ирҙәр урмансылыҡ, аусылыҡ өнәренә күсә.

Сауҙагәр Манаев Магинск биҫтә енә нигеҙ ала. Үҙенә ошонда бик матур, ҙур йорт төҙөтә. Оло Бәрҙәш йылға ын быуҙырып, тирмән, таҡта ярыу заводы ҡора. Унда етештерелгән продукцияны баркастарға тейәп йылғанан түбәнгә төшөрөп аталар.

Минең атайым Сиражетдин Хисаметдинов әсәйебеҙ Хәнифәне Иҫке Бағазы ауылынан килен итеп төшөрөп, ике е лә Абдулла ауылында ғүмер итеп, шуның зыяратына ерләнде. Беҙ ғаиләлә дүрт ир әм ике ҡыҙ бала тәрбиәләндек. Дүртебеҙ ҙә Бөйөк Ватан уғышында ҡатнашып, оло ағайыбыҙ Мөхәмәтғата Сталинград өсөн алышта әләк булып ҡалды. Фазыл ағайыбыҙ, фронтта алған яраларынан йүнәлеп китә алмайынса, 1945 йылдың майында уҡ гүр эйә е булды.

Абдулла Ҡолтан тау, Ҡаршы тау, Сүлмәк тау, Биләм тау араларынан аҡҡан Бәрҙәш йылға ының Йүрүҙәнгә ҡойған урынында ултырған ике мәсетле ҙур ауыл була. Йәйен йылға буйындағы йәшел хәтфә кеүек йәйелеп ятҡан, сәскәләргә күмелгән болондар, уй ыу урындарҙа муйыл сәскәләренә сумған әрәмәлектәр, ундағы хуш еҫле ауа йәшәүгә көс-дәрт биреп торор булды. Әммә 1960 йылда Павловка ГЭС-ы төҙөлөп, ҙур ыу аҡлағыс хасил булғас, Йүрүҙән йылға ы буйын төйәк иткән байтаҡ ауылдар халҡы, шул иҫәптән Абдулланыҡылар, ҙа ҡалҡыуыраҡ урынға күсенергә мәжбүр булды.

Атайым бик тырыш урта хәлле крәҫтиән ине. Туғандары ярҙамында ул ауылдың "Әрәмә аръяғы" тигән урынында алты мөйөшлө өй бөтөрөп инә. Тик атайыма унда оҙаҡ йәшәргә насип булмай, 1921 йылғы аслыҡта Нурмөхәмәт исемле кешенең өс бәләкәй өйөнә, 21 бот ашлыҡ әм бер атҡа алмаша, сөнки Нурмөхәммәттең ғаилә е ишле була.

1929-1930 йылдарҙа кулактарҙы синыф булараҡ юҡ итеү башлана. Атайымдан да: "Нисә работник тоттоң? Кемдәр улар?" – тип орайҙар. Атайым: "Мин үҙем, работнигым – улым Мөхәмәтғата" – тип яуап биргәс, уға ышанмай маташалар. Атайым барыбер кулакка сығарыла, уның бер өйөн, бар булған игенен тартып алалар. Үҙен Мөхәмәтғата ағайым менән Бөрө ҡала ы төрмә енә ябып ҡуялар. Уларҙың эшен уңынан суд ҡарай, әм, еҙҙең бер ниндәй ғәйебегеҙ юҡ, кулактар исемлегенә дөрөҫ индермәгәндәр, тип ҡайтарып ебәрәләр.

Атайым, билдәле, үҙ хужалығын әсәйем, Хәмдиә апайым, Мөхәмәтғата ағайым ярҙамында алып бара. Өй бура ын да атайым үҙе бурай, тәҙрә төптәрен дә үҙе я ап ҡуя торғайны. Тәҙрә рамдарын ғына Әхмәтғәле ҡусты ынан я атты. Атайым кешегә бик ярҙамсыл булды. Мөхәмәтғәле ҡусты ы үлеп киткәс, уның ғаилә енә өй бөтөрөштө, кесе ҡусты ы Мостафаның өйө янып киткәс, бер айлап уға өй эшләне. Ҡолтан тауынан аҡҡан Сабир шишмә енә яңы үҙән я ап, Йүрүҙән йылғаына төшөрҙө.

Бөйөк Ватан уғышы башланғанда 63 йәштә булыу сәбәпле, атайым уғышҡа алынманы. Уны көрәк абы юнырға, аттар өсөн септә уғырға урман хужалығына эшкә ебәрәләр. Ауыр ағастар менән эш итеү атайымдың эсен өҙә, әм ул ике-өс ай түшәктә ятып, беҙ, өс улы, фронтта саҡта яҡты донъянан китеп бара.

Атайым менән ағайым төрмәнән ҡайтҡандан уң беҙ күмәкләп ал ағыҙған эшселәр өсөн йүкәнән сабата үреүгә тотондоҡ, шуның аҡса ына магазиндан икмәк атып ала инек. Яҙ еткәс, ал ағыҙыусылар өсөн арҡан, салҡа кеүек ярҙамсы материалдар эшләнек. Ауылдан ун саҡрымдарҙа тау-урмандар ара ында Комсомол ҡасаба ы булып, унда Көньяҡ Урал урман хужалығы участка ы урынлашҡайны. Ҡышын әҙерләгән ағастан ал я ап, Йүрүҙән буйлап Ҡариҙелгә төшөрөүҙә беҙ ҙә ҡатнаштыҡ. Ул ваҡытта мин 4—5-се кластарҙа ғына уҡый инем әле.

1937 йылда мин – етенсе класты, ә Фазыл ағайым Мәсәғүт педагогия училище ының икенсе курсын тамамланы. Йәйен беҙ Яңы Бәрҙәш ауылында бер ай сама ы эшләп, ике аллыҡ ағас әҙерләнек. Эш хаҡын яҡшы ғына түләнеләр. Пинжәк, салбар тектереү өсөн тауар ҙа алдыҡ. Шул кейемдәрҙе кейеп, мин көҙөн Фазыл ағай менән Мәсәғүт педучилище ына уҡырға киттем. Ауылдан Фәхрулла Бәҙретдинов, Шәйхинур Гәрәев та беҙгә эйәрҙе. Мин – училищеның, ә Фазыл ағайым Өфө Уҡытыусылар институтының беренсе курсын тамамлап ҡайтҡас, атайым беҙҙе Магинск ҡасаба ына эшкә алып килде. Ике аҙнала беҙ ике аллыҡ ағас әҙерләп, аҡса ын алып ҡайттыҡ. Өйҙә бер аҙна сама ы ял иткәндән уң, Фазыл ағай – Өфөгә, мин Мәсәғүткә киттек.

Мөхәмәтғата ағай, башланғыс белем алғандан уң, төрлө курстарҙа уҡып, колхозда бригадир, ферма мөдире булып эшләне. 1936 йылда беҙҙең "Урмантау" колхозында ашлыҡ ныҡ уңа, дәүләт планын үтәгәндән уң ҡалған игенде "ҡыҙыл обоз" менән колхозсыларға өләшеп бирәләр. Алдынғы колхозсыларҙан өс кеше: Хөсәйен Абраров, Мәхмүт Фәрүәзетдинов, Мөхәмәтғата ағайым Мәскәүгә Ауыл хужалығы күргәҙмә енә ебәрелә. Бынан уң ағайым тағы ла тырышыбыраҡ эшләй, ул етәкселек иткән фермала мал ишәйә, продукция арта. Ағайым күп уҡый, мал-

сылыҡ буйынса алдынғы етәксегә әүерелә, малдарҙы үҙе дауаларға өйрәнә. Ул ауылда иң матур, уңған ҡыҙға өйләнде, үҙенә айырым йорт бөтөрөп, бер ул әм ике ҡыҙ үҫтерҙе. Ул үҙ теләге менән фронтҡа китеп, атлы ғәскәрҙә уғышты, Сталинград янында әләк булды. Фазыл ағайым Мәсәғүт педучилище ында уҡығанда уҡ күренекле педагогтар Жан-Жак Руссонан башлап Ушинский, Макаренко, Крупская, Сухомлинскийҙар әм уларҙың хеҙмәттәре тура ында яҡшы белә ине. уғышта ҡаты яраланып, бер аҙ дауаланғандан уң ул 1943 йылдың июнендә Абдуллаға ҡайтып төшә. Уны мәктәптә уҡыу-уҡытыу эше мөдире итеп ҡуялар. Ағайым мәктәптә ныҡлы тәртип булдыра, уҡыуҙан ситләшкән балаларҙы мәктәпкә йәлеп итә. Хеҙмәт тәрбиәе е биреүҙе лә ул яңыса ойоштора, мал ҡарауҙан башлап йәшелсә үҫтереүгә саҡлы өйрәтә. Колхоздың аслыҡтан күтәртеү хәленә еткән ике атын балалар менән тәрбиәләп аяҡҡа баҫтыра әм бере ен, колхоздан рөхсәт алып, мәктәп эшендә файҙаланыу өсөн ҡалдыра. Уны утын килтереү кеүек хужалыҡ эшенә егәләр.

1943 йылдың көҙөндә имән сәтләүегe бик ныҡ уңа. Фазыл ағай уны балаларҙан бер арба итеп йыйҙыра ла Ҡорайыш ауылы урыҫтарына йәшелсә орлоғона алмаштырып ала. Имән сәтләүеген сусҡа бик яратып ашай икән.

Инде өсөнсө йыл барған уғыш арҡа ында ауылда ла тормош бик ныҡ ауырая. Бигерәк тә фронтовик ғаиләләре асыға. Күптәр берҙән-бер күҙ терәп торған ыйырын да уйырға мәжбүр була. Фазыл ағайым фронттан ҡайтҡандарҙы, депутаттарҙы ауыл Советы сессия ына йыя әм ул саҡта рәйес булып эшләгән Хөснийәр Сафиндың бик күп ҡырын эштәрен фашлай. Рәйестең фронтовик ғаиләләренә тейешле пособиеларҙы ла үҙләштереүе асыҡлана. Ауыл Советы сессия ы ҡарарын районда тикшергәс, бары ы ла дөрөҫләнеп, ауылға ярҙам ойошторола. Күптәр астан үлеүҙән аҡлап ҡалына.

Ағайымдың ауыл халҡына башҡа ярҙамы ла булды. Бер саҡ колхоз бригадиры Шәмсихәйәт исемле бер ҡатынды өс килограмм сама ы иген менән тотоп, судҡа бирә. Ҡатындың ғаилә ендә 12-13 кеше, шул иҫәптән оло йәштәгеләр ҙә булып, ашарға бер ни ҙә юҡ. Фазыл ағайым мәктәптә педсовет йыя ла ҡатынды хөкөмдән алып ҡалыуҙа ярҙам итеүҙе орай. Прокурор исеменә яҙылған яҡшы характеристика Шәмсихәйәтте төрмәгә ултырыуҙан ҡотҡара.

1943 йылда Ленинград фронтында яраланып, Мөхәмәтйән Дәүләтов ҡайтып төшә. Ул уғыш башланыр алдынан ғына беҙгә туған тейешле Сафый мулланың (уны өргәнгә ебәрәләр) ҡыҙы Мөсниәгә өйләнгән була. Әммә, йәш ғаиләнең йәшәр урыны булмау арҡа ында, ире ҡайтҡансы ҡатыны төрлө кешелә морон төртөргә мәжбүр ителә. Ағайымдың тырышлығы менән, йыйылыш йыйып, Сафый мулланың колхоз ҡарамағына тартып алынған өйөн Дәүләтовтар ғаилә енә бирергә ҡарар сығаралар, колхозсылар, фронтовикты яҡлап, берҙәм ҡул күтәрә.

1944 йылда, КПСС-тың Ҡариҙел район комитеты ҡушыуы буйынса, Фазыл ағай Байҡы ауылында балалар йорто асырға ебәрелә. Унда килгәс, икешәр ҡатлы бер нисә кирбес, ағас өйҙәрҙе күр әтә лә: “Бына иңә торлаҡ, бөгөндән эшкә тотон, яҡтыртып-йылыт, ремонт я ат”, – тип район вәкиле китеп бара. Ауыл Советы, колхоз етәкселәре ярҙамында ағайым өйҙәрҙе таҙарта, йүнәтә, кәрәк-яраҡ таба, аҙыҡ-түлек килтертә. Балалар өсөн кейем- алымды, түшәк-ҡаралты ын Фазыл ағай, ике ат ектереп, Өфөнән барып ала. Ғөмүмән, уға төрлө йомош менән баш ҡалаға йыш йөрөргә тура килә. Аҡрынлап балалар ҡабул итә башлайҙар, эшкә тәрбиәселәр, уҡытыусылар алына. Ҡай ы саҡта йөктәрҙе ағайымдың үҙенә лә тейәргә тура килгәс, ғәрип кеше бик ҙур ауырлыҡтар кисерә.

Был ваҡытта мин Бағазы урта мәктәбендә хәрби дәрестәр алып бара инем. Байҡыға ағайыма ярҙамлашырға йыш ҡайтып йөрөнөм, балалар йорто өсөн төрлө кәрәк-яраҡ ҡайтарыштым. 1944 йылдың февралендә мине лә фронтҡа алдылар. алҡын февраль айы ине. Фазыл ағай менән осрашыу уңғы ы булыр, тип кем уйлаған инде. 1945 йылдың май аҙаҡтарында, инде уғыш тамам булғас, миңә хат килде. “17 майҙа Фазыл ағайың Байҡы больница ында үлде” тип яҙылғайны унда.

2002 йылда ағайымдың яҡты иҫтәлеге тура ында районыбыҙҙың “Ҡариҙел” гәзитендә Шамрат ауылынан Нурыйхан Юнысов түбәндәге юлдарҙы яҙып сыҡты: “Мин район гәзитендә баҫылған “Байҡылағы балалар йортонда” мәҡәлә ен ҡыҙыҡ ынып уҡыным. Ул төрлө хәтирәләр уятты, сөнки Байҡы приютында үҙем дә тәрбиәләнгәйнем. Ауыр саҡта ул беҙгә белем бирҙе, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итте... Ул саҡта миңә 12, ҡустыма 8 йәш ине. Директорыбыҙ Ф. С. Сираевты яҡшы хәтерләйем... Ул балаларға яҡшы мөғәмәләлә булды... Фазлетдин Сираевич үлгәс, мин уның ҡәберенә фанеранан әйкәл, ары ҡалайҙан йондоҙ эшләнем... Мәңгелек йортта ятҡан директорыбыҙҙы ерләнек. Уға ни бары 26 йәш ине”.

1936 йылдың август аҙаҡтарында Абдулла ете йыллыҡ мәктәбен тамамлаған, белемдәрен артабан дауам итергә ҙур ынтылышы булған бер төркөм егеттәр әм ҡыҙҙар, шул иҫәптән Мирғәлим Раянов, Фазыл Сираев, Шәриф Сафин, Ҡауый Йәғәфәров, Рәҡиә Вәлиевалар ауылдан беренсе булып Мәсәғүттәге башҡорт педагогия училище ына уҡырға китте. Был оло ваҡиға ине, тәүге ҡарлуғастарҙы бөтә ауыл халҡы оҙатып ҡалды. Тағы ла бер йылдан ошо уҡ уҡыу йортона Абдулланан беҙ өсәү: Шәйхинур Гәрәев, Фәрхулла Бәҙретдинов әм мин барып индек. Ҡайынлыҡул ауылынан Низамов менән Ҡолбәков, Байҡыбаштан Ғәлим Ғәлин, Хатип Ғәлин, Әмир Хөсәйенов, Фәрдүнә Васфиева, Ғаян Карамовтар ҙа беренсе курс студенттары булып китте. Уларҙың күбе е, педучилищенан уң ситтән тороп Өфөләге Уҡытыусылар институтын тамамлап, айлаған өнәре буйынса күп йылдар эшләп пенсияға сыҡты.

Ҡариҙел уҡыусылары уҡыу, спорт буйынса айырылып торҙо, шуға күрә башҡаларға үрнәк итеп ҡуйылды, маҡталды, бигерәк тә Мирғәлим Раянов, Фазыл Сираев, Ҡауый Йәғәфәров, Шәриф Сафин. 1938 йылдың февралендә үткәрелгән Дыуан, Ҡыйғы, Салауат райондары саңғы ярыштарында Фазыл ағайым – беренсе, Ҡауый Йәғәфәров икенсе урынға сыҡты. Уларҙы дирекция, спорт комитеты әм профсоюз ойошма ы аҡса менән дә бүләкләне. Шул аҡсаға Фазыл ағай менән Ҡауый беҙҙе ашханаға алып барып туйғансы ыйланы. Ҡайтҡанда ағайым бер магазинға инеп, миңә брезент ботинка алып бирҙе. Шатлығымдың сиге булманы. Ботинкаларҙы мин ике йыл кейҙем.

Мәсәғүттә уҡып йөрөгәндә бер ҡыҙыҡ та, ғибрәтле лә хәлдең ша иты булырға тура килде. Октябрь байрамы алдынан Шәйхинур Гәрәевтың ата ы Гәрәй бабайҙың оҙон арба ына ултырып, Хәмдиә апай ҡышҡы кейемдәр, бер аҙ аҙыҡ-түлек алып килгәйне. Беҙ улар менән бергә каникулға ҡайтырға йыйындыҡ. Фазыл ағай менән Ҡауый каникулға ҡайтып йөрөмәҫкә булды.

Гәрәй бабай Ҡорайыш ауылына еткәс: “Бында минең Василий тигән дуҫым бар, шунда ҡунып китербеҙ”, – тип дәртләнде. Өйҙә оло йәштәге ҡатын ғына булып сыҡты. Ул самауыр ҡайнатып, өҫтәлгә ҡуйғас, беҙ шәкәр, кәнфит, крәндилдәр менән сәй эсергә тотондоҡ. Хужабикә беҙҙең ҡайҙан килеүебеҙҙе белешә башлағас, Гәрәй бабай ҙа: “Василий где, в доме нет что-ли?”, – тип орау бирҙе. Хужабикә: “Дома нет, недавно в тюрьму увели”, – тине. Гәрәй бабайҙың: “Силком или добровольно?” – тип орауына ҡатын: “Дурак, в тюрьму добровольно идут что-ли”, – тип асыуланды. Гәрәй ҡарт: “Хорошо, больно хорошо”, – тип әйтеп ҡуйҙы. Бынан уң хужабикә түҙеп тора алманы: “Дурак татарин! Собака, уходи вон из дома!” – тип ухыуат тотоп ҡыуа башланы. Беҙҙең менән булған Шәриф ағай бабайҙың ҡолаҡҡа ҡаты булыуы тура ында әйтеп ҡара а ла, ҡатын уны ишетергә лә теләмәне. Ул беҙҙе төрлө насар үҙҙәр менән тиргәп, беҙҙең арттан ҡапҡа ын бикләп ҡалды. Юлда Гәрәй бабайға бары ын да аңлатып биргәс, ул: “Эй көсөк! Мин Василийҙы леспромхозға эшкә ебәргәндәр тип аңланым бит”, – тип юл буйы көйөнөп ҡайтты.

Ҡауый күп балалы Йәғәфәр Фәтхелисламов мәзиндең улы ине. Уның олата ы Фәтхелислам Йәнсәйет ауылынан Абдуллаға мулла булып килгән. Ғөмүмән, Ҡауый әсә е яғынан да уҡымышлылар ғаилә енән булды. Йәғәфәр ҡарт, бик уңған кеше булараҡ, өйҙәге барлыҡ эштәрҙе үҙе алып бара. Мәсетте лә ҡалдырмай, мал-

сылыҡ, игенселек, умартасылыҡ менән дә шөғөлләнә, хатта балыҡ тоторға ла ваҡыт таба. Йәғәфәр олораҡ улдары Ғарифулла, Мөғтәсим, Мөҡтәсәрҙе өйләндереп башҡа сығара, ҡыҙҙарын да кейәүгә бирә. Ҡауый 8 йәштә әсә енән ярты йәтим ҡалып, эшкә өйрәнеп үҫә, уҡыуға отҡор, зирәк бала була. Мәсәғүт педучилище - ынан уң ул Берлог ҡасаба ындағы балалар йортонда тәрбиәсе булып эшләне.

1940 йылда, Фазыл ағай Уҡытыусылар институтын тамамлап ҡайтҡас, Ҡауый менән осрашалар. Фазыл ағай үҙенең Бөрйән районындағы Әтек ауылына директор итеп тәғәйенләнеүен әйтә әм Ҡауыйҙы шунда завуч булып китергә өндәй. Ҡауый ризалаша. Ярты йыллап эшләгәс, Ҡауыйҙы шул мәктәптә эшләгән Ғәбиҙә исемле ҡыҙға өйләндерәләр, матур ғына туй ҙа үткәрәләр.

уғыш башланғас, яңы уҡыу йылының тәүге сиреген дә тамамламай ике дуҫ, үҙҙәре теләп фронтҡа китә. Ҡауый – Сталинград, ағайым Үҙәк фронтҡа эләгә. Ирен уғышҡа оҙатҡанда ауырлы булып ҡалған Ғәбиҙәгә ни бары ике хат килә.

Ҡауый менән Фазыл ағайым бик дуҫ ине. Ике е лә спорт менән шөғөлләнде. Йүгереү, саңғыла йөрөү, төҙ атыуҙа уларға тиң студенттар булманы. “Ворошиловский стрелок” билдә ен дә улар беренсе булып күкрәгенә таҡты.

Уҡыған йылдарҙы уйла аң, М. Горькийҙың “Мои университеты” әҫәре иҫкә төшә. Минең дә уҡыу йылдары шулайыраҡ булды.

1939 йылда совет-фин уғышы башланғанда мин өсөнсө курста уҡый инем. Беҙҙе ҡышҡы каникул алдынан йыйып алдылар ҙа: “ еҙ яңы йылдан уң уҡып тормай ығыҙ. Аттестатты уҡыуҙы тамамланы тип бирербеҙ”, – тип барыбыҙҙы ла мәктәптәргә эшкә ебәрҙеләр. Мин Балаҡатай районының Ҡәҙер ауылына эләктем. 1949 йылда тыуған яҡтарға ҡайтҡас, Бөрөгә барып педучилищела уҡыуымды дауам итергә булдым, сөнки Мәсәғүттәге башҡорт педагогия училище ы татар педучилище ына әйләндерелеп, шунда күсерелгәйне. Әммә мине дүртенсе курсҡа ҡабул итмәнеләр, кире өсөнсө курсҡа ултырырға тура килде. Фин уғышы арҡа ында бер йыл уҡыуым юғалғайны, уғыштан уң тағы ла ике йыл өҫтәп уҡырға тура килде. 1951 йылда ғына диплом алып сыҡтым. Ҡай ы бер иптәштәрем был осорҙа институт тамамлағайны инде.

Мәсәғүт башҡорт педагогия училище ы ул ваҡытта Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында берҙән-бер уҡыу-тәрбиә үҙәге булды. Унда белем алған күптәр уғыштың тәүге көндәренән үк немец илбаҫарҙары менән алышҡа китте әм илебеҙҙең ысын патриоттары булып, азатлыҡ өсөн батырҙарса уғышты. Дыуан районынан Михляев – Советтар Союзы Геройы, уғыштан уң Дыуан ауыл хужалығы техникумында директор булып эшләне. Ошо уҡ райондың Өлкөндө ауылынан Сиражи Вәлиев менән ике е атҡаҙанған уҡытыусы исеменә лайыҡ булдылар. Ҡариҙел районының Ҡортлокүл ауылынан Ғәлим Ғәлин, Байҡыбаштан Әмир Хөсәйенов уғышта күр әткән батырлыҡтары өсөн күп орден әм миҙалдар менән бүләкләнде. Беҙҙең ауылдан Мирғәлим Раянов, Ҡауый Йәғәфәров, Шәриф Сафин, Фазыл Сираев, Мөғәллим Шәйхетдинов илебеҙҙе фашистарҙан аҡлауҙа үҙ өлөшөн индерҙе. Ә тәүге ике е уғыш яланында ятып ҡалды. Иҫән ҡайтҡандары уҡытыу-тәрбиә эшенә тотоноп, юғары ихтирамға лайыҡ булды.

Мин мәктәптә утыҙ ете йыл эшләнем. Партия ойошма ы секретары булараҡ, директорҙарға уҡытыу-тәрбиә, хужалыҡ эштәрендә ярҙамлаштым. Ҡатыным Нажиә лә пенсияға сыҡҡансы мәктәптә эшләне.

**Хәким ХИСАМОВ,**
**Бөйөк Ватан уғышы ветераны.**

# АЛТЫН ЙОНДОҘ НИ ӨСӨН БИРЕЛМӘГӘН?

“Ағиҙел” журналында (2008 йыл, № 5) “Алтын Йондоҙ бирелмәгән ҡа арман” исемле мәҡәләм донъя күргәйне. 5-се удар армияның 30-сы уҡсылар дивизия ының 1050-се полк командиры подполковник Исхаҡ Ғүмәров тура ында ине ул.

Мәҡәләне әҙерләгәндә мин геройҙың өйләгәндәрен ҡыҫҡаса яҙып алған блокнотымды файҙаландым. Исхаҡ Иҙрис улы Бөйөк Ватан уғышының башынан аҙағына тиклем ҡатнашҡан. уғыштың унғы көндәрендә – Берлинды алыуҙа уның полкы айырыуса әүҙемлек күр әтә: Трептов паркын, Үҙәк универмагты, “Европа” ҡунаҡхана ын, Ан альт тимер юл вокзалын яулап ала. Авиация, финанс, юстиция министрлыҡтары, гестапо бина ын уғышып алыуҙа ҡатнаша. 2-се батальон комсоргы Алимов менән алдат Иванов авиация министрлығы өҫтөнә ҡыҙыл байраҡ ҡаҙай. 1050-се полк уғышсылары империя канцелярия ына – Гитлерҙың резиденция ына әм бункерына беренселәр булып бәреп инә.

Исхаҡ ағайҙың өйләгәндәрен хәрби мемуар әҙәбиәт менән дә сағыштырҙым. Ул бөтә ен дә өйләп бөтөрмәгән икән. 1050-се полк тура ында Советтар Союзы Маршалы, 1-се Белоруссия фронты командующийы Г. К. Жуков та бер нисә тапҡыр телгә ала. Дөрөҫ, ул күберәк ҙур масштабта: Юғары Башкомандующий Ставка ы, Генераль штабтың эшмәкәрлеге, фронттарҙың әм армияларҙың уғыш операциялары тура ында яҙа. 1-се Белоруссия фронты командующийы булараҡ, дивизияларҙың, полктарҙың, хатта батальондарҙың да нисек хәрәкәт итеүҙәрен сағылдыра. Одер йылға ы аша сығып, плацдарм яулап алған ғәскәрҙәр тура ында яҙа. Дошман плацдармды юҡка сығарыу өсөн бөтә көсөн ала. “1050-се полктың 2-се батальон уғышсылары, иң ауыр шарттарҙа, батырлыҡ күр әтеп, дошмандың күп атакаларын уңышлы кире ҡаҡты (батальон командиры Ф. К. Шаповалов, сәйәсәт буйынса урынбаҫары И. Ф. Осипов). Бында бигерәк тә капитан А. Ф. Богомоловтың 3-сө батальоны ҙур батырлыҡ күр әтте. Ауыр яраланыуына ҡарамаҫтан, Богомолов батальон менән етәкселек итеүен дауам итте. Уға үлгәндән уң Советтар Союзы Геройы исеме бирелде”.

Маршал Жуков үҙенең китабында 1050-се полктың уғышсылары тура ында тағы бер күренеште сағылдыра: “Гитлерҙың резиденция ы – Империя канцелярия ын яулап алыу өсөн ҡаты әм уңғы алыш бара. Дошманды дөмөктөрөп, 1050-се полктың офицерҙары М. Давыдов әм Ф. Шаповалов, 9-сы уҡсы корпустың сәйәси бүлек инструкторы А. В. Никулина Империя канцелярия ы өҫтөнә ҡыҙыл байраҡ ҡаҙай”. Бында үҙ 1050-се полктың 1-се батальоны командиры майор М. В. Давыдов, 2-се батальон командиры майор Ф. К. Шаповалов тура ында бара.

1050-се полк командиры И. И. Ғүмәров төркөмөнөң батырлыҡтары хаҡында генерал-лейтенант, 5-се удар армияның Хәрби советы ағза ы Ф. Е. Боков үҙенең “Еңеү яҙы” исемендәге китабында бик ҙур урын бирә. Уларҙың батырлыҡтары хаҡындағы эпизодтар ундарса тапҡыр күр әтелә.

Мәҡәләне яҙғанда И. И. Ғүмәровтың шәхси дело ын да күрергә кәрәк ине, ләкин был теләкте тормошҡа ашырыу еңел булманы. Өфө ҡала ындағы игеҙ хәрби комиссариаттың ике е генә ҡалдырылып, уларҙа хеҙмәткәрҙәрҙең эше күпкә

арҡкан. Ветерандарҙың шәхси делоларын тәртипкә килтереп өлгөрмәгәндәр. Исхаҡ ағайҙың шәхси дело ын 2008 йылдың ахырында ғына Орджоникидзе районы комиссариатынан ҡулыма алыуға ирештем.

Ундағы документтар менән танышыу мине тетрәндерҙе. 1990 йылда ГДР-ға китеп барғанда Исхаҡ ағай менән булған бер ваҡиға иҫемә төштө. Ул фашист башлыҡтарының бөтә донъя халыҡтарына күпме ҡайғы-хәсрәт алыуы, улар арҡа ында күп миллиондарҙың әләк булыуы хаҡында әсенеп өйләгәйне.

– Нәтижәлә – үҙҙәренең хурлыҡлы үлеме!

Шул үҙҙәрҙән уң Исхаҡ ағай тәрән уйға батып, үҙ еҙ ҡалды. Йөҙө үҙгәреп китте, ниндәйҙер асыулы ҡараш баҫты. Уның берәй ере нығ ауыртып китеүенәндер, тип уйланым. Ул асыулы тауыш менән, шыбырлап ҡына тигәндәй былай тине:

– Кешеләр ара ында аман яуыздар осрай, ғәҙел еҙлек хөкөм өрә.

Исхаҡ ағай үҙе менән булған берәй күңел еҙ хәл тура ында өйләргә теләйҙер, тип уйланым. Рязань ҡала ын уҙып киттек. Мәскәүгә етергә ике сәғәт сама ы ҡалды. Ул, ҡарашын бер нөктәгә төбәп, үҙ еҙ ултырыуын дауам итте. Мин үҙ ҡушырға баҙнат итмәнем.

Исхаҡ ағайҙың шәхси дело ындағы документтар менән танышҡас, уның нинә "яуызлыҡ, ғәҙел еҙлек" хаҡында әсенеп әйткәнен аңланым. Уға, Берлиндың үҙәк кварталдарын яулап алыуҙа ҙур батырлыҡтар күр әткән полк командирына, бер ниндәй бүләк бирелмәгән, полковник дәрәжә е бирелеү тура ындағы документы ла юҡ ителгән. Был хаҡта И. И. Ғүмәровтың 1952 йылдың 23 сентябрендә яҙған автобиографияның өҙөгөн килтерәм: "Берлин операция ы өсөн 301-се уҡсылар дивизия әм 9-сы уҡсылар корпусының командованиелары мине Ленин ордены менән бүләкләүгә тәҡдим итеп, документтар әҙерләне. 1945 йылдың 25 ғинуарында 5-се удар армия командующийы генерал-полковник Н. Э. Берзарин Берлин операция ы алдынан полк командирҙарының йыйылышын уҙғарҙы. Шунда ул минә сираттағы полковник дәрәжә е биреү өсөн аттестацияға ҡул ҡуйыуын әйтте, минә уңыштар теләне.

Ләкин 5-се удар армия кадрҙар бүлеге начальнигы подполковник Борецкий, полктағы уның ике яҡын офицерына талапсан ҡарашым өсөн үс итеп, мине Ленин ордены менән бүләкләү тура ындағы документты юҡ иткән. Уның күсермә ен минең шәхси делонан алып ташлаған. 9-сы уҡсылар корпусы командование ының мине Ленин ордены менән бүләкләү тәҡдиме хаҡында биргән белешмә е миндә аҡлана. Полковник дәрәжә е биреү хаҡындағы аттестация материалын юҡ итеүе тура ында Борецкий минә үҙе әйтте.

Борецкийҙың ошондай закон ыҙ ҡыланыштарына 5-се удар армия командующийы генерал-полковник Н. Э. Берзарин сик ҡуйыр ине, ләкин ул 1945 йылдың 16 июнендә автомобиль бәрелешендә әләк булды. Ҡаты сирләп китеп, мин Германиялағы совет ғәскәрҙәре составынан курортта дауаланыу өсөн СССР-ға ҡайттым".

Н. Э. Берзариндың И. И. Ғүмәровҡа ихтирамлы ҡарашы хаҡында генерал-лейтенант, 5-се удар армия Хәрби Советы ағза ы Ф. Е. Боков ошолай яҙа: "1945 йылдың 30 апрелендә Мәскәүҙән, "Красная звезда" гәзитенән, телефон аша Н. Э. Берзариндан интервью алдылар. Ул 1 майҙа баҫылып сыҡты. Хәбәрсенең орауына генерал ошоларҙы өйләне: "Беҙҙең данлыҡлы ғәскәрҙәр уңышлы урам уғыштары алып бара, фашист Германия ы баш ҡала ының үҙәк райондарында кварталдар артынан кварталдар яулап, алға бара. Берлин урамдарында Советтар Союзының бөтә милләт улдары фашистар менән алыша. Айырыуса генерал-майор Фомиченко, генерал-майор Гаспарян, полковник Кондратенко, подполковниктар Терехин, Ғүмәров, Радаев, Чайкаларҙың алдат әм офицерҙары ҙур батырлыҡтар күр әтә".

Исхаҡ ағайҙың ауырыуы бер йылдан ашыу дауам итә. 1942 йылда Сталинград уғышында, 1943 йылда Днепр йылға ы аша сыҡҡанда алған контузиялары ла, Берлин операция ы өсөн бүләктән мәхрүм ителеүе, сираттағы хәрби дәрәжә

бирелмәүе лә эҙ еҙ ҡалмағандыр. Унын ҡаҡшаған сәләмәтлеге яҡшырмаған. 1946 йылда Ғүмәровты инвалидлыҡҡа сығарып, пенсия тәғәйенләйҙәр.

Хәрби академия тамамлаған кешеләр айырым иҫәптә торған. 1951 йылда Исхаҡ ағайҙы яңынан хәрби хеҙмәткә саҡыралар. Ике йыл батальон штабы начальнигы урынбаҫары булып хеҙмәт итә. 1953–1960 йылдарҙа Өфөлә Сталин әм Калинин райондарының хәрби комиссариаттарында 2-се бүлек начальнигы булып эшләп пенсияға сыға. Ул саҡта уға тик 48 генә йәш була.

Исхаҡ ағай холҡо менән кешелекле, баҫалҡы, шул уҡ ваҡытта күренеп бармаған ғорурлыҡ та хас ине уға. Быға бер генә миҫал. Берлинда уның полкы яулап алған "Европа" ҡунаҡхана ында өс көн йәшәп киттек. Хәҙер ул "Интернационал" тип атала. Исхаҡ ағай бик асылып барған кеше түгел ине. Быға, бәлки, уның ауырыу булыуы ла сәбәп булғандыр.

" еҙ әр саҡ күҙлекле, таяҡ таянған кеше менән бергә була ығыҙ. Нимәләр тура ында өйләшә егеҙ?"– тип ҡыҙыҡ ынды юлдаштар. Мин уларға И. И. Ғүмәровтың кемлеген, Берлинды алыуҙа күр әткән батырлыҡтары хаҡында өйләп, хәҙер беҙ йәшәгән ҡунаҡхананы ла уның полкы яулап алыуын әйттем.

– еҙ уға әйтегеҙ әле,– тине улар,– был турала беҙгә лә өйлә ен.

Уларҙың үтенесен Исхаҡ ағайға еткерҙем. Ризалашты. Киске аштан уң ҡунаҡхананың бер буш урынына унлап кеше йыйылды.

Исхаҡ ағай ҡабаланмай ғына өйләй башланы. Бер йүн еҙ, уғышта булмаған, беҙҙең ветерандар төркөмөнә ҡушылып килгән кеше Исхаҡ ағайҙы тупаҫ итеп бүлдерҙе:

– Нишләп еҙ «минең полкым» да «минең полкым» тип өйләй егеҙ. Ул еҙҙең хосуси милкегеҙме ни?

Исхаҡ ағай өндәшмәй генә урынынан торҙо ла, төҫөн дә үҙгәртмәй, бүлмә енә йүнәлде. Йыйылған кешеләр теге тупаҫ әҙәмде ҡыуып ебәрҙе. Исхаҡ ағайҙы кире саҡырып килтереүемде оранылар.

– Килмәйәсәк ул,– тинем,– теге кеше тупаҫ ҡыланып, ҙур батырлыҡтар күр әткән полк командирының хәтерен ҡалдырҙы бит.

Минә уғыш ветераны, авиация капитаны Г. К. Макеев ҡушылды:

– Командирҙарҙың «минең отделением», «взводым», «ротам», «батальоным», «полкым», «дивизиям», «армиям» тип әйтеүе – тәбиғи күренеш. Авиацияла «минең звено», «минең эскадрильям», тип өйләйҙәр.

Иртә менән Исхаҡ ағайҙан кисәге күңел еҙ күренеш өсөн ғәфү үтендем.

– Уңай ыҙланма юҡҡа,– тине ул,– бында инең ни ғәйебең бар? Ҡай ы бер әҙәмдәр ни тиклем аҙыраҡ бел ә, үҙҙәрен шулай ҙурыраҡ күр әтергә тырыша. Ундайҙарға үҙ әрәм итмәҫкә, үҙ көрәштермәҫкә кәрәк.

Исхаҡ ағайҙа зарланыу ғәҙәте бөтөнләй юҡ ине. Ауырыуы хаҡында ла өйләргә яратманы. Ваҡсыл булманы, юҡ-бар нәмәләргә иғтибар итмәне.

Нинә ул Берлин операция ы өсөн награда бирелмәүе, полковник дәрәжә е бирелеү хаҡындағы документтың да юҡҡа сығарылыуы хаҡында минә өйләмәүенең сәбәптәре тыңғылыҡ бирмәй. Моғайын, был хаҡта өйләүҙе үҙе өсөн ғәрлек, түбәнселек итеп анағандыр. Рәнйеүен, ҡайғы ын, әҙәм ышанмаҫлыҡ ғәҙел еҙлекте тышҡа сығармаҫҡа, улар тура ында өйләп, үҙен йәлләтеүҙе теләмәгәндер, тип уйлайым.

И. И. Ғүмәровтың шәхси дело ында уны хәсрәткә алған, ҡайғыға тарытҡан хәлдәр хаҡында әйтелгән. Тик, нишләптер, уларҙы тикшерер, хәл итер кеше булмаған. Был документтар уның тормош юлын, ауыр балалыҡ әм йәшлек йылдарын тулыраҡ сағылдырырға мөмкинлек бирҙе. Бер йәш тулмаҫтан, шахтала забойщик булып эшләгән ата ы үлеп китә, ғаиләлә бәләкәй өс малай етем ҡала. 1916 йылда – уларҙың бере е, 1921 аслыҡ йылында икенсе е вафат була. Ҡаты бәғерле үгәй атай уның күңелендә ауыр хәтирәләр ҡалдыра.

Исхаҡ ағай ун бер йәшенән кулактарға батрак булып яллана, йәй уларҙың малын көтә. 1925–1932 йылдарҙа Баймаҡ алтын приискыларында слесарь, забойщик өйрәнсеге, геология разведка ында коллектор, Баймаҡ баҡыр иретеү

комбинатында техник секретарь булып эшләй.

Мәктәптә уҡыу бәхете эләкмәй уға. Уҡырға-яҙырға ликбезда ғына өйрәнә. Үҙ аллы уҡып белемен арттыра. 16 йәшендә комсомолға инә. 1932-1933 уҡыу йылында Баймаҡ тау-металлургия техникумының беренсе курсын тамамлай. Үҙ теләге менән Ҡазан татар-башҡорт хәрби мәктәбендә уҡып, лейтенант дәрәжә е алып сыға. Ҡазан, Бәләбәй, Өфө полк мәктәптәрендә взвод командиры, Камчаткала рота командиры ярҙамсы ы, рота командиры булып хеҙмәт итә.

Бөйөк Ватан уғышы алдынан Ғүмәров М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияны тамамлай. Уға капитан дәрәжә е биреп, фронтҡа, 120-се уҡсылар дивизия ының 540-сы полкына, штаб начальнигы итеп оҙаталар.

1941 йылдың авгусында Ельня алышында ҡатнаша. Г. К. Жуков етәкселегендәге был хәрби операция беренсе тапҡыр фашист ғәскәрҙәрен тар-мар итеү менән тамамлана. Ельня алышында уңышлы ҡатнашҡаны өсөн 120-се дивизия – 6-сы гвардия, 540-сы полк 25-се гвардия полкы итеп үҙгәртелә. И. И. Ғүмәров полк командиры, ике тапҡыр дивизия штабы начальнигы булып та хеҙмәт итә.

1944 йылдың авгусынан уғыштың ахырына тиклем 5-се удар армияның 301-се дивизия ының 1050-се полк командиры була. 1942 йылда уға – майор, 1943 йылда подполковник дәрәжәләре бирелә. Сталинград, Курск, Днепрҙағы алыштарҙа, Украинаны, Польшаны азат итеүҙә ҡатнаша. Күр әткән батырлыҡтары өсөн ике Ҡыҙыл Йондоҙ, ике Ватан уғышы, Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнә. Польша ордены “Ҙур тәре” бирелә. Юғарыла күр әтелгән Ҡыҙыл Байраҡ ордены уға Висла йылға ы аша сығып плацдарм яулап алыуҙа күр әткән батырлыҡтары өсөн 1945 йылдың ғинуарында тапшырыла.

И. И. Ғүмәров Бөйөк Ватан уғышында юйылмаҫ эҙ ҡалдыра. Полководецтар, хәрби белгестәр, уғыш тарихсылары, фашист Германия ын еңеүҙә Мәскәү эргәендәге, Сталинград, Ленинград блокада ын өҙөү, Курск, Днепрҙы аша сығыу, Берлинды яулап алыу операциялары иң ҙур роль уйнаны, тип билдәләй. Исхаҡ ағай, Ленинград блокада ын өҙөүҙән тыш, бөтә анап кителгән операцияларҙа ҡатнаша. уғыштың унғы этабында – Берлинды яулап алғанда – унын полкы Гитлерҙың резиденция ы – Империя канцелярия ына, Гитлерҙың бункерына беренселәр булып бәреп инә.

И. И. Ғүмәров уғышсыларының батырлыҡтары хаҡында Советтар Союзы Маршалы Г. К. Жуков бер нисә тапҡыр телгә алған. Генерал-лейтенант Ф. Е. Боков та, 1050-се полк командиры И. И. Ғүмәровтың, унын уғышсыларының фашистарға ҡаршы алышта оҫта, таҫыллы уғышыуы тура ында, башҡа полктар менән сағыштырғанда, йышыраҡ яҙа. 5-се удар армия командующийы, генерал-полковник Н. Э. Берзарин Берлиндың үҙәк райондарын яулап алыуҙа иң күренекле ете дивизия әм полк командирҙары иҫәбенә И. И. Ғүмәровты ла индерә. 1050-се полк яулап алған Трептов паркында, фашист Германия ын еңеү символы булып, бөтә донъяға билдәле совет уғышсы ының ыны ғорур баҫып тора.

И. И. Ғүмәров – халҡыбыҙҙың хәтерендә мәңге аҡланырға хаҡлы оло шәхес, уғыш ҡа арманы. Ысын патриот, халҡыбыҙҙың тоғро улы булған был оло шәхестең яҡты образы йәштәрҙә илде өйөү тәрбиәләүҙә, хәрби хеҙмәтте намыҫлы үтәүҙә өлгө булырлыҡ. Унын шәхси дело ындағы документтарҙы өйрәнеп, тормош юлын тулыраҡ сағылдырып, журнал уҡыусылар иғтибарына еткереүҙе мөҡәддәс бурысым ананым.

**Сабир ЙЫ АНШИН,**
**Башҡортостан Республика ы уғыш әм хеҙмәт**
**ветерандары советы президиумы ағза ы, отставкалағы полковник.**

# РӘСӘЙ МОСОЛМАНДАРЫНЫҢ БЕРЕНСЕ СЪЕЗЫ

Ул 1917 йылдың 1 майында Мәскәүҙә ҡала мосолмандарына әзербайжан Шәмси Асадуллаев бүләк иткән йортта эш башлай. Съезда барлығы 900-ҙән ашыу кеше ҡатнашып, шуларҙың 800-ләбе делегат була. Башҡорт делегаттары бөтә е 58 кеше, шул иҫәптән М. Мортазин, С. Мерәҫов, А. Йәғәфәров әм башҡалар. Делегаттарҙы тәбриклəп Эске эштәр министрлығының Сит диндәр департаменты етәксе е профессор С. Котляревский сығыш я ай. Ул сығышының күпселек өлөшөн дин мәсьәләләренә арнап, мәктәптәрҙә белем биреү, тел тура ында бик аҙ өйләй, Рәсәйҙең буласаҡ королошона бер аҙ ғына ҡағылып үтә. Профессор дин азатлығы, йәғни ҡай ы динде тотоуҙы әр кемдең үҙе билдәләүе, халыҡтарҙың үҙ мәҙәниәтен ирекле үҫтереүе, балаларын туған телдә уҡыта аласағы тура ында өйләй. Шуның менән бергә Котляревский, милли мәктәптәрҙә урыҫ теле мотлаҡ уҡытылырға тейеш, тип белдерә. Рәсәйҙең дәүләт королошо мәсьәлә е, урындағы үҙидара органдарының хоҡуҡтарын билдәләү, оратор баҫым я ап әйткәнсә, Ойоштороу Йыйылышы (Учредительное Собрание) ҡарамағында буласаҡ. Тик Рәсәй бер бөтөн (бүленмәгән килеш) ҡалырға тейеш. Котляревский делегаттар иғтибарын азатлыҡты сикләйәсәк анархияның таралып китеү хәүефенә лә йүнәлтә.

Артабан съездың регламенты ҡабул ителеп, көн тәртибенә ҡуйыласаҡ мәсьәләләр раҫлана. уңғы ы 13 пункттан тора: Рәсәйҙең дәүләт королошо форма ы, Ойоштороу Йыйылышы тура ында, мәҙәни әм территориаль автономия, ер мәсьәлә е, Рәсәй мосолмандарының Милли Шура ы (Большой национальный Совет) тура ында .б. Съездың өсөнсө көнөндә Ильяс Алкин рәйеслегендә Әхмәт Цаликовтың Рәсәйгә идара итеү форма ы тура ында докладын тыңлайҙар. Лезгин мосолманы Рәсәй мосолмандарының берҙәм дәүләтен ҡороу мөмкинлеген ҡырҡа кире ҡаға. Ул шулай уҡ ҙур ышаныс менән, бер мосолман халҡы ла Рәсәйҙән айырылырға теләмәйәсәк, тип белдерә. Докладсы территориаль автономиялар нигеҙендә конфедерация әм федерация кеүек дәүләт ҡоролоштарын да инҡар итә. Цаликов фекеренсә, Рәсәй мосолмандары өсөн үҙбилдәләнештең берҙән-бер форма ы—“милли-мәҙәни автономия”. Сығышының йомғаҡлау өлөшөндә оратор, Рәсәй унитар парламент халыҡ республика ы булырға тейеш, тип белдерә.

Цаликовтың сығышынан уң унитар ҡоролош яҡлылар менән федерацияны яҡлаусылар ара ында ҡыҙыу бәхәс тоҡанып китә. Төркөстандан делегат булып айланған Зәки Вәлиди, бер тапҡыр ҙа “милли-мәҙәни автономия” төшөнсә ен ҡулланмайынса, “Рәсәй мосолмандарының ҡәбилә составы” тема ына махсус доклад я ап, Цаликовтың тәҡдименә ҡаршы сыға. Берҙәм мосолман милләте ғәмәлдә юҡ, ти ул, шуға күрә мосолман халыҡтарын милли-мәҙәни нигеҙҙә берләштерергә ынтылыу – мәғәнә еҙлек. Мосолмандарҙы административ юл менән берләштереү кәрәкмәй ҙә, сөнки төркиҙәрҙе төрки булмағандар (тажиҡ, осетин, черкес, курд .б.) менән ҡушылырға мәжбүр итеү сит ҡан, ғөрөф-ғәҙәттәр әм тәртиптәр индереүгә булышлыҡ итәсәк.

Үҙенең “Иҫтәлектәр”ендә Вәлиди, Мәскәүҙәге мосолмандар съезында мин Башҡортостандың бойондороҡ оҙлоғо өсөн сығыш я аманым, тип яҙа. Ул ваҡытта мин бөтә Төркөстандың бойондороҡ оҙлоғо яғында инем. Урыҫ ҡәүемдәре күпселектә булған Волга буйы мосолмандары өсөн, минеңсә, милли-мәҙәни авто-

номия ҡулайлы бул а, төрки халыҡтары күберәк йәшәгән көнсығыш (аҙаҡ ул “Бәләкәй Башҡортостан” тип атала) территориаль автономия өсөн көрәшкән Төркөстан әм Ҡаҙағстан хәрәкәтенә ҡушыла ала ине.

Кавказ, Төркөстан, Ҡаҙағстан вәкилдәре, уларға ҡушылған башҡорт делегация ы милли автономия нигеҙендә федерализм өсөн сығыш я а а, татарҙарҙың байтағы унитар Рәсәй нигеҙендә милли-мәҙәни автономияны яҡлай. Шулай ҙа Фуат Туҡтаров, Фәтих Кәрими кеүек халыҡ ара ында абруйлы татарҙар федерация принцибын яҡлауын белдерә. Әгәр ҙә федерация булма а, ти Фәтих Кәрими, мосолман халҡы ирәк йәшәгән биләмәләргә башҡа урындарҙан кешеләр күсеп ултырасаҡ, әм Төркөстан урыҫ менән туласаҡ. Төркөстан Тамбов губерна ына оҡшап ҡаласаҡ. (Кәримиҙең был хәүефе Н. Хрущев етәкселек иткән йылдарҙа ысынлап та дөрөҫләнде: сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү ылтауы менән Ҡаҙағстандың төньяғына, Башҡортостандың көньяҡ райондарына бик күп урыҫ килеп төйәкләнде – **Р.Д.**). Байтаҡ үҙ көрәштергәндән уң, күпселек тауыш менән (446-ға 271 ҡаршы) милли-мәҙәни нигеҙҙә федератив ҡоролошто яҡлау тура ында ҡарар ҡабул ителә. Шул уҡ ваҡытта съезд ҡарарына “үҙ биләмәләре булмаған халыҡтар милли-мәҙәни автономияға хоҡуҡлы” тигән юлдар ҙа индерелә. Был ике яҡты ла ҡәнәғәтләндергән ҡарар нигеҙендә ғәмәлдә күпселектең ихтыярын сағылдырған “икеләтә автономия” идея ы нығытыла. Бында бер мө им хәлгә иғтибарҙы йүнәлтеү мө им: территориаль автономияны яҡлап феодализм яҡлы, реакцион ҡарашлы руханиҙар сығыш я ай. Ошо юл менән улар иҫке тәртиптәрҙе, үҙҙәренең өҫтөнлөктәрен аҡлап ҡалырға ынтыла.

9 майҙа делегаттар ер мәсьәлә ен тикшереп, түбәндәге ҡарар ҡабул итә: 1) ҡаҙна, кабинет, монастырҙар ҡарамағында, шулай уҡ хосуси ҡулдарҙа булған ерҙәр халыҡ ҡарамағына күсә; ергә хосуси милекселек бөтөрөлә, ерҙе атыу- атып алыу тыйыла; 2) ер менән идара итеү йәмәғәтселек ҡарамағында булырға тейеш, урман, болон, күл әм дөйөм файҙаланыуҙағы ерҙәр — урындағы үҙидара ҡулында; 3) ер мәсьәлә е тулы ы менән Ойоштороу Йыйылышы тарафынан хәл ителәсәк; 4) мосолман крәҫтиәндәр ер йәмәғәтселеге ойошторорға әм мосолман ер биләүселәр союзына берләшергә бурыслы; 5) ер алыуҙа урындағы халыҡ өҫтөнлөктәр менән файҙалана .б. Ошо ҡарар ҡабул ителгәндән уң съезд президиумына башҡорт делегаттарынан түбәндәге йөкмәткеле ғариза бирелә: “урындарҙа башҡорттарҙы йыйып, был мәсьәлә буйынса фекер алыша алмау, ер буйынса кәрәкле мәғлүмәттәр булмау сәбәпле, аграр секция эшендә ҡатнаша алмайбыҙ; тиҙ арала ер мәсьәлә е буйынса Башҡорт халҡы йыйыны уҙғарыласаҡ”. 10 майҙа башҡорт делегация ы съезға биргән ғаризала түбәндәгеләр хәбәр ителә: “Беҙ, түбәндә ҡул ҡуйыусы I Бөтә Рәсәй мосолмандары съезында ҡатнашыусы ике миллионлы башҡорт халҡы вәкилдәре, съездың ер мәсьәлә е буйынса ҡарары менән танышып әм башҡорт халҡының милли әм көнкүреш күҙлегенән тикшереп, 1 июлдә Ырымбурҙа Башҡорт йыйыны уҙғарырға ҡарар иттек...” Йыйынды йыйыу Сәғит Мерәҫев, Аллабирҙе Йәғәфәров әм Зәки Вәлидовтарҙан торған бюроға йөкмәтелә. Был бюро Башҡорт өлкә шура ы тип аталасаҡ. Был башҡорт милли хәрәкәтенә нигеҙ алыусы беренсе яҙма документ була.

Ҡатын-ҡыҙ мәсьәлә е съезда иң ҡатмарлы ы була. Уның сәбәбе — мосолман халыҡтарҙа ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләлә әм йәмғиәттәге ролен төрлөсә аңлауҙа. Ҡатын-ҡыҙға тиң хоҡуҡтар, айлау хоҡуғы биреү мәсьәлә е бик мө им була, сөнки улар Ойоштороу Йыйылышына айлауҙарҙа ҡатнашма а, мосолман халыҡтары тауышы ике тапҡыр кәмерәк буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта Төркөстан әм Кавказ халыҡтары ҡатын-ҡыҙҙы айлауҙа ҡатнаштырыу тура ында ишетергә лә теләмәй. Мәсьәләнең ҡиҫкенлеге шуның менән аңлатыла: ҡатын-ҡыҙ хоҡуҡтары социаль-сәйәси проблема ғына түгел, ә быуаттарҙан аҡланып килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, социаль хәленә әм сәйәси ҡараштарына ҡарамайынса, әр ир кешегә ҡағылған мәсьәлә анала. Шуға күрә был мәсьәләне тикшереү бик көсөргәнешле шарттарҙа үтә. Беренсе булып үҙ 1917 йылдың апрелендә Ҡазан ҡала ында үткән Иҙел буйы, Себер, Төркөстан, Кавказ, Ҡырым ҡатын-ҡыҙҙары съезында ҡатнашҡан делегат Ил амиә Туҡтароваға бирелә. Ул ун талаптан торған Ҡазан съезы ҡарарын уҡып

ишеттерә. Унан уң үҙ алған Фатима Ҡоләхмәтова ҡатын-ҡыҙ мәсьәлә е буйынса съезд секция ы ҡарарын еткерә. Ислам дине буйынса белгес Муса Бибиҙең Ҡөрьән аяттары әм хәҙистәргә, абруйлы ислам белгестәренең фекерҙәренә таянып, ислам тәғлимәтендә ҡатын-ҡыҙҙың ирҙәр менән тиң хоҡуҡлылығын иҫбатлаған сығышынан уң фекер алышыуға күсәләр. Ҡыҙыу бәхәстәрҙән уң съезд ҡарар итә:

1. Шәриғәт ҡанундары буйынса ирҙәр әм ҡатын-ҡыҙҙар тиң хоҡуҡлы.

2. Шәриғәт буйынса ҡатын-ҡыҙҙар сәйәси әм ижтимағи эштәрҙә ҡатнашыу хоҡуғына эйә, тимәк, улар айлауҙа ҡатнаша ала.

3. Ҡатын-ҡыҙҙар Ойоштороу Йыйылышына айлауҙа ҡатнаша әм айлана ала.

4. 11—12 йәшлек ҡыҙҙарҙы Төркөстан, Кавказ әм Ҡырым халыҡтарындағы кеүек кейәүгә биреү ғәҙәте уларҙың ауырыуына әм иртә үлеүенә, шулай уҡ ауырыу балалар тыуыуға килтереү сәбәпле, ҡыҙҙарҙы 16 йәшкә тиклем кейәүгә биреүҙе тыйырға.

5. Кейәү кеше никахҡа ингәндә икенсе ҡатынға өйләнмәйәсәге тура ында яҙып бирергә, әгәр ҙә теге йәки был сәбәптәр арҡа ында икенсегә өйләнә икән, ул саҡта тәүге ҡатынын айырырға бурыслы. Кешелеккә әм ғәҙеллеккә ҡаршы килеү сәбәпле, күп ҡатын алыу ҡәтғи тыйыла.

Съезд эшмәкәрлегендә мосолмандар ара ында мәғариф мәсьәләләре ҙур урын ала. Ошо хаҡта сығыш я аған Ғүмәр Тереғоловтың билдәләүенсә, урыҫ булмағандар ара ында мәҙәниәт әм мәғарифты үҫтереүгә иң ныҡ аяҡ салыныусы халыҡтарҙан революцияға тиклем күпселекте мосолмандар тәшкил итте. Докладсы милли мәктәптәрҙең, программалар әм дәреслектәрҙең ҡәнәғәтләнерлек хәлдә булмауы тура ында белдерә. ибелеп йәшәгән Иҙел буйы, Ҡырым, Кавказ, Себер әм башҡа мосолмандар өсөн иң ҡулайлы ы, ти Тереғолов, милли-мәҙәни автономия. Мәғариф мәсьәлә ен секцияла ҡарап, оҙайлы фекер алышҡандан уң съезд пленар өлөшөндә түбәндәге ҡарар сығара: башланғыс синыфта уҡытыу шул ҡәбилә телендә алып барыла; урта мәктәптәрҙә дөйөм төрки телен өйрәнеү мотлаҡ; юғары мәктәптәрҙә төрки-татарҙарҙы уҡытыу дөйөм төрки телендә алып барыла; башланғыс белем дөйөм, мотлаҡ әм түләү еҙ; урыҫ теле мәктәптәрҙә предмет булараҡ уҡытыла; милли урта мәктәп тамамлаусылар урыҫ юғары уҡыу йорттарына имтихан ыҙ инеү хоҡуғына эйә булырға тейеш; әр халыҡ мәғарифына әм мәҙәниәтенә сығымдарҙы дәүләт, урындағы идаралар ҡаплай .б.

Съезда дин мәсьәләләре буйынса ла фекер алышалар. Был мәсьәләнең ҡуйылышы 1788 йылда әбей батша Екатерина II тарафынан ойошторолған Эске Рәсәй әм Себер мосолмандары Диниә назаратының батша полиция ы органы булараҡ ҡаралыуы әм мосолмандарҙың уй-кәйефтәре тура ында мәғлүмәттәр биреүсе рәүешендә ҡабул ителеүе менән бәйле. Мөфтөй ҙә батша хөкүмәте тарафынан тәғәйенләнгән. Съезд мөфтөй әм алты ҡадый (ағза) составында яңы Диниә назаратын раҫлай. Мөфтөй итеп Ғәлимйән Баруди, ҡадыйҙар сифатында Ғүмәр Ҡараци (Бүкәй урҙа ы ҡаҙаҡтарынан), Сәлихйән Урманов, Абдулла Сөләймәни, Кашшаф Тәржемәни, Хәким Мәхмүтов, Мөхлисә ханым Буби айлана.

Съезда эшселәр әм хәрби мәсьәләләр ҙә ҡарала. Ултырыш аҙағында делегаттар Бөтә Рәсәй Үҙәк мосолмандар советы (Милли Шура) айлап, уның бурыстарын билдәләй. Шулай итеп, Рәсәй мосолмандары тарихында беренсе тапҡыр тулы азатлыҡ шарттарында мосолман халыҡтарҙы борсоған мәсьәләләр буйынса фекер алышыу үткәрелеп, ҡарарҙар ҡабул ителә. Мосолман халыҡтар өсөн ирекле рухи үҫешкә юл асыла. Әммә 1917 йылдың октябрендәге большевиктар түңкәрелеше был юлға кәртә ҡуя.

**Рафаэль ДӘҮЛӘТШИН,**
**тарих фәндәре докторы.**

# ИЖАДЫ ЯҠТЫ, ҒҮМЕРЕ БӘХЕТЛЕ



Өфө–Әстрәхан теплоходы Иҙел тулҡындарын яра-яра берсә моңло, берсә дәртле көйҙәр тирбәлешендә, тирә-йүнгә сихри ила илыҡ өҫтәп үҙ юлынан бара. Әйтер ең дә, ундағы ял итеүселәр түгел, Иҙел бейей, Иҙел йырлай.

уңғы вальс иғлан ителгәс тә, күптәр үҙ каюталарына ашыҡманы. Өйкөм-өйкөм булып сиратлашып, алмаш-тилмәш тәҙрәнең эске яғын күҙәттеләр. Ҡыҙығырлыҡ нимә бар уң унда?

Баҡ аң, ҡөҙрәте ташып торған ир уҙаман бармаҡтары бармаҡтарға теймәй, нәфис ептәрҙән матур-матур биҙәктәр я - ап ойоҡбаш бәйләй, имеш!

Төрлө яҡтан йыйылған сәйәхәтселәр был күренеште күреп, аптырабыраҡ ҡал алар ҙа, оҫта ҡуллының фантазияға ҡоролған философик уйланыуҙарын, эҙләнеүҙәрен иҙгәндәрҙер, тойғандарҙыр, әлбиттә.

Әммә ул кешенең мәҙәниәт әм театр өлкә ендәге ҡаҙаныштары өсөн Республикабыҙҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың әм Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театрының абруйлы әм билдәле художество етәксе е, режиссеры Дамир Мәжит улы Ғәлимов икәнен белделәр микән? Бел әләр ҙә, белмә әләр ҙә – ғәжәп түгел... Ундайҙар үҙҙәре тура ында бары ын да өйләп бармай, ә телдәре сиселә икән, тос асыла. Шундай мәлдәрҙең бере ендә сәхнә сәнғәте остазына әүерелгән оло шәхес үҙе тура ында былай ти: “Бала саҡта мине ултырғысҡа баҫтырып йырлаталар ҙа иҙәнгә өсәр умлыҡ аҡса ташлайҙар ине, мин шул аҡсалар менән Магнитогорск ҡала ына барып диафильм атып алып, төрлө сепрәктәрҙән ҡурсаҡтар тегеп, Ҡурсаҡ театрын ойоштороп ебәрҙем. “Ҡурсаҡ артистар”ҙы велосипедҡа тейәп күрше урамдарға әм ауылдарға гастролдәргә йөрөй инек. Барыбыҙ ҙа сама менән бер йәштәге малайҙар. Билет хаҡы 5 –10 тин. Ишек төбөндә ике контролер торор ине. Аҡсалары булмағандарға тамашаға инеү хаҡы ике йомортҡа йәки ике буш шешә. Йомортҡаны атып, шешәләрҙе магазинға тапшырып аҡсаға әйләндерәбеҙ ҙә театр өсөн кәрәк-ярақтар атып алабыҙ”.

Бына ҡайҙан килә икән ул үҙ-үҙеңде финанслау, коммерция менән шөғөлләнеүҙең әм етәкселек итеүҙең тәүге орлоҡ-шытымдары. Кесе йәштән тормош йөгөн үҙ иңдәренә алып бәхет эҙләргә юлланған үҫмерҙең оло тормош юлына көйләнеүе шул булғандыр, ахыры.

... уғыш осоро. Унан уңғы йылдарҙа тыуған быуын кешеләренә оҡланам да, ғорурланам да! Бына шундайҙарҙың бере е, – биш йәше тулыр-тулмаҫ әсә енән

тороп ҡалып, ата ы ҡарамағында үςкән өс малайҙың иң кесе е. Тыуған ере – Баймаҡ районының Түбә руднигы. Поэтикалаштырып әйткәндә, тарихи, аҙағыраҡ төбәктең гимнына әүерелеп киткән "Күк Ирәндек буйында" йыры тыуған урында донъяға тәүге ауазын алған ул. "Үҙ билдәләнеше менән тыуған малайҙың ата-әсә е кем уң?"– тип орар күптәр. Урынлы. Ата ы, Мәжит Ғәли улы,– Түбә руднигында начальник, партком секретары, әсә е Фәриҙә – шунда уҡ лаборатория етәксе е.

1949 йылда, Ғәлимовтар ғаилә е матур, татыу йәшәп ятҡан бер осорҙа, әсәләре йәш көйөнсә сырхаулап, шул сирҙән аяҡҡа баςа алмай, яҡты донъяны ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсә. Ата ы ҡатынын уңғы юлға оҙатыу сара ына ауыл мулла ын саҡырғаны өсөн эшенән бушатыла. Ҡатын ыҙ ҙа, эш еҙ ҙә, бере енәнбере е бәләкәй өс ир бала менән тороп ҡалған утыҙ йәште уҙған яңғыҙ ирҙең хәлен аңларға була. Нишләргә, ҡайҙа барып, кемгә уғылырға? Ундай саҡта кәңәш итеүселәр табыла... Берәүҙәр малайҙарҙы балалар йортона ебәрергә, икенселәре тиҙ арала өйләнергә кәрәклекте аңлата. Димсе диңгеҙ кистерә тигәндәй, итәғәтле, йомшаҡ күңелле, алсаҡ холоҡло бер матур ҡатынды димләйҙәр Мәжит ағайға. Күрергә, өйләшергә бара. Эш бешкәндәй булды, тип кире ҡайтырға ат дилбәгә ен тотоп бына-бына ҡуҙғалам тигәндә, кинәт кенә тарантасҡа йәш ҡатын килеп ултыра. Шуны көткән юртаҡ ат хужа ын үҙ йортона елдертә. Баҡти әң, үҙе теләп килгәне теге димләнә торған, өйҙә ултырып ҡалған итәғәтле ылыу ханымдың ике туған еңле е булып сыға. Улар йорт ихата ына килеп ингәс тә, өс малайҙың иң оло о йүгереп килеп, Мәрйәм апайҙы "әсәй" тип ҡосаҡлап алғас, атай кешенең күңеле ирей.

Осраҡлы хәлме, яҙмышмы... Ҡай ылай булғанда ла бер йән булып тормош ҡороп алалар ҙа китәләр. Бер уйла аң – был донъяла ниҙәр генә юҡ... Ғаилә башлығы Сибайға күсеп килгәс, ҡатынлы ла, эшле лә була, уландарын да балалар йортона ебәрмәй, үҙ янында ҡалдыра. Шулай уҡ Сибай ҡала ы тарихына инеп ҡала ул. Өфө – Сибай тимер юлын башлап төҙөүсе етәкселәр ара ында уның да исем- шәрифтәре бар.

Бөтә эштә лә сос, үҙ әсә ен алмаштырған батыр холоҡло Мәрйәм апа ына Дамир Мәжит улы бөгөн дә рәхмәтле. Сөнки әле генә донъяға баҡҡан йәш үςмерҙең ик еҙ-сик еҙ хыялдарын тормошҡа ашырыу мөмкинселектәре ғаиләнең фәҡәт Сибайҙа йәшәүенә бәйле булған бит. Мәктәп йылдарында үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәренә йөрөй. уңғараҡ – Р. З. Зөбәйеров ойошторған халыҡ театрының иң актив ағзаларының бере е. Үҙ ғүмерендәге онотолмаς тәүге ролдәрҙе лә ошонда башҡара. Оло маҡсатына юл башы Сибай халыҡ театры булған, ти әк тә хата булмаς. Киләсәктә режиссер өнәре тура ында хыялланыуының мәңгелеккә үҙ булмышына оялауы ла шул замандарҙа Урал аръяғындағы билдәле үҙешмәкәр сәнғәт оςталары менән ихлас аралашыуынан килгәндер, моғайын. Үςә төшкәс, артабанғы тормош юлын выждан, рух, ила ийәт, намыς юғарылығынан ижади үҙаллылыҡҡа ынтылыу юлдары тип атай ул. Был юғары пафослы, ҡанатлы үҙҙәр түгел. Шул фекерҙән башлана мө им әм киςкен боролош.

Эйе, ан ат ҡына яуланмай шул сәхнә түрҙәре. айланған профессияңа хыянат итмәү өсөн күпме көс, ғәйрәт киткәнен шул юлды үтмәгән кеше генә белмәй. Янып-көйөүҙәр, икеләнеүҙәр, үҙ-үҙең менән бәхәскә инеү әм үҙеңде еңеү еңел түгел. Сөнки оло сәнғәт донъя ына көйләнгән йәш кешенең таланты менән бергә егәрлелек берлеге бул а, алда йөкмәткеле ижад емешенә өмөт бар. Юҡ икән,

яланғас билгә ҡалын ҡайыш килешмәй, тиҙәр бит. Шөкөр, был ике төшөнсәнең дә берҙәй үлсәмдә булыуы – бик ирәктәр өлөшөнә төшкән көмөш. Ун ете йәшендә театрға булған бөтмәҫ мөхәббәте ер йөҙөндәге иң матур ҡалаларҙың бере е Ленинградҡа илтә. Йәшлек дәрте йәненә, ҡанына тынғылыҡ бирмәй. әр күҙәнәге театр тип яна ул йылдарҙа.

Биш йыл уҡыу дәүере, буталсыҡтан йомаҡ эҙләгәндәй, иң иҫтәлекле йылдары булып, шаулап, гөрләп үтеп тә китә. Ленинград ғүмерлек абаҡ бирә Дамир Ғәлимовҡа. Төп фәндәрҙән бөйөк шәхестәр: Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре А. И. Кацман әм күренекле Повстагановтар уҡыта. Улар йөҙөнән ҡабул иттем тәүге профессиональ театр серҙәрен, әм бейеклектәргә артылыр сәмле лә, ҡатмарлы ла, мауыҡтырғыс тынғы ыҙ хеҙмәт юлына ла улар фатиха бирҙе, тип иҫләй бөгөнгө театр ветераны. Сибайға ҡайтыу менән юғары белемле йәш белгесте Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге мәҙәниәт арайына директор итеп тәғәйенләйҙәр. Ул йылдарҙа театр Баймаҡ ҡала ынан Сибайға күскән була. “ ин Сибай сәхнәләренең батша ы, әйҙә, йырла, бейе, ижад ит!” – ти уға яҙмыш. Ошолай итеп яуаплы йәнгә шифа булырҙай, күптән көткән сәхнә юлдары асыла.

Оҫта бейеүсе, хореограф та Дамир. Бөгөн урта быуын тамашасыларының әле лә күҙ алдында уның осоп төшөп башҡарыуындағы “Бесәнсе” бейеүе. әр уңыш үҙеңдең әләтеңдән, тырышлығыңдан тороуын кесе йәштән төшөнгән йәш актер Сибай театры сәхнә енә тәүге тапҡыр аяҡ баҫыуын көтмәгәндә ҡабул итә. Шулай бул а ла, ис осраҡлы түгел. 1967 йылда режиссер Рафаэль Әйүпов ауырып киткән актер Ҡәйүм Хөсәйенов урынына спектаклдә уйнарға саҡырып ала. Ана шул ғүмерҙәрҙән театр майҙаны уның иңендә. Эшенә мөкиббән ғашиҡ кеше тура ында яҙырға уйлағас, уның уйнаған ролдәрен бер-бер артлы күҙ алдымдан үткәрҙем. Сөнки ғүмер буйы бер ҡалала йәшәйбеҙ. Уҙған йылдар уҙымындағы артист булараҡ уйнаған ролдәренең әммә е лә үҙенсәлекле – фәҡәт Ғәлимовса! Мәҫәлән, И. Йомағоловтың “Семәрле тәхет”ендә – Ишбулат, Бөҙрәхан, И. Абдуллиндың “Йыр булып ҡайтырмын”ында Вәсил, М. Ғафуриҙың “Ҡыҙыл йондоҙ”онда – Хәким. Республика күләмендә уҙғарылған театрҙар фестивалдә М. Фәйзиҙең “Башмағым” спектаклендә Еҙнәкәй роле менән “Оҫта башҡарыусы” номинация ына лайыҡ булды. Бары ын да анап бөтөү мөмкин түгел. Сәхнә ҡанундарын яҡшы белеүен, даими эҙләнеүҙәрен ихлас, ең ыҙғанып сәхнә майҙанын тотоуға йүнәлтә. Шуға ла Б. Бикбай менән З. Исмәғилевтың “Ҡоҙаса” ында Д. Ғәлимовтың Яппарын башҡа Яппарҙар менән бутау ис мөмкин түгел. Ҡай ы ғына ролен алма, ижадҡа шәхсән ҡараш тойомлана. Ысын актер шулай булырға тейеш тә. “Камиллыҡтың сиктәре юҡ” тигәнде үҙ ваҡытында төшөнгән сәхнә оҫта ы дөйөм интеллект юғарылығы тура ында уйлана башлай. Шул маҡсатына ярашлы, Мәскәү ҡала ындағы Мәҙәниәт әм сәнғәт өлкә ендәге етәксе кадрҙарҙың квалификация ын күтәреү институтын тамамлай. Тырышлыҡ бушҡа китмәй. Рәсәйҙең, Башҡортостандың, сит ил театрҙарының эшен, йөҙөн төҫмөрләр әм сағыштырыр кимәлгә етә. Тәжрибәлелеккә, юғары рухи киңлеккә намыҫ менән ынтылған булмышына бер юлы өс ауыр йөктө тартыу мөҙҙәте етә. Театрҙың директоры, художество етәксе е, режиссер, хатта ҡай ы бер осраҡтарҙа актер ҙа. Күңелендәге ила и ҡөҙрәтте эшкә егеп, бары ын да берҙәй ихласлыҡ менән тарта. Оло сәнғәттә милли театр торошон планетар кимәлгә күтәрергә тырышыу – ижад юлындағы иң ҡатмарлы, уйлы, ғәмле әм сәмле туҡтау ыҙ ғәмәл. Бәйгелә сапҡан ат ымаҡ, туҡтамай ың. Ябай кешенең күҙенә күренмәгән, иҙемләп тоя торған хәҡиҡәтте эҙләй ең. Уны тап аң, тамашасыны йәлеп итеү өсөн ышанды-

рыу ысулдарын хасил итеү ҙә үтә ҡатмарлы шөғөл. Мәҫәлән, юғары оҫталыҡҡа хәрәкәт итеүҙең, йәғни талым ыҙ эҙләнеүҙең бер күренеше – Дамир Мәжит улы тарафынан сәхнәгә ҡуйылған Т. Закировтың “Яусылар”ы. Ул әр кемдең күңеленә ятышлы. Сәхнә теленең матурлығы, милли үҙенсәлеге тамашасы теләгенә тап килә. Был сәхнә әҫәре менән Сибай артистары ҡайҙа ғына барма ын, ниндәй генә театр майҙанын биләмә ен, тамашасы ҡабул итә, ярата, аңлай. Ошо бит ул халыҡсанлыҡ – был бәхәс еҙ. “Яусылар”ҙағы ролдәрҙе башҡарған Рәсәйҙең әм Башҡортостандың атҡаҙанған артистка ы Рәзинә Ҡа армановаңы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Хәмзә Ҡурсаевты, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Юнир Ғәйнуллинды, Нурзиә Әбдрәшитованы тамашасы бөгөн дә йылы итеп иҫкә ала. Ҡатмарлы тормоштоң хәл-ваҡиғаларына ҡарата дөрөҫ мөнәсәбәттә булыуы, уларҙы яҡшы тоҫмаллауы, ниндәй әҫәргә тотон а ла, әммә ен дә үтемле итеп оҫта ҡора белеүе, етди ҙә, көлкөлө лә, шул ваҡытта тәрбиәүи ә әмиәткә лә эйә булыуы хас был спектаклгә.

Шул сифаттары менән алдыра ла инде режиссер Дамир Ғәлимов. Әйтәйек, Н. Ғәйетбайҙың “Аты барҙың дәрте бар” (“Ҡартаямы был йөрәк?”), “Юлдар ярҙа өҙөлә”, Ф. Бүләковтың “ өйә еңме, өймәй еңме?”, Б. Исҡужиндың “ уңғы аҡсарлаҡ”, Н. Асанбаевтың “Рәйсә+Фәйзи” спектаклдәрен халыҡ ихлас ҡабул итте. Рәлиф Кинйәбаевтың “Их, Байтимер дуҫ” әҫәрен Д. М. Ғәлимов Бөйөк Еңеүҙең 55 йыллығына бағышлап сәхнәгә ҡуйҙы. Бында совет ғәскәрҙәре тарафынан әсир итеп алынған немец алдаты Фрис Клаус (БР-ҙың атҡаҙанған артисы Р. Ба ауетдинов) үҙенең күпмелер көндәрен Башҡортостандың Торатау эргә ендәге төрмәлә уҙғара. Бында ул ҡаты ауырып китә. Ҡарауылда торған совет алдаты Байтимер Шәрипов, немецты йәлләп, дарыу үләндәре биреп, ауығырға ярҙам итә. уғыш бөткәндән уң 55 йыл үткәс, Фрис Клаус 15 уғыш ветеранын, шул иҫәптән Байтимер Шәриповты, Германияға ҡунаҡҡа алып ҡайтырға килә. Спектакль тамашасыны бер туҡтау ыҙ көлдөрә лә, уйландыра ла. Бында режиссер сәхнә аша бөгөнгө ауыл тормошонда ярылып ятҡан кеше мөнәсәбәттәрендәге ғәҙел еҙлекте фашлай. Германияға барыусылар исемлегенә Байтимер урынына хакимиәт башлығы менән колхоз председателе үҙҙәренең кандидатураларын тәҡдим итә. Сәхнә әҫәренең төп мө им сиселеше өлгөлө әхлаҡи ҡиммәттәргә эйә булған уғыш ветераны Тимербай образы аша атҡарыла. Ҡыҫҡа ы, драматург менән режиссер бер-бере ен аңлап, хатта әҫәрҙәге әйтелмәгән, йәшерелгән фекерҙәрҙе әләтле артистар тырышлығында ым-ишара, хәрәкәт аша еткереп хайран итте театр өйөүселәрҙе. Тамашасының иң лайыҡлы ба а ын алды “Их, Байтимер дуҫ”. Шулай уҡ, Т. Ғарипованың бөгөнгө көн ҡаҙағына уғырлыҡ актуаль сюжетты үҙ эсенә алған “Китмәгеҙ, торналар”ы, бына инде ете йыл дауамында, сәхнәнән төшмәй. Беҙҙең Урал аръяғы төбәге тамашасылары уны икешәр тапҡыр ҡараны, ти әм дә арттырыу булмаҫ. Әле ошо көндәрҙә Силәбе, Свердловск өлкәләренән, Силәбе ҡала ынан “Китмәгеҙ, торналар” спектакле менән гастролдәргә килеп китеүҙе ораған хаттар күп. Ошонан да юғарыраҡ ба аның булыуы мөмкинме?

Әлбиттә, Сибай сәхнәләрен биҙәрлек, уларға яңы йән өрөрлөк сәхнә әҫәрҙәре байтаҡ. Шундайҙарҙың бере е – күренекле шағирә Тамара Ғәниеваның “Тамарис” трагедия ы. Ул ябай тамашасы өсөн үтә лә ҡатмарлы. Шулай булыуы менән әҫәр иммәтле, сөнки тамашасыны уйлы, ғәмле итеү көсөнә эйә. Ваҡиғалар беҙҙең эраға тиклем беренсе мең йыллыҡтың урталарында башҡорттарҙың боронғо нәҫелдәренең илендә бара. Бында уларҙың мөстәҡиллеген аҡлап ҡа-

лыу – тәүмаҡсат. Төп ролде башҡарыусы Нәжибә Искәндәрова, бер ҡара аң, ғәййәр хакимә, икенсе ендә – мөхәббәт утында яна... Актриса бер үҙе ҡапма-ҡаршылыҡлы ике образды кәүҙәләндерә, шул уҡ ваҡытта башҡа образдарҙы бәйләп, бер сюжетҡа теҙеп, тарих төпкөлдәрендәге ысынбарлыҡты халыҡҡа еткереүҙә мө им роль уйнай. Хатта ки Тамарис ырыуҙың киләсәге өсөн мөхәббәттән баш тарта – өйгәне, ғәскәр башлығы Арыҫланды үлтерә, сәхнә әҫәренең оло драматизмы ла, трагизмы ла ана шунда. Бындай әҫәрҙе сәхнәгә ҡуйыр өсөн күпме рух, ила илыҡ, энергия, рух көсө талап ителә. Бары ын да үтәгәс, әлбиттә, тамашасы зи ене яулана. өҙөмтәлә театр коллективы “Туғанлыҡ” халыҡ-ара театрҙар фестивалендә “Тамашасы өйөүе” номинация ында еңеүсе булды.

Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә, ти халыҡ. Нисек кенә талантлы булма, башҡаларҙың ижады менән танышмайынса, үҙеңде уларға күр әтмәйенсә, үҙ туҡ аныңды туҡ анлап мәҙәниәт юлынан алға барыуы икеле, тип ҡабатларға ярата Д. М. Ғәлимов. Әйткән үҙе менән эшенең тап килеүенә З. Исмәғилов менән Б. Бикбай ижад иткән “Ҡоҙаса” музыкаль комедия ын сәхнәгә ҡуйыуы үҙе бер өлгө. Спектакль репертуарҙан төшөп ҡала торған сәхнә әҫәре түгел. әр замана кешеләре яратып ҡарарлыҡ. Мәскәү ҡала ында уҙған Башҡортостан көндәрендә иң талапсан тамашасы, көслө алҡыштарға күмеп, быны иҫбатланы. Йәнә лә етәксе, режиссер, актер менән тулы гармонияла булып, уларҙың дәрте менән янғас, республикабыҙҙың халыҡ артисткаларының бере е Рәмилә Хоҙайғолова Н. Ғәйетбайҙың “Төн” трагедия ында . Дәүләтшина ролен башҡарып, икенсе е – Рәмилә Сәлимгәрәева “Ҡоҙаса” музыкаль комедия ында Шәмсиәне уйнап, ҡатын-ҡыҙ ролен иң яҡшы башҡарыусыларға бирелгән Бәҙәр Йосопова премия ына лайыҡ булдылар. Шуға ла режиссер әр бер спектаклде тамашасы хөкөмөнә сығарыр алдынан ете тапҡыр үлсәп, бер тапҡыр киҫә. Миҫал. Уның сәхнәләштереүендә З. Биишеваның “Тылсымлы ҡурай” драматик легенда ын тәүге тапҡыр сәхнәгә сығарыу башҡорт драматургия ында, милли театр сәхнә ендә әм Сибай дәүләт драма театрында иҫтәлекле ваҡиға булды. Көсөргәнешле ижад емешенең өҙөмтә е оҙаҡ көттөрмәне. Профессиональ театрҙар ара ында үткәрелгән балалар әм үҫмерҙәр өсөн спектаклдәрҙең I Республика фестивалендә “Тылсымлы ҡурай” Гран-при яуланы. Ижад үрҙәре бейек, сик еҙ. Ул әр ваҡыт камиллыҡҡа ыу ай. Шул юлда үҙеңә арҡадаш булырҙай ижадташтарың булма а, яңғыҙ ҡарға яҙ килтерә алмай бит ул, тине ҡала радио- ына биргән бер интервью ында Дамир Мәжит улы. Ысындан да, ҡатмарлы драматик материалдарҙы, үҙенсәлекле мифик образдарҙы, тылсымлы әкиәти костюмдарҙы, сәхнә биҙәлешен, а әңле көй-моңдарҙы тамашасы зауығына тап килерлек итеп ҡуйған композитор Ю. Үҙәнбаевтың, рәссам Э. Ғиззәтуллиндың, хореограф С. Ғәбитоваларҙың тырышлыҡтарын иҫәпкә алмау мөмкин түгел. Бына шулай күмәк көс менән тыуа икән йөрәкте елкендереп, күңелде биҙәрлек сихри сәхнә донъя ы.

Ҡалала яңы спектакль! Исеме уңғы йылдарҙа халыҡ ара ындағы көндәлек өйләштә ирәк ҡулланыла торған үҙ – “Бисәкәй”. Авторы – А. Мөбәрәков, режиссеры – Д. Ғәлимов. Театр бит авторҙың исемен йөрөтә. Исеме есеменә тап киләме? Кемдәр уйнай? Ошо әм башҡа орауҙар ҡыҙыҡ ындырҙы Баймаҡ, Сибай әм яҡын-тирә ауылдарҙың тамашасыларын. Ҙур теләк менән килде төбәк халҡы спектаклгә.

... Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, тигәндәй, утыҙлап актер ҡатнашлығында-

ғы коллектив Бөйөк Ватан уғышының аяу ыҙ тыл күренештәренең билдәле бер осорон сибайҙар хөкөмөнә тәкдим итте. Ҡапма-ҡаршылыҡлы ауыр заман ысынбарлығы йәштәрҙең дә, ололарҙың да күңелдәрен нескәртеп кенә ҡалманы, ә илатты ла. Әйтергә кәрәк, тыл тормошо “Бөтә нәмә фронт өсөн, еңеү өсөн!” тигән оптимистик рухта бар а ла, кемдер көн итәм тип урлаша, кемдер мутлаша. Тылда ил яҙмышы хәл ителгән бер мәлдә оло яуаплылыҡты ҡатын-ҡыҙҙар үҙ иңенә ала. Төп ролдә Башҡортостандың атҡаҙанған артистка ы Нурзиә Әбдрәшитова – “бисәкәй” Утлыбикә. Тарихта ҡалған шул замандың миллиондарса ҡатын-ҡыҙҙарын дөйөмләштергән әм типиклаштырған Утлыбикә образы. Төп геройҙың “Бисәкәй” тип бирелеүе бөгөнгө йәштәргә әм килә е быуындарға тыуған ер, Ватандың әр кем өсөн йәндәй ғәзиз икәнлегенә ишара. Сөнки колхоз председателе – “бисәкәй” Утлыбикә етәкселегендә фронтҡа ашлыҡ үҫтереү, икмәк әҙерләү киң ҡоласлы яуаплылыҡ менән атҡарыла. “Бисәкәй” спектакленең ҙур аншлаг менән барыуында театрҙың билдәле актерҙарының өлөшө ба алап бөткө өҙ. Әйтәйек, БР-ҙың халыҡ артистары Риф Сәйфуллинды (Мөлөк), Зифа Баязитованы (Хәҙисә), Рәмилә Хоҙайғоловaны (Мөслимә), Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Әлфирә Йосоповaны, Айгөл Хәкимованы халыҡ көслө алҡыштарға күмде. Ә иң мө име – үткер холоҡло, егәрле, тәрән психологизм менән уғарылған председатель “бисәкәй” образын ынландырып, Нурзиә Әбдрәшитова үҙ тирә ендәге башҡа образдарҙы баҙыҡландырҙы. Улар: Юнир Мансуров – Тимерйәр, Вадим Ғилманов – Ба ау, Резеда Абдуллина – Сәкинә, Гүзәл Байғотлина – Тәнзилә, Гөлфиә Мырҙагилдина – Мәхүп, Әлфирә Ғәлләмова – Мәрхәбә .б. Шуға ла ул “Йыл актеры-2009” исеме менән йондоҙ итеп балҡытты үҙен. Ғөмүмән, “Бисәкәй” әҫәре – киләсәк быуындар өсөн үҙе бер абаҡ. Ул иҫкермәй ҙә, юғалмай ҙа торған тарихыбыҙҙың аяныслы биттәренең бере е.

Эйе, театр тип янған йөрәктең төрлө мәлдәре, көйөнөстәре, өйөнөстәре, хатта үҙәккә үтерлек ауыр көндәре, сәғәттәре бул а ла, Дамир Мәжит улы ауыр ижад йөгөнән баҫылмай ҙа, сүкмәй ҙә, кире енсә, киләсәктә үҙенә-үҙе ыймай, киңерәк, тапалмаған ижад майҙандарын яуламаҡсы. Ни әйтә ең? Афарин! Етәксе, режиссер өсөн бер үнеп, бер ҡабыныуҙар хас түгел бит ул. Шуға ла тотошлай тормошо, йәшәйеше тынғы белмәҫ эҙләнеү юлында. Был бит – ирәктәр өлөшөнә төшөр яҙмыш. Әйткәндәй, оя ында ни күр ә, осҡанда ла шул була, тигәндәй, Ғәлимовтар ғаилә енең әр бере е мәҙәни юҫыҡҡа көйләнгән. Тормош иптәше Земфира Зәки ҡыҙы Өфө сәнғәт институтының режиссура бүлеген тамамлаған. Тиҫтә йылдан ашыу Сибай сәнғәт мәктәбен уңышлы етәкләгәне өсөн “Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре” исеменә лайыҡ. Ҡыҙҙары Гөлшат – Стәрлетамаҡ ҡала ында режиссер, улдары Рөстәм дә театрҙа эшләй. Талант эйә е өҫтәүенә өлгөлө атай ҙа бул а, бөтә төр хужалыҡ эштәренә лә әләтле әм өлгөр була, тигән дан хәбәр йөрөй халыҡ ара ында. Ысынлап та, шулайҙыр. Ғаилә башлығының әр яҡлап эшмәкәрлеген барлағанда, тағы бер нәмәне әйтмәү мөмкин түгел. Театрҙың материаль-техник база ын тулыландырыуға байтаҡ ваҡытын бүлә. Ҙур йортҡа ни кәрәк, бәләкәйенә лә шул кәрәк, тигәндәй, гример, парикмахер, реквизит, костюмдар тегеү цехтары – юғары интеллекттан туҡылған сәнғәт эше. Уларҙың ритмлы әм заман талабына яуап бирерлек эштәренең торошо туранан-тура етәксегә бәйле. әр ваҡыт күҙгә күренерлек, халыҡ күңелен яуларлыҡ әм уның хәтерендә ҡалырлыҡ ба алы, из-

ге эштәр атҡарып өйрәнгән хужа транспорт аҡлау әм ремонтлау өсөн гараж, ә иң мө име – өр-яңы театр бина ын төҙөтөп, унының эске әм тышҡы биҙәлешен тамашасы зауҡына тап килтерерлек хәлгә еткереп хайран итте сибайҙарҙы. Был – театр тарихында ғына түгел, ә ҡала, төбәк киңлегендәге шатлыҡлы яңылыҡ. Театрҙың бөгөнгө ө әм киләсәге өсөн барған әр эштә көсөн йәлләмәгән остаз дәрәжә енә күтәрелгән сәнғәт эшлекле е – уңғы йылдарҙа фәҡәт үҙе ҡуйған егерме бишләп спектаклдең режиссеры. Башҡортостандың йәки сит өлкәләрҙең генә түгел, хатта Мәскәү тамашасыларының күңелен яуланы Д. М. Ғәлимов. а-най кит әң, егерме йылдан да ашыу етәкселек итеү осоронда яуланған үрҙәре бихисап. Гран-при, призлы урындар, тамашасы өйөүе, дипломдар, маҡтау ҡағыҙҙары, бүләктәр, премиялар – былар бөтә е лә хеҙмәтенә күрә хөрмәте. Мәҙәниәткә бағышланған ғүмер эйә енән: “Уңыштарығыҙҙың нигеҙе нимәлә?”– тип орай ҡуйҙым. “Эштең вағын, ҙурын айырмай, ҡара ын әм ағын бергә башҡарыуҙа”,– тине ис тә икеләнмәйенсә. Шулайҙыр, шулай булма а, тиҫтә-тиҫтә йылдар элек, халыҡ театрының режиссеры булған сағында, артистарҙың әр бере енә сәхнә кейемен үҙ ҡулдары менән тегеп, тамашасы өйөүен яуламаҫ ине бит. Эйе, кәрәк саҡта үҙенең хикмәтле яҡтарын эшкә ҡушыуҙан бер ҙә тартынмай. Ҡала хакимиәте тарафынан бирелгән аҡсалата премия ына Сибай баҙарынан йөн, дебет тетә, иләй, сирата торған машина атып алыуы күптәргә мәғлүм. Ҡала хакимиәте башлығынан иҫтәлек булып ҡал ын тип алған ул уны. Ул бөтә эшкә ма ир: етеҙ ҡулдарының ойоҡбаштар, аллы-гөллө шарфтар, дебет шәлдәр бәйләүе – үҙе бер мөғжизә. Улар тәнде генә түгел, йәнде лә йылыта. ис тә ғәжәп түгел унының был үҙенсәлекле ғәмәле. Сөнки 65 йыл оҙонлоғондағы ғүмеренең аҫыл ептәрен донъябыҙҙың милли мираҫ биҙәктәре, рухи өлгөләре менән тоташтырып, уларға ижад ҡомарының йылы ын өрә. Шулай йәненә тыныслыҡ, рухи аҙыҡ, тормошона йәм, өр-яңы ижади табышҡа юл ала. Эйе, ҡулы – бәйләмдә, зи ене ҙур-ҙур ила иәтле сәхнә майҙандарын айҡай ҙа байҡай. Ул шулай йылдар бәйләменә күҙ ала, йылдар оҙонлоғон барлай.

Бөтә ғүмер йылдары театр тип янған, уларҙың әммә е лә ҡәҙерле. Үҙенең геройҙары аша оло она ла, кесе енә лә мөрәжәғәт иткән. Замандаштарының матур ҙа, өлгөлө лә, аяу ыҙ ҙа яҙмыштарын ынландырып уларға яҡынайған, үҙен хөрмәт иттергән. Ана шул була яҙмыштың иң яҡты ы, бәхеттең иң оло о. Киләсәктә лә шулай бул ын! Амин!

**Таң ылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**
**Сибай ҡала ы.**

**МАРАТ ӘМИНЕВ**

## *ТУҘАН*

Сәми урамдан ҡайтып кергәс диванға  уйҙайып ятты ла телевизор ҡабыҙҙы. Яңылыҡтар бара,  аман да шул кризисты тылҡыйҙар. Америкала банктар бигерәк ауыр хәлдә икән. Францияла эш еҙ ҡалыусылар урамдарға сыға. Австралияла урмандар яна, Италияны  ыу баҫа. Үәт, мәхшәр, донъяның бөтөнләй рәте китте. Быға нимә сәбәпсе: экология торошо хөртәйәме, әллә ил башлыҡтарындамы ғәйеп? Ер шарына ҡурҡыныс янамаймы икән, берәй метеорит килеп төшмә ен тағы. Марсҡа ла сығып ҡасып булмай. Ә ул Марста тормош бармы икән, юҡмы?

Көсөргәнешле уйҙарҙан Сәмиҙең мейе енә көс төштө, буғай, сикәләре ҡыҫып ҡуйҙы. Ул телевизорҙы  үндерҙе лә, уфтанып, икенсе яғына әйләнеп ятты. Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты, кухняла ашарға әҙерләп йөрөгән ҡатынының шатыр-шотор килеүе генә ишетелә.

Ҡатын бигерәк рәхәт йәшәй, тип көр өнөп ҡуйҙы Сәми. Донъялағы кризис та, Австралиялағы янғын да, Италияны  ыу баҫыуы ла борсомай уны. Үҙенә юҡ-бар эш табып, бер нәмә күрмәй, белмәй тыныс ҡына йәшәй бирә.

Тамаҡ ялғап алғас, Сәми бөгөнгө гәзиттәрҙе ҡараштыра башланы. Дә-ә, илдең алтын запасы бер аҙ кәмегән икән. Шәп хәбәр түгел был, бер ҙә шәп түгел.

– Сәми, картуф бөтөп килә, ярты биҙрәлә генә ҡалды, иртәгә юл ыңғайы баҙарға кереп сығыр ың әле. – ауыт- абаны йыйыштырып алғас, кер йыуырға тотонған ҡатынына ире яуап ҡайтарманы. Дөрөҫөрәге, илдә алтын запасы кәмегән мәлдә ярты биҙрә картуф хаҡында  үҙ башлауына хәтере ҡалды.

Ҡара әле,  башҡа цивилизациялар ҙа булырға тейеш, тип яҙалар, бул а, хәтәр бит. Йы андағы бөйөк шартлауҙан, туҙандан яралған күктәге есемдәр ара ында тормош булған, аң-белем кимәле буйынса беҙҙән өҫтөнөрәк тороусы йән эйәләре лә барҙыр, бәлки.

– Сәми, балаҫтарҙы ҡағып индер әле, саң баҫҡан. – Керҙәрен элеп, иҙән йыуырға тотонған ҡатынының был  үҙҙәренән  уң ир яр ыуынан өндәшә алмай торҙо. Башҡа донъялар, глобаль мәсьәләләр хаҡында уйланып ятҡан кешене балаҫ туҙанын ҡағырға ҡушсы әле! Масштабтар бөтөнләй икенсе түгелме  уң?

– Баш ауырта, ятып торам әле. – Мығырлап, ир ҡабат диванға  уйҙайҙы. Ята торғас, ҡатынына булған асыуы бер аҙ  үрелде. Хәйер, уларҙан нимә көтә ең инде, бөтөнләй икенсе планета кешеләре бит улар, ваҡ-төйәк менән булашып ғүмерҙәре уҙа. Сәми кеүек тотош Йы ан, планеталар, илдәге алтын запасы хаҡын-

да уйланырға баштары етәме ни уларҙың?! Әлбиттә, ҡатыны бай ойошмала мул эш хаҡы алып эшләй. Бәй, Сәми ҙә урынлашыр, теге эшенән китеүенә ярты йыл да юҡ бит әле. Ни хәл итә ең – кризис.

Сәми икенсе яғына боролоп, Йы андағы туҙан хаҡында бер аҙ уйланып ятты ла хырлап йоҡлап та китте.

## УЛТЫРЫШ

Утыҙ йыллап ябай хеҙмәткәр булып тир түккән Хәй Хәмиевичты үҙе эшләгән бәләкәй генә ойошманың етәксе е итеп тәғәйенләнеләр. Дөрөҫөн әйткәндә, был көндө ул оҙаҡ көттө. Элекке директорҙы үрләткәс, ойошмала Хәй Хәмиевичтан башҡа өс пенсионер ҙа институтты быйыл тамамлап килгән ике йәш белгес кенә тороп ҡалды шул.

Тәүге көнөн директор вазифа ында ҡаршылаған Хәй Хәмиевич иркен кабинетты ҡәнәғәт йөҙ менән байҡап сыҡҡас, өҫтәлдә өйөлөп ятҡан гәзиттәргә ҡапланды. Түрәләрҙән ҡасып ҡына рәхәтләнеп гәзит уҡыу – элек уның иң ҙур ҡыуаныстарының бере е ине. Тик тыйыусы, эш менән бул, тип әрләүсе булмағас, гәзит уҡыу тиҙ ялҡыта икән. ыра эсеү – уның икенсе ҙур кинәнесе, тик был шәп мәл төшкө ял ваҡытындараҡ тәтей торғайны. Әле и ә иртәрәк, эш көнө саҡ башланып тора.

– Бул а ни, – тип үҙ алдына өйләнде директор. – Үҙем баш, үҙем түш, телә әм – иртән эсәм, телә әм – төштән уң.

Ул йыуан баш бармағы менән кнопкаға баҫты ла документтар алынған папканы алдына алды.

– Тыңлайым, Хәй Хәмиевич!

Мөкиббән китеп алдындағы ҡағыҙҙарға текәлгән директор оҙаҡ көттөргәндән уң ғына башын күтәрҙе лә... ораулы ҡарашын үҙенә төбәп ҡатып ҡалған секретарь ҡыҙға бер литр ыра килтерергә ҡушты. Бындай йомошто үтәп өйрәнмәгән ҡыҙҙың күҙҙәре маңлайына менде, ул хатта осаларын уйнаҡлатырға ла онотоп, сығып ыҙҙы. Ә директор ҡәнәғәтлек менән ҡулдарын ыуҙы. Түрә бул аң рәхәт икән, ана бит, элек ыра тип үҙе саба ине, хәҙер килтереп кенә бирәләр. ыра эскәс, бер аҙ йөрөп килер. Элекке директорҙары шулай итә ине бит. Түрә булыуҙың нимә е бар? Иртән коллективты йыйып, эшләмәй егеҙ, тип өҫтәл уға ың да, көнө буйы юғалып йөрөп, эш сәғәте бөтөр алдынан килеп, өҫтәлде йәнә бер төйөп ҡайтып китә ең.

Тик Хәй Хәмиевичҡа был көндө лә, иртәгә енә лә ыра менән ыйланырға тура килмәне. Йә әт кенә хакимиәткә кәңәшмәгә килеп етергә ҡуштылар. Уны ы өс сәғәттән бөткәйне, янғын хәүеф еҙлеген тәьмин итеү буйынса комиссия ултырышына саҡырҙылар. Уның артынса төҙөкләндереү буйынса комиссияның йомғаҡлау йыйылышы башланды. Ә кисенә сираттағы айлауҙы үткәреүгә арналған «түңәрәк өҫтәл» ойошторолдо. Иртәгә ен беҙҙең тормошто көндән-көн яҡшырта барған партия вәкилдәре килеп, кискә тиклем үҙҙәре өсөн тауыш бирергә өгөтләне, ә тәнәфестәрҙә ике кәңәшмә, өс комиссия ултырышы булды.

– Өйөңдө оноттоң да а түрә булғас, ҡайҙа йөрөнөң? – Төн еткәс ҡайтып кергән иренә ҡатыны аныҡ орау бирҙе.

– Ултырыш! – тип кенә яуап бирә алды Хәй Хәмиевич, үҙенең түрәнән ҡасып гәзит уҡыған, бер ҡайғы ыҙ ыра емергән сағын ағынып. Унан туҡтау ыҙ ыҙлаған арт анын ыуғылап, ыңғырашып ҡуйҙы.

## ЕҢГӘ ӨТӨ

Ихлас та инде ошо еңгәм. Телефондан өйләшкән айын ҡунаҡҡа саҡыра, килмәгәнгә үпкәләп бер була.

– Килегеҙ беҙҙең ауылға, рәхәтләнеп ял итеп, туйғансы өт эсеп китер егеҙ, – ти.

Шылтыратҡан айын берәй йомошо була, әлбиттә: йә малайын институттан ҡыума ындар өсөн уҡытыусылары менән өйләшергә кәрәк, йә итен атып алыу-

сылар эҙләшергә тура килә. Донъя мәшәҡәте бөтәме ни! Ярҙам итмәй ҙә булмай, хәләл еңгәм бит, ике туған ағай менән йәшәй.

Кисә еңгәм тағы шылтыратты.

– Ҡәйнеш, был ялда ғаиләң менән әбизәтелне кил, – тип мәсьәләне ҡаты ҡуйҙы. – Килмә әгеҙ, үпкәләйем. Рәхәтләнеп өт эсер егеҙ, теләгәнсә алып китер егеҙ. Ана, ағайың шалҡан кеүек таҙа, ауыртҡан ере юҡ, биҙрәләп өт эскәнгә шулай ул.

Ғәжәп бит. Ауылда татлы ризыҡ бөткәнме ни? Юҡ шул, еңгә бал да, ҡаймаҡ та тимәй, мунса, матур тәбиғәт менән дә ҡыҙыҡтырмай, бары өтөн маҡтай. Аңламаç ың, әллә бесәй кеүек өткә үлеп бара, үҙе әйтмешләй, мине лә биҙрәләп өт кенә емерә тип уйлай?

Ҡунаҡ булырға кем яратмай? Өйгә ҡайтып әйткәс, ҡатын да, балалар ҙа ихлас ҡыуанды. Исма ам, ауылда туғандарың да юҡ, тип йыш өйләнгән ҡатындың шатлығы айырыуса ҙур.

– Ауыл кеше е үҙе йомарт була торған, – тип, супермаркеттарҙы бер итеп йөрөп, машинаның багажнигын күстәнәстәр менән лыҡа тултырҙы был.

Машина өсөн 500 саҡрым бүстәк ул. Алты сәғәт тигәндә районға килеп тә еттек. Телдәр еңгәм кеçә телефонынан, ауылға туранан 50 саҡрым ғына ҡала, юлы насарыраҡ, әммә үтергә була, тигәйне. Юлы, ысынлап та, шәп түгел икән. Текә тауҙарҙы бер менәбеҙ, бер төшәбеҙ. Йөк машиналары урман юлын йырғыслап бөткән. Бер ташҡа, бер төп әгә барып менгән машинабыҙ двигателе тракторҙан яманыраҡ үкерә башланы. Шулай ҙа кәйеф күтәренке, алда ый-хөрмәт, эçе мунса, йылы өт көтә бит.

Ауылға төн урта ында саҡ барып еттек. Еңгәләрҙең өйөн табып, ишеген астырып кергәнсе таң ары ы беленә башлағайны. Аяҡтарҙа көскә баçып торабыҙ, хатта табында ултырырлыҡ хәл ҡалмағайны. иҙгер күңелле еңгәм быны аңланы, буғай, сәйен дә ҡуйып мәшәҡәтләнмәне.

Иртәгә енә ҡатын ярты көн буйы кейемдәрҙе таҙартты, мин машина менән булаштым. Бер ыңғайҙан алсаҡ еңгәбеҙҙе тыңлайбыҙ.

– Ошо бирән ыйырҙан ҡасан ҡотолам инде. – Хәзәйкәбеҙ бер мәл ҡыҙып китте. – Йәй буйы шулар тип бесән әҙерләй ең, ҡыш буйы ҡарай ың. Ҡаланыҡыларға рәхәт, ҡуна ятып килеп ыйланып китергә генә беләләр. өт-ҡаймаҡ тип таптырырға ла тартынмайҙар...

Хужаларҙың урамда уйнап йөрөгән бәләкәй ҡыҙҙары миңә асыулы итеп ҡарап ҡуйҙы.

– Ҡыҙым,– тип өндәште уға еңгәм. – Ағайыңдарға тигән өттө айырып алып ҡуй әле, ауыты шунда ғына.

Ҡыҙыҡай миңә тағы бер яман итеп ҡараны ла йүгереп өйҙәренә кереп китте. Еңгәм шул арала эргәгә килеп баçҡан күрше ҡатынға, унан урамдан үтеп барған әбейгә ҡаланан килгән ҡунаҡтар, уларға күстәнәскә өт-маҙар әҙерләп йөрөүе хаҡында өйләп өлгөрҙө. Унан өттө айырып алған, тик уны ыуытҡысҡа ҡуйырға оноҡҡан ҡыҙын тетеп әрләп сыҡты.

– Бөгөн былай ҙа өттө әҙ тапшырҙым, аҡса ы кәмерәк була, ә ин уны әсетеп әрәм итергә тырыша ыңмы? – тип тамам ҡыҙҙы еңгәм. Ә миңә оят булып китте: ауыл кеше ен күрәләтә талайбыҙ бит, тиҙерәк тайырға кәрәк бынан.

– Ҡунаҡ итеп тә булманы, ярай, иркенләп тағы килер егеҙ әле, – тине еңгәм, ихлас йылмайып. Шунан үҙенән аша ҡарап торған малайының арҡа ынан дөпөлдәтеп өйҙө. – Бәпесемде лә ултыртып алыр ығыҙ инде, каникулы бөттө бит.

Бәпесенең әйбере хәт еҙ булып сыҡты. Ике тоҡ бәрәңге, бер тоҡ кишер, сөгөлдөр-фәләне, өс-дүрт сумканы багажникка көскә ыйҙырҙыҡ.

– Ә бына быны ы – еҙгә! – Хужабикә бер литрлыҡ шешәгә тултырылған өттө тантаналы рәүештә ҡатыныма уҙҙы. – Көн дә ун литр өт тапшыра инем, бөгөн кәмерәк бирҙем, мәйтәм, ҡунаҡты күстәнәс еҙ ҡайтарырға ярамай. Рәхәтләнеп

эсегеҙ.

Ауылды сығып өлгөрмәнек, кеҫә телефоны шылтыраны. Еңгәм икән.

— өт тиҙ генә әсей ҙә ҡуя ул, ҡәйнеш, ҡатыныңа әйт, ҡайтҡас та ҡайнатып ҡуйын, баҡса емеше түгел бит, аҡса емеше. Бәпесемде алып барып еткереп, бүлмә енә урынлаштырып китер ең инде юл ыңғайында, бер-бер хәлгә тарып ҡуйма ын, тип ҡот осоп тора. еҙҙең ҡала халҡы әшәке, аҙым айын аферист та хулиган...

Телефонды ситкә бырғытам да эргәлә ятҡан өт шешә енә нәфрәтләнеп ҡарап ҡуям. Яндырылған бензин, ремонтланасаҡ двигатель хаҡын ғына иҫәплә әм дә, сама менән биш мең умға төштө бит еңгәм өтө.

## УРАҘА

Бер үҙле кеше ул Халиҡ. Әйттеме — бөттө, хет ер убылмаймы, барыбер вәғәҙә ен үтәй.

— Быйыл ураҙа тотам, — тип шаҡ ҡатырҙы ул бөгөн иртән. Бүлектәге ирҙәр тел шартлатты, ҡатын-ҡыҙ а итте, бер нескә күңелле е күҙҙәрен өрткөләне.

— Сауабы ла булыр, дүрт-биш килограмм ауырлыҡтан ҡотолоу ҙа мешать итмәҫ, — Халиҡ, халыҡтың сәбәләнеүенә иғтибар ҙа итмәй, үҙ алдына өйләнде.

Халиҡ ошо көндән коллективта иң ихтирамлы кешегә әүерелде. Бәй, шулай булмай, төшкө аш ваҡыты ет ә, йүгерә-атлай ашханаға йүнәләбеҙ, унан тыш көнөнә өс тапҡыр берәр сәғәтләп тәмләп сәй эсәбеҙ, эшкә тотоноп өлгөрмәй ең, ҡайтырға ла ваҡыт етә. Ә бит Халиҡҡа былар тәтемәй, ул бит көнө буйы ас!

Ас хәлен туҡ белмәй, тиҙәр. Дөрөҫ түгел, беҙҙең коллектив яҡшы белә. Халиҡтың хәлен еңеләйтеү өсөн өйҙән тәмле-татлы ризыҡ ташыу беҙҙең өсөн намыҫ эшенә әүерелде. Кем ҡаҙ бәлеше, кем салат, кем тауыҡ урпа ы алып килә. Эш бөтөр алдынан унғы тапҡыр сәй эскән мәлдә быларҙың бары ын да Халиҡ алдына ҡуябыҙ: уның ауыҙ асыу ваҡыты етә бит. Бер ҡулына ҡаҙ бото, икенсе ҡулына ҙур ҡалаҡ тотҡан Халиҡ яйлап ҡына ризыҡ ейергә тотона, ике-өс тәрилкә урпа эсеп алғас, юҡҡа мәшәҡәтләнә егеҙ, өйгә ҡайтҡансы түҙер инем, тип өйләнеп ала ла салаттарға, бәлештәргә йәбешә. Беҙ и ә, сәйҙе лә онотоп, уға ҡарап оҡланып ултырабыҙ. Замана геройын ситтән дә эҙләргә кәрәкмәй, бына бит, арабыҙҙа ғына, көнө буйы ы та итмәй ас тора ала.

Бер көндө тамам ҡурҡытты был Халиҡ. Ғәҙәттәгесә, алдында тауҙай өйөлөп ятҡан ризыҡты йыпырғас, әпәр итеп торорға маташҡайны, аяҡтары тотмай, ҡабаттан лып ултырҙы был урынына.

Бәй, был Халиҡ аслыҡтан тамам хәл еҙләнгән дә! Беҙ ҙә инде бешмәгән, күмәкләп уның бер үҙен ҡарай алмайбыҙ, күрәләтә аяҡ уҙа ла а иптәш. Иртәгәнән үк ташыған ризыҡ күләмен икеләтә арттырҙыҡ. Ғәжәп, тик хеҙмәттәшебеҙҙең мөмкинлектәре сик еҙ үк түгел икән.

— Аппетит юҡ ул минең, — тип килешә Халиҡ үҙе лә. — Иртән бер таба бәрәңге менән дүрт йомортҡа ашағайным, тамаҡҡа башҡа бер нәмә лә бармай, ярай ҙа бер тәрилкә билмәнде көскә ашап бөттөм. Кисен тағы шул хәл. Ҡатын ашын, былауын, бишбармағын бешереп көтөп тора, ашама аң, үпкәләй, көнө буйы ас йөрөп ашҡаҙаның боҙола бит, тип тиргәй. Ураҙа тотоу бик еңел түгел икән. Лутсы диетаға ултырам мин, ун-ун биш килограмды ташларға ине.

Эйе, дөрөҫ әйтә. Халиҡҡа ураҙа тотоу ниңәлер килешмәне, ябығыу урынына туптай имерҙе лә китте, әллә аслыҡтан шешенде, белмәҫ ең. Әйҙә, диетаға ултырын. Былай бер үҙле кеше ул, әйттеме — бөттө, хет дауыл ҡуп ын, туфан ҡалҡ ын, әммә вәғәҙә ен үтәйәсәк.

## ИР ҮҘЕ

*Скетч*

**Машинала ир менән ҡатын килә.**

**Ҡатын** *(үҙ алдына өйләнә)*. Бер аҙнанан тыуған көн етә. Йә Хоҙай, нисә йәш тулырын иҫкә төшөр әң, ҡыйын булып китә. Ун игеҙ йәш кенә түгел шул, ике ун игеҙ ҙә түгел, исма ам. Егерме кешелек табын ҡорорға тура килер, әҙерәк саҡыр аң, түккән аҡса ҡапланмай. Зәмирәләрҙе саҡырып тормайым, уларҙың илле тәңкәлек бүләгенә мохтажлығым юҡ әле. Былтыр ҙа, мыҫҡыл итеп, өс йыл элек үҙем биргән сервизды тотоп килделәр. Биш йыл элек ул сервизды үҙҙәре биргәйнеләр, шуны ла оноҡкандар, иҫәүәндәр. Ә был, ир йораты, минең тыуған көндө иҫләйме икән? *(Ҡысҡырып.)* Килә е шәмбе ниндәй көн ул, аппағым?

**Ир** *(йәнләнеп китә)*. Ниндәй көн ти еңме? Бик шәп көн ул, ял көнө, как раз йоманан уң килә, ха-ха-ха.

**Ҡатын** *(тур айып)*. Томана, минең тыуған көн бит, ә кейергә йүнле күлдәгем дә юҡ, кеше алдында оят.

**Ир** *(ҡыҙып китә)*. Әйтәм, шәрә йөрөй өң! Ә ике шифоньер тулы кейем кемдеке уң, хан ҡыҙыныҡымы?

**Ҡатын** *(бөтөнләй үпкәләй)*. ин мине яратмай ың, ана, Зәмирәгә ире йөҙ меңлек тун алып биргән.

**Ир.** Унының ымаҡ банкта эшлә әм, вертолет алыр инем әле. Тун иңә ишшо, әле машинаны ҡаратырға ике мең табып булмай. Двигателе суҡын а, йәйәү йөрөрбөҙмө?

**Ҡатын** *(үҙ алдына)*. Ирҙән бәхет булманы инде. Шул машина ын минән артыҡ күрә, ана бит, күлдәк тигәс тә танауы төштө.

**Ир** (үҙ алдына). Машинаны ҡаратмай булмай, двигатель өҙөклөк менән эшләй. Карбюраторлы двигателдең рәте юҡ инде унының.

**Ҡатын** *(үҙ алдына)*. Был айҙа аҡса ын да ике меңгә әҙерәк алып ҡайтып бирҙе, әллә ситтә берәй кеме бар инде? Бел әм – бәрәм дә үлтерәм, үҙен дә, теге ен дә.

**Ир** *(үҙ алдына)*. Ярай әле, үткән айҙа тормоз колодкаларынан алып яғыулыҡ насосына тиклем вис алыштырҙым. Сервиста биш мең ыҙырырҙар ине, мастер үҙемдеке булғас, ике меңгә генә төштө. Үҙем дә сос шул *(йылмайып ҡуя)*.

**Ҡатын** *(үҙ алдына)*. Ана бит, нисек ауыҙ йырып ултыра, шул нәҫтә ен иҫенә төшөргәндер инде, Зәмирә ымаҡ кейен әм, әйтәгүр, ситкә ҡарамаҫ ине *(эркелеп сыҡҡан күҙ йәштәрен өртөп ала)*.

**Ир** *(үҙ алдына)*. Әллә илай башланы инде, ал ын әйҙә шул күлдәген, күңеле бул - ын, двигателде килә е айҙа ҡарармын әле. *(Ҡысҡырып.)* Күлдәк ал да ҡуй.

**Ҡатын** *(үҙ алдына)*. Шулай ҙа ирем бик алама кеше түгел. Бәлки, сит ҡатындарға күҙ ал а ла, аман ярата лыр мине, бәлки, йөрө ә лә, аҡылына килергә самалайҙыр. Шулай ҙа бәхетле ҡатын мин. Йүн еҙ бул а ла, собственный ирем бар. Зәмирә түгел инде, етенсе ире менән йәшәй бахыр. Йәштәше лә түгел бит әле, әхирәтенең ик ән йәшлек олата ы. Вкусын да әйтәйем инде, тфү! Ҡосағының йылы ы булмағас, тун алып бирә инде, меҫкен, эшкинмәгән!

**Ир** *(үҙ алдына)*. Әй, тынды ла ҡуйҙы, ныҡ үпкәләне, ахыры. Алғас, тунын да ал - ын, эт күңеле бер өйәк, ти. Өҙмәҫ тә ҡуймаҫ. Кредит бирәләр бит хәҙер. Берәй йыл ауыҙҙы сөйгә элеп йөрөрбөҙ инде. *(Ҡысҡырып.)* Кәләш, төш, супермаркетка килеп еттек, үҙеңә тун айла!

**Ҡатын** *(машинанан йығылып төшә яҙа)*. Ә-ә, ниндәй тун?

**Ир.** уң, иңә тун алайыҡ, тим, тыуған көнөңә бүләк итеп.

**Ҡатын.** Улай бик ҡыҫтағас, алайыҡ уң. Ир үҙен үҙ итмәй булмаҫ. Әйҙә, аппағым, керәйек, иңә арыуҙан берәй носки ҙа алырбыҙ. Булғас, уртаҡ бул ын! *(Ҡултыҡлашып сығып китәләр)*.

***

Башҡорт дәүләт филармония ында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған хәтер әм ҡәҙер кисә е уҙғарылды. Йыйынды Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаçары Ҡәҙим Аралбаев асты әм оло шағирыбыҙҙың тормош, ижад юлына ентекле байҡау я аны. Шағирҙар Фәниә Чанышева менән Абдулхаҡ Игебаев и ә Рәшит Ниғмәти хаҡында иçтәлектәр өйләп, унын намыçлы, кешелекле булыуын билдәләне. Шағирҙың ҡыҙына әм улына ла үҙ бирелде.

Флорида Рәшит ҡыҙы Өфөнөң 1-се педагогия колледжында уҡыта, ә Нур Рәшит улы, Ленинград политехник институтын тамамлаған, СССР Госатомнадзорының дәүләт инспекторы, АЭС (Киев) файҙаланыу идаралығы начальнигы, Украинаның атом энергетика ы буйынса дәүләт комитеты председателенең беренсе урынбаçары вазифаларында эшләй. Ул ата ының йөҙ йыллығын ошолай ололап үткәргәндәре өсөн рәхмәт белдерҙе, ата ының зыяратын матурлап биҙәгән өсөн эшҡыуар Роберт Биишевҡа тәбрикнамә тапшырҙы. Тантанала Рәшит Ниғмәтиҙең тыуған төйәге амар өлкә енән дә вәкилдәр ҡатнашты.

– 20 июнгә амарға Башҡортостан кешеләрен ҡунаҡҡа саҡырабыҙ – Рәшит Ниғмәтигә арнап ҙур саралар үткәреләсәк,– тине амар башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Зөлхизә Шәрәфетдинова.

***

Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Зәйнәб Биишева көндәренә килеүселәрҙе Хоҙайбирҙе ауылында район хакимиәте башлығы урынбаçары Хәбир Шәйәхмәтов ҡаршыланы.

Туйымбәттә, әҙибә исемендәге музейҙа, район Советы рәйесе Марат Иҡсанов яңы лауреаттарға премиялар тапшырып, уларҙы район халҡы исеменән йылы ҡотланы.

Күгәрсендәрҙең яҡташы, Халыҡ-ара Төрки, Рәсәй Гуманитар фәндәр академия ы академигы, филология фәндәре докторы, профессор Марат Зәйнуллин премияға халыҡ яҙыусы ы ижадын пропагандалауға күп көс алғаны өсөн башҡорт теле әм әҙәбиәте уҡытыусылары тарафынан тәҡдим ителгән. «Китап» нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов – нәшриәткә халыҡ яҙыусы ы исемен биреү идея ын күтәреп сығыусыларҙың бере е. Ә баш мөхәррир Ғәлиә Ғәлимоваға премия Зәйнәб Биишева әçәрҙәрен, әҙибәнең ижады әм тормошо хаҡында иçтәлек-хәтирәләр китабын нәшер итеүҙә әүҙем ҡатнашыуы уңайынан бирелде.

Яңы лауреаттарҙы йырсы Ғәзим Ильясов, ҡәләмдәштәре исеменән Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты шағир Ирек Кинйәбулатов, сәнғәт конкурстары лауреаты Ләйсән Дауытова, Флорида Кәримова етәкселегендәге вокаль ансамбль, йырсы Наилә Йәғәфәрова әм алып барыусы Альбина Григорьева тәбрикләне.

Байрамды ойоштороуҙа «Туйымбәт» крәçтиән хужалығы рәйесе Рәйес Ҡунаҡбаев, музей директоры Гөлшат Ҡунаҡбаева ихласлыҡ күр әтте. Нәшриәттең музейға 50 мең умлыҡ китап бүләк итеүе, китап сауҙа ы ойоштороуы

халыҡты айырыуса ҡыуандырҙы. Артабан ҡунаҡтар Мәҡсүт ауылына юлланды. Бындағы осрашыу Бәндәбикә кәшәнә ен ҡарауҙан башланып китте, аҙаҡ клубта йөкмәткеле хәтер әм ҡәҙер кисә е уҙҙы.

***

Әбйәлил районы Ташбулат ауылында арҙаҡлы ғалим Зиннур Нурғәлиндың 80 йыллыҡ юбилейы уҙҙы. Әҙәби-музыкаль кисәлә Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе Р. Бикбаев, академик Ғ. Хөсәйенов, публицист М. Ҡотлоғәлләмов, район хакимиәте вәкилдәре әм әҙиптең яҡташтары ҡотлау үҙҙәре әйтте, матур концерт бирелде.

***

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында танылған фольклорсы, йәмәғәт эшмәкәре Ә. Сөләймәновты 70 йәше тулыу айҡанлы республика хөкүмәте әм Өфө мэрия ы, вуздар әм фәнни учреждениелар вәкилдәре, элекке абаҡташтары, яҡташтары — бөрйәндәр ихлас тәбрикләне.

***

Шағир Муса Сиражиға 70 йәш тулыуға арналған кисәләр уҙҙы: тәүге е — әҙип уҡыған Ҡандра урта мәктәбендә, икенсе е Туймазы татар драмтеатрында ҙур байрам итеп ойошторолдо. Туймазы ҡала әм район хакимиәте, яҡташ шағирын ололап, уға фатир бүләк итте.

Юбилярҙы ҡотларға Өфөнән Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Ирек Кинйәбулатов, яҙыусы Ринат Камал, шағирҙар Рәшит Сабит, Рәмил Сурағолов, Башҡортостандың халыҡ артистары Фәрит Бикбулатов, Флүрә Ноғоманова килгәйне.

***

— Тыуған төйәгенә, яҡташтарына ихтирам, изгелек күр әтеү хисе Рим Исхаҡовты ҡулына ҡәләм алырға әйҙәп тора, — тине Яҙыусылар союзы исеменән юбилярҙы ҡотлағанда яҙыусы Рәшит Низамов, Бишауыл-Уңғар ауылында тәнҡитсе, публицист Рим Исхаҡовҡа 50 йәш тулыуға арналған ижад кисә ендә сығыш я ап.

Рим Исхаҡов Ҡырмыҫҡалы районы тарихы, кешеләре хаҡында етмештән ашыу очерк ижад иткән. Ул республика гәзит-журналдары редакцияларының лауреаты исемен күп тапҡырҙар алды. Әҙиптәр Тимерғәле Килмөхәмәтов, Хәсән Назар ҙа юбилярҙың публицистика, әҙәби тәнҡит өлкә ендә өлгөрлөгөн билдәләп, уның шулай уҡ тәжрибәле педагог булыуын, Президент грантын яулауын хәтергә төшөрҙөләр.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзында Әлфиә Әсәҙуллина менән тәржемәсе Вера Капустина Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтына курсҡа саҡырылған уҡытыусылар менән осрашты. Әҙибәләр үҙҙәренең ижадҡа нисек килеүҙәрен өйләне, яңы китаптары менән таныштырғас, шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

***

Башҡортостан Фәндәр академия ы академигы, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, танылған ғалим әм яҙыусы Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсиндың (1935 — 2007) исемен мәңгеләштереү дауам итә. Федоровка районы әйет ауылы мәктәбенә исеме бирел ә, Өфөлә ул йәшәгән йортҡа иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылды. Тантанала профессорҙар Нияз Мәжитов, Фирҙәүес Хисамитдинова, Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Марат Зәйнуллин, Әхмәт Сөләймәнов, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев .б. Зиннур Ғәзиз улының фәнни әм әҙәби эшмәкәрлеге, кешелек сифаттары тура ында өйләне. Ә таҡтаташ япма ын ҡатыны Венера За ит ҡыҙы менән улы Юлдаш асты.

***

Красноусол башҡорт гимназия-интернаты Башҡортостандың инновацион уҡыу йорттары ара ында маҡтаулы урын биләй. Бында балаларға профилле белем биреүҙә юғары категориялы педагогтар эшләй, директоры — Рәсәй Федерация ының халыҡ мәғари-

фы отличнигы Дәриғәт Рәхимов.

Гимназияла район, төбәк, республика күләмендәге саралар йыш ойоштерола. унғы юлы, мәсәлән, Ғафури уҡыуҙары сиктәрендә республиканың тисҙтәләгән мәктәбенән уҡыусылар фәнни-практик конференцияға йыйылды. Башҡорт, рус филология ы, йәмғиәт әм тәбиғәт белемдәре, математика, физика әм информатика, инглиз теле секцияларында еңеүсе рефераттар грамоталар менән билдәләнде.

уңынан гөрләп КВН уҙҙы, унда хужалар команда ы беренселекте алды. Уларҙың концерты ла әммә енә оҡшаны. Олимпиада жюрийына БДУ профессоры Зәйтүнә Шәрипова етәкселек итте, йыйында район хакимиәте вәкиле Ғәлинур Ҡалмурзин, «Ағиҙел» журналы хеҙмәткәре, яҙыусы Сабир Шәрипов сығыш я аны.

***

...«Китап» нәшриәтендә татар телендә донъя күргән «Күңел көҙгөләре» тигән йыйынтыҡтың (китапҡа ете йәш авторҙың әҫәрҙәре ингән) исем туйы булып үтте. Сараны Яҙыусылар союзының әҙәби консультанты Рәшит Сабит алып барҙы. Нәшриәт мөхәррире Динә Мырҙаҡаева, халыҡ шағиры Марат Кәримов, шағирҙар Рәсих Ханнанов, Рауил Шаммас, Мөхәммәт Закиров, Мөнир Вафин, профессор Әхәт Ниғмәтуллин, фән кандидаттары Илдус Фазлетдинов, Лилиә Сәғиҙуллинаның фекерҙәре тыңланды. Кисәлә авторҙарҙың дүрте е — Зәйфә Сәлихова, Рәфҡәт Рысаев, Фәнзәлиә Мәснәүиева, Зөлфирә Фәрүәева ла ил амлы үҙҙәрен әйтте.

***

«Башинформ» агентлығы уҙғарған кәңәшмә «Өфө-матбуғат» МУП-ы менән ваҡытлы баҫмаларҙың хеҙмәттәшлек юлдарын оптималләштереү мәсьәлә енә арналды. Быға гәзит уҡыусыларҙың «Өфө-матбуғат» киоскылары аша теләгән баҫмаларын атып алып уҡый алмауы, шулай уҡ баҫмаларға хаҡ артыуға ҡарата ҡәнәғәт еҙлек белдереүе сәбәпсе. Баҫмаларҙың баш мөхәррирҙәре лә киоскылар эшенә ҡәнәғәт еҙлек белдерҙе: сауҙаға ебәрелгән гәзит-журналдар кире ҡайтарыла, сөнки атыусылар уларҙы халыҡҡа тәҡдим итмәй, ғөмүмән, гәзит-журналдар күҙгә бәрелеп торған урынға ҡуйылмай.

«Өфө-матбуғат» МУП-ы директоры Айрат Хәзимуллин ҡай ы киоскыла ниндәй баҫмаларға ихтыяж мониторингы үткәрелеүе, тик киоск витриналарында урын аҙ булыу арҡа ында баҫмаларҙы рекламалау форсаты юҡлығына баҫым я аны. БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт әм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары Артур Иҙелбаев киоскыларҙа атылмаған республика баҫмалары даналарын списать итеүҙең аныҡ схема ын булдырыу, киоск атыусыларын ҡыҙыҡ ындырыу сараларын табыу, гәзит-журналдарҙы реализациялау мониторингы буйынса төркөм булдырыу кәрәклеген, баҫмаларҙың хаҡын нигеҙ еҙ күтәрергә ярамағанлығын билдәләне.

***

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Р. Вальзер романы буйынса ҡуйыласаҡ «Бенжамент институты» тип аталған спектаклдең премьера ы июнь айына билдәләнгән. Әҫәрҙе Франция режиссеры Стефани Лоик ҡуясаҡ. Исеме театр донъя ында киң билдәле режиссер буласаҡ спектакленә актерҙар айлау эше менән мәшғүл. Унең әйтеүенсә, башҡорт театры башҡаларҙан үҙенең милли колориты, рухы менән айырылып тора.